Рамазан Өмөтбаев

Осрашыуҙар юғалтыуҙар

Рамазан Өмөтбаев

Осрашыуҙар
Юғалтыуҙар



(Публицистик очерктар, 1984—1993 йылдарҙағы иҫтәлекле ваҡиғалар)

ӨФӨ
«КИТАП»
1997

ББК 84 Баш
Ө 56

Өмөтбаев Рамазан

Ө 56 Осрашыуҙар — юғалтыуҙар. Публицистик очерктар, 1984—1993 йылдарҙағы иҫтәлекле ваҡиғалар.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1997.— 248 бит.

15ВМ 5-295-01799-0

Китапҡа «Башҡорт аты» исемле очерк, Башҡортостан республикаһының сәйәси, иҡтисади үҙаллылығын, мәҙәниәтен үҫтереү һәм нығытыу эшенә тос өлөш индергән арҙаклы шәхестәр, ил уҙамандары хаҡындағы очерктар, һүрәтләмәләр ингән. Шулай ук авторҙың ил, милләт яҙмышы тураһындағы уйланыуҙарына ла китапта байтаҡ урын бирелгән.

Ө $\frac{0503020900-225}{М\ 121(03)-97}$ 12—97

ББК 84 Баш

ISBN5-295-01799-0

© Өмөтбаев Рамазан, 1997

I бүлек

ИЛ ЯҘМЫШЫ —ЕР ЯҘМЫШЫ

БАШҠОРТ АТЫ

(Экономист яҙмалары)

«...Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй...
Ир-егеткәй менән ат башы».

1

Һуғышта ҡатнашҡан һәр бер атлы яугир яҡшы белә: ҡаты яраланып, ҡан һауған атының эсен тырһылдатып, йән бирә алмай ятыуын күреүҙән дә уның өсөн ауыр йөрәк ғазабы юҡтыр. Тик хәҙерге киноларҙа ғына ул кавалерист, әгәр аты яраланып ауһа, кабураһынан «һә» тигәнсе пистолетын сығара ла уға мөлдөрәп теклән, ярҙам һорап, йәшкелт күҙҙәренән соролдатып йәш ағыҙып ятҡан атының маңлайына терәп атып та китә. Дөрөҫ түгел, меҢ тапҡыр дөрөҫ түгел! Быға ышанмағыҙ! Һуғышта үҙеҢ менән тире һеҢешкән, һәр саҡ башын һинеҢ яурынына һалып, бер ҡарағанда йәшкелт, ә икенсе ҡарағанда муйыл

кеүек сем-ҡара күҙҙәре менән һиңә бөкилле бирелгәнлеген тик әйтә генә алмай̆ текләп торған, мең ғәләм араһында һине бер кем менән дә бутамай̆, үҙәге өҙөлөп көткән атыңды үҙ ҡулын, менән атып китеү, үҙеңдең йән дуҫыңды атып үлтереү менән бәрәбәр.

Ысын атлы яугир теләһә ниндәй дошманының башын ҡыя сабын өҙөргә булдыра ала, ләкин үҙ атының йәнен алырға уның ҡулы һис ваҡытта ла бармаҫ. Бик тә бындай тәбиғи булмаған бурысты үтәү кәрәк икән, уны башҡа, ул атты белмәгән кешеләр башҡара. Ул ғына ла түгел, тормош булғас, үҙ кәртәһендә көткән үҙ малын ир булған кеше ашау өсөн һуғымға тотонмай ҙа тормай, шуға күрә ҡайҺы саҡта бысаҡҡа ла тотона, ләкин һуғыш ҡырында йән бирә алмай ятҡан үҙ атына бысаҡ ҡуллана алмай, ундай эшкә уның йәне бармай.

Хәҙер генә бит ул ир кеше тормошҡа зауыҡланып, үҙ машинаһына яҡындарын ултыртып, тәбиғәт ҡосағына елдерә. Бынан үҙенә йәм, йәненә ләззәт ҡаба. Үҙ машинаңда тәбиғәт хозурлығына һоҡланып бөтә алмай, ҡанат ҡуйғандай, ҡош һымаҡ осоп барыу кешенең йөрәген елкендерә, күңел тыныслығы өҫтәй, хужаһының хәрәкәтен тойоп алға сапҡан машина һәр йөрөтөүселә ғорурлыҡ хисе уята.

Кешелек донъяһы хасил булғандан алып кеше тиҙлеккә ынтылған, атлап ҡына ҡыуып етә алмаһа, йүгергән, әгәр инде йүгереп тә етә алмаһа, тиҙлеге шәберәк таяҡ ташлаған йәки таш һалмауырҙаған.

Оло быуын кешеләренең әле лә хәтерендәлер: ҡыш көнө йорт эштәре тамамланғас, яҡшы ат тотҡан ҡайһы бер кешеләр еңел санаға үҙ аттарын егеп, урам буйлап, ат юрттырырға сығып китерҙәр ине.

Беҙҙең ауыл кешеләре ҡырпаҡ ҡар яуған мәлдә батша армияһы офицеры, граждандар һуғышы осоронда ҡыҙыл командир булын ҡайтҡан Өмөтбаев Ибраһим атайҙың, үҙенең күк юрғаһын егеп, ә сомтор урамда йәшәүсе Польша фронтында оло ҡаһарманлыҡ күрһәткән командиры комбриг Муса Мортазин булған. Айырым атлы бригадала йәйәүле дивизион командиры, ажар мыйыҡлы, бөтә дүрт һанлы кәүҙәһенән көс-ғәйрәт бөркөп торған Ибраһимов Фәттәхтең ҡыҫма билле туны тышынан күкрәгенә боевой Ҡыҙыл Байраҡ орденын тағып, үҙ юртағын кашауай санаға егеп, ат юрттырыуҙарын олораҡ быуын кешеләре әле лә һағынып иҫкә ала.

Һәр ауылда йыл һайын үткәрелә торған һабан туйҙарындағы ат сабыштары, мәңге юйылмаҫлыҡ хәтирә булып, кемдәрҙең генә күңел төбөндә уйылып ҡалмаған. Беҙ бит әле ул һабан туйҙарында колхоз фермаларынан ғына түҙ-

гел, айырым хужалыҡтарҙа тәрбиәләнгән аттар сабышыуын да хәтерләп ҡалабыҙ. «Фәлән ауылда, июндең фәләнсә числоһында һабантуй үткәрелә икән», — тигән хәбәр ишетелгәс тә, йөрөк атлы кешеләрҙең йөрәгенә шунда уҡ ут ҡабына, ундай кеше йоҡонан яҙа. Бындай кешеләр үҙ аттарын һабан туйына әҙерләй башлай. Элек уны «Атяратыу» тиерҙәр ине. Ләкин уның үҙ атын ярата башлауын бер әҙәм дә белергә, һиҙенергә тейеш түгел, сөнки шулай эшләмәгәндә, был эшкә күрше-тирәлә ҡыҙыҡһыныу арта, ә «сит кеше күҙе тейһә», атыңдан өмөтөңдө өҙ, йә иң артта килә, йә булмаһа яман сиргә һабыша.

Шуға күрә лә был сара бик йәшерен эшләнелә, шипкерт тә кенә булырға тейеш түгел. Ул үҙ атын ҡояш ҡалҡырҙан алда иртә менән, күрше-тирә ҡуҙғала башлағансы, ә кис инде, донъя һил булғас, нигеҙҙә, ҡояш байығас ҡына йөрөтә. Ат йөрөтөү теләһә кемгә ышанып тапшырылмай, һабан туйында ул атҡа кем атланып саба, тик шул малай ғына йөрөтөргә, күнекмә үткәрергә тейеш. Башта тын атты, йәғни туҡ атты унар километрға саптырып, аҡ күбеккә төшкәнсе тирләтеп ҡыуалар ҙа, бер нисә көн таң ашырып алалар. Был инде һарай түшәменә аттың башын тарттырып, таңға тиклем ашатмай бәйләп ҡуйыу, тигән һүҙ. Тик шунан һуң ғына ат алдына ҡыу бесән һалалар. Атҡа туғайҙан сабып килтерелгән йәшел бесән ашатыу ҡәтғи тыйыла, сөнки был сабырға тейешле аттың ауырлығын арттыра, ә бурыс — уның массаһын кәметеү, ат организмынан артыҡ еүешлекте ҡыуып сығарыу. Бынан тыш атты эсереү етди нормаға һалына. Башта ике биҙрә, бер аҙнанан һуң бер биҙрә, о инде ат сабышыуға бер аҙна ваҡыт ҡалғас, һыу ярты биҙрәгә күсә. Ләкин ат йонсоп китмәһен өсөн уны һолонан өҙмәйҙәр. Уның да үҙ үлсәме бар. Бындай атҡа сей йомортҡа эсереү тәртибе лә хәтерҙә.

Бәлки был мәҡәләне уҡығас, минең йәшлек дуҫым, республиканың күренекле журналисы, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Әмир Моратовтың иҫенә төшөр. Уның атаһы боронғоса ла, хәҙергесә лә бик уҡымышлы Әфтәх Моратов олатайҙа ата-бабаларҙан ҡалған йөрөк аттарҙы яратыу һыҙымы була торғайны.

Мин үҙ атайым менән ат яратҡан саҡтарҙа Әфтәх олатайға барып, тәүге көндән башлап һуңғыһына тиклем атты нисек яратыу тәртибен яҙып ала торғайныҡ.

Үкенескә ҡаршы, ул яҙыуҙар беҙҙең ғәмһеҙлектән ғәйре, башҡа унан да ауырыраҡ ҡайғы-хәсрәттәр, төрлө кисерештәр төшөү сәбәпле ҡайҙалыр юғалып ҡалды. Ошо мәҡәлә аша Әмир дуҫым Моратовҡа мөрәжәғәт итәм:

әгәр мәрхүм атайыңдың мираҫ булып ҡалған яҙыу-ҡағыҙҙары араһынан ошо ҡомартҡы килен сығҡа, уны «Башҡортостан» гәзитендә баҫтырып сығарырға мөмкин булыр ине. Уның ҡалған быуындарға ат яратыу өсөн фәһемле бер ҡағиҙәгә әйләнеп китеүе бар.

Беҙ донъя ҡуйғас та һабан туйҙарында киләһе быуын ат сабыштары ойошторор бит әле, әгәр һәр кем үҙ машинаһына ултырып, төрлө тарафтарға сабып сығып китмәһә? Әгәр инде халҡыбыҙға мәңгелек дан килтергән, ил өҫтөнә төшкән ҡайғы-хәсрәтте, яу ҡайтарыуҙағы оло ҡаһарманлыҡтарҙы ир-егеттәр менән уртаҡлашҡан, тәбиғәткә күркәмлек, халыҡҡа йәм биргән атыбыҙҙы бөтөрөп ҡуймаһаҡ, ҡалған быуын өлөшөнә лә ҡайһы саҡтарҙа йылғыр-йөрөк аттарҙа сабышыу тейер бит әле. Ләкин шуны ла әйтеп китеү кәрәктер: йөрөк ат тотҡан кешеләр бик яҡшы белә — ат яратҡан кеше ата-бабаларынан ҡалған был серҙе бер кемгә лә сисмәҫ булыр. Элгәрерәк был һөнәр тик быуындан быуынға күсә килгән, ете йоҙаҡ менән бикле ырыу сере булып хисапланды.

2

Башҡорт атының килеп сығыуы әллә ҡасанғы үткән быуаттарға, тарих төпкөлөнә барып тоташа. Күп сығанаҡтарҙа ул ҡышҡы һыуыҡтарға ла бирешмәгән, йөнтәҫ сыҙамлы себер аты менән көньяҡтан килгән, күберәк һыбай йөрөү өсөн ҡулайлашҡан, ҡыпсаҡ, ғәрәп аттары менән аралашыуҙан килеп сыҡҡан мал, тип иҫәпләнә. Быға дәғүә итеүе, билдәле, ҡыйын, тик шуныһы көн кеүек асыҡ: күсмә тормош менән йәшәгән башҡорт халҡына Уралдың ҡаты климатына түҙерлек, йәйге эҫегә лә бирешмәҫлек, ҡар ҡатламы менән ҡапланған ҡурпы үләнде алғы аяҡтары менән тибеп, үҙенә аҙыҡ табырлыҡ беше ат кәрәк булған. Быуаттар буйы үҙе менән йәнәш йәшәгән был хайуанға кеше бына ошо ҡәтғи талаптарҙы ҡуйған. Бынан тыш, уның һыбай йөрөүгә талымһыҙ, сыҙамлы, йөк ташығанда ғәйрәтле булыу сифаттары ла күҙ уңында тотолған. Ошо юғары талаптарға яуап биргән йылҡы, тәбиғи һайлап алыу һөҙөмтәһендә йәшәүен һәм үрсеүен дауам итеп, Урал алды һәм Урал аръяғы райондарында ғына түгел, Пермь, Силәбе, Ырымбур, Свердлов һ. б. өлкәләрҙә киң таралған таҙа тоҡомло башҡорт атын барлыҡҡа килтергән.

Ил өҫтөнә килгән яуҙарҙы ҡайтарыуҙа башҡорт халҡының рустар менән берлектә әүҙем ҡатнашыуы тарихта киң билдәле. Улар Пруссия менән булған ете йыллыҡ

һуғышта, Рәсәйҙең француздарға ҡаршы алып барған ҡаты һуғыштарында ҡатнашып, тиңдәшһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәткән. Уларҙың батырлыҡтары хаҡында ул замандың уҡымышлы кешеләре беҙгә байтаҡ нәмә ҡалдырып киткән.

«Ҡырҡ аҙым мәргән атыу өсөн (уҡ менән) урта алыҫлыҡ һанала. Яу мәлендә башҡорт уҡ-һаҙағын биленән күкрәгенә күсерә, ике уҡты теше менән арҡыры тешләп ала, ә ҡалған ике уҡты янға һала ла, күҙ асып йомғансы, бере артынан икенсеһен атып ебәрә, һөжүм ваҡытында аты өҫтөнә ныҡ иңкәйә, асыҡ күкрәк һәм терһәгенә тиклем еңе төрөлгән көйөнсә, әсе тауыш сығарып, дошман өҫтөнә ташлана һәм дүрт уҡты ата ла һуңынан һөңгөһө менән сәнсә». Тик был юлдарҙы яҙып ҡалдырған шәхестәрҙең үҙҙәре башҡорт булмауынан тыш, батшаға тоғро хеҙмәт итеүсе дворяндар булыу ғына түгел, әллә нисә тапҡыр батшалыҡҡа ҡаршы сыҡҡан халыҡтың улар синыфы өсөн хас дошман икәнен дә оноторға ярамай. Ләкин шуға ҡарамаҫтан Ватанға һөжүм иткән дошмандар менән һуғышҡан саҡта башҡорт һуғышсыларының батырлығын телгә алып китмәйенсә булдыра алмағандар.

«Башҡорттар һөңгөнө оҫта ҡулланалар, мылтыҡтан һәм уҡтан мәргән аталар — һуңғыһын шундай көс менән аталар, улар ебәргән уҡ алыҫ булмаған, мәҫәлән, ун биш сажин [2] аралығы кешене генә түгел, атты ла үтеп сыға»[3].

«Башҡорт полктарының һуғыш хәрәкәттәрен күҙәтеүсе» инглиз офицеры Роберт Вильсон (Лондон, 1810, 40—41-се биттәр) «Баштарына ҡорос торҡа, өҫтәренә тимер күлдәк кейгән 1500 башҡорт һуғышсыларының Беллай ҡалаһында Бенигсен армияһына килеп һуғылыуы һәм дошман менән батырҙарса һуғышыуы тураһында һөйләй». Тауышһыҙ ҡорал менән ҡоралланған башҡорттар «бик эффектлы һуғышты», «шәхси батырлыҡ күрһәтте» һәм бик күп әсирҙе ҡулдарына төшөрҙө, тип яҙып ҡалдырған.

«Бәләкәй һуғышта арыу-талыуһыҙ һәм әүҙемлеге сәбәпле берҙән-бер һуғышсан көс булып торған казактарҙан шикләнергә кәрәк»[4], тип заманында Ф. Энгельс та әйтеп киткән.

---

[1]«Башҡорттар тураһында иҫкәрмәләр» журналы. Эске эштәр министрлығы. — Санкт-Петербург, 1834. 7—8-се, 310-сы биттәр.

[2]С а ж и н — элекке үлсәү. 2, 134 метрға тигеҙ.

[3]Ч е р е м ш а н с к и й. «Ырымбур губернаһын хужалыҡ, статистик, этнографик һәм промышленность йәһәтенән тасуирлау. — Өфө, 1859, 138-се бит.

[4]Маркс, Энгельс.— 11 том, 483-сө бит.

Ул вақыттарҙа, билдәле булыуынса, казактар категорияһына Дон казактарынан тыш башҡорттар һәм ҡалмыҡтар ҙа ингән.

1812—1814 йылғы Ватан һуғышында меңәрләгән башҡорт ғәскәрҙәренең әүҙем ҡатнашыуы һәм французҙарҙы ҡыуып, рус ғәскәрҙәре менән берлектә, Парижға тиклем барып етеүҙәре хаҡында күп кенә тарихи мәғлүмәттәр бар.

Ләкин бындай ҡаһарманлыҡтарҙы башҡорт егеттәренең арыу-талыуҙы белмәгән, теләһә ниндәй урман-тауҙы ла, боҙло һыуҙарҙы ла ҡурҡыу белмәй кисеп үтә торған, эҫеһенә лә, сасҡау һыуығына ла бирешмәгән башҡорт атына атланып башҡарыуҙары хаҡында һис кенә лә иҫтән сығарырға ярамай. Башҡорт халҡының үткән тарихын уның атынан башҡа күҙ алдына килтереү ҡыйын. Ул ил өҫтөнә килгән ҡайғыһын да, шатлығын да үҙенә тоғро аты менән бүлешкән.

Башҡорт аты тураһында ла кешелек тарихы бик күп ҡомартҡы, легендалар һаҡлай." Үҙҙәре күнеккән урман, тау һәм дала шарттарында хәрәкәт иткән башҡорт атлыларын замандаштары ҡыуып тотоуы мөмкин түгел, тип иҫәпләгән.

Француз генералы де Марбо үҙ мемуарҙарында башҡорт атлылары өсөн теләһә ниндәй юл да ҡамасау түгел, тип яҙған. «Улар һағыҙаҡ күсе шикелле теләһә ниндәй ерҙән килеп сыға. Уларҙы ҡыуып етеү бик ауыр» [1].

Башҡорттар менән оҙаҡ ҡына аралашып йәшәгән генерал Чернов һыбайлы башҡорт атының сифаттарын бик юғары баһалаған. Төрлө властарҙы оҙатып, өс-дүрт алмаштырған пункттарҙа ла туҡтап тормай, алмашһыҙ шул уҡ атта башҡорттар экипаж яҡлап 6—7-әр сәғәт туҡтауһыҙ 100 саҡрым һәм унан да күберәк сабалар. Башҡорт бер ниндәй ҡаршылыҡты ла белмәй... Уның аты һыуҙы йөҙөп сыға, әгәр ҡалын урман осраһа, ағас араларынан һис бер ҡыйынлыҡһыҙ үтеп китә, бейек ҡалҡыулыҡтарға менеү ҙә, төшөү ҙә уның өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тәшкил итмәй, башҡорт йәйәү үткән урындан уның аты ла үтә ала, сөнки ул ат башҡорттоң бөтә талаптарына ла яуап бирә: үҙе еңел, үҙе ҡурҡыу белмәй һәм түҙемле, шуның менән бер рәттән сыҙамлы һәм осһоҙ *(Р. Ө.)*.

1735 һәм 1736 йылдарҙа баш күтәргән башҡорттарҙы баҫтырыу миссияһы менән ебәрелгән язалау отрядтарының башлығы генерал Румянцев былай тип яҙғаи: «Улар ар-

---

[1] «Ы р ы м б у р архив комиссияһы х е ҙ м ә т т ә р е». — 3-сө баҫма. — Ырымбур, 1897.

тынан, ел артынан ҡыуған шикелле, беҙҙең аттарға ҡыуып етеү мөмкин түгел» (1954 йыл И. А. Усмановтан килтерелде *Р. Ө.)*.

Быларҙан тыш, Башҡортостанда баҫыу эштәре — ер һөрөү, тырматыу, иген һуғыу, — башҡорт аттары ауыл хужалығы эшендә лә ныығыраҡ файҙаланыла. Үткән быуаттың яртыһында рустар ғына түгел, башҡорттар ҙа аттарҙы иген һуғыу маҡсатында ҡуллана. Бер көндә биш аттың һәр береһе 100-әр бот иген һуҡҡанын билдәләй
В. М. Черемшанский.

Ә инде төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда аттар бүрәнә, таҡта ташыу эшендә файҙаланыла. Бының өсөн артҡы күсәре урман йөгөнөң оҙонлоғона ҡарап шылдырып йөрөтөлә торған арбалар ҡулланыла. Ә инде Урал аръяғында башҡорт аттары ул заманда киң таралған алтын ҡомо, алтын мәғдәндәре ташыу эшендә файҙаланыла.

Үткән быуаттарҙа Ырымбур — Көнбайыш Себер, Ырымбур — Исеть провинцияһын һәм Ырымбур — Өфө трактарын хеҙмәтләндергән башҡорт тройкаларының йылдың теләһә ниндәй миҙгелендә, аттарҙы ял иттереп ашатып тормайынса, яҡты күҙҙә 120—160 саҡрым үтеүҙәре киң билдәле. Стәрлетамаҡ менән Өфө араһын шул уҡ тройкалар һис бер туҡтауһыҙ 8 сәғәттә үтә торған булғандар.

Үрҙә әйтеп үтелгәндәр, нигеҙҙә, үткән заманға бәйләнешле ваҡиғалар булһа, башҡорт атының үтә сыҙамлы булыуын ғына түгел, етеҙлеген иҫбатлау өсөн дә хәҙерге сағыу миҫалдар етерлек.

1942 йылдың октябрь айында, сана ла, арба ла түгел мәлдә, 112 башҡорт атлы дивизияһының Воронеж өлкәһенән 500—550 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Сталинград фронтына иң ҡыҫҡа ваҡытта үҙ йөрөшө менән килеп етеү генә лә күп нәмә тураһында һөйләй. Ул яңғыҙ-ярым һыбайлы ғына булһа бер хәл, бында тотош бер дивизия тураһында һүҙ бара. — Уның бөтә дивизияны хеҙмәтләндергән санитар, хужалыҡ, бәйләнеш эскадрондары, артиллерия дивизионы, аҙыҡ-түлек һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары — бөтәһе лә ат елкәһендә була.

Арыу-талыуҙы белмәгән башҡорт аты тураһында ҡайһы бер шәхси иҫтәлектәрҙе килтереп китеү ҙә ярайҙыр, тип уйлайым. 1939 йыл атай мәрхүм колхоз янғын һүндереүендә торған «Байбулат ҡараһы» тигән атты егеп, бөтә ғаиләһен тейәп, Асҡарҙа үткәрелгән һабан туйына китте. Уның район үҙәгенә килеп төшөүе нишләптер һабан туйының иң ҡыҙған сағына тура килде. Атай үҙ атының егеүгә лә, һыбайға ла нисегерәк икәнен алдан белгән булған,

күрәһең. Ғөмүмән колхоз күләмендә даны артыҡ сыҡмаһа ла, был ат яҡшы мал булып хисапланды, шулай ҙа йыйындарҙа сапҡан ат түгел ине.

Ауыр йөк тартып, елдерә юртып 45 километр ара үткән атты туғарғас та, атай ҡарт уны һабан туйында саптырырға булып китте. Атай бик ҡыҙыу, тәүәккәл холоҡло кеше ине. Әле тире лә ҡатмаған «Байбулат»ты атай комиссияға ҡуйҙы. Комиссия ағзалары бер ауыҙҙан ҡырҡа ҡаршы төштө. «Беренсенән, атың яратылмаған, ана ҡорһағын ҡара, ҡаптай бит (ысынлап та ул йоп-йомро ат булыр ине). Икенсенән: шул тиклем ара үткән атты, ял иттермәй, яңынан 50 саҡрымға ҡыуыу үҙе бер ахмаҡлыҡ, хәле бөтөп, юлда һәләк булып ҡуйыуы бар, тип атайҙы күндерергә тырышып ҡараны комиссия. Ләкин үҙ һүҙле ҡарт торған урынында бер нисә тапҡыр зыр әйләнеп китте лә, башындағы тир һеңешеп ялтырап бөткән түбәтәйен ҡулына йомарлап, ергә һуҡты.

— Әгәр ошо ат алда килмәй юлда тәгәрәп үлә торған булһа, колхозға үҙемдең яңғыҙ һыйырымды тапшырам,— тип ҡыҙҙы атай кеше. Сабыр ғына, әҙ һүҙле әсәй мәрхүмә:

— Кит, шул тиклем әтәсләнмә, оло кешеләрҙең һүҙен тыңла, әҙерәк. Яңғыҙ һыйырҙан яҙҙыраһың бит, — тип тә ҡараны. Ләкин һис бер кемдең ай-вайына ҡарамай, атай теге атты сабышырға ебәрҙе. Ул саҡтарҙа оло аттар 25, ҡонандар 12 саҡрымға йүгерерҙәр ине. Тик хәҙер генә ул һуҙылып буйың етмәҫ ҡойма бейеклеге аттарҙы 1,6 км-ға саптыралар, һуғыштан алдағы үткәрелгән йыйындарҙа ирҙәр йүгергән дистанция ла 10 саҡрым булыр ине.

Һабан туйына төрлө яҡтарҙан килгән 50—60 атты хәҙерге Ишҡол ауылы ҡырынан аҡҡан Өлкән Ҡыҙыл йылғаһы кисеүенән ебәрҙеләр. Ул ара район үҙәгенә теп-теүәл 25 саҡрым ер хисаплана. Аттарҙы старттан ебәреп, ярты алыҫлыҡты үткәс, «Байбулат ҡара»ны дүртенсе-бишенсе урынға сыҡты, һабан туйы майҙанына етерҙән алда 2—3 километр ара ҡалғас, һөҙәк үрҙә, үҙенән 100—120 метр алдан йомарланып сапҡан оҙонтороҡ күк айғырҙы тапап уҙып китте. Тик Асҡарға түбән төшкән һарҡыуҙы үткәндә генә ул тағы ла өсөнсө урында тороп ҡалды. Бының сәбәбе бөтөнләй аттың арыуында түгел, ә уның кәүҙә төҙөлөшөндә, экстерьерында ине. «Байбулат»тың артҡы аяҡтары алғыһына ҡарағанда байтаҡҡа оҙон була торғайны. Ул, хас үрҙуяны шикелле, тауға күтәрелгәндә тағатылған йомғаҡтай тәгәрәй, ер бауырлап сабыр ине, ә түбәнгә тәкмәс атып китеүенән ҡурҡып, сабыуын яйлатыңҡырап, һаҡлыҡ менән генә төшөр ине. Ә Асҡарға ин-

гәндәге һарҡыуҙа шул сәбәп арҡаһында артта ҡалған күк айғыр «Байбулат»ты яңынан уҙып кнтте.

Шулай ҙа ул, яратылмаған, һабантуйға бөтөнләй әҙерләнмәгән ат, бер көндө 100 саҡрым ер үтеп, Буденный исемендәге колхозға бүләккә бесән сапҡыс алып бирҙе.

— Әгәр тағы ла 5—6 километр ара булһа, «Байбулат» алда килгән оҙон тороҡ кир атҡа атланған кәзә һаҡаллы Аҫыл ауылы (Баймаҡ районы) бабайын тапап китә ине, — тиеште һуңынан шул уҡ комиссия ағзалары.

1941 йылдың май урталарында шул атҡа атландырып, колхоз идараһы мине Әбйәлил районының төньяҡ-көнсығыш сигендә ятҡан «Большевик» колхозының ул саҡтағы атаҡлы председателе Хөснөтдинов ағайға ебәрҙе. Мин уның менән орлоҡ алмашыу өсөн килешеү төҙөшөп ҡайтырға тейеш инем. Иртәнге ҡояш ҡалҡҡан мәлдә сыҡҡан кеше — мин үҙ эшемде бөтөрөп, Айыуһаҙы тигән ауылдан шул уҡ көндө: ҡояш байымаҫ элек үҙ ауылыбыҙға кире әйләнеп ҡайтып төштөм. Ул саҡта «Байбулат»ҡа сама менән 12—13 йәштәр булғандыр, ә үткән ара 170 саҡрымдан да кәм түгел ине.

Башҡорт атының сыҙамлығына тағы бер сағыу хәтирә иҫтә уйылып ҡалған. Республика хеҙмәтсәндәренең Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуына 400 йыл тулыуға арналған тантанаһын байрам итеү көндәре ине.

Таһир Таипович Күсимов менән хәҙерге Матбуғат йорто урынындағы ипподромда юғалып торабыҙ, сөнки бында ла ошо уңай менән ойоштороған ҙур ат ярыштары бара. Беҙҙең Баймаҡ районынан да бында аттар саҡырылған. Шуға күрә мин был тамашаға битараф түгел. Иң ныҡ күҙ терәп торғаныбыҙ «Һаҡмар» колхозының «Квадрат» исемле һары айғыры, сөнки ул быға тиклем район һабан туйҙарында ла ал бирмәгән йөрөк ат ине.

Бына бер мәл «Квадрат»ты ат һарайынан сығарып, стартҡа ҡуйҙылар. Әллә ат белгесе, данлыҡлы кавалерист эргәлә ултырғанғамы, әллә ат өсөн янып-көйөп, үтә ныҡ тулҡынланыуҙанмы йөрәк һис тә урынында түгел, күкрәктән ярһып сығып бара, тын ҡыҫыла, әйтерһең дә, «Квадрат» урынына ипподромда сабышырға үҙемә ҡушҡандар. Етмәһә, хөкүмәт трибунаһы тәңгәленә килеп баҫҡан һары айғыр бөтә ғәләм алдында лапылдатып, бер ҙур өйөм һалып ҡуйҙы. Атты күреп, кәйефе ҡырылыуҙандыр инде, көслө муйынын бер яҡҡа бороп, Таһир Таипович ситкә ҡарай башлағас та, минең күңелгә борсолоу шәүләһе ятты. «Оҡшатмай» тигән һығымта баштан йәшен тиҙлеге менән үтеп китте. Шунан һуң күҙенең ҡырыйы менән ва-

йымһыҙ ғына баҫып торған һары айғырға ҡараш ташланы ла һоро күҙҙәрен секерәйтеп миңә төбәне. Берәй нәмәгә асыуы ҡабарһа, Таһир Таипович күҙҙәрен ҡыҫып, һәр саҡ шулай хәрәкәтһеҙ ҡарашы менән һине тишкәнсә ҡарап, ялмап алыр ине.

— Ниндәй тоҡомдан? — тип һораны генерал ҡоро ғына.

— Дончак менән башҡорт аты ҡатнаш булырға тейеш,— тинем тоҫмал менән.

Шунан һуң бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла тош-тош урынында йөнө өрпәйеп торған атҡа яңынан ҡарашын һирпеп (Аттың йөнө өрпәйеп тороу уның таҙа-сәләмәт түгеллеген аңлата. *Р. Ө.)*:

— Баймаҡтан был нәмәгеҙҙе ниндәй транспорт менән алып килдегеҙ, — тип ҡыҙыҡһынды.

Мин һис бер ни уйлап тормайынса:

— Ниндәй транспорт ти — Баймаҡтан шул үҙ йөрөшө менән килде инде, — тинем бер ҡатлы ғына. Эргәмдә ултырған генералдың ҡуңыр бит остары алһыуланды, танау япраҡтары һыуыҡта туңған шикелле ап-аҡ булды, ул тынын йыш-йыш алып, трибунанан мине һуғып осорорға теләгәндәй, сүместәй йоҙроғон төйнәп, бик ҡаты итеп һүгенде лә, гөрөлдәп сыҡҡан тамаҡ тауышы менән:

— Аҡылы теүәл кеше ошонда ат сабыштырам, тип 500 саҡрымға үҙ йөрөшө менән айғыр ҡыуамы? — тине лә, араның бөтөнләй өҙөлөүен белдергәндәй, һырт биреп ултырҙы. Икебеҙ ҙә өндәшмәҫ булдыҡ, ләкин икебеҙ ҙә күҙ ҡырыйы менән генә аттарҙың сабышын күҙәтәбеҙ.

— Ярар, — тине генерал бер аҙ тынысланып, — артта килергә лә бер һәпрә кәрәк тә инде, — тине.

Беҙ инде тәүге әйләнештә үк урта тошта сапҡан «Квадрат»ты күреп, унан бөтөнләй төңөлгәйнек инде. Ләкин һуңғы әйләнештә бөтә аттарҙы тапап үтеп, финишты беренсе булып киҫкән «Квадрат»ты күргәс, үпкәләр онотолоп, ҙур ҡыуаныстан күҙҙән йәштәр атылып сыҡты, беҙ бер-беребеҙ менән ҡосаҡлашып үбештек тә, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, баш кейемдәрҙе аяҡ аҫтына атып бәрҙек.

Бына һиңә башҡорт аты! Бына уның һис кем башына килтерә алмаҫлыҡ бөтмәҫ-төкәнмәҫ физик мөмкинлектәре!

3

Тибендә йөрөгән өйөр-өйөр башҡорт йылҡыһын уның төп һәм тулы хоҡуклы хужаһынан йәғни башҡорт айғырынан башҡа күҙ алдына килтереү әлбиттә ҡыйын.

Башҡорт атының тоҡом сифатын яҡшыртыу, иң беренсе нәүбәттә ата-бабаларынан бейегерәк, етеҙерәк тоҡом алыу маҡсаты менән башҡорт бейәләрен әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән ғәрәп, Дон, ахалтекин тоҡомло айғырҙар менән аралаштырып ҡарағандар. Ә 1930 йылдар уртаһында «тоҡом яҡшыртабыҙ» тип Урал аръяғы хужалыҡтарында башҡорт айғырҙарын бөтөнләй ҡ итеү башланған. Ләкин белгестәр күпме генә тырышлыҡ һалмаһын, алған үрсемдең ата-әсәһенән бейегерәк булыуынан тыш, башҡа сифаттары бөтәһе лә тиерлек күпкә ҡайтыш булған. Иң тәүҙә ул тибенләү сифатын юғалтҡан, ҡышҡы сасҡау һыуыҡтарға түҙә алмаған, егеүгә һәм һыбайға арымтал булған. Быға ул аралаш тоҡомдан сыҡҡан айғырҙарҙың өйөр тотоу һәләтлегенән мәхрүм булыуын өҫтәргә кәрәк. Башҡорт атының тоҡомо барған һайын насарайыуы белгестәрҙе яңынан таҙа башҡорт айғырҙарын эҙләргә, шулар менән яңынан (нисәнсе тапҡыр инде!) эш башларға мәжбүр иткән.

Башҡорт айғырҙарының өйөрҙә эске тәртип урынлаштырыуҙан һәм ундағы малды икенсе яҡҡа айырылып китеүенән һаҡлап тороуынан башҡа «рыцар»лыҡ вазифалары ла бар. Ул өйөрҙө, бигерәк тә ҡышҡы яуын-сәсендәрҙә, эт-ҡоштан һаҡлай. Ҡыш бауыры йомшарып, ул яҙға ауыша башлаған мәлдә бүреләр төркөм-төркөм ойошоп йөрөй башлайҙар. Бына тап ошо саҡта өйөр айғыры үҙенең «рыңар»лыҡ сифаттарын күрһәтә лә инде. Айғыр кешнәп, ҡурҡыныс барлығын белдергәндән һуң, ҡолон, тай-тулаҡты өйөр эсендә ҡалдырып, бейәләр баштарын түңәрәк эсенә боралар ҙа артҡы аяҡтары менән ас бүреләрҙең һөжүмен кире ҡағырға әҙерләнәләр. Бындай осраҡта өйөр айғыры килгән бүреләрҙе ҡыуалап, ҡайһы берҙәрен тешенә эләктереп ырғытып, өйөрҙө әйләнеп саба башлай, ә һуңынан инде ҡасҡан бүреләрҙе эҙәрләргә тотона.

Баймаҡ яҡтарында ныҡлы тоҡом һәм бик күп һөтлө бейәләр ҡалдырған «Герой» исемле башҡорт тоҡом айғырының өйөргә һөжүм иткән бүреләрҙе эҙәрләп, йән-фарман сабып барған саҡта, ҡасып барған бүреләрҙең дә, үҙенең дә текә ҡаянан осоп һәләк булыуы тураһында әле лә ғәжәп легендалар һаҡлана. Әйткәндәй, Баймаҡ ял йортона Өфөнән, Сибай һ. б. урындарҙан хәл йыйырға килгән кешеләр аша шул тиңдәшһеҙ алышта һәләк булған «Герой» исемле айғыр тоҡомонан килгән бейәләрҙең ҡымыҙын эсеп ҡайталар, сөнки был ваҡиға ял йортон ҡымыҙ менән тәьмин итеп тороусы Ҡуянтау тәжрибә хужалығында булған.

Ә инде үрҙә мин әйтеп киткән, төрлө тоҡом менән ара-

лаштырыуҙан алынған айғырҙарҙа бындай «рыцар»лыҡ сифаттары булмай ғына түгел, улар йылҡы өйөрөнөң яҙмышына бөтөнлөй битарафлыҡ күрһәтә. Ундай айғырҙарға йылы һарай, яҡшы тәрбиә кәрәк, был айғыр бүре менән алышыу ғына түгел, икенсе айғырҙың был өйөрҙән бейәләрен айырып алып китеүенә лә ғәмһеҙ ҡарай.

Таҙа башҡорт тоҡомло айғыр-йылҡы көтөүсеһенең иң яҡын, беренсе ярҙамсыһы. Ҡайһы бер өйрәнгәнерәк айғырҙар үҙ өйөрөн, хатта бейә һауа торған мәлдә ҡыуып, еҙелеккә лә алып килә.

Атлы ғәскәргә хеҙмәткә алынған таҙа башҡорт айғыры маршта ла, сафта ла бер ҡасан да ал бирмәҫ булыр, ат, бейә артында барырға йәки уларҙан артта сафҡа баҫырға бер ваҡытта ла риза булмаҫ. Ул сафта мотлаҡ ғауға ҡуптара һәм үҙ хоҡуғын талашып булһа ла яулап ала, иң алға килеп баҫа. Билдәле, уға атланған кеше лә үҙ айғырына лайыҡ булырға тейеш, теҙгенен һәлберәтеп ултырған мәжнүн кешене бер ҡасан да ундай атҡа атландырмайҙар. Бер ниндәй ҡурҡыу белмәгән яҡшы ат һәм дошман йөрәген тетрәткән батыр егет атлы ҡыҙыл ғәскәрҙең ысын кәүҙәләнеше булып тора. Ат— атлы һуғышсының беренсе ҡоралы. Быуаттар буйына йәшәп килгән кавалерия уставының беренсе пункты ла: «Ат — һуғышсының ҡоралы...», тип юҡҡа ғына башланмай.

Башҡорт аттарының йөк ташырға булған һәләтен дә билдәләп үтмәү мөмкин түгел. 1875—1877 йылдарҙа сыҡҡан «йылҡысылыҡ заводтары» тигән журналда, иң яҡшы башҡорт аттары 130—142 бот тейәлгән йөктө тарта ала, тип әйтелгән.

Мал аҙығы етештереү һәм малсылыҡ институты йылҡысылыҡ бүлегенең тикшеренеүҙәре был тәңгәлдә бына ниндәй мәғлүмәттәр (һынауҙар 1970 йылдар уртаһында үткәрелгән *Р. Ө.)* килтерә [1].

Баймаҡ районы «Октябрҙең 50 йыллығы» исемендәге колхоздың 10 йәшлек таҙа башҡорт тоҡомло аты 4579 килограмм йөктө тартып, 400 метр ара үткән. Шул уҡ колхоздың 8 йәшлек таҙа тоҡомло башҡорт аты 4334 килограмм йөктө 340 метр тартып алып барған.

Шул уҡ райондың «Салауат» исемле колхоздың 11 йәшлек аты 4201 килограмм йөк тейәлгән ике арбаны тартып, байтаҡ ара үткән. Ошо уҡ һынауҙар башҡа тоҡом менән ҡатнашҡан башҡорт аттарының кәүҙәһе байтаҡҡа

---

[1] М ө р с ә л и м о в В. С. Башҡорт аты һәм продуктлы йылҡысылыҡта уның роле. — 1972 йыл. 23—24-се биттәр.

бейек булыуға ҡарамаҫтан тартҡан йөктәренең күләме күпкә кәм булыуын күрһәткән. Был миҫалдар Башҡортостанда фәкәт таҙа башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеүҙең ни тиклем файҙалы һәм эффектлы булыуы тураһында һөйләй.

Беҙ ошоға тиклем башҡорт атының һыбай һәм йөк ташыу өсөн файҙаланыуҙағы ыңғай сифаттары хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Быларҙан тыш, башҡорт аты ит етештереү һәм кеше һаулығы өсөн ҡиммәт эсемлек, ҡымыҙ етештереүҙең дә ҙур сығанағы булып тороуы хаҡында ла әйтеп китергә бурыслыбыҙ. Күсмә тормош менән йәшәгән халыҡтарҙа ат һыбай йөрөү һәм йөк ташыу өсөн файҙаланыуҙан тыш ул кешегә ашау-эсеү ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә торған мал булып та хисапланған.

Сәйәхәтсе академик П. С. Паллас 1770 йылда: «Башҡорт далаларына Московиянан һәм Дондан ауырыу халыҡ ҡымыҙ эсергә йыйыла, сөнки был эсемлек һаулыҡ өсөн бик файҙалы», — тип яҙып ҡалдырған.

Ҡымыҙҙың сәләмәтлеккә файҙалы эсемлек икәнен яҡташыбыҙ С. Т. Аксаков та әйтеп киткән. «Яҙғыһын, ҡара тупраклы дала яңы, хуш еҫле һутлы үлән менән ҡапланғас та, ә ҡышты бик ныҡ ябыҡып сыҡҡан бейәләр утлығып, көрәйеп алғас, бөтә тирмәләрҙә лә ҡымыҙ бешеү башлана, һәм бөтә тере йән — имсәк баланан алып бәлтерәп бөткән ҡартҡа тиклем — кинәнгәнсе шифалы батырҙар эсемлегән эсә, һәм, ғәжәп рәүештә ас ҡыштың бөтә сырхаулыҡтары юҡҡа сыға, хатта ҡартлыҡ юҡҡа сыға, асҡаҡ биттәр тулышып китә, эскә батҡан яңаҡтарға ҡыҙыллыҡ йүгерә» [1].

Ҡымыҙ менән дауаланыу маҡсатында башҡорт далаларына бөйөк рус яҙыусыһы Л. Н. Толстой ҙа килеп йөрөгән. Уның башҡорттар менән дуҫлығы 20 йылға тиклем дауам иткән. 1875 йылда уның ҡатыны Софья Андреевна: «Л. Н. Толстой ҡымыҙҙа ята, һау-сәләмәт, ҡап-ҡара булып ҡояшҡа янған», — тип яҙҙы. Ә уның улы И. Л. Толстой: «Атайым унда әле буйҙаҡ сағында, 1862 йылда барҙы, э һуңынан үҙен дауалаған доктор Захарьин кәңәше буйынса, 1871 һәм 1872 йылда, иң аҙаҡтан 1873 йылда беҙ бөтә ғаиләбеҙ менән барҙыҡ. Атайым менән Степа ҡымыҙҙы яраталар һәм күпләп әсәләр. Атайым иң ҙур туҫтаҡты ике ҡулы менән тотоп, бер тынанан бөткәнсә эсә. Башҡорт һәр ваҡыт өҫтәп һалып тора. Ул йыш ҡына

---

[1] Таңды ҡаршылаусылар. Башҡортостан китап нәшриәте. — Өфө, 1985. 135-се бит.

бер ултырыуҙа һигеҙәр туҫтаҡ һәм унан да күберәк эсә ние», — тип яҙҙы [1].

«1901 йылда А. П. Чехов Андреевск санаторийында (хәҙер ул яҙыусы исемен йөрөтә) ҡымыҙ менән дауалана, Ә Башҡортостан ерендә ҡымыҙ менән дауалау өсөн тәүге санаторий Аксаково станцияһы эргәһендә Сергей Тимофеевнҡтыц ейәнсәре О. Г. Аксакова тарафынан төҙөлә, һуңыраҡ Глуховская станцияһынан биш саҡрым ерҙә «Рус Швейцарияһы» барлыҡҡа килә. 1892 йылдан алып Шафран станцияһы тирәһендә бер нисә санаторий төҙөлә һәм эшләп ҡ̆ашлай»[2].

Ҡымыҙ йәй айҙарында күсмә тормоштағы халыҡ өсөн туҡланыуҙың төп продукты булып иҫәпләнгән. Ә хәллерәк башҡорт һәм ҡаҙаҡтар ҡымыҙ эшләүҙе йыл әйләнәһенә ойошторғандар, бының өсөн тик һауын бейәләргә ҡыш көндәре һоло ашатыу талап ителгән.

Ярым ултыраҡ тормошҡа күскән башҡорттар ҡышҡа ҡарай ыҙмаға әйләнеп ҡайтҡас, йәй̈ буйы көтөүҙә йөрөгән йылҡыны һуғымға һуйған. Ғөмүмән, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорттар араһында уҙ̇ың ите тәмлелеге, туҡлыҡлылығы буйынса беренсе урында, һарыҡ ите икенсе, ә инде һыйыр ите өсөнсө урында торған. Замандаштарының әйтеүҙәре буйынса, килгән ҡунаҡҡа йылҡы ите урынына һарыҡ, һыйыр ите бешергән башҡорт ҡунағы алдында ҡат-ҡат ғәфү үтенгән. Ә инде ҡош ите ғөмүмән, бигерәк тә Ырымбур губернаһы башҡорттарында, ашҡа һаналмаған. Йылҡы ҡаҙыһы, ат ялы тик иң ҡәҙерле, иң хөрмәтле ҡунаҡтарға ғына әҙерләнгән.

Ашатып һимертелгән аттың 11 пар ҡабырғаһынан ҡаҙы уның ас эсәгенә тығып эшләнгән. Уға тәм һәм тат өҫтәү өсөн, шулай уҡ тиҙерәк өлгөртөү ниәтендә уны башта тоҙло һыуҙа ике-өс көн тотҡандан һуң ҡаҡлауға элеп ҡуйҒандар. Ошо көйөнсә ул айҙар буйы һаҡланған.

Ҡыш айҙарында төнгө йылҡы көтөүсеһенә мотлаҡ ҡоротланған, боросланған бер-ике туҫтаҡ тоҙлоҡло йылҡы һурпаһы эсереп оҙатыу тәртибе булған. Был төнгө йылҡы көтөүсеһен ниндәй ҡаты бурандарҙа ла бирештермәгән, сөнки йылҡы һурпаһы кешене өшөүҙән һаҡлаған. Ғөмүмән, һимеҙ йылҡы ите үҙе лә ниндәй сасҡау һыуыҡтарҙа ла, башҡа ит шикелле, шаҡырайып туңып бармай.

Аттың тиреһе, лә тормош кәрәк-ярағы өсөн киң ҡулланылған. Янбаш тиреһен эшкәртеп, ҡымыҙ йөрөтөү өсөн

---

[1]Ш а м а е в А. Ғ. Ҡымыҙ менән хоҙерге туберкулезды дауалау.— Өфө, 1974. 112-се бит.

[2]Таңды ҡаршылаусылар. 136-сы бит.

һаба, турһыҡ эшләгәндәр. Ул ғына ла түгел, янбаш тиреһенән иләнгән тиренән батшаның үҙенән башлап, уның чиновниктарына тиклем (нигеҙҙә хәрби ҡатлам) шагреневый тип аталған итек тектереп кейгәндәр. Аттың ҡойроҡ-ялынан ҡыл арҡан, муйынсаҡ ишкәндәр (еҙелектә колон бәйләй торған урын Р. Ө.), бер башынан икенсеһенә ҡаҙаҡ ҡағып, ҡолон бәйләү өсөн дә оҙон арҡанды ошондай ҡылдан әҙерләгәндәр. Ат тарамышы тиртун, яры салбар тегеү өсөн еп булып хеҙмәт иткән. Тун нисек кенә ылбырап төшмәһен, тарамыш еп мәңге үҙ ныҡлығын юғалтмаған — серемәгән дә, өҙөлмәгән дә. Йылҡы һөйәгенән арба күсәре өсөн май, һабын, ҡысыу һ. б. ауырыуҙарҙы дауалай торған шифалы дарыу әҙерләгәндәр.

4

Билдәле, ерле халыҡ хужалыҡ һәм көн итеү өсөн иң кәрәкле булған малдың һанын кәметмәү генә түгел, уның тоҡомон яҡшыртыу буйынса ла байтаҡ ҡына тырышлыҡ һалған. Әйткәндәй, 1845 йылда тик Ырымбур губернаһы буйынса ғына 1,852 мең йылҡы иҫәпләнгән. Ә 1850 йылда тик ошо губернала йәшәгән башҡорттар ҡулында ғына 569879 баш йылҡы булған. Был һәр ир затына 2,25 ат тура килгән тигән һүҙ[1].

Башҡорт атының тоҡомон яҡшыртыу һәм уны нигеҙҙә һыбай йөрөү, һуғыш маҡсатында ҡулланыу өсөн яраҡлаштырырға ынтылыу теләге лә бик күптән барлыҡҡа килгән. 1740 йылда уҡ ун армия полкы эргәһендә 4000 бейәнән һәм 572 айғырҙан ғибәрәт йылҡысылыҡ заводтары ойоштороған. Быларҙың төп нигеҙе булып, таҙа башҡорт бейәләре торған. Башҡорт аттарын ҙур теләк менән Ырымбур һәм Яйыҡ казактары һатып алырға тырышҡан.

Башҡорттарҙың 1797 йылдан алып 1861 йылға тиклем хәрби казак ҡатламы хоҡуғында тороуы һәм уларҙың 17 йәштән 45 йәш тулғансы һәр береһенең, ҡағиҙә булараҡ, атлы ғәскәр сафына алыныуы ла башҡорт атының тоҡомон яҡшыртыу теләген көсәйткән. Бына шуға күрә лә, 1830 йылдарҙан алда уҡ башҡорт ғәскәрҙәрендә йылҡы заводы ойоштороло. Быға башҡорт ғәскәрҙәре өсөн урындағы аттарға ҡарағанда экстерьеры отошлораҡ, иң беренсе нәүбәттә, бейегерәк аттар етештереү бурысы йөкмәтелә. Тоҡом яҡшыртыу маҡсатында был заводҡа таҙа ҡанлы иң

---

[1]Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса очерктар. — I том, 2-се бүлек. — Өфө, 1950, 13—14-се биттә».

яҡшы тоҡомло башҡорт бейәләре һәм һыбай йөрөүгә ҡулайлашҡан ғәрәп айғырҙары килтерелә. Ошо уҡ маҡсат менән 1864 йылда был завод яңы тоҡом аттарын бөтә Башҡортостанға үрсетеү (рассадник) пунктына әүерелә. Ләкин уның төп йүнәлеше үҙгәрмәй — атлы ғәскәргә һыбай файҙаланыу өсөн аттар етештереү булып ҡала. Ләкин был ысул менән алынған тоҡомло аттар буйы-һыны менән нисек кенә бейеҡ, күркәм булмаһын, урындағы башҡорт атының тоҡомон яҡшыртыу буйынса артыҡ уңыштар ҡаҙана алмай. Был эште артабан йәнләндереү ниәте менән урындағы тәбиғи-климатик шарттарҙы Дон далаларына оҡшатып, Дон айғырҙарын килтереү ҙә артыҡ һөҙөмтә бирмәй. Шуға күрә 1881 йылда был үрсеткесте бөтөнләй ябырға мәжбүр булалар. Шулай итеп, 50 йыл барған был тәжрибә бер ниндәй нәтиҗәһеҙ һүнеп ҡала [1].

Ләкин 1930 йылдарҙан башлап, үткән быуаттағы был бер ниндәй ыңғай һөҙөмтә бирмәгән эште онотоп, типик башҡорт аттары таралған Хәйбулла, Матрай, Баймаҡ һәм Әбйәлил райондарында таҙа тоҡомло башҡорт айғырҙарын төбө-тамыры менән бөтөрәләр ҙә (быны әйтеүе генә аныҡ!), 1924 йылда ойоштороған Маҡан йылҡысылыҡ заводының ситтән килгән айғырҙарын файҙаланып, яңынан башҡорт атының тоҡомон «яҡшыртырға» керешәләр. Ләкин был тағы кире һөҙөмтәләргә килтерә, сөнки алынған йәш тоҡом бер нисә сантиметрға ата-әсәһенән оҙонтороҡ булыуға ҡарамаҫтан, Урал аръяғының ҡышҡы сасҡау һыуығына түҙә алмай ғына түгел, көсһеҙ, нәҙек муйынлы, нескә аяҡлы был йылҡы ҡыш ҡар өҫтөндә тибенләү өсөн бөтөнләй яраҡһыҙ булып сыға. Быуындан быуынға тоҡом яҡшырыу урынына башҡорт атының тоҡомо һаман насарая, физик сифаттары түбәнәйә бара. Бына шуға күрә, 1943 йылдан башлап, был зарарлы практиканан инде икенсе тапҡыр баш тартып, өр-яңынан таҙа башҡорт аты үҫтереү бурысы килеп баҫа. Ләкин был осор ауыр һуғыш йылдарына тура кило — башҡорт аты сифат яғынан ғына түгел, һан яғынан да көрсөккә терәлә.

Шулай итеп, был факт объектив тәбиғи закондар менән хисаплашмай, волюнтаристик субъектив элементтарҙы көсләп тағыу кешелек йәмғиәтендә генә түгел, ә хатта малсылыҡта ла кире һөҙөмтәләргә килтереүенә тағы бер асыҡ миҫал булып тора.

Шулай ҙа Урал арты райондарында таҙа тоҡомло башҡорт атын үҫтереү маҡсатында 1945 йылда Баймаҡта ра-

---

[1] Сангин И. Н. Башҡорт аты һәм уны яҡшыртыу саралары. 19—20-се биттәр.

йон-ара Дәүләт йылҡысылыҡ тоҡом үрсетеү станцияһы асыла. Уның алдына был эште яңынан аяҡҡа баҫтырыу, артабан үҫтереү һәм башҡорт атының тоҡомон яҡшыртыу бурысы ҡуйыла. 1946 йылдың ғинуарына был районара пункт (госплемрассадник) составына 2672 ат, шул иҫәптән 1267 бейә һәм 67 айғырҙы берләштергән 29 йылҡысылыҡ фермаһы инә. Уның ойошторолоу мәле һуғыштан һуңғы ауыр ваҡытҡа тура килеүгә ҡарамаҫтан был йүнәлештә уңышлы ғына эштәр башҡарыла.

Ләкин башҡорт атына бынан һуң да оло ғына һынауҙар аша үтергә тура кило.

1954—1956 йылғы сиҙәм эпопеяһы башҡорт атының тағы ла бәкәленә һуға. Ул һан яғынан ҡырҡа кәмеүгә дусар ителеүҙән тыш, йәмғиәт малы хисабынан бөтөнләй төшөп ҡала. Эш шунда тора: республикала ошо осорҙа күтәрелгән 600 мең гектарҙан артыҡ сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙең өстән беренән күберәк өлөшө йылҡысылыҡтың иң ныҡ үҫешкән урыны — Урал арты райондарына тура килә. Элек көтөү-көтөү йылҡы өйөрҙәре тибенләгән ерҙәр нигеҙле-нигеҙһеҙ һөрөлә башланды, һәм йылҡыны артабан үрсетеү һәм үрсетмәү мәсьәләһе тағы көн тәртибенә килеп баҫты. Бөтә илде ҡаплап алған сиҙәм эпопеяһына башҡорт аты ҡаршы тора алманы — уны сиҙәм бураҙналары яңынан баҫып китте, был юлы уны оҙаҡ ҡына тора алмаҫлыҡ итеп баҫты. Башҡорт аты башына яңынан ҙур бәлә килде. Ул тиклем йылҡыны ҡыш кәртәгә индереп аҫрау, мал аҙығы әҙерләү һәм ат һарайҙары төҙөү өсөн ул замандарҙа хужалыҡтарҙың бер ниндәй ҙә иҡтисади мөмкинлектәре юҡ ине. Элекке зоотехник нормалары буйынса 12 баш һарыҡ-кәзәгә тиңләп йөрөтөлгән оло ат үҙе ҡыш сыҡҡан быҙау, һарыҡ бәрәбәренә тороп ҡалды. Бөтә Урал арты хужалыҡтарында аттарҙы башмаҡ, һарыҡ малына алмаштырыу башланды. Бынан тыш Магнитогорск, Орск ит комбинаттарына йылҡы тапшырыу киң ҡолас алды. Был инде колхоз, совхоздарға ныҡ үрсей башлаған йылҡынан ҡотолоу өсөн уйлап сығарылған бер сара ине, сөнки тапшырылған йылҡы ите хөкүмәт планы иҫәбенә индерелмәне. Ит комбинаттары тапшырылған йылҡының-, һәр килоһы өсөн хужалыҡтарға ул саҡтағы аҡса менән 50 тин түләне. Һыу һөлөгө шикелле һомғол бейәләрҙе, тибендә уйнаҡлап йөрөгән байтал-тайҙарҙы бушлай тигәндәй илленсе йыл урталарында ит комбинаттарына ҡыуырға тура килде. Бындай күп һанға иҫәпләнмәгән ул саҡтағы бәләкәй генә, ҡулайлашмаған комбинаттар сират көтөп торған йылҡыларҙы бер ниндәй аҙыҡһыҙ ялан кәртәлә тоттолар. Тибендән килеп, аҙналар буйына ас торған

йылҡы кәртәләнгән ағастарҙы ашап бөткәс, хатта тимер сыбыҡ сәйнәргә мәжбүр булды. Магнитогорск комбинатына иткә тапшырыу өсөн йылҡы ҡыуыу уларҙы көткән йылҡысыларға бер оло йән ғазабына әйләнде. Уларҙың был мәғәнәһеҙ эштән баш тартып, бармай ҡалыу осраҡтары ла йыш булды.

Йылҡы тапшырыуға ҡаршы нигеҙле дәлилдәр килтереп, юғары органдарға ҡағыҙ яҙып мөрәжәғәт итеүҙәр бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Сөнки ул замандарҙа сиҙәмгә бәйләнешле мәсьәләләрҙе күтәреп сығыу партия сәйәсәтенә ҡаршы сығыу менән тиң баһаланды, сөнки «сиҙәм сире» бөтә илде солғап алғайны.

Бына ошондай йәки шуға оҡшаш «эксперименттар» арҡаһында башҡорт аты бөтөнләй бер хоҡуҡһыҙ «Закондан тыш» малға әйләнеп ҡалды. Быны иҫбатлау өсөн тағы бер миҫалға мөрәжәғәт итәйек. Колхоз һәм совхоздар мал аҙығына баланс төҙөгән саҡта атты һәр ваҡыт тигәндәй керетеп хисаплайҙар, ләкин эш балансты практик ҡулланыуға килеп тәрәлһә, уны бөтөнләй аҙыҡ балансынан һыҙып ташлайҙар. Баланста ҡаҙ-өйрәк, хатта тауыҡ та бар, ат ише ат унан төшөп ҡала. «Һәр ат үҙенә-үҙе аҙыҡ табырға тейеш» тигән элек-электән ҡала килгән яңылыш ҡараш аттың тағы бәкәленә бәрә. Ләкин ашатылған мал аҙығын хисаплаған саҡта: «Аттарҙы ашатыуға фәләнсә тонна бесон, һалам һәм фәләнсә центнер һоло тотонолдо», тип бухгалтерияла теркәп ҡуйырға бер ҙә онотмайҙар. Хужалыҡта етештерелгән һөттөң һәм фураждың үҙ ҡиммәтен сығарған саҡта әлеге лә баяғы ғәйепһеҙ мал етәкселәрҙең иҫенә тағы килеп төшә, сөнки хужалыҡта башҡа малдарға ашатылған фуражды һәм бесәнде ат өҫтөнә һалмаһаң, уның үҙкиммәте юғары була, ә был инде башҡа төр малдарҙан алынған аҡсалата керемде кесерәйтеп күрһәтә, уның һөҙөмтәһендә малсылыҡ продукттары етештереүҙең рентабеллеге түбәнәйә.

Шулай итеп, ат башына хәсрәт төшһә, ҡайһы бер хужалыҡ етәкселәре уны белмәй ҙә, күрмәй ҙә, о инде үҙ баштарына хәсрәт төшһә, уны яңынан бик тиҙ иҫтәренә төшөрә.

Шуға күрә, башҡорт аты менән оҙаҡ йылдар буйына үткәрелгән тикшеренеүҙәр, эксперименттар, уның хужалыҡтағы әһәмиәтен етерлек тиклем баһаламау һәм уның ихтыяждары менән хисаплашмау арҡаһында ул бер хоҡуҡһыҙ малға әүерелеп ҡалды. Был уның һанына ғына түгел, бигерәк тә сифатына бик нык тәьҫир яһаны.

Ырымбур губернаһында ғына 1846 йылда 1,852 мең баш ат булыуы хаҡында беҙ үрҙә әйтеп үткәйнек шикелле.

Ул яңынан етмеш йылдан һуң 980 меңгә төшөп ҡала. Һуғыш алдынан Башҡортостанда бөтәһе 524 мең баш ат иҫәпләнә. Ә 1995 йылдың ғинуарына республиканың колхоздарында һәм совхоздарында барыһы 127 мең баш йылҡы малы тороп ҡала, шул һандан 50 меңгә яҡын атҡа йүгән дә, ҡамыт та кейҙерелмәгәнен хисапҡа алһаҡ, Башҡортостанда атҡа ҡараш һәм уның бөгөнгө торошо нығыраҡ асыҡлана һымаҡ.

Шулай ҙа йылҡысылыҡтың бөгөнгө хәленә, уның киләсәкке планына бер ҡараш ташлау ҙа артыҡ булмаҫ.

Бөгөнгө көндә мал аҙығы һәм малсылыҡ проект-технология институты йылҡысылыҡ лабораторияһы менән ойоштороған фермала тупланған тоҡом бейәләренән алынған һәм алынасаҡ йәш үрсем киләсәккә ит етештереү йүнәлешендә эшләй торған барлыҡ фермаларҙың да нигеҙе булып тора.

Республикала йыл һайын 5 меңдән артыҡ бейә һауыла, 2 мең тоннанан артыҡ бик туҡлыҡлы һәм шифалы эсемлек—ҡымыҙ етештерелә, ләкин был һан ул эсемлеккә булған талапты һис кенә лә ҡәнәғәтләндермәй. Институттың йылҡысылыҡ лабораторияһында тикшеренеүҙәр шуны иҫбатланы: киптерелгән бейә һөтө онтағын ғына түгел, үҙе лә сабый балалар өсөн әсә һөтөн алмаштыра. Башҡорт ҡымыҙы нигеҙендә тиҫтәләрсә йыл эшләп килгән 5 санаторий һәм курорт ул эсемлеккә булған ихтыяжды тағы ла киҫкенләштерә, сөнки улар Башҡортостан хеҙмәтсәндәренән тыш, башҡа бик күп өлкәләрҙән килгән ауырыуҙарҙы ла дауалай.

119-сы Өфө йылҡысылыҡ заводы базаһында беҙҙең илдә иң ҙур ҡымыҙ етештереү фермаһы ойоштороған. Бында 250 баш бейә һауыла. Был заводта йыл һайын меңәр центнер ҡымыҙ алына. Фермала аҫралған бейәләрҙең күбеһе йылына уртаса 2000—2500 литр һөт бирә, ә заводтың ҡайһы бер бейәләренең уртаса һауымы өс мең литрҙан да ашып китә. Бындай һандар республика күләмендә генә түгел, илдә лә иң юғары күрһәткес булып иҫәпләнә.

Баймаҡ тәжрибә хужалығы, Әбйәлил районы Калинин колхозында, Баймаҡ районы «Октябрҙең 50 йыллығы» исемендәге колхозда, «Ирәндек» совхозында йылына 2000 литр һөт бирә торған башҡорт йылҡыһының махсус өлгөләрен үҫтереү буйынса тикшеренеү эштәре алып барыла. Бейәләрҙең һөтсөлөк продуктлылығын күтәреү мал тоҡомон төрлө яҡлап баһалау нигеҙендә генеалогик структураны уңайлаштырыу хисабынан өлгәшелә.

Башҡорт аттарының юғалған сифаттарын ҡайтанан

барлыҡҡа килтереү һәм ит етештереүҙә йылҡысылыҡтың файҙаһын күтәреү маҡсатында Башҡортостанда, атап әйткәндә, Байрамғол совхозында, бер төр «Джабе» тип аталған ҡаҙаҡ һәм яҡут айғырҙары менән тороҡтороу эше башланды. Был юл менән алынған үрсемдең ике йәш ярым ваҡытында үҙ тиңдәштәренән 40—50 килограмға тере массаһын арттырыуға килтерҙе. Хәҙерге көндә ошо эш нәтижәһендә был хужалыҡта үҙҙәренең тере ауырлығы 440—450 килограмға еткән аттар барлыҡҡа килде. Ошо типтағы бейәләр һаны бөгөнгө көндә 145 баш иҫәпләнә. Был ферма бер нисә тапҡыр халыҡ хужалығы уңыштары күргәҙмәһендә ҡатнашты.

Ләкин ошо көнгә тиклем ҡымыҙ фермалары күп ҡул көсө талап итә, сөнки бейәне һауыуҙан алып ҡымыҙ етештереүгә тиклем фермаларҙа бер ниндәй ҙә механизация индерелмәгән. Ҡымыҙ етештереү технологияһы бынан нисә быуаттар элек нисек булған, хәҙер ҙә шул кимәлдә тороп ҡалған, тиһәк тә бер ҙә хата булмаҫ. Ҡайһы бер ҙурыраҡ фермаларҙа ҡымыҙ бешеү эше механизацияланған тип әйтергә була, ләкин ул да хәҙергә бик камил түгел. Бейә һауыу өсөн агрегаттар ҡулланыу әле беҙҙең Башҡортостан фермалары өсөн тик өмөтлө хыял ғына.

Һуңғы йылдарҙа ҡыҙыҡлы ғына бер хәлде күҙәтергә мөмкин. Йылҡы һаны кәмегән һайын, уның итен хуш күреүселәр арта бара. Организм тарафынан тиҙ үҙләштереүсән, был туҡлыҡлы һәм тәмле иткә ихтыяждың артыуы унда аҡһым матдәһенең һыйыр, һарыҡ иттәре менән сағыштырып ҡарағанда күберәк булыуы менән бәйләнгән. Аттың башҡа хайуан кеүек теләһә ни менән туҡланмауы уның итен санитария йәһәтенән иң таҙа ит тип хисапларға хоҡуҡ бирә.

Институттың тикшеренеүҙәре башҡорт атының, бигерәк тә тибендәге йылҡының тиҙ генә һимереүгә һәләтле икәнеп күрһәтте. Тау-таш, ҡуйы урман араһында ла үҙенә аҙыҡ таба алыуы менән ат башҡа хайуандарҙан ҡырҡа айырыла. Тик тибендә тәбиғи шарттарҙа үҫтерелгән ҡолон 6 ай эсендә 180 кг-ға етә, бер йәшлектәр йәйге көтөү осоронда 80 килограмм, ә инде ике йәшлек тай-байталдар 60—70 килограмм артым бирә. Тикшереүҙәр шуны күрһәтә: 2 йәшлек тайҙы 40 көн көсөргәнешле ашатыу 42 килограмм артым бирҙе, был һәр көнгә 1005 грамм тигән һүҙ.

Бөгөнгө көндә Башҡортостандың бөтә йылҡысылыҡ фермаларында тигәндәй Баймаҡ районы «Ғәйрәт» һәм «Спектр» тигән айғырҙарҙан таралған, фәнсә әйткәндә, ике «завод линияһы» эшләй. 1991 йылда республикала

халыҡ селекцияһы тарафынан барлыҡҡа килгән йылҡы малына «Башҡорт аты» тигән юғары статус бирелде.

Бөгөнгө көндә мал аҙығы етештереү һәм малсылыҡ институтының эшмәкәрлеге йылҡының тоҡомон яҡшыртыу менән бер рәттән уны тәрбиәләүҙең алдынғы технологияһың тәҡдим итеүҙән ғибәрәт. Оҙайлы ҡыш буйы ашатыу өсөн мал аҙығының страховой запасын булдырып, улар йөрөгән тибенлектәрҙе арыш, бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ үләндәр сәсеп яҡшыртыу иң мөһим бурыс булып тора. Бынан тыш тибенләүгә бүленгән майҙандарҙа кәрәк булған бөтә төр үләндәрҙе тапатмай, ҡышҡыға ҡалдырыу мотлаҡ. Хәҙер ошондай тибенләү майҙандарында институт тикшеренеү эштәре алып бара һәм тәүге һөҙөмтәләр бындай эште киңерәк ҡулланырға мөмкинлек бирә.

Әйтергә кәрәк, тибен йылҡыһы менән шөғөлләнгән Урал аръяғы райондарында ғына ошо юл менән 1000 тонна осһоҙ ат ите етештерергә, ә республика буйынса уны икеләтә арттырырға мөмкин. Быныҡ өсөн һәр хужалыҡта 50-шәр бейәнән торған йылҡысылыҡ фермаһы ойошторо зоотехния эшен яҡшыртыу нигеҙендә 100 баш бейәнән 90-шар ҡолон алыуҙы тәьмин итергә кәрәк. Урындағы башҡорт тоҡомло ат уға түккән сығымды бик юғары хаҡ менән кире ҡайтара.

Ә хәҙергә, әйтергә кәрәк, бейәләрҙән ҡолон алыу күрһәткесе мактанырлыҡ түгел. 1989 йылда әгәр 100 бейә 65 ҡолон тыуҙырһа, 1994 йылда ике бейәнән бер генә ҡолон алынған тиерлек.

1985 йылдың октябрендә институт эшләгән «Башҡортостанда йылҡысылыҡты үҫтереүҙең рациональ системаһы» РСФСР ауыл хужалығы министрлығының фәнни-техник советында ҡаралып, хуплау тапты. Был системала һуңғы 25 йыл эсендә институттың был өлкәлә башҡарған бөтә хеҙмәттәре бар. Йылҡысылыҡ фермалары туплаулан башлап, ҡымыҙ эшләү һәм йылҡы ите етештереүҙең барлыҡ алдынғы технологияһы индерелгән.

Ат көсөн интенсив файҙаланыу мәсьәләһендә лә республикала матур ғына үрнәк булырлыҡ миҫалдар аҙ түгел. Хужалыҡ ни тиклем юғары механизацияланған һәм керемлерәк булһа, бындай хужалыҡ эсендә ат көсөн файҙаланыу ҙа шулай уҡ яҡшыраҡ ҡуйылған. Ләкин республиканың колхоз һәм совхоздарында беҙ ниндәй парадокс күрәбеҙ? Яғылыҡҡа хаҡ өҫтәлгән һайын ауыл хужалығы етәкселәре ат көсөнә йәбешеп ятырға тейештәр ҙә һымаҡ. Ә ысынбарлыҡ бөтөнләй икенсене күрһәтә. Дөйөм йөк ташыуҙа аттың өлөшө йылдан-йыл кәмей бара, шуға ҡарамаҫтан, ауыл ерҙәрендә генә түгел, ҡайһы бер бә-

ләкәйерәк ҡалаларҙа ла ат менән йөк ташыуға булған ихтыяж кәмемәй, киреһенсә, барған һайын арта. Ошо уҡ ваҡытта 44 процент йылҡы малы республиканың хужалыҡ тармаҡтарында бер ҡайҙа ла файҙаланылмай. БыныҢ, билдәле, үҙ сәбәптәре лә юҡ түгел.

Беренсенән, элекке ваҡыттағы кеүек, аттарҙы тулы файҙаланыу маҡсатында колхоз, совхоздар ҡамыт-дуға, арба йәкп сана менән тәьмин итеү мәсьәләһен үҙ елкәләренән бөтөнләй алып ташланы тиһәк тә хата булмаҫ. Элекке тик ҡамыт-дуға, арба, сана һәм тәгәрмәс һуғыу кеүек эштәр менән шөғөлләнгән махсус промартелдәр хәҙер бөтөнләй юҡҡа сыҡты, ә һыбай йөрөү өсөн эйәр етештереү хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ. Хәҙер республика хужалыҡтарында ҡышын-йәйен ат дағалау бер ҙур мәшәҡәткә әйләнде. Ул һәнәрҙе белгән һәм уныҢ менән шөғөлләнгән кешеләр көндән-көн аҙая бара. Ә бит заманында һәр ауылда тигәндәй атты станокка ҡуймайынса, уныҢ тояҡтарын тубыҡҡа һалып, аттыҢ бәкәлен тотоп, даға ҡатыусылар ҙа бар ине.

Ат түңәрәге ойоштороу өсөн колхоз, совхоз ул тиклем ҙур сығым түкмәйәсәк. Ул түңәрәктәрҙе түләүле итеп тә ойоштороРҒа була. БыныҢ менән беҙ хәҙер ауылдарҙа алъюҫыҡҡа ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сабыулап, төндәрен үҙ ауылдаштарына йоҡо бирмәгәи күп йәштәрҙе атҡа атландырып, үҙ «матайҙары»нан бер аҙға айырыр инек. Икенсенән, тән сыныҒыуы өсөн ат өҫтөндәге күнекмәләрҙе башҡарыуҙан да файҙалыраҡ башҡа спортты тәҡдим итеүе ҡыйын. БеҙҙеҢ атаҡлы хәрби етәкселәребеҙҙеҢ 80—85 йәшкә еткәнсе ат өҫтөндә һыбай йөрөүҙәре осраҡлы ғына хәл түгел. Ҡайһы бер ауылдарҙа әле лә 70—75 йәшлек карттарҙыҢ ат өҫтөндә, майшәм кеүек, теп-текә ултырып елдереп китеп барыуҙарын йыш ҡына осратырға була.

Ат өҫтөндә йөрөгән кешенеҢ бер генә мыҫҡал да артыҡ ауырлығы булмай, уныҢ мускулатураһы ла бәлйерәп таралмай, ҡоршау һуҡҡан шикелле ҡаты була, атта оҙаҡ йөрөгән кешенеҢ йөрөштәре лә икенсерәк — еңел, аяҡ осона ғына баҫып, осоп килгән төҫлө тойола. Атта йөрөү кешенеҢ кәйефен дә күтәрә, йәшәү дәрте өҫтәй, тәбиғәттеҢ иҢ күркәм, аҡыллы вәкиле менән аралашыу кешенеҢ үҙен изгерәк итә, нескәргән күңелендә эске ғорурлыҡ тойғоһо уята, беренсе нәүбәттә, сослоҡҡа, етеҙлеккә өйрәтә. Атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән кешенеҢ шәхси абруйы элгәрерәк заманда уныҢ чинынан тыш, ниндәй ат атланып йөрөүе менән дә баһалана ине.

Бына шуға күрәлер ҙә үҙенеҢ Совет армияһындағы 40 йыл хеҙмәтенеҢ 25 йылын атлы ғәскәргә бағышлаған дан-

лыҡлы генералыбыҙ Советтар Союзы геройы Таһир Кусимов һәр әңгәмәлә лә ат хаҡында һөйләүҙән ялыҡмаҫ ине, үҙе менән бергә хеҙмәт иткән ҡайһы бер иптәштәренең исем, фамилияһы хәтер ҡапсығынан төшөп ҡалыуға ҡарамаҫтан, үҙе атланып йөрөгән толпарҙарының барыһына ла курсант сағынан башлап, экстерьеры, үлсәүҙәре һәм төҫө менән генә түгел, хатта исемдәре менән дә һис яңылышмай әйтеп бирер ине. Тимәк, ул аттары тураһындағы иҫтәлектәрҙе үҙенең хәтер һандығынан сығармаҫлыҡ итеп, бикле көйөнсә йөрөткән. Эйе, Таһир ағай Күсимов һуғышсының ғына түгел, һәр кешенең үҙ атына мөнәсәбәте, мөхәббәте нисегерәк булырға тейешлегенә бер өлгө булып мәңге хәтерҙә ҡалды.

Йылҡысылыҡ буйынса үрҙә әйтеп кителгән ҡайһы бер ыңғай һөҙөмтәләрҙе был мөһим һәм иҡтисади йәһәттән оҫоҙ тармаҡты аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү эшендә тик тәүге аҙымдар ғына тип хисапларға кәрәк.

Ләкин шуны ла билдәләп үтмәү мөмкин түгел: беҙҙең республикала үҙенең бөтә ғүмерең "башҡорт аты"н үрсетеү, ҡымыҙ эшләп сығарыуға арнаған Сайғин И. А., Мөрсәлимов И. А., Шамаев А. Ғ. ауыл хужалығы фәндәре докторҙары Әхәтова И. А., Масленников В. В., Сөләймәнова Х., Лоҡманов И. А. һ. б. кеүек күренекле ғалимдарыбыҙ бар. Әйткәндәй, Башҡортостан ҡымыҙ етештереү буйынса Рәсәйҙә беренсе урында тора.

Илен һәм үҙ халҡын быуаттар буйына данға күмгән, Ватанды сит дошмандарҙан һаҡлап алып ҡалыуҙа һәр ваҡыт үҙ күкрәген ҡалҡан итеп, ил батырҙары менән бәрәбәр ҡаһарманлыҡ күрһәткән башҡорт аты күберәк иғтибарға һәм бәхетлерәк яҙмышҡа мохтаж һәм лайыҡ.

СИҘӘМДЕҢ ТӘҮГЕ ЯҘЫ

1954 йылдың март кисе.

«Яңы тормош» колхозының Баймырҙа ауыл клубында— урамға буй һалынған элекке ағас мәсеттә йыйылыш бара.

Киске сәғәт 7-гә билдәләнгән йыйылыш бик һуңлап ҡына башланды. Был колхозға ҡараған Яңғаҙы, Ҡарамалы һәм Үҙән ауылдарынан саҡырылған кешеләр үҙ ваҡытында килеп еттеләр. Баймырҙа ауылының үҙ халҡын көтөп арыныҡ. Колхоз бригадиры Үлйәбаев, Ишмөхәмәт ауыл Советы председателе Шәрәфетдинов, клуб мөдире Һөйөндөк Сәлимов халыҡ йыябыҙ тип унда-бында сабыулап йөрөй торгас, таман хәлдән тайҙы.

Билдәләнгән ваҡыттан байтаҡ алда килеп, ваҡ мал

фермаһын ҡарап сыҡҡан район етәкселәре клубтың алғы эскәмйәһендә ултыра.

Ферма ҡарамаҡҡа ситәндән генә үрелеп эшләнһә лә, ундағы тәртип, малдарҙың торошо, бигерәк тә бәрәстәрҙең йылы ояһы етәкселәргә оҡшаны, һарыҡтары, нигеҙҙә, урындағы тоҡомдан булыуға ҡарамаҫтан, көр генә, бесәндәре етерлек, бәрәстәргә япраҡлы, сәскәле йәшел бесән ашаталар, ялан кәртәләге ике-өс улаҡ эсенә һарыҡҡа ялатыу өсөн киҫәкле тоҙ ҙа ҡуйғандар.

«Һарыҡсылыҡ фермаһы» тип шартлы ғына әйтелә инде был ферма, бында күбеһенсә кәзә малы. Ялан яғының был ауылдары кәзә менән күптән дан тота, уны боронборондан үрсетәләр, бик яратып ҡарайҙар. Бәлки, шуғалыр ҙа был колхозға ингән дүрт ауылда дүрт төп ағас та тапмаҫһың.

Кәзә һаны буйынса был колхоз районда беренселәр хисабында йөрөһә лә, уңыш алыу буйынса иң артта тора. Бының, әлбиттә, объектив сәбәптәре юҡ түгел. Бында башҡа колхоздарға ҡарағанда уңдырышлы ер ҡатламы байтаҡҡа йоҡараҡ. Икенсенән, ҡайһы бер иген майҙандары, ҡарышҡан кеүек (әйтерһең дә, шунан башҡа ер таба алмағандар), ташлы түбә, ҡалҡыу урындарҙа урынлашҡан. Колхоз ойошторған йылдарҙа ҡайһы бер «аҡыл эйәләре», күрәләтә тороп, ташлы ерҙәрҙә сиҙәм күтәргән. Ҡола ялан булыуы һәм Ирәндек тауының көнсығыш йәйпеһендә батмус кеүек тигеҙ ерҙә ятыуына ҡарамаҫтан, был ауылдар халҡы игенселек менән шөғөлләнмәгән тиерлек. Аты, хәле бары өс-дүрт дисәтинә бойҙай, тары сәскән. Нигеҙҙә, урындағы халыҡ ҡараға аяҡ баҫыу менән тау итәктәренә, төрлө күләүектәргә, Урғаҙа йылғаһы буйына йәйләүгә ашыҡҡан. Был ерҙәрҙә тик урындағы байҙарҙың иҫәпһеҙ ҡуй көтөүҙәре, өйөр-өйөр йылҡылары ғына тибендә йөрөгән.

Колхоз йыйылышының булыуы тураһында алдан иҫкәртелгән клуб мөдире Сәлимов күпме генә тырышмаһын, клуб бинаһын йүнләп йылыта алманы, йыйыштырыусы сей тал ҡырҡып, ике мейесте ике көн рәттән быҫҡытты. Мейестәр ҡыҙҙы, ләкин залға йылылыҡ йүгермәне. 1930 йылдарҙа клубҡа әйләндерелеп, шул замандан бирле ҡаралмаған мәсет, уның үтәләй тишек стеналары йылы тоторлоҡ түгел. Март аҙағы булыуға ҡарамаҫтан, урамда ярайһы ғына һалҡын һәм һепертмә буран өрә.

Ҡаракүл яғалы һоро пальто, башына шул уҡ төҫтә ҡаракүл бүрек кейгән, мыҡты кәүҙәле, һипкелле, оҙонса һары битле кеше, райкомдың беренсе секретары Любушкин, көтөп-көтөп арығас, эскәмйәнән тороп, үрле-түбәнле

йөрөргә кереште. Күн табанлы аҡ буркаларының үксәләрен бер-береһенә ҡаға-ҡаға, өшөгән аяҡтарын йылытты. Туң иҙәндә ҡапыл тайып киткәс:

— Баймырҙа клубының иҙәнендә конькиһыҙ ҙа шыуырға була икән, — тип шаяртып ҡуйҙы.

Райком секретары Любушкинды был яҡтарҙа бала сағынан уҡ бик яҡшы беләләр. Уның атаһы Василий Любушкин заманында алтын промышленниктары — татар миллионерҙары Рәмиевтәрҙә штейгер, йәғни тау мастеры, булып хеҙмәт иткән. Үәрәш, Баҡыртау, Уртазымка, бынан алты-ете саҡрымда ятҡан Семеновка приискыларында урындағы халыҡ, тамаҡ хаҡына ялланып, алтын йыуған. Шул ваҡытта атаһының кырандасына ултырып йөрөгән һары малай Витя Любушкин — хәҙер партия райкомының беренсе секретары. Уны бала сағынан ауыл ҡарттары яҡшы хәтерләй. Бына урта рәттә ултырған бер нисә ҡарт алға килеп, Любушкин менән күрешеп, иҫәнлекһаулыҡ һорашты, уның ата-әсәһенең хәл-әхүәлен белеште. Улар араһынан бер ҡартырағы:

— Шәпме, Виктор улым? — тип ебәрҙе. Любушкин таптаҙа башҡорт телендә:

— Бик шәп, бабай, үҙең нихәл? — тип яуап ҡайтарҙы. Был диалогҡа бер кем дә аптыраманы, сөнки малай сағында Виктор шартлатып башҡортса һөйләшеп йөрөгән кеше ине.

Ҡыҫма билле ҡара тун, түбәһе хром менән ҡапланған ҡаракүл бүрек кейгән, төҫкә-башҡа бик сибәр, йәш сырайлы, кәүҙәһе спортсменға оҡшаған район башҡарма комитеты председателе Хатип Әхмәҙиев то урынынан торҙо. Ул, өшөгән ҡулдарын ыуғылап, бер-ике мәртәбә шапылдатып һуғып алды.

— Әйҙә, әйҙә иптәш председатель, клубыңда коньки шыу. Башҡа урындарҙа ла клуб иҙәне ошондай булһа, ҡыш каток эшләтеп мәшәҡәтләнеүҙең хәжәте юҡ. Һине маҡтай-маҡтай, әйҙә, туң иҙәндә шыуа бирһендәр, — Любушкин, ҡабарған асыуын үҙ председателенән алырға теләгәндәй итен, әйтеп ҡуйҙы. — Ҡайҙа олаҡты колхоз председателе булған бәндә? Саҡырып килтерегеҙ әле, — тип, пальтоһының яғаһын торғоҙоп, һыуыҡ стенаға һөйәлеп төнәп ултырған Сибай зонаһы буйынса райком секретары Зәки Танашевты торғоҙҙо. Табаҡтай ҡып-ҡыҙыл битендә бөрсөк-бөрсөк тирҙәре сыҡҡан, йыш ҡына ауыҙынан шайтан ашы еҫе сығып тора торған, һәр ҡасан эләгеп-йығылып, ашығып йөрөүсе Мостафа Морапталов был юлы ла йүгереп килеп, Любушкин алдына баҫты.

— Йә, иптәш Морапталов, колхоз йыйылышын бөгөн

башлайбыҙмы? Ана, тимер сыбыҡҡа эленеп ҡуйған ике шәмеңдең кәрәсине бөтә бит, — тип асыу ҡатыш ирония менән председателгә һорау бирҙе Любушкин.

— Сичас, сичас, Виктор Вәсилич, вот-вот уже идут, баймурзинские бәлшәвикп всегда так: после всех приходят, зато раньше всех уходят, — тип йылмайып һүҙен дауам итте теге. — Карасин не кончится, его припасли много, вон, силый видра за печкой стоит. Може бит, Виктор Вәсилич, чай пӧпьете, чай готовый, — тине.

— Тәүҙә эш эшләргә кәрәк. Чай потом. Сәй эсеп ултыра торған ваҡыт түгел. Давай халыҡтарыңды тиҙләт.

Морапталов, өтә баҫып, тағы ла клубтан сығып юғалды. 15—20 минуттан, Баймырҙаның да киләһе кешеләре килеп бөткәс, йыйылыш башланып китте.

Клуб мөдире Сәлимов ҡыҙыл буҫтау менән ҡапланған өҫтәл өҫтөнә, ҡайҙандыр табып, өсөнсө утыҙлы шәм килтереп ултыртты. Уның ҡыуығы тирәһендә устарын бер аҙ тотоп, райсовет председателе Әхмәҙиев йылынған ҡулдарын ыуалап алды ла:

— Иптәштәр! «Илдә бөртөклө ашлыҡ етештереүҙе артабан арттырыу, сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү тураһында» КПСС Үҙәк Комитетының февраль — март Пленумы ҡарары һәм Баймаҡ районы ауыл эшсәндәренең бурыстары хаҡында» һүҙ район комитетының беренсе секретары иптәш Любушкинға бирелә, — тине.

Өҫтәл артынан тороп, өҫ кейемен һәм бүркен сәхнә шаршауы ҡырындағы сөйгә элде лә Любушкин ул аяҡ баҫҡан һайын һелкенеп торған, фанера менән көпләнгән трибуна артына баҫты, һул ҡулы менән Верховный Совет депутаты значоғын төҙәтте, уң ҡулы менән һирәгәйә башлаған ерән сәсен артҡа һыйпап алды ла, тамағын ҡырып, докладҡа кереште.

— Сентябрь Пленумы ҡарарҙарында әйтелгәнсә, партия ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға һәм күтәреүгә ныҡ көс һалды. Ләкин илебеҙҙең халыҡ хужалығын артабан үҫтереүҙә, совет кешеләренең көнкүрешен эҙмә-эҙ яҡшыртыуҙа ауыл хужалығының артта ҡалыуы ныҡ ҡына тотҡарлыҡ булып тора. Һеҙҙең үҙегеҙгә мәғлүм, Пленум был мөһим тармаҡтағы етешһеҙлектәрҙе тикшерҙе һәм мөһим саралар билдәләне. Барыһынан алда ауыл хужалығына һуғыш бик ҙур зыян килтерҙе. Уны аяҡҡа баҫтырыу совет халҡынан ғәйәт күп көс талап итте. Ошоға тиклем беҙҙең илебеҙ индустрияны ла, еңел промышленность ла һәм ауыл хужалығын да барыһын берҙәй тигеҙ итеп үҫтерә алманы, сөнки беҙҙең ундай мөмкинселегебеҙ булманы.

Һуғыштан алда ауыл хужалығы иҫәбенә ауыр индустрияны үҫтереүгә күберәк иғтибар ителде. Шуға күрә беҙгә хеҙмәт көнөнә аҡсалата тинләп, игенләтә грамлап бүлергә тура килде. Ауыл халҡының игеп игеп тамағы туймаған, киндер, етен, мамыҡ сәсеп йүнле кейем кейемәгән осраҡтары ла булғыланы. (Ошо урында докладсының һүҙен ҡеүәтләп, алда ултырыусы ауыл ҡарттары баш һелкеп алды.) Быны беҙ бер кемдән дә йәшермәйбеҙ, был бер кемгә лә сер түгел. Сөнки беҙгә суйын, ҡорос ҡоя торған домналар, трактор, самолет һәм ил бойондороҡһоҙлоғон яҡлау өсөн танкылар, хәҙерге ҡорамал эшләп сығара торған заводтар кәрәк булды. Әгәр ошолай эшләмәгәндә, беҙ Гитлер фәскәрҙәрен еңә алмаған булыр инек, ошо тыныс, иркен тормошто күреү насип булмаҫ ине.

— Знамо, знамо, — тигән өҙөк-өҙөк бер нисә тауыш ишетелде.

— Ауыл хужалығы продукттарының үҙкиммәте, колхоз, совхоз производствоһының килемлелеге менән хисаплашып торорға илдә ваҡыт та, мөмкинлек тә булманы. Бөтә юғары квалификациялы кадрҙар промышленность менән мәшғүл булды. Икмәк, ит, һөт һәм йәшелсә етештереү күпмегә төшә? Улар хужалыҡҡа төшөм бирәме, әллә зыян ғына килтерәме? Тәбиғәт, климат йәки тупраҡ шарттарына ҡарап, теге йәки был зонала, теге йәки был хужалыҡта ниндәй культура сәсеү файҙалыраҡ, ҡайһы тоҡом мал үрсетеү ҡулайлыраҡ? Был мәсьәләләрҙең барыһын да дәүләт планы ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Иген, малсылыҡ продукттары етештереү ни хаҡҡа ғына төшмәһен, дәүләт планын һис һүҙһеҙ үтәү закон көсөн алды. Әлбиттә, беҙ башҡаса эшләп алманыҡ, сөнки ул шарттарҙа был берҙәнбер дөрөҫ юл ине. Йыш ҡына, билде ҡайыш менән һыға быуып, түҙергә тура килде, ләкин беҙ дошманды еңдек.

Залда:

— Дөрөҫ, бик дөрөҫ! Тап шулай булды! — тигән тауыштар яңғыраны.

— Илгә икмәк, малсылыҡ продукттары әлдән-әле күберәк кәрәкте. Ләкин ауыл хужалығы продукттарына үҫәбарған талап экономик закондарға ҡапма-ҡаршы килә башланы, был продукттарҙы әҙерләү хаҡының үтә түбән булыуы уларҙы етештереүгә стимул бирмәне. Ғөмүмән, ауылдың был продукттарҙы етештереүгә матди ҡыҙыҡһыныуы түбәнәйҙе. Планлаштырыу эше ныҡ үҙәкләштерелде. Мәскәүҙәге план органдары Өфөгә, ә Өфө — районға, шул иҫәптән беҙҙең районға, алдан әҙерләп ҡуйған план төшөрҙө. Тәбиғи шарттарҙы яҡшы белгән урындағы работник-

тарҙың фекере һанға һуғылманы. Баймаҡ районы хужалыҡтары план үтәү маҡсатында ғүмерҙә үҫмәгән һары етен, күкһағыҙ менән булашты. Люцерна сәсәһе урынға — костер, костер сәсәһе урынға клевер сәсте.

Күп колхоздар МТС-тарға натуралата түләү, хөкүмәткә ауыл хужалығы продукттары тапшырыу буйынса йылдың-йылы бурыслы булып ҡала килделәр.

Шул арҡала иҡтисади яҡтан ярайһы ғына алға киткән колхоздар ҙа аҡһай башланы, сөнки артта ҡалған, хөкүмәт менән иҫәпләшә алмаған колхоздарҙың пландарын алдынгы колхоздарға йөкмәттек.

Бына быларҙың барыһын да иҫәпкә алып, хөкүмәт ауыл хужалығының иң мөһим продукттарын әҙерләү һәм һатып алыу хаҡтарын байтаҡҡа арттырҙы. Ауыл хужалығы производствоһын планлаштырыуҙа колхоздарҙың хоҡуҡтарын киңәйтте. Колхоздар тарафынан мәжбүри рәүештә иген, йәшелсә, картуф һәм майлы культуралар орлоғо тапшырыуҙың планы кәметелде. Малсылыҡ продукттарын тапшырыу планы колхозсыларға ла байтаҡ аҙайҙы. Пландан артҡан продуктты колхоздар һәм колхозсылар хәҙер юғары хаҡ менән дәүләткә һатыу хоҡуғына эйә булды. Был саралар ауыл хужалығы продукттарын етештереүҙе арттырыу өсөн ҙур стимул буласаҡ.

Ауыл хужалығының матди-техник базаһын нығытыу, киләһе ике йыл эсендә уға капитал һалыуҙарҙы арттырыу һәм юғары квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү күҙ уңында тотола. Колхоздарҙы етәксе кадрҙар менән нығытыу маҡсатында тәжрибәле белгестәр иҫәбенән 20 мең коммунист председатель итеп ебәрелде.

Ошо урында президиумда ҡыҙара бүртеп доклад тыңлап ултырған колхоз председателе Мораптaлов, әйтерһең дә, уның артына кемдер энә менән төрткән кеүек, тертләгәндәй, ултырғысынан кинәт ҡалҡынып ҡуйҙы.

«Эш былайға киткәс, мине лә ҡалдырмаҫтар, ахырыһы. Колхозығыҙ ғүмер баҡый артта һөйрәлә, районды артҡа тарта, тип пленум, актив һайын тылҡып теңкәне ҡороталар. Әгәр районға ситтән берәр картузлы инженер йорат килеп төшһә, күҙе лә йөҙө, райком ул әҙәмде туп-тура ошонда ебәрәсәк. Теге ваҡытта әллә нишләп кенә шул «Йылайыр» совхозына ҡушылып ҡуйылманы. Асыҡ ауыҙ, һармаҡ, — тип ул үҙ-үҙен әрләп алды. — Әгәр шул совхозға ҡушылып ҡуйһаҡ, ошо көндә дәдәң дүрт ауылдың бына тигән управляющийы булып, директорҙың йылы ҡанаты аҫтында ел-ямғырһыҙ йәшәп ятыр ине. Мәжнүн», — тип һуҡранды эсенән.

Залда ултырған бөтә халыҡ: «Ә-ә, һиңә лә тиҙҙән көн килеп етә икән», — тип уға төбәлеп ҡараған төҫлө тойолдо.

Ә теге ваҡытта бына ниндәй хәл булған ине...

«Яңы тормош» колхозы иҡтисадының йылдан-йыл насарая барыуын, 20 мең гектар ерҙең күп өлөшө файҙаланылмай ятыуын һәм уның «Йылайыр» совхозы менән бер ыҙандан булыуын күҙ уңында тотоп, район етәкселәре ул колхозды ҡушыу мәсьәләһен күтәрҙе. Өлкәнән рөхсәт алғас, ошо уҡ клубта колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы булды. Әлбиттә, был йыйылышҡа совхоз директоры Нәҡиев тә саҡырылмай ҡалманы. Алдан кәңәшләшеү буйынса, ул колхозсылар алдына сығып, совхоз системаһының өҫтөнлөгөн, матди ҡыҙыҡһындырыу һәм хеҙмәткә түләү принциптарын бәйнә-бәйнә һөйләп аңлатырға тейеш ине.

Райком секретары ышандырырлыҡ дәлилдәр килтереп һүҙ һөйләгәндән һуң, колхозсылар ҡушылырға риза булып та бөткәйне инде. Тап шул саҡта Нәҡиевте трибунаға саҡырҙылар.

Сентябрь айы булыуына ҡарамаҫтан, өҫтөнә иҫкереп йылтырай башлаған ҡара фуфайка, һырылған салбар, башына күн тышлы кәпәс кейгән мыҡты, тулы кәүҙәле, йәйпәк битле совхоз директоры, клуб иҙәнендә үҙ артынан кирза итектәренең бысраҡ эҙҙәрен ҡалдырып, трибунаға менеп баҫты.

— А что я могу сказать? — тип залды төпкә батҡан ҡыҫыҡ күҙҙәре менән һөҙөп ҡарап алды ла русса һүҙ башланы. Ләкин залда бер рус кешеһе лә юғын һиҙеп ҡалды, буғай, башҡортсаға күсергә мәжбүр булды. — Совхоз системаһы, эш хаҡын нисек түләү тураһында һөйләп тормайым, ул нәмәләр һеҙҙең һәр ҡайһығыҙға мәғлүм, сөнки һеҙҙең күп кенә туғандарығыҙ, таныштарығыҙ миндә эшләй. Һеҙгә икенсе нәмә лә мәғлүм: уларҙың көткән донъяһы ла, кейем-һалымы ла, конечно, һеҙҙекенән яҡшыраҡ, алған эш хаҡы ла һеҙҙең килемгә ҡарағанда сағыштырғыһыҙ юғары. Ләкин бер кемгә лә йәшерен-батырын түгел, улар бит, һеҙҙең кеүек, өйҙәрендә ҡабырға серетеп, ҡояш һауалағансы йоҡлап ятмайҙар, көнө-төнө эш өҫтөндә.

Директорҙың бөтә колхозсыларҙы ла бер бизмәнгә һалып, барыһын да берҙәй ялҡаулыҡта ғәйепләп, үҙенең тупаҫ һүҙе менән мөһөр баҫып ҡуйыуы залдағы кешеләрҙе һағайта төштө, колхозда тырышып эшләгән ҡайһы берҙәренең кикрек остары ҡыҙара биреп тә ҡуйҙы.

— Һеҙҙә, йәғни колхозда, — тип һүҙен дауам итте директор,— эшләмәйенсә лә йәшәп була бит, уларҙың ҡайһылары хатта яҡшыраҡ та йәшәйҙәр, һеҙҙә үҙе теләп,

үҙ ихтыяры менән билдәләнгән эшкә ваҡытында сығыу тигән тәртип юҡ.

Залдағы халыҡтың кәйефе ҡырыла башлағанын тоҙоп ултырған райком секретары түҙмәне:

— Һин нимә? Уларҙы совхозға ҡабул итергә килдеңме, әллә тәнҡитләп, кире ҡайтып китергә самалайһыңмы? — тине.

— То и другое. Пока на берегу сухо, в воду не вошли, обо всем надо договориться.

— Пока перед вами я никакой водной преграды не вижу, — тине секретарь, артыҡ бер нәмәгә лә иҫе китмәй, башын ҡырын һалып торған директорға.

Секретарҙың халыҡ фекерен яҡлауын һиҙеп, зал ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан кеүек хәрәкәткә килде, тауыштар, шау-шыу башланды.

— Был ни эш?

— Ул кем? Совхоз директорымы, әллә элекке алпауытмы?

— Ул нишләп бында беҙгә аҡыл өйрәтә?

— Әгәр беҙ ҡушылғас, беҙҙең менән ошолай бөйөрөнә таянып һөйләшә торған булһа, беҙ ике аяғыбыҙҙың береһен дә атламайбыҙ!

— Трибунанан төшөп китһен! Бында һинең совхозың юҡ, был әртил йәки күмәк хужалыҡ тип атала, бында төп хужа — халыҡ! Белдеңме?

Сығырынан сығып барған халыҡты тынысландырыу өсөн йыуан ҡәләменең төбө менән секретарь өҫтәл төйөргә кереште. Бындай хәлде көтмәгән директор әҙерәк йомшарҙы, аптырай төштө.

«Халыҡтың ризаһыҙлыҡ белдереп шаулашыуынан бер аҙ фәһем алғандыр, уйлаңҡырап, ауыҙын үлсәңкерәп асыр инде», — тип уйланы секретарь. Ләкин үҙ һүҙен һүҙ итергә күнеккән директор бирешергә теләмәне, күҙен йомоп, һөжүмгә ташланырға әҙерләнде.

— Һүҙеңде дауам ит, иптәш Нәҡиев, — тине секретарь.

— Бына мин өҫтәп һеҙгә нимә әйтергә тейеш. Әгәр яҡшы эшләһәгеҙ, эш хаҡы ла һәм бөтә тормош шарттары ла булыр. Ләкин беҙҙең совхозда бригадир көн һайын иртән ат арытып, ҡамсыһының осо менән тәҙрә шаҡып, кешене эшкә ҡыуып йөрөмәй. Эш сәғәте иртәнге сәғәт етегә билдәләнгән икән, бер минут та һуңға ҡалмай, һәр кеше эш урынында булырға бурыслы. 20 минутҡа һуңлайһың икән, мин үҙ приказым менән бер юлға шелтә, икенсе тапҡыр һуңлаған кешегә ҡаты шелтә иғлан итәм. Әгәр ҙә ундай тәртип боҙоу тағы ла ҡабатлана икән, мин ул ялҡауҙы тотам да эштән ҡыуып сығарам. Минең, һеҙ-

ҙәге кеүек, фәлсәфә һатып, кешегә аҡыл өләшеп ултыра торған идарам юҡ. «Йылайыр» совхозында демократия бына мин булам, — тип бүркен йомарлап тотҡан ҡулы менән күкрәгенә һуғып алды.

Шаулаша башлаған халыҡ араһынан кемдеңдер ҡалын тауышы яңғыраны:

— Ә закон?

— Законмы? Уныһы — Әғлә Рахманович була, — тине тоноҡ тауышына баҫым яһап, директор.

— Нимә һуң ул — Әғлә Рахманович?

— Нимә түгел ул, кем тип һорарға кәрәк! Уныһы ла мин булам, йәғни законы ла мин булам, — тип дөрөҫләп ҡуйҙы совхоз директоры.

Йыйылышты йәһәт кенә ябып, ризаһыҙлыҡ белдереп шаулашҡан халыҡты таратырға тура килде.

Ошо ваҡиғанан һуң оҙаҡ ваҡыт совхозға ҡушылыу мәсьәләһе һүнеп торҙо.

Бына әле килеп, тағы дөйөм йыйылыш бара, әммә ҡуйылған мәсьәлә бөтөнләй икенсе йүнәлештә. Любушкин, тәжрибәле белгестәр иҫәбенән 20 меңҡ коммунист председатель итеп ебәрелде, тигән һүҙҙәренең залға ниндәй йоғонто яһағанын күрергә теләгәндәй, саҡ ҡына тынып торҙо ла дауам итте:

— Ошоға тиклем трактор бригадалары составында колхоздарҙа эшләгән тракторсылар МТС-тарҙың даими штатына күсерелде, йәғни улар бөгөнгө көндән башлап «эшсе» тип атала һәм эшселәр синыфына инә.

Урта эскәмйәлә ултырған бер төркөм тракторсылар, «ура» ҡысҡырып, бүректәрен түшәмгә сөйҙө.

— Бынан тыш, МТС һәм ул хеҙмәтләндергән колхоздарҙа партия-сәйәси эште алып барыу өсөн һәр бер МТС-та партработниктар төркөмө буласаҡ. Уның башында МТС зонаһы буйынса райком секретары торасаҡ. Бына һеҙҙең Сибай зонаһы буйынса райком секретары, ана, өҫтәл артында ултырған иптәш Зәки Микалович Танашев була, — тип докладсы уның яғына боролоп ҡараны. Пальтоһын яурынына һалып ултырған йәмшегерәк танаулы һары кеше аяҡ үрә баҫты. Залдағы халыҡ, зона буйынса райком секретарын ҡотлап, геү килеп ҡул сабып алды. Йәшел френч һәм галифе салбар кейгән яңы секретарь френч итәктәрен аҫҡа тартҡылап алды ла, бер аҙ уңайһыҙланып, урынына ултырҙы.

— Бәлки, тәнәфес яһап алырбыҙ? — тине лә Любушкин өҫтәлдә ултырған һыу графинына үрелде.

— Юҡ, юҡ, иптәш секретарь, тәнәфес иғлан итһәк,

халыҡ тарала башлар, бер юлы бөтөрөп ҡуйыу яҡшыраҡ булыр, — типе Морапталов.

— Кемгә был ҡарар оҡшамай икән, һыпырып ултырһын, ана ята юлы! Йыйылыштан ҡасҡан әҙәмдәрҙең беҙгә ла хәжәте бер тин көмөш. Колхоз йөгөн иңенә һалып тартҡан кеше уның йыйылышынан да ҡасып маташмаҫ, кемдәргә колхоздың яҙмышы барыбер, беҙ үтәнән-үтә күреп торабыҙ, — тине Любушкин.

Тәнәфес иғлан ителде. Ләкин кешеләр тиҙ генә урындарынан ҡуҙғалманылар. «Йә сыҡҡан кешене ҡағыҙға теркәп ҡуйыуҙары бар», — тип уйланы, ахырыһы, ҡайһы берҙәре.

Тәнәфестән һуң бөтә кеше ултырышып бөткәс, докладсы ярты стакан һыу эсеп алды ла тағы һүҙгә тотондо:

— Февраль — март пленумының ҡараҙарына күҙ ташлағанда, беренсенән, промышленность тауарҙарын ваҡлап һатыу хаҡтарын, йәғни һеҙ, ауыл халҡы, һатып ала торған әйберҙәрҙең хаҡтарын уртаса 11 процентҡа арзанайтыу менән бергә һеҙ дәүләткә тапшыра һәм һата торған продукттарҙың хаҡы байтаҡҡа арта. Аңлашыламы? Был һеҙгә файҙалымы? — докладсы залға ҡараш ташланы.

— Аңлашыла, аңлашыла, билдәле, ҙур файҙа!—тигән тауыштар ишетелде.

«Һеҙ үҙ мәнфәғәтегеҙ тураһында һүҙ барғанда бик тиҙ аңлайһығыҙ», — тип уйлап алды докладсы.

— Икенсенән, дәүләткә мәжбүри тапшыра торған ауыл хужалығы продукттары хаҡына ҡарағанда, уға һатып бирә торған продукттарҙың хаҡы байтаҡҡа артты, һеҙ тапшыра торған һөттөң литрына дәүләт ошоға тиклем күпме түләне? — тип һораны докладсы тынып ҡалған залда ултырыусыларҙан. Алғы рәттә ултырыусы МТФ работниктарынан урта йәштәрҙәге бер ҡатын:

— Три копейки на литр, — тип ҡысҡырҙы.

— Дәүләт хәҙер һатып алына торған һәр литр һөткә тәңкә ярымдан алып ике һумға тиклем хаҡ ҡуйҙы. Үҙегеҙ хисаплап ҡарағыҙ, ул күпмегә артыҡ була?

— Китһәнә, булмаҫ, күпмегә икәнеп хисаплап сығарыу өсөн беҙҙең баш та етерлек түгел бында.

— Ай-һай, был хәбәр ҡабыҡ ҡағып һайыҫҡан осороу ғына булмаһа ярай ҙа һуң?

— Ул аҡсаны ҡайҙа ҡуйырбыҙ икән? Бисәнең ойоғона тултырып барырға тура килер инде!

— Ҡуйырға урын тапмаһаң, көршәккә йыйын барырһың!

— Өсөнсөнән, малсылыҡ продукттарын дәүләткә мәж-

бүри түләү буйынса колхоздарҙың үткән йылдарҙан ҡалып килгән бурыстары бөтөрөлә.

«Яңы тормош» колхозының муйындан дәүләт бурысына батып ултырғанын үҙе генә аңлаған председатель, шатлығынан эркелеп сыҡҡан күҙ йәшен һөртә-һөртә, залда ултырған колхоз хисапсыһын күҙе менән эҙләп тапты ла, ҡулын һоноп:

— Ишеттеңме, Мәжитов? Алла бойорһа, мәңгелек картотеканан ҡотолоп, банктағы иҫәбебеҙҙә аҡса күрер көнөбөҙ бар икән! — тип ҡысҡырҙы.

Һуңғы өс-дүрт йыл эсендә «Яңы тормош» колхозы банк аша бер ниндәй ҙә финанс операцияһы алып бара алманы, уның тапҡан-таянған һәр тине бурысын ҡаплауға китеп торҙо. Колхоз бөтә кәрәк-ярағын ҡул осонан «ҡара касса» аша алып барҙы.

— Ул ғына ла түгел, — тип дауам итте докладсы, — колхозсыларҙың шәхси хужалыҡтары түләй алмаған ауыл хужалығы һалымы буйынса үткән йылдарҙың аҡсалата бурыстарын һәм ит, һөт һ. б. продукт буйынса бурыстарын дәүләт бөтөнләй һыҙып ташланы.

— Бына был, исмаһам, ярҙам, үәт был ҡарар, исмаһам.

— Ай-һай, хөкүмәт башында беҙҙең хәлде бик яҡшы белгән аҡыллы кешеләр ҙә бар икән, мәтри малай!

— Мең йәшәһен инде хөкүмәт!

— Ошо налогы, ит-һөт һалымы меиән крәҫтиәндең һенәһен ҡороттолар бит. Бына хәҙер, газ камераһынан сыҡҡан ҡорсаңғы ат кеүек, таҙарынып ҡалырбыҙ инде, исмаһам.

Зал умарта ҡорто кеүек шау-гөр килеп, гөжләп алды. Халыҡ бер аҙ тынысланып, тауыштар һүрелә төшкәс, докладсы һүҙең дауам итте.

— Бына был саралар, атап әйткәндә, дәүләткә игенселек һәм малсылыҡ продукттары һатыуҙың күләмен кәметеү, был продукттарҙы юғары хаҡ менән дәүләткә күберәк һатыу мөмкинлеген бирҙе. Беҙ ҙә, әлбиттә, күберәк һатырбыҙ тип торабыҙ.

— Былай булғас, һатмай ни, һатырбыҙ. Быға тиклем бушҡа тигәндәй тапшырып килгәнде нишләп юғары хаҡҡа һатмаҫҡа, ти?

— Һатырбыҙ, һатырбыҙ! Кейем-һалым, донъя кәрәк-ярағы алырға аҡса кәрәк тә баһа!

Докладсы һүҙен дауам итте:

— КПСС Үҙәк Комитеты яҡын йылдарҙа иген әҙерләү һәм һатып алыуҙы, 1953 йыл менән сағыштырғанда, 35—40 процентҡа арттырыуҙы күҙ уңында тота. Бының өсөн ил

буйынса 13 миллион гектар сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәр үҙләштерелергә тейеш. Был ерҙәрҙән 1955 йылда 1 миллиард 100 миллион бот иген алыу һәм шул игендең 800—900 миллион ботон дәүләткә тапшырыу планлаштырыла, бының өсөн сиҙәм күтәреүсе райондарға 120 меҫ трактор, 10 меҫ комбайн бирелергә тейеш.

Ҡалаларҙан ауыл хужалығына китеүсе кешеләргә өс айлыҡ эш хаҡы түләнә һәм уларҙың юл сығымдарын дәүләт үҙе күтәрә.

— Әгәр улар колхозға килеп, бер аҙ ҡағылып-һуғылып, кире ҡайтып китһәләр, нисек була? Ундай хәлдә ул әҙәмдәргә ҡарата ниндәй сара булыры яҙылмағанмы шунда?

— Яҙылыуын-яҙылмаған, ләкин ундай хөкүмәт алдап йөрөгән кешеләр, билдәле, бер язаһыҙ ҡалырға тейеш түгелдәр.

Сиҙәм үҙләштергән хужалыҡтарҙа эш хаҡына түләү принциптары ла ҡаралған. Мәҫәлән, планлаштырылғандан юғарыраҡ уңыш алған хәлдә, шуның 30 процеНты, колхоз йыйылышы ҡарары менән, колхозсыларға өҫтәмә хаҡ рәүешендә түләнә.

— Башта уның планлаштырылған игенен алырға кәрәк әле. Уныһы хәҙергә беҙҙә булмай инде ул!

— Бынан тыш, сиҙәм ерҙәрҙең игенен һатып алынған аҡса доходының 25 процентын колхозсыларға бүлеп бирергә рөхсәт итергә.

— Аллаға шөкөр! Байыйбыҙ икән.

— Ағай-эне, докладты тыныс ҡына тыңлап ултырайыҡ әле. Һорауҙарығыҙ булһа, әҙерләп ултырығыҙ, аҙаҡтан бирерһегеҙ, — тине йыйылышты алып барыусы район Советы башҡарма комитеты председателе Хатип Әхмәҙиев.

— Әйҙә һорахындар, төшөнһөндәр, мәсьәлә бик етди бит, уларҙың һәр икеһенә ҡағыла, — тине докладсы...

— Быларҙан тыш, МТС һәм совхоз работниктарын премиялау өсөн өҫтәмә фонд ҡарала. Сиҙәм совхоздарының эшселәре, инженер-техник работниктары, үҙҙәренең эш хаҡтарынан тыш, 15 процент өҫтәмә эш хаҡы аласаҡтар.

Бына февраль — март пленумының төп положениелары ошоларҙан ғибәрәт. Әйтелгәндәрҙән сығып, беҙҙең республика һәм район хеҙмәтсәндәре алдында ла мөһим һәм ҡатмарлы бурыстар тора.

Быйылғы йылда республика колхоздары һәм совхоздары 165 меҫ гектар сиҙәм һөрөргә тейеш. Башҡорт АССРының инициативаһын КПСС Үҙәк Комитеты һәм Совет хөкүмәте хупланы. Ә Башҡортостан бер нисә йыл эсендә бөтәһе 400 меҫ гектар яңы ер үҙләштерергә бурыслы, шул

иҫәптән колхоздарҙа 265 мең гектар, совхоздарҙа — 100 мең, йылҡысылыҡ заводтарында 35 мең гектар.

— Үҙебеҙҙең районда ниҙәр эшләнергә тейеш һуң, шуны белгебеҙ кило?

— Хәҙер ул турала ла әйтеп китербеҙ. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү өсөн беҙҙең районға 19 мең гектар план билдәләнгән. Был, әлбиттә, үтәрлек эш. Ләкин бына беҙ, — район Советы башҡарма комитеты председателенә ишара яһай, докладсы дауам итте, — үҙ мөмкинлектәребеҙҙе хисаплап ҡаранык та бөртөклө ашлыҡ культураларын сәсеү майҙанын ошо ерҙәр иҫәбенән 43 мең гектарға арттырырға ҡарар иттек. Был һан түбәндәгесә бүленә: райондың 22 колхозы— 19,2 мең, «Йылайыр» совхозы — 6,6 мең, «Һәүәнәк» итселек-һөтсөлөк совхозы — 4,4 мең, 46-сы йылҡысылыҡ совхозы— 13 мең гектар. Колхоздар араһында иң күп сиҙәм һәм һөрөлмәй ятҡан ерҙәрҙе үҙләштереүсе һеҙҙең «Яңы тормош» буласаҡ. Быйыл һеҙ 2000 гектар ерҙе яңынан һөрөп, шуның 500 гектарына сәсергә тейешһегеҙ. Бына шуға күрә лә сиҙәмгә арналған тәүге йыйылышты һеҙҙә үткәрергә хәл иттек.

Залдағы халыҡ тағы хәрәкәткә килде.

— Нисек була һуң ул? Беҙҙең ошоға тиклем сәскән бөртөклө ашлыҡ майҙаны 1500 гектарға ла етмәй. Сәсеү-лектәрҙе икеләтә арттырабыҙ буламы ни инде?

— Эйе, һеҙҙең игенселек майҙаны ике тапҡырҙан да күберәкко артырға тейешле, һеҙҙә ундай мөмкинлектәр бар. Ә, ғөмүмән, район буйынса бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү майҙаны, 1940 йыл менән сағыштырғанда, ике тапҡырҙан күберәккә артырға тейеш. Быныҡ өсөн махсус 10 трактор бригадаһы ойоштороласаҡ, шул иҫәптән Сибай МТС-ында 6 бригада эшләйәсәк. Бөгөнгө көнгә дәүләт тарафынан районға бүленгән ун ДТ тракторы килде лә инде. Бынан тыш, «Туймазынефть» тресының 2-се автотранспорт конторанынан ун С-80 тракторы, Баймаҡ баҡыр комбинатынан шул уҡ маркалы 5 трактор, «Башмедьстрой» тресынан 4 трактор килергә тейеш, һөрәһе ерҙәрҙе билдәләп, уларға агроном картаһын төҙөп, әҙерләп ҡуйығыҙ. Эшкә киләһе иптәштәргә тормош шарттары тыуҙырылһын. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, улар ҡала кешеләре, уларҙы ыумас эсереп эш эшләтеп булмай.

Хәҙер Пленум ҡарары нигеҙендә район колхоздарына һәм совхоздарына ауыл хужалығы белгестәре килә башланы: 38 тракторсы, комбайнсы, шофер, 16 агроном, 13 зоотехник алдыҡ та инде. ВЛКСМ-дың район комитетында ауылға китергә теләүселәрҙән 200 ғариза бар. Хәҙер уларҙы һайлап алыу эше бара. Элекке директор Витушкнн

иптәш урынына һеҙгә, йәғни Сибай МТС-ына, директор булып Куйбышев тимер юлының депо начальнигы, стажлы коммунист Резниченко Иван Леонтьевич килде. Ғаиләһен күсереү мәшәкәте артынан йөрөп, бөгөнгө йыйылышта ҡатнашлыҡ итә алманы. Шулай итеп, сентябрь, февраль—март пленумдары ҡарарҙарының йылы, көслө һулышы беҙҙең тарафтарға ла килеп етте.

...Доклад бөтөү менән, Әхмәҙиев тәнәфес иғлан итте. Кешеләр төркөм-төркөм йыйылып һөйләшә, фекер алыша. КПСС Үҙәк Комитетының ауыл хужалығын артабан үҫтереү тураһындағы Пленум ҡарарҙары артыҡ шарлауыҡһыҙ тыныс ҡына, ҡайһы бер урындарын ылымыҡ, ләм баҫа башлаған йылға кеүек ағып ятҡан ауыл тормошона йән өрҙө, таҙа, һалҡынса һауа бөрктө, кешеләрҙә яңы рух һәм дәрт уятты.

— Йә, ағай-эне, һөйләүҙәргә күсәйек! Кемдә ниндәй һорауҙар һәм фекерҙәр тыуҙы, әйтегеҙ. Бында сит кешеләр юҡ, барыһы ла үҙебеҙҙеке, тартынып тормағыҙ! —тип йыйылышты алып барыусы Әхмәҙиев текләп залға ҡараны. Ләкин халыҡ һүҙ һорарға бик ашығып барманы, уйланды. Сөнки был ҡарарҙар хатта яңғыҙ ҡалып, бер үҙең аулаҡта уйландырырлыҡ тәрән фекерҙәр һалды, яңы хистәр уятты.

— Йә-йә, иптәштәр, ваҡытты бушҡа уҙғармайыҡ! Көн һайын йыйылыш үткәреп булмай бит. Аҙаҡтан һөйләрҙәй булып үкенерһегеҙ ҙә, ләкин һуң булыр, — тип ныҡышты председатель.

Урынынан мыштыр-мыштыр ҡуҙғалып, өҫтөнә тиртун кейгән оло йәштәрҙәге бер кеше сәхнәгә яҡынлашты.

— Әйҙә, ағай, бында трибунаға күтәрел. Әйҙүк, әйҙүк,— тип Әхмәҙиев беренсе һүҙ һораған кешене күтәреп алырҙай булды. Был ҡышын-йәйен колхоз эшенән ҡалмай тырышып эшләгән Биишев ҡарт ине.

— Йә, ағай-эне, шулайтып, ауыҙға һыу уртлаған кеше кеүек, тик ултырабыҙмы ни? Йәштәрҙән көтөлгәйне лә, улар ҙа шымтайып тик ултыра. Бына йыйылыш бөткәс, таң атҡансы уйын ҡороргa ғына шәп улар, — тип бабай үҙ сығышының инеш һүҙен әйтеп ҡуйҙы. — Бына бөгөнгө Любушкин иптәштең беҙгә аңлатҡан Пленум ҡарары дисвительно фәһем алырлыҡ, бик ҡиммәтле һүҙҙәр яҙылған унда. Мин үҙем ошо колхозда, ҡайһылыр ки «Яңы тормош» колхозында, 1930 йылдан бирле эҡлин булып торам. 1925 йылдарҙа Баймырҙа, Ҡарамалы яҡтарында беренсе булып коммуна төҙөйөк, тип, иртә ҡысҡырған әтәс кеүек, кеше өгөтләп йөрөгән өсөн «Камун Фәйзелғаян» тигән ҡушамат та йөрөтәм. Уға мин үпкәләмәйем, айхайым да

юк. Әйтһендәр. Эш унда түгел. Бына шул колхозға ингәне бирле иптәш Любушкин, иптәш Әхмәҙиев, — бабай, тиртуныңың оҙон еңенән уң ҡулын сығарып, уларга ҡарап кәкре бармаҡтарын һоноп дауам итте, — бер көн дә эш ҡалдырғаным юк. Бөтә йәшлегем ошо колхозда үтте. Шуға күрә лә ул миңә бик яҡын һәм бик тә эҫе. Колхоз — минең шатлыҡ та, ҡайғы-хәсрәт тә. Был һүҙҙәр раҫ, бер кем дә бикәр тип әйтә алмаҫ. Бына аҡ һаҡалымды һәрпәйтеп кенә йөрөһәм дә, мин үткән йыл 470 труддень эшләнем, һәр трудҡа колхоз яртышар килонан иген, 30-ар тин аҡса бүлде, ләкин уны ошо көнгә тиклем ала алғаныбыҙ юк. Колхоз калдауаны ла, кассаһы ла буп-буш. Беҙ уны үтәнән-үтә күреп торабыҙ. 20 мең гектар ер — колхоз байлығы— беҙҙең өсөн бер бәләгә әйләнде, сөнки дәүләткә бөтә һалымды гектар башына ҡарап түләйбеҙ бит. Бик тә йонсоноҡ бит, ағай-эне. Тамаҡ яғы ла наҡыҫ, ә кейем тураһында һөйләп тораһы ла юк. Бына ошо елбәҙәк кәзәкейҙән башҡа беҙҙең өҫтә, шабаш, бер кейем дә юк бит, — Фәйзелғаян ҡарт артына әйләнде лә, тиртун салғыйын ҡайтарып, президиум өҫтәле артында ултырған кешеләргә ҡырҡ ямаулы кәзәкейен күрһәтте. — Тормош булғас, онотҡанда бер булһа ла ҡунағына ла йөрөргә тура килә. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ҡунаҡҡа кейеп барырлыҡ өҫ кейемебеҙ ҙә юк бит беҙҙең. Берәр яҡҡа барыр булһаҡ, клубта спектакль ҡуйған һымаҡ, бөтә ауыл буйлап, өҫтөбеҙгә кейем йыябыҙ. Башҡа кейгән ҡырпыулы кәпәстән алып аяҡтағы калушҡа тиклем йәмғеһе лә «дөйөмләштерелгән» кейем булып сыға. Тиреһе йоҡараҡ әҙәмдәр кеме Сибай, кеме Мәғнит ҡарап, колхозға һырт биреп ҡастылар. Ә беҙ, тиреһе бешерәктәр, йәғни күпселек, нисек кенә ауыр булмаһын, үҙ колхозыбыҙҙы, тыуған төйәгебеҙҙе ташламанык.

— Рәхмәт, бабай, маладис, күп йәшә!

Любушкиндан башлап бөтә зал бабай хөрмәтенә ҡул сабып алды.

Бабайҙың күңеле тулып, бер нисә секундҡа йомшарып алғайны ла, ләкин әҙерәк ҡалтыранған тауыш менән һүҙен дауам итте:

— Беҙ ҙә бит шул хөкүмәт балалары, нишләп һуң ул барыбыҙҙы ла тигеҙ күрмәй икән, тип ошо көнгә тиклем аптырап йөрөлә ине. Бына бөгөн беҙ быныҡ сәбәбенә яҡшы төшөндөк. Барыбыҙҙы ла тигеҙ ҡарап, бер ыңғай күтәрергә, берҙәй кейендерергә, ашатырға хөкүмәтебеҙҙең ҡеүәһе етмәгән икән. Шулайҙыр инде. Ситкә йөрөй торған түгел, үҙебеҙҙең ғаиләлә лә шулай бит. Бөтә бала-сағаны ла бер тигеҙ ҡарап, кейендереп булмай. Шкулға бара торғанына, иҫке-моҫҡо булһа ла, кейем алып бирәһең, өй тирәһендә-

геһенә ямаулы күлдәк-ыштан да ярап тора. Хөкүмәткә завод-фабрикаларҙы төҙәмәйеңсә лә булмағандыр. Кругом дошман бит. Анау яуыз немецте еңеп сығыуы хөкүмәткә, халыҡҡа күпмегә төштә? Барыһы ла һуғыш касафаты. Уны күрҙек инде, башҡа күрһәтмәһен. Бына граждандар һуғышынан һуң туҡтап ҡалған Баймаҡ завутын 1924 йылда ғына ходҡа ебәрҙе бит хөкүмәт. Барыһына ла сирут кәрәк, һуғыш ҡына сирут көтөп тормай. Бына беҙгә лә, ауыл хужалығын күтәрмәккә, сирут килен етте, ахырыһы. Сиҙәм күтәреү мәсьәләһенә килгәндә, был бик тә дөрөҫ ҡарар. Революцияға тиклем ул ерҙәрҙә байҙарҙың өйөр-өйөр йылҡылары тибендә йөрөнө, шулар уҡ меңәр баш һарығын көттө. Ә беҙҙең ише фәҡир-фоҡара ул ерҙәрҙең файҙаһын күрә алманы, дөрөҫөн әйткәндә, ул ерҙәр беҙгә эләкмәне лә. 20 мең гектар ҡыҫыр ятҡан ерҙәр өсөн йыл да икмәген, итен-һөтөн, налогын түләгәнсе, уны һөрөп сәсеп, иген үҫтерергә, мәнфәғәтен күрергә кәрәк. Беҙгә лә, хөкүмәтебеҙгә лә файҙа булыр. Был ҡарар беҙгә бик ятышлы, бик тә ҡулай. Уны хуп күреп ҡабул итергә кәрәк. Мин ҡуш ҡуллап риза, дөрөҫ, бик ваҡытлы ҡарар, — тип ҡарт һүҙен тамамланы.

Залдың күпселеге ҡул сапты.

— Йә, ағай-эне, тағы кемдәр һөйләй? Бына Фәйзелғаян ағай ниндәй матур сығыш яһап ташланы, — тип Әхмәҙиев тағы аяҡ үрә баҫты. Иң артҡы рәттә ултырыусыларҙан кемдер ҡулын күтәрҙе.

— Йә, ағай, ҡыйыуыраҡ, кем исемегеҙ?

— Минең мулла ҡушҡан исемем Ғәбделбасир була. Әгәр рөхсәт булһа, мин дә бер-ике ауыҙ һүҙ әйтер инем.

— Әйҙә, ағай, рәхим ит, әйтә генә күр!

Күҙе ҡөрьән танып, үҙен ауылда тәҡүә генә (уҡымышлы) кешегә хисаплап йөрөгән Ғәбделбасир ҡарт, кәпәсен сәхнә ситенә һалып, тамағын бер нисә тапҡыр ҡырып алды ла һүҙгә кереште:

— Заман ахыры етһә, әҙәмдең кәүҙәһе бер ҡарыш булыр, әммә яһиллығы, уҫаллығы артыр. Тимер атҡа тимер төрәнле һабан егеп, ер аҡтарыр, ер ҡыртышын ашар, тигән боронғо китапта.

— Тимер атта йөрөгөң килмәһә, ағай, йәйәү йөрө, ул сәләмәтлеккә бик файҙалы тиҙәр, — тип ҡысҡырҙы залдағы йәштәрҙең береһе.

— Беҙ нишләп һуң шул ер ҡыртышын ашарға йәбештек әле? Ошоға ҡәҙәр үҙебеҙгә етерлек икмәкте шул сиҙәм аҡтармайынса ла ер эшкәртеп сәсеп тора торғайныҡ бит.

— Эх, ағай, ағай, заманалар үҙгәрҙе бит инде хәҙер.

Собрание шул турала бара бит, — тип ҡысҡырҙылар залдан.

— Сиҙәм алыу, ана, Яйыҡ казактарының кәсебе. Беҙгә ул ҡул түгел. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ сиҙәм, ер ҡыртышына теймәйенсә лә йылҡы, һарыҡ көтөп көн иткән. Тибенлек ҡалмаһа, йылҡы малын кәртәлә көтөп булмай, ул бит һиңә һыйыр түгел. Ул тибен хайуаны. Сиҙәм ала башлағас, колхоздың 220 баш йылҡыһын да бөтөрөргә тура киләсәк. Йылҡы бөттө — беҙ бөтәбеҙ. Борон бушҡа ғына әҙәм байлығын йылҡы башына, өйөр һанына ҡаран һанамағандар. Сиҙәмде, ана, «Йылайыр» совхозы күтәрһен, уларҙың йылҡылары юҡ. Ул сиҙәмде күтәреүен-күтәрербеҙ, ләкин унда иген үҫеү-үҫмәүе ике осло бит әле, уныһы әле, ана, — ҡулын түшәмгә төртөп күрһәтеп, — Хоҙай тәғәлә ҡулында, — тине лә, уның һүҙенә артыҡ ҡолаҡ һалыусы булмағанға асыу иткән кеүек, үҙ урынына барып ултырҙы.

Өҫтөнә пальто, күн бүрек кейгән урта йәштәрҙәге, ҙур ғына кәүҙәле бер кеше һүҙ һораны.

— Ул мал йөрөй торған ерҙе һөрөп бөткәс, малды ҡайҙа көтөрбөҙ һуң? Беҙҙең үҙебеҙ генә түгел, малыбыҙ ҙа сәхрәгә-иркенлеккә өйрәнгән. Бына мин бит Өфө аръяғында эшләп ҡайттым. Ундағы ауылдарҙың ике осона ла ҡапҡа эшләнгән. Уны «баҫыу ҡапҡаһы» тип атайҙар. Ул һәр ваҡыт ябыҡ тора. Шул ҡапҡаны асып ары китһәң, ике аҙымдан игенлеккә эләгәһең, аръяғында баҫыулыҡ башлана, сөнки ер аҙ булыу сәбәпле, ауылдарына терәтеп һөрөп бөткәндәр. Ауыл халҡы үҙ малдарын, муйынына еп бәйләп, юлдың ике яғында ашатып йөрөй. Тормошмо ни ул?! Ә беҙ иртәнсәк тә, кис тә һыйыр һауабыҙ ҙа, ҡапҡаны шар асып, малдарҙы ҡыуа ла сығарабыҙ, һыйырҙар йәшел үләнгә туйып, ушылдап төндә үҙҙәре килеп яталар. Бына был, исмаһам, тормош, хөрриәт! — тип һүҙен тамамланы. Туймазы яҡтарында күпмелер эшләп, «ер тыгыҙлығына тыным ҡурыла» тип кире ауылға ҡайтҡан Ғилметдин.

Ә ҡайһы бер кешеләр тәрәнерәк тә фекер йөрөттө.

— Бына, мәҫәлән, беҙ «Яңы тормош» колхозына ингән Баймырҙа ауылында үҙ алдыбыҙға ғүмер итеп ятабыҙ,— тине элекке уҡытыусы, хәҙер ОТФ мөдире Калимуллин. — Әгәр беҙ сиҙәм үҙләштереп, күпләп иген сәсә башлаһаҡ, беҙҙең ауылды, күҙе лә йөҙө, дәүләт беҙҙе терәлеп ятҡан «Йылайыр» орлоҡсолоҡ совхозына ҡушасаҡ. Даже беҙҙең теләктән ғәйре. Ярай бер мәртәбә ул эштән ҡотолоп ҡалғайныҡ. Был — раз. Икенсенән, беҙ совхозға ҡушыла ҡалһаҡ, беҙҙең ауылға халыҡ телен,

уның ғөрөф-ғәҙәттәрен белмәгән ситтән инженерҙар, ауыл хужалығы белгестәре киләсәк. Шунан һуң беҙ ауыл ара-һында бөтә эш ҡағыҙы йөрөтөүҙе һәм мәктәптәребеҙҙе русса уҡытыуға күсерергә тейешбеҙ. Сөнки ситтән килгән бала-сағаны башҡортса уҡытып булмай бит. Билдәле, был насар түгел, хәҙерге заман фәнен һәм техника ҡаҙаныштарын үҙләштереү өсөн был сара бик тә кәрәкле. Ләкин әле беҙ уға әҙер түгелбеҙ. Мәктәптәрҙе, уның программаһын үҙгәртеп ҡороу беҙҙең өсөн иртәрәк әле, тип әйтмәксемен. Бала тыуғас та, тирә-йүнде, уның күренештәрен үҙ телендә аңларға, үҙ телендә фекер йөрөтөргә тейеш. Ул ғына ла түгел, ул үҙ халҡының йырын-моңон аңларға, ғөрөф-ғәҙәтен белергә, быуындан быуынға ҡала килгән традицияларын үҙләштерергә тейеш. Беҙҙең социалистик төп законыбыҙ быны инҡар итмәй. Шулай булғас, ул мәсьәлә бөгөн көн тәртибендә тормаһа ла, уйланып хәл ҡылыныр-ға тейеш. Ә сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү тура-һындағы КПСС Үҙәк Комитеты һәм хөкүмәтебеҙ ҡарарын беҙ ысын күңелдән хуплайбыҙ, сөнки беҙ бындай әһәмиәт-ле ҡараҙы күптән көтә инек. Һүҙ юҡ, был ҡарар нигеҙен-дә ауыл халҡының тормошо, ғәмәлдә, үҙгәрәсәк, йәғни та-мырынан яҡшырасаҡ.

Кәлимуллиндың сығышын хуплап, залдағы халыҡ дәр-рәү ҡул сапты. Ул баҫалҡылығы, төптән уйлап һөйләүе менән халыҡты үҙенә йәлеп итә. Шуның өсөн дә күп кеше уға ауыр мәсьәләләр ҡаҙәшкә йөрөй, уны ихтирам итә. Уның мәғәнәле һүҙе һәр кем өсөн ятыш.

Кәлимуллиндан һуң бер-ике йәш егет сығып, сиҙәм күтәреү уңайы менән колхозға яңы техника бүлеү, ауыл йәштәре өсөн клуб, уҡыу өйө төҙөү мәсьәләһен күтәрҙе.

Йыйылыш ябылғас та, халыҡ йәһәт кенә таралышып китә алманы, төрлөһө-төрлө мөйөштә ҡаҙәш ҡорҙо, баш ватты, йыйылышта һөйләнмәй ҡалған һүҙҙәр, сиселеп бөт-мәгән йомаҡтар, яуапһыҙ ҡалған һорауҙар йорттарға, айы-рым ғаиләләргә күсте.

Ауыл халҡы уйланды, киләсәккә пландар ҡорҙо. Оҙаҡ та үтмәй, тау ашаһында тәүге сиҙәм яҙының сағыу ҡояшы балҡып сыҡты.

* * *

Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереүҙең һуңғы ва-риантын тағы бер тапҡыр урында тикшереү һәм дөрөҫ-ләү өсөн районға КПСС Өлкә Комитетының ауыл хужа-лығы бүлеге мөдире Әхмәтсолтан Нәби улы Ғилванов килеп төштө. Уға тиклем эшләгән бүлек хужаһы Сыркин ниш-

ләптер ҡапыл ғына эштән бушатылды. «Совет Башҡортостаны» һәм «Советская Башкирия» гәзите битендә Үҙәк Комитеттың сентябрь Пленумы ҡарарҙары баҫылып сыҡҡас та. «Мин ауыл хужалығын күтәреү өсөн колхоз председателе булып үҙ теләгем менән ауылға китәм, республиканың промышленносында һәм идаралыҡ аппаратында эшләгән ауыл хужалығы белгестәрен минең өлгөгә эйәрергә саҡырам»,—тип мөрәжәғәт менән сыҡҡайны. Республика гәзиттәрендә уның йылмайып төшкән ҙур фотоһы ла баҫылғайны. Ләкин республиканың ауыл эшсәндәре уны колхоз председателе сифатында баҫыу офоғонда осрата алманы.

Райком секретарының кабинетында бер аҙ кәңәшләшкәндән һуң, Ғилванов Баймаҡ МТС-ы зонаһында сиҙәм үҙләштереүҙә инициатор — «Ҡыҙыл маяҡ» колхозына барырға булды. Ул ваҡыттарҙа сиҙәм күтәргән район етәкселәренә, МТС директорҙарына ГАЗ-69 еңел машиналары бирә башлағайнылар. Шундай тәүге машиналарҙың береһен Баймаҡ МТС-ы директоры Зариф Ҡадировҡа ла бирҙеләр. Завод буяуы аңҡып торған ошондай өр-яңы машинала Ғилванов, Ҡадиров, партияның райком секретары, өлкән агроном Ибраһимов йомшарып уйыла башлаған яҙғы юлдан «Ҡыҙыл маяҡ»ҡа сыҡты.

Ҡадиров үҙ шоферына:

— Виктор, был машинаны танк кеүек юлһыҙ ерҙән дә үтә ала, имеш, тип һөйләйҙәр. Давай «Ҡыҙыл маяҡ»ҡа тау аша туранан ғына ебәрәйек әле, — тине.

Виктор башын сайҡап алды ла тураға, һөрөлгән ергә боролдо. Барыһының да машинаны һынап ҡарағыһы килде. Машина туңға һөрөп ҡалдырылған, етмәһә, өҫтөнә ҡар тотолған ер аша бер аҙ геүләп барҙы ла ҡорһағына ултырҙы.

— Был ниндәй эшкинмәгән вездеход, бер метр ҡарҙы ла йырып үтә алмағас, — тип һуҡранды Ҡадиров, папиросын яңынан тоҡандырып. — Әйҙә, Виктор трактор алып килгәнсе, беҙ йәйәүләп китә торайыҡ.

Арманһыҙ булып колхоз кәнсәһенә барып ингәндә, көн кискә ауышҡайны. Колхоз председателе Йыһаннур Мырзаҡаевтың яҡты, ҙур кабинетында бөтә ауыл активы йыйылып нимәлер тикшерә ине. Көтмәгәндә килеп ингән кешеләрҙән әҙерәк уңайһыҙлана төшкән колхоз председателе ҡунаҡтарҙы тороп ҡаршы алды. Уның йәшенә ҡарағанда иртәрәк сәсе ҡойолоп ялтырап торған башы, шешмә ҡабаҡлы һоро күҙҙәре, шыма итеп ҡырылған тулы бите, олпат, һәлмәк кәүҙәһе уның төплө кеше булыуын күрһәтеп тора.

— Бына, Мырҙаҡаев, һиңә ҡунаҡтар алып килдем — тине Ҡадиров бер аҙ аптырап ҡалған председателгә.

— Әйҙүк, әйҙүк, беҙ ни ҡунаҡтарға всягда рад!

— Бына был иптәш Өлкә Комитеттан. Ауыл хужалығы бүлеге мөдире Әхмәтсолтан Набиевич Ғилванов була, ә ҡалғандарын һин яҡшы беләһең, — Ҡадиров килгән кешеләр менән таныштырҙы. «Әхмәтсолтан» тип исемен ике ҡатлап әйтеүҙән һәр ваҡыт ләззәт тапҡан Ғилванов был юлы ла эске кинәнеүеи йәшерә алмай, ҡаҡса, оҙон-сараҡ битенә киң йылмайыу йүгертеп, кабинеттағы бөтә кеше менән дә күрешеп сыҡты. Тауышына түрәлек тоны өҫтәп:

— Йә, былай күмәкләп йыйылышып ниҙәр башҡараһығыҙ? Сер булмаһа, беҙҙең менән дә уртаҡлашыр инегеҙ.

— Юҡ, иптәш Ғилванов, бер ниндәй ҙә сер юҡ, колхозыбыҙҙың бөгөнгө йыйылышта тәсдиҡ ителәсәк бөтә районға мөрәжәғәтен һәм алаһы йөкләмәләребеҙҙе яңынан бер мәртәбә ҡарап сығайыҡ, тип йыйылғайныҡ, — тине Мырҙаҡаев, ҡулындағы ҡағыҙына ҡарап.

— О, бик шәп, бик мәслихәт! Йә, йә, ниндой мөрәжәғәт ул? Быйылғы сиҙәм йылында ниндәйерәк йөкләмәләр алырға уйлайһығыҙ?

Һөйләшкәндә кеше күҙенә бер ваҡытта ла тура ҡарамай торған Мырҙаҡаев Өлкә Комитет вәкиленә бер тапҡыр күҙ һирпеп алды ла «Ҡыҙыл маяҡ» колхозсыларының йөкләмәһенең төп пункттарын һанап сыҡты.

— Ентекләп уҡып тормаһаң да ярар. Бөгөнгө йыйылышығыҙҙа ҡатнашырға тигән ниәт бар, әгәр ҡаршы килмәһәгеҙ, — тине Ғилванов.

— Ул ниндәй хәбәр, ти, ул, рәхим итегеҙ, бик хуп, колхозсылар ҙа бик шат булырҙар, — тине көтөлмәгән хәбәргә ҡаушап ҡалған председателгә ярҙамга ашыҡҡан партия ойошмаһы секретары Хоҙайғолов.

— Юлда машинаны ҡалдырып, бик йонсоп килдеҡ, ҡорһаҡ та бик асты. Сәй әҙерләтеп булмаҫмы икән? — тине ауыҙынан өҙмәй тәмәке һурған Ҡадиров, председателгә ҡарап.

— Була, була! Хәҙер ойошторабыҙ уны.

Мырҙаҡаев колхоз хисапсыһы Мәүлетовты бер мөйөшкә саҡырҙы ла уның ҡолағына ниҙер шыбырланы. Тегене, йәһәт кенә кейенеп, кәнсәнән сығып юғалды. Бер аҙҙан кәпәсенең алдын артҡа кейеп, быймаларын ике яҡҡа тайшайта баҫҡан бер малай ишекте асыр-асмаҫтан:

— Атай, ҡунаҡтарҙы әсәйем сәйгә саҡырырға ҡушты, — тип ҡысҡырҙы.

— Нимә, атайыңды сақырманымы ни? — тип мәрәкәләнә Ҡадиров.

— Сақырҙы, — тине, танауын мырш-мырш тартып, малай кеше. Ул председателдең төпсөк малайы булып сыҡты.

Улар колхоз председателенең өйөнә барып инеүгә, биҙрә һыймалы аҡ самауыр соланда ҡунаҡтарҙы боҫорап, шаулап ҡаршы алды. Өҫтөнә оҙон балитәкле күлдәк, йәшел кофта, башына биҙәкле кешмир яулыҡ тартҡан ҡуңыр тулы битле председателдең йыуантаҡ ҡатыны сәй яһай башланы. Өй хужаһы нимәһендер төшөрөп ҡалдырған кеше кеүек ыуаланып алды урынында, борғоланып Ҡадировҡа ҡараны. Тегеһе эйәк атыу менән, урынынан торҙо, күрше бүлмәгә сығып, батмус менән стакандар килтерҙе, өҫтәлгә ике шешә араҡы ҡуйҙы. Бөтә стакандарға ла араҡы һалып сыҡты.

— Йә, ҡунаҡтар, һыуыҡта өшөп, ҡорһағығыҙ асып килгәндер, аш алдынан ошо йылтырҙы әҙерәк тартайыҡ,— тип стаканын күтәрҙе. Араҡыға тотоноусы кеше булмағас, МТС директоры:

— Йә, алайһа, Мырҙаҡаев, ҡунаҡтар хөрмәтенә икәү башҡарып ҡуяйыҡ. — тип икәүләп стакандарын сәкәштерҙеләр ҙә төп күтәрә эсеп тә ҡуйҙылар.

Әҙерәк ашап, сәй эсеп, күңеле күтәрелә төшкән Ғилванов, бере артынан икенсеһе инеп-сығып йөрөгән төрлө йәштәге балаларҙы күреп:

— Был бала-саға барыһы ла үҙегеҙҙекеме? — тип һорап ҡуйҙы.

— Үҙебеҙҙеке, йәғни бына киленегеҙ менән икәүебеҙҙеке, — тине председатель, ике бите алма кеүек ҡыҙарған ҡатынына ҡарап.

— Нисә бала-саға бар?

— Хәҙергә туғыҙ ғына, — тине йылмайып хужа кеше.

— Әллә тағы ла иҫәп юҡ түгелме?

— Бар, бар әле! Хөкүмәт ҡарай бит уларҙы, күптә бәрәкәт.

— Китсе, битһеҙ, ят кешеләр алдында ауыҙын йырып, нимә һөйләп ултыра, диуана, — тигән булды ҡатыны.

Төштән һуң йылға аръяғындағы МТФ-ға, ОТФ-ға сығып әйләнделәр, тракторҙар һәм ауыл хужалығы машиналары һаҡланған дворҙы ҡаранылар. МТФ-ла башҡа колхоздарҙыҡынан айырылып торған таш һыйыр һарайы, йылы кәҙә-һарыҡ ояһы, бесән һәм фураж һаҡлай торған ялан кәртә; электрлаштырылған ферма һәм башҡа хужалыҡ ҡаралтылары бар. Ҡыш сыҡҡансы етерлек бесән, силос әҙерләнгән, малдар көр, кешеләрҙең күңелдәре күтәренке. Ауылы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Баҡ-

салары, кәртә-ҡуралары ҡойма менән уратып алынған, береһенән-береһе матурыраҡ йорттар, клуб, һигеҙ йыллыҡ мәктәптең яңы бинаһы, балалар баҡсаһы — барыһы ла уйланып, план менән төҙөлгән, һәр аҙым һайын был колхозда бик яҡшы хужа барлығын тояһың.

Трактор дворында бригадир Мөхәмәтйәнов осраны. Уның комсомол-йәштәр бригадаһы ла быйыл сиҙәм ерҙәрен үҙләштереп, яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү өсөн район механизаторҙарына мәрәжәғәт менән сығырга әҙерләнә.

— Йә, Мөхәмәтйәнов, бына иптәш Ғилвановҡа техникаңды күрһәт, мәрәжәғәт менән сығырлыҡ рәтең бармы, юҡмы? —тине оҙон буйлы, түңәрәк һары йөҙлө, күк күҙҙәре яныҡ торған бригадирға МТС директоры.

Мөхәмәтйәнов рәт-рәт булып теҙелеп торған тракторҙарын, сәскестәрен, стенаға ҡатлап һөйәтеп ҡуйған трактор тырмаларын, бөтә инвентарын күрһәтеп сыҡты.

— Команда гына көтәбеҙ! — тине яңыраҡ ҡына армиянан ҡайтып, хәрби ғәҙәттәрен ташлап та өлгөрмәгән Мөхәмәтйәнов.

— Команданан башҡа, ерҙең баҫыу эштәренә өлгөрөүе лә мөһимдер бит әле, — тине Ғилванов, ауыҙ сите менән генә көлөмһөрәп.

Үкенескә ҡаршы, ул замандарҙа өҫтән команда, күрһәтмә булмайынса тороп, үҙ тәжрибәңә генә ышанып берәр эш башлап ебәреүе мөмкин түгел ине шул. Барыбыҙ ҙа команда көтә инек. Бригадир колхоз предссдателенән, колхоз председателе райкомдан, ә райком Өфөнән көтә ине команданы.

Яҡшы итеп йыһазландырылған тракторсылар вагончигына ингәс, Ғилванов:

— Техникағыҙҙы ҡарап сыҡтыҡ, барыһы ла былай әҙер төҫлө. Тыштан бик йылтыратып ҡуйғанһығыҙ, — тине.

— Эсе лә уның бик таҙа, йылтырап тора.

— Яҡшы, яҡшы.

— Тракторҙарығыҙға май, яғыулыҡ етерлек тиклем ташып ҡуйғанһығыҙҙыр? Май, һыу ташыусылар тәғәйенләнгәнме? Механизаторҙар, прицепщиктар етәме?

— Тракторсылар бригадаһын кешеләр менән тулыһынса тәьмин иткәнбеҙ. Тракторҙар ике смена эшләйәсәк, яғыулыҡ ташыуға Ильясов, Усманов тигән ағайҙар беркетелгән. Был эштә Вәлиев ағай үҙе генә лә ни тора.

— Вәлиев Закир ағай колхоз башланғаны бирле бригадаға яғыулыҡ ташый, уға хәҙер 65 йәш, йәштәреңдән шәберәк эшләй, — тип Мырҙаҡаев бригадирҙың һүҙен ҡеүәтләп ҡуйҙы.

— Колхоз йыйылышында раҫламаһаҡ та, бына 4-се

һанлы комсомол-йәштәр бригадаһының райондың бөтә йәш механизаторҙарына мөрәжәғәте, бына вагончик стенаһына элеп тә ҡуйғанбыҙ, — тине Мөхәмәтйәнов.

— Бөгөн кискә ентекләп тикшереп ҡарап сығырбыҙ, — тине Ғилванов.

Кис, билдәләнгән ваҡытта, электр уты балҡып торған йылы клубта, колхозсыларҙың йыйылышы башланды.

— Сиҙәмдең тәүге яҙын уңышлы үткәреү һәм «Ҡыҙыл маяҡ» колхозының район ауыл хужалығы эшсәндәренә мөрәжәғәтен һәм йөкләмәләрен раҫлау буйынса һүҙ колхоз рәисе иптәш Мырҙаҡаевҡа бирелә, — тип иғлан итте Хоҙайғолов.

Промышленностән килеп эшләй башлауына бер йылғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ауыл коммунистары етәксеһе үҙен намыҫлы, эшлекле кеше итеп күрһәтте. Совет армияһының, элекке офицеры, Ватан һуғышында ҡатнашып, сәләмәтлеге ныҡ ҡаҡшауына ҡарамай, көнө-төнө эштә, халыҡ араһында. Бына бөгөн дә йонсоп, сырхаулап торна ла, колхоз йыйылышына килмәй ҡалманы.

Түшәмдән туп-тура төшкән электр яҡтыһына ялтыраған башын һул ҡулы менән һыйпап алды ла Мырҙаҡаев әкрен генә һүҙ башланы. Бер нисә һөйләм әйткәс, ҡыҫып бәйләнгән галстугынан ҡотолорға теләгәндәй, йомро башын бер-ике тапҡыр борғолап алды. «Ҡәһәр генә һуҡһын ошо культура ҡамытын, оло кешеләр килгән, муйыныңа анауы нәмәнде тағып бар, тип бәйләнде бит бисә», — тип эстән генә һуҡранып ҡуйҙы ғүмеренә галстук йөрөтмәгән Йыһаннур,

— Беҙ, ҡайҫылыр ки «Ҡыҙыл маяҡ» колхозының колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, сиҙәм яҙын үткәреүгә ҡоро ҡул менән килмәйбеҙ. Беҙҙең колхозыбыҙҙа сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү буйынса етерлек тәжрибәбеҙ ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, 1953 йылда 300 гектар сиҙәм ҫөрөп сәскән инек, һәр гектарынан уртаса 19-ар центнер уңыш алдыҡ. Быйылғы сиҙәм йылының сәсеүенә лә өлгөлө әҙерләндек. Шуға күрә райондың ауыл хужалығы эшсәндәренә мөрәжәғәт менән сығырға батырсылыҡ иттек.

Клуб эсе шым булып ҡалған. Килгән кешеләрҙең урын һайлап ултырыуҙарында ла ниндәйҙер ҡағыҙға теркәлмәгән ныҡлы мәғәнә, тәртип һиҙелә. Колхоздың оло, абруйлы кешеләре иң алда, урта йәштәге ирҙәре, малсылыҡта эшләгән ҡатын-ҡыҙҙары уртала, ә йәштәр, ҡыҙ-ҡырҡын артҡы рәттәрҙән урын алғандар.

— Быйыл беҙҙең сәсеү мӑйҙаны 2100 гектар тәшкил итәсәк, шуның 1300 гектарында бойҙай сәсергә уйлайбыҙ.

Бөтә сәсеү майҙанына етерлек орлоҡ туплағанбыҙ, уны таҙартып, кәрәкле кондицияға еткергәнбеҙ. Агротехник сараралар үткәреү ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Баҫыуҙарға ҡыш көнө 2750 тонна тиреҫ сығарҙыҡ, 270 центнер көл һәм ҡош тиҙәге йыйҙыҡ. Бөгөнгө көнгә 750 гектарҙа ҡар тоттоҡ, 15—20 метр ара ҡалдырып, ер өҫтөнә ҡоро торф, тиреҫ ҫибеп һыҙаттар эшләнек. Ул ирегән ҡар ҫыуҙарын ергә ҫеңдереүгә ярҙам итәсәк. (Ул телмәр менәм сығыш яһағанда «h» хәрефен һәр ваҡыт «ҫ»ға әйләндерел һөйләй.)

Үткән йылда, үрҙә әйтелгәнсә, 300 гектар, о быйыл 200 гектар сиҙәм алып, бойҙай сәсергә планлаштырабыҙ. Иген культуралары сәсеү менән бер рәттән, картуф, йәшелсә үҫтереүгә лә иғтибар итәсәкбеҙ. Быныҡ өсөн колхоз тарихында тәүләп 12 кешенән торған айырым звено төҙөнөк. Улар бөтәһе 16 гектар картуф, 8—8,5 гектар йәшелсә ултыртырға ҫүҙ бирҙе. Быныҡ өсөн улар 30 меҡ дана торф-серетмә көршәктәр әҙерләне. Беҙ үҙ йөкләмәбеҙҙә гектарынан кәм тигәндә 150-шәр центнер картуф алырға ҫүҙбирәбеҙ.

Тракторҙар һәм уларҙың тағылма инвентарҙары барыҫы ла әҙер. Ул турала иптәш Мөхәмәтйәнов үҙе ҫөйләр. Яҙғы сәсеү эшендә 160 кеше һәм йөҙгә яҡын ат ҡатнашасаҡ, быныҡ өсөн 120 комплект ҡамыт-сбруй әҙерләнек.

Яҙғы сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә һәм 8—10 көндә тамамлау, һәр гектарҙан 15-әр центнер уңыш алыу өсөн көрәшәсәкбеҙ.

Партия ойошмаһының бөтә коммунистары һәм 12 агитаторы ҫабан өҫтөндә буласаҡ. КПСС Үҙәк Комитетының февраль — март Пленумы ҡарарҙарына беҙҙең практик яуабыбыҙ ошоларҙан ғибәрәт,

Председатель һүҙен тамамлап трибунанан төшкәс, Хоҙайғолов:

— Хәҙергә 15 минутҡа тәнәфес. Иптәш Мөхәмәтйәнов, тәнәфестән һуң беренсе булын сығыш яһарға әҙерлән, — тине.

* * *

— Февраль — март Пленумының сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү тураһындағы ҡарары менән рухланып, бөтә «Ҡыҙыл маяҡ» колхозының 4-се һанлы комсомол-йәштәр трактор бригадаһы ағзалары конкрет эш менән яуап бирергә булды, — тине Мөхәмәтйәнов. — Үҙебеҙ хеҙмәтләндергән иген-селек баҫыуының һәр гектарынан 15-әр центнер уңыш алырға, 200 гектар сиҙәм һөрөп сәсергә, һәр бер трактор-

сының смена нормаһын 140—150 процентҡа үтәүенә өлгәшергә, бөртөклө культуралар сәсеүҙе 8—10 эш көнөндә тамамларға һүҙ бирәбеҙ! Алдынғы тракторсылар С. Мостафин, А. Ғатауллин, Б. Яҡупов, И. Абайдуллин һәм И. Крылов сезон эсендә һәр бер тракторға 400—450-шәр гектар ер эшкәртергә йөкләмә алалар, һәр бер тракторға, йомшаҡ һөрөүгә әйләндергәндә, 650 гектар ер эшкәртергә, һәр бер 15 футлы комбайн менән 400 гектар майҙандың уңышын йыйырға, бер үк ваҡытта 3 процент яғылыҡҡа экономия яһарға йөкләмә алабыҙ. КПСС Үҙәк Комитетының ҡарарына беҙҙең яуап ошо булыр!

Һүҙ биреүҙе лә көтөп тормай, трибунаға йүнәлгән колхоздың ваҡ мал фермаһы мөдире Сәфиуллин Фазулла ҡартты күргәс, клубтағы халыҡтың бигерәк тә йәштәрҙең, йөҙөндә йылмайыу күренде. Былай ҙа һәлмәк хәрәкәтле, һәр һүҙҙе ашыҡмай ғына һөйләй торған Сәфиуллин ағайҙы халыҡ ҙур түҙемһеҙлек менән көттө. Ағара башлаған осло һаҡалын ҡулы менән ныйпап алды.

— Бына, иптәш Мырҙаҡаев, — тине ул, — докладыңды бик диҡҡәт менән тыңлап ултырҙым да шундай ныҡымтаға килдем: һеҙгә, күрәһең, малсылыҡ бөтөнләй кәрәкмәй. Ул ниндәй үтәйһетелгән тармаҡ, ә? Докладығыҙҙа ул турала ләм-мим һүҙ юҡ. Пленум ҡарарын һәүетемсә, яйлап ҡына булһа ла, мин дә баштан-аяҡ уҡып сыҡтым. Унда игенселек менән бер рәттән малсылыҡ тураһында ла бик фәһемле һүҙҙәр әйтелгән. Ҡоро икмәк менән генә көн итеп булмай бит. Үткән йыл беҙ, колхозыбыҙҙан 12 кеше, Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашып, бына ошо миҙалдарҙы тағып ҡайттыҡ. — Ул, түшен шар асып, пинжәгенә тағып килгән миҙалына төртөп күрһәтте. — Был бит шүтке түгел, колхозыбыҙға үҙе ҙур бер мәртәбә. Игенселек бик еңел кәсеп, унда ҡайһылай эшләһәң дә ярай, тип әйтергә минең бер ҙә ниәтем юҡ. Ләкин малды ҡышын-йәйен алын-ялын белмәй көтөргә тура килә, уның сезоны юҡ. Елкәң беше булмаһа, малсылыҡта оҙаҡҡа түҙеп булмай ул. Колхоздың даны алдан йөрөүендә беҙҙең кеүек бил яҙмай эшләүселәрҙең дә дүләһе бар. Көн һайын иртәнге сәйгә әбей һары майҙа ҡоймаҡ ҡойоп ебәрһә, ҡалай ҙа килешә беҙҙең һымаҡ тешһеҙ кешегә. Көн ашала бер туҡмас, мул тоҙлоғон сығарып бишбармаҡ ашап торһаң, бер ҙә зыян итмәй. Мал көтмәйенсә, быны булдырып булмай бит.

— Бына залдағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың башына ябынғаны, — тип дауам итте Фазулла бабай, — гел генә дебет шәл. Әгәр беҙ кәзә үрсетмәһәк, ул дебетте ҡайҙан алмаҡ кәрәк? Беҙ үткән йыл 100 кәзәнән 144 бәрәс алдыҡ. Был,

әлбиттә, ҙур ҡаҙаныш. Ләкин әле беҙҙә малсылыҡҡа етерлек иғтибар юҡ. Разы фермала ҡйүнле тәкә булмайынса тороп, бәрәс үрсеме алып була? Ысындырмы, бушмылыр, хәҙер бәрәсте тәкәһеҙ ҙә алалар имеш, тип мин гәзиттә уҡығайным. Ләкин беҙҙә яҡшы тәкәһеҙ эш сығарып булмай әле.

Зал зыу килеп бабай һүҙенән көлөшөп алды. Өҫтәл артында ултырған президиум ағзалары ла йылмайышып ҡуйҙы, ә Ғилванов бик оҙаҡ кеткелдәп көлдө.

— Минең тәҡдимем бар, иптәш Мырҙаҡаев: ошо тәсдиҡ ителәһе йөкләмәгә малсылыҡты ла ҡушыу кәрәк.

— Дөрөҫ, ҡушырбыҙ, һүҙең бик мәслихәт! — тинеләр президиумда ултырғандар.

— Беҙҙең колхозыбыҙ бөгөн үҙенә яуаплы йөкләмә алып, район халҡына мөрәжәғәт менән сығырға тора. Был, әлбиттә, яҡшы теләк, изге эш. Ләкин ошо уңай менән ҡайһы бер фекерҙәрҙе уртаға һалып кәңәш итешергә тигән уй бар. Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, тигән боронғолар. Сиҙәм һөрөү уйын эш түгел. Мин инде урыҫында ла, мордваһында ла күп йөрөп, сиҙәмде күргеләгән кеше. Үҙегеҙгә мәғлүм, элгәре заманда Эйек, Һаҡмар һыуҙарында һал ағыҙҙырып бүдрәтчик булып эшләгән кеше.

Һәр йыйылыш һайын үҙенең «бүдрәтчик» булыуын иҫкә алмай китмәгәнгә кемдеңдер асыуы килде, буғай:

— Һинең һал ағыҙғаныңды йөҙ мәртәбә ишетеп, үҙебеҙ ҙә һалсы булып бөттөк инде. Төп мәсьәлә хаҡында һөйлә!

Фазулла ҡарт ашыҡмай ғына:

— Сабыр ит, уныһына ла берәй сирек сәғәттән килеп етермен, — тине. — Уны бит йомшаҡ ерҙе һөрөп сәскән кеүек йылдам ғына, көнмә-көн эшләп булмай. Әйләндереп һалған кәҫте 4—5 тапҡыр тырматып, элгәрге беҙҙең заманда ағас тырма менән тырматалар ине, хәйер, хәҙер ауыр тимер тырмалар сығарҙы хөкүмәт, кәҫен ваталар. Был бер көндә генә эшләнелә торған эш түгел. Бына Мырҙаҡаевтың докладын тыңлағандан һуң, мин уйға ҡалдым. Нисек инде ул быйыл 200 гектар сиҙәм һөрөп, иген сәсеп, яҙғы сәсеү эштәрен 8 эш көнөндә тамамларға, тип торабыҙ. Ай-Һай, кабы хата булмағайы? Был ҡабыҡ ҡағып һайыҫҡан осороу булмаһа ярар ине?

— Һин нимә, яҙғы сәсеүҙе 7—8 көндә тамамларға тигән партияның лозунгыһын инҡар итәһеңме әллә?

— Һин мине партия менән ҡурҡытма! Партия ул үҙебеҙҙеке. Партияның үҙе лә, эше лә бик ҙур, оло, шуның өсөн уның исемен теләһә ҡайҙа ҡыҫтырырға ярамай. Даръя һымаҡ йәйелеп ятҡай Рәсәйгә, моғайын, партия

яҙғы сәсеүҙе бар урында ла 8 көндә бөтөрөгөҙ, тип әйтмәгәндер. Ошо бер генә хужалыҡта ла нисәмә төрлө ер бар.

Залдан ҡысҡырған агрономға ҡарап:

— Һинең Бикеш эргәһендә, «Хәжәр талында», туңға һөргән ерҙе тырматып ебәреп кенә сәсә торған майҙандарың булһа, башҡа урман яғында ҡара һоло, аҡтамыр баҫҡан ерҙе культивациялап, тырматып сәсә торған майҙандарың да бар!

— Булһасы һуң? Барыбер 8 көндә бөтөрөргә кәрәк. Райкомдан алынған күрһәтмә шундай. Эргәлә терәлеп ятҡан «Победа» һәм «Ҡыҙыл байраҡ» колхоздары сәсеү эштәрен 8 көндә тамамлаһа, ә беҙ, инициатива менән яр һалып сыҡҡан колхоз, 15—20 көйгә һуҙа булабыҙмы? Юҡ. Улай барып сыҡмай ул! Тәүге өс көнлөк мәғлүмәтте алғас та, Мырҙаҡаев менән Хоҙайғоловты райком бюроһына саҡырып, арҡаларын ҡайыҙлап ҡайтарасаҡтар.

Был бәхәсте тыңлап ултырған колхоз председателе һәм парторг, агроном һүҙен ҡеүәтләп, баш һелкеп ҡуйҙы.

— Уйындан ғәйре, ҡайһы бер баҫыу майҙандарын ҡара һоло, хәҙер әвсүк тиҙәрме шуны, баҫа башлаған бит, уны нисек бөтөрөргә итәһең?

— Һин, Фазулла ағай, әвсүккә теймә! Ул һуғыш осоронда беҙҙең тамаҡ хисапланды. Беҙ һуғыш йылдарында «ерҙә әвсүк үҫә — беҙгә тамаҡ үҫә» ти торғайныҡ, сөнки уны хөкүмәт ҡабул итмәне, барыһы ла үҙебеҙгә ҡалды, — тип ҡысҡырҙы ғүмер баҡый фермала эшләгән һауынсы Раева.

— Уныһын бергәләп ашаныҡ инде, ҡыҙым, мин дә һуғыш заманында аҡ ҡалас ашап ултырманым, — тине Фазулла ҡарт.

— Билдәле, овсюг менән көрәшергә кәрәк, — тип аҡланырға маташты колхоз агрономы.

— Ә нисек?

— Уның агрономик юлдары күп. Беҙ беләбеҙ уны!

— Уның, Мәүлетов ҡустым, юлы берәү генә: ҡара һолоноң келәм кеүек берҙәм йәшәреп сыҡҡанын көтөп кенә тораһың да, арҡырыға-буйға дискалап, тамырын ҡырҡтырып сығаһың. Әгәр инде яңынан әрһеҙләнеп үҫеп сыға башлаһа, был эште тағы ҡабатлайҙар. Яҙғы сәсеүҙе 8 эш көнөндә атҡарып, ҡыҙыл флаг алыуҙа хәсиәт йөрөмәй. Көҙ ошо баҫыу майҙандарынан икмәк алырға тейешбеҙҙер бит? Көҙ еткәс, халыҡ та, мал да, хөкүмәтебеҙ ҙә беҙҙән ҡыҙыл флагты түгел, ә ашарға әпәкәй һорар.

Мәсьәләнең тәрәнгәрәк төшөп, етди төҫ алып барыуын күҙәтеп ултырған Ғилванов урынынан торҙо.Ике күҙен

ҡыҫып йылмайҙы ла, тәжрибәле агроном буларак, кикреге ҡыҙарып, әтәсләнә башлаған бабайҙың һүҙен йыҡманы, ләкин бөтә яҙғы баҫыу эштәрен «ҡыҫҡа ваҡытта тамамларға кәрәк», тип һүҙен бөтөрҙө.

Ләкин бабай ҙа был алышта бил биргеһе килмәне. Өҙөлөп ҡалған фекерен дауам итте, һаман ныҡышты.

— Нишләп һуң әле бөтә колхоз, совхоз тиҙерәк яҙғы сәсеүҙе тамамлап, райондың ҡыҙыл әләмен алырға тырыша? Был ни хәл? Бер колхоз яҙғы сәсеүҙе 7—8 көндә тамамлап ҡыҙыл флаг ала, утауҙы кешенән алда бөтөрҙөм, тип икенсеһенә ҡыҙыл байраҡ тапшыралар. Минең уйымса, баҫыу эштәрен иртәрәк, көҙгө ямғырҙан алда бөтөрөргә, тип икмәк йыйған осорҙа ярышыу дөрөҫөрәктер. Һабан туйҙарында оҙам юлда бәйге сапҡанды барығыҙ ҙа күргәнегеҙ барҙыр, моғайын. Беренсе килгән ат арайың тәүге сирегендә нисәнсе, беренсе яртыһында ҡайһы урында килгән, тип комиссия бер ваҡытта ла ҡыҙыҡһынмай. Майҙанға кем аты нисәнсе булып килгән, шуны ғына хисапҡа алалар. Ләкин бәйгелә, боронғолар әйтмәксе, «асыуыңды ат ит — аҡылыңды теҙген ит», тигән шикелле, 40—50 аттың туҙаным йотоп, иң артта һөйрәлеп килеп тә булмай. Ул хәлдә майҙанға ла беренселәр хисабында килеүе мөмкин түгел. Теҙгенеңде тартыңҡырап, ат сабышына аҡылыңды ҡушып, уртала килеү хәйерле. Был, асылда, дөрөҫ тә. Майҙанға килеп еткәнсе билдәләнгән 25 саҡрымлыҡ юл буйында ҡайһы ат нисегерәк үткән — унда комиссияның айхайы ла юҡ. Беҙҙең йәй буйы тир түгеп башҡарған эшсбеҙҙе баһалағанда ла ошо тәртип булырға тейеш. Ат сабып үтә торған алыҫлыҡты айырым участкаларға бүлгәнбеҙ ҙә майҙанға килеп еткәнсе ҡыҙыл әләмдәрҙе оҙон юлда таратып бөтөргәнбеҙ. Майҙанға килеп еткәнсе ҡыҙыл әләмле һыбайлылар әллә ҡайҙа, артта ятып ҡалып бөткәндәр. Бына беҙҙең көндә районға тапшыра торған сводка менән дә шулай килеп сыға. Сводкаға ҡарап түгел, о иң һуңынан колхоздың алған икмәк миҡдарына ҡарап эшкә баһа бирергә кәрәк. Икмәк булһа, мал да көр, кеше лә туҡ, хөкүмәтебеҙ ҙә бай.

Бына икенсе пример. Колхоз фермаларында малды тороҡтороу тураһында биш көн һайын сводка бирә торған бер ғәҙәт уйлап сығарҙылар. Был инде бөкөлли туҙға яҙмаған нәмә! Һыйырҙарҙың ҡасыуы тураһында сводка бар. Һыйыр быҙаулауҙың ике срогы үтеп бара, ә быҙау юҡ. Был эш глауный затехник Дьяков иптәшкә кәрәкмәһә, уның бер кемгә лә хәжәте юҡ. Малды йылы ояла тотоп, ваҡытында ашатып-эсереп яҡшы тәрбиәләһәң, телефон зыңҡытып мәғлүмәт йыймаһаң да, артым алып була.

Фермалағы тәкә-үгеҙҙәрҙе айырыңҡырап ашатырға кәрәк. Иптәш Мырҙаҡаев, һиңә ҡыш буйы егеп йөрөгән өйөр ай-ғырын бушатырға кәрәк. Муйынынан ҡамыт төшмәгән, һыртынан эйәр-өпсөн өҙөлмәгән айғырҙан тоҡом алып булмай ул.

— Ярай уның үҙе шәп, — тип ҡысҡырҙы кемдер зал-дан.

— Уныһы миңә мәғлүм түгел, — тине Фазулла ҡарт, аҡ мыйығы аҫтынан хәйләкәр генә йылмайып. Был ике арала булып алған һүҙҙең нимәгә ишара ителгәнен залда ултырған халыҡ, бигерәк то фермала эшләүсе ҡатын-ҡыҙ, тиҙ генә төҫмөрләп алды.

— Барыһына ла ашау кәрәк. Белдегеҙме? — тип бабай һуҡ бармағын клуб түшәменә күтәрҙе.

— Белдек, белдек, яҡшы ашатыу әҙәм балаһына ла килешә ул, — тип ҡысҡырҙы бер нисә кеше. — Фазулла ағай, һүҙеңдән әллә нәмә тәме сыға башланы. Трибунанан төшһәң дә ярар инде!

«Трибунанан төшәм» тигәс тә, уның ығышланып тора-сағын яҡшы белгән халыҡ:

— Дөрөҫ, дөрөҫ, — тип шаулашты.

Нимә «дөрөҫ» икәненең айышына төшөнә алмаған Фа-зулла ҡарт икенсе һуҡмаҡҡа төшөп китте:

— Знамо дөрөҫ! Ашау наҡыҫ булһа, клубта саң туҙ-ҙырып, таң атҡансы «Наза» уйнап булмай ул. Ата һуйыр һымаҡ тыпырсынып, сәнсә баҫып, үксә һуғып бейеү өсөн дә дәрт кәрәк. Дәртте, күңелде тик бөтәбеҙҙән дә оло ик-мәк кенә күтәрә, — тип бабай ҡулын болғап һөйләгәндә тағатылып киткән дебет шарфын йыйып алды ла трибу-нанан төштө.

— Һүҙем бар, — тип ҡысҡырҙы урындан, Башҡорт ат-лы дивизияһында хеҙмәт итеп, орден, миҙалдар тағып ҡайтҡан йылҡысылыҡ фермаһы мөдире Ильяс Хажин. — Бына, иптәштәр, мин колхоз яралғаны бирле йылҡысылыҡ фермаһында эшләйем. Ошо йылҡы араһында йөрөп үлер-мен дә инде. Хоҙайға шөкөр, мине һуғышында ла атынан айырманы. Йылҡы — минең ғәмем, ҡайғы-хәсрәтем. Үткән йыл беҙҙең йылҡысылыҡ фермаһы, 122 бейәнән 109 ҡолон алып, Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнаш-ты. Был, ағай-эне, бәләкәй күрһәткес түгел, йылҡы малы, кәҙә кеүек, ике мәртәбә ҡолонламай. Ул бер йылға бер генә ҡолон килтерә. Көтөүсе Ғәббәс Хажин 28 бейәнән 27 ҡолон алды. Айытҡол Суфиянов 27 бейәнән 25 ҡолон алыуға иреште. Беҙҙең йылҡы малы ҡышын-йәйен ҡырҙа, тибенлектә. Көтөүселәр йыл әйләнәһенә — ҡышын буран-

сәсендә, йәйен ел-ямғырҙа ла — йылҡы менән бергә була. Был һиңә йылы ояла кәзә ҡарау түгел.

Ошо хәбәрҙе ишетеү менән, ғәҙәттә, сабыр, тыныс тәбиғәтле Фазулла ағай урынынан һикереп тороп: «Ильяс, һин ниңә шул кәзәгә бәйләндең, кәзә тәкәһе төкөнөмө әллә?» — тип ҡысҡырып трибунаға килә башлағайны, ситтән ултырған халыҡ уның итәгенән тартҡылап «ҡуй инде, Фазулла ағай, буш менән булма, ул яңылыш ҡына ысҡындырҙы» тип ҡартты урынына ултыртып ҡуйҙы.

— Әйтәһе һүҙем минең бөтөнләй ул түгел ине, — тәртәһе ҡыйшайған Фазулла ҡартҡа йылмайып ҡарап алды ла Ильяс һүҙен дауам итте. — Бына беҙҙең колхоз насар хужалыҡтарҙан иҫәпләнмәй. Республиканан берәр ҙурыраҡ етәксе килһә, район хужалары тоталар ҙа беҙгә ебәрәләр. Бына бөгөн дә иптәш Ғилванов беҙҙең йыйылышта ҡатнаша.

Президиумда ултырған, партияның район комитеты секретары, МТС директоры Ҡадировҡа ҡарап, был берәр артығыраҡ һүҙ ысҡындырып, ашараҡ һуҡтырып ебәрмәгәйе, тип уйлап алды.

— Килһендәр, күрһендәр! Мин уға бер ҙә тарһынмайым. Ләкин бик күптән эсте бошорған бер мәсьәләгә туҡталып китергә уйлайым. Һәр йыл һайын райком бар колхозға вәкил ебәрә. Бына беҙгә ике йыл рәттән райондың хәрби комиссары килде. Ә күрше колхозда йылдың-йылы промартель председателе иптәш Журавлев ята. Неүжәли уларҙың районда хөкүмәт тарафынан бирелгән үҙ эштәре юҡ икән? Уларҙы кем башҡара һуң? Әллә уларға ла Өфөнән вәкилдәр ебәрәләр микән? Беҙ бит инде ошо төйәктә тыуғанбыҙ, яманмы-яҡшымы донъя көтәбеҙ, ергә иген сәсәбеҙ, мал көтәбеҙ. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа ошо кәсеп менән көн иткән. Нишләп һуң беҙҙең колхоз рәисенә тағы ла бер мисәү килтереп тағырға? Был беҙгә ышанмағанлыҡтың бер ғәләмәте түгелме? Ярай ҙа һуң ул палнайму-чин, председателдең әйткәненә ҡолаҡ һалып ҡына, уның артынан йөрөһә, ә ҡайһы бер үҙ һүҙлерәк вәкил артынан колхоз председателе үҙе эйәреп йөрөй бит! Шуның һүҙен тыңлай, командаһын үтәй. Райондан килгән кеше эш башҡарған итеп үҙен күрһәтте, шул еткән. Бөтөн колхоз тормошон кәлейәнән сығарып кешене анда ҡыуып, бында ҡыуып, үҙ эшен йәһәт кенә башҡарып, районға рапорт бирә лә ҡайтып та китә. Колхозды ышанып етәкселеккә һайлап ҡуйғанбыҙ икән, эште бөтә тулылығы менән шул етәксенән талап итергә кәрәк.

Тәүге аҙымын атлағанда тик сабый балаға ғына ярҙам итәләр. Дәже шунда ла бала үҙ алдына йөрөп өйрәнһен

өсөн бәләкәй арба эшләп бирәләр. Әгәр инде балаңды алдынан алып, иркәләп, ҡулға өйрәтһәң, кейендерә лә башлаһаң, ул бала үҙ ҡулы менән ашауҙан баш тарта, ә унан инде елкәңә менеп ултырыуын көт тә тор. Беҙҙең етәкселәр бала түгелдер бит уларҙың ҡулынан етәкләп йөрөтөргә? Улар колхоз етәксеһе булып бер генә йыл эшләмәйҙәр. Ана, хоҙай үҙенә ниндәй ҙур, ялтыр баш биреп ҡуйған. Үҙ аҡылы менән уйлаһын, үҙ ҡулы менән эшләһен. Ғөмүмән, һәр кем үҙенең урынында тулы мәсьүлиәт менән эшләргә тейешле. Мин шулай аңлайым хәҙерге замана ағышын. Хилаф һөйләһәм, төҙәтерһегеҙ, — тип һүҙен тамамланы ла Ильяс Хажин үҙ урынына барып ултырҙы.

Колхоз агрономы Мәүлетов йәшелсә ултыртыуҙың әһәмиәте, картуфтың йәмәғәтселек малы өсөн генә түгел, ә һәр бер ғаиләгә кәрәкле аҙыҡ икәнен төшөндөрөп, уны бушҡа ғына халыҡҡа «икенсе икмәк», тип әйтмәйҙәр, тип һүҙен сурытырға уйлағайны, залда нескә генә тауышлы бер кеше:

— Әй хәсрәт! Трибунаға сығып, кеше өгөтләп торған булаһың, үҙ баҡсаңда берәр ваҡыт сәсеп, тауыҡ йоморт-ҡаһындай картуф алғаның бармы? Һин бит уның тәмен дә белмәйһең! — тип ҡысҡырҙы.

Колхоз йыйылышында күтәрелгән мәсьәләләргә яуап бирергә кәрәк ине. Президиумда ултырған етәксе иптәштәр үҙ-ара һөйләшеп, кәңәш ҡороп алдылар. Бер аҙҙан Ғилванов, залға ҡарап:

— Ә... ваҡыт та хәҙер бик һуң. Мин... ни оҙаҡ һөйләргә йыйынмайым,... — тине, нишләптер тотлоға-тотлоға. — беренсенән, йөкләмәләр хаҡында. Фазулла бабай, һин армияла булдыңмы?

— Хәҙерге әрмиәлә — юҡ, ләкин Николай һалдатында булдым, хатта рядовой һалдат түгел, ә старшин мүндир әфисәр инем, — тип ҡысҡырҙы бабай урынынан.

— Шулай булғас, беләһең — барыбыҙ өсөн дә бер устав, бер закон. Аңлашыламы?

— Как аңлашылмаҫҡа? Аңлашыла, — тине бабай.

— Йөкләмә алғас, уны үтәү срогы булыуы ла мотлаҡ. Әгәр яҙғы сәсеүҙе июнь яртыһына тиклем һуҙһаҡ, уны «яҙғы сәсеү» түгел, ә «йәйге сәсеү» тип атарҙар ине. Уны барыбер ҡыҫҡа сроката тамамларға кәрәк. Иртә сәсһәң, иртә өлгөрә, алданыраҡ уны йыйып алыу мөмкинлеге тыуа. Яҙ һуңлаһаң, көҙ ҙә һуңлайһың. Шуны аңларға кәрәк. Яҙғы сәсеүҙең иң оптималь ваҡыты 8—10 көн. Бөтә республика бер аҙымдан атлағанда, «Ҡыҙыл маяҡ» колхозы, строй боҙоп, бер үҙе аяҡ яңылыштырып баҫып бармаҫ инде.

Яҙғы сәсеүҙе иң алда тамамлаған районға Өлкә Комитет һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл байрағын тапшырырға, алдынғы етәкселәрҙе яҙғы сәсеү һөҙөмтәһе буйынса Почет таҡтаһына индерергә, тигән тәҡдимде Өлкә Комитет бюроһына мин үҙем кереттем. Был мәсьәләләр мин бер ниндәй ҙә хата күрмәйем. Бюроның ҡарарын үтәү — бөтә район комитеттары һәм партия ойошмалары өсөн мәжбүри.

Икенсенән, мәғлүмәттәр йыйыу хаҡында һүҙ барҙы. Район һәм өлкә мәғлүмәт йыймай, тома һуҡыр көйөнсә ултыра алмай. Ул ауыл хужалығы менән етәкселек итеү өсөн кәрәкле шарт. Хужалыҡ үҫәме, әллә бер урында тапанамы? Шуны үҙ ваҡытында белеү, төҫмөрләү ӨСӨН кәрәк.

Өсөнсөнән, бында вәкилдәр тураһында ла әйтелде. Мине яҙғы сәсеү осорона һеҙҙең районға Өлкә Комитет вәкиле итеп ебәрҙеләр. Әллә ҡабул итмәҫ инегеҙме?

— Әйҙә, әйҙә, рәхим итегеҙ! Килгән кешегә беҙҙең ҡапҡа һәр ваҡыт асыҡ, — тиеште залдағы халыҡ.

— Бына һеҙгә килерҙән алда иптәш Любушкин менән шул уполномоченныйҙар тураһында һүҙ барҙы. Юғары партия органдарынан вәкил ебәреү партия менән халыҡ массалары араһында бәйләнеште нығытыу өсөн эшләнелә. Шулар аша беҙҙең партия халыҡтың кәйефен, көнкүрешен белә, шулар аша халыҡ менән һөйләшә.

— Ярай ҙа һуң һөйләшһә. Күп ваҡыт улар гыпа һөйләй, беҙ тыңлайбыҙ шул. Әҙерәк беҙҙең әйткәнгә лә ҡолаҡ һалһындар ине, — тигән тауыштар ишетелде.

* * *

Ошо уҡ сәғәттә район комитетына утыҙ-ҡырҡлап партия, совет активы йыйылды. Ҙур булмаған, стеналары имән ағасына оҡшатып эшләнгән йыйнаҡ кабинетта секретарь инеүселәрҙе аяҡ үрә баҫып ҡаршы алды. «Т» хәрефе рәүешендә ултыртылған өҫтәл артына бюро ағзалары, стена ҡырына теҙелгән ултырғыстарға баҙнатһыҙ ғына башҡалар ултырышты, йәшел буҫтау ябылған өҫтәлдә ҡиммәтле йәшмәнән эшләнгән ауыр ҡара һауыты, тәмәке һауытынан башҡа нәмә күренмәй. Бәләкәй генә тумбочка өҫтөндә йәнәш ике телефон ҡуйылған. Уң яҡ мөйөштәге бәләкәй өҫтәлдә ҙур радиоалғыс ултыра, һул мөйөштә — район партия конференцияһына ҡасандыр геологтар бүләк иткән районда табыла торған минералдар коллекцияһы. Ике арала стена төҫөнә буялған ауыр суйын сейф. Килгән кешеләр, изәнгә йәйелгән келәм өҫтөнә баҫырға

уңайһыҙланып, аяҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, бөкләп,ултырғыс аҫтына тығырға самалай. Сталин портретына ҡарап, стрелкалары дерелдәп торған стеналағы барометрға бөгөлмәгән бармағы менән сиртеп алды ла Любушкинултырған кешеләрҙе ҡарап сыҡты.

— Бәй, һеҙҙең барығыҙҙа ла хәрби кейем икән дә, — тип ҡуйҙы. Ысынлап та, бөтә килгән кешеләрҙең өҫтөндә «Сталин формаһы» тип йөрөтөлгән кейем: ҡайтарма яғалы йәшел френч, галифе салбар, ә башта инде бында инер алдынан һул яҡ стеналағы сөйҙә элеп ҡалдырылған йәшел фуражка. Был реквизитҡа тик кешеләрҙең аяғына кейгән кирза итектәрҙе генә өҫтәйһе ҡала. Любушкиндың кейеме лә ошо рәүешле, тик кейеменең буҫтауы икенсерәк, йоҡараҡ, тегелеше башҡасараҡ, һул яҡ япмалы түш кеҫәһе өҫтөнә беркеткән депутат значогы һәм мыҡты кәүҙәһе, был яҡтарҙа һирәк осрай торған һары-ерән төҫө уны башҡаларҙан айырып тора. Кнопкаға баҫып, Любушкин килеүселәрҙең исемлеген алдыртты. Шул ваҡыт телефон шылтырарға тотондо. Уның көслө һәм өҙлөкһеҙ шылтырауынан урындағы телефон булмауын бында йыйылған кешеләр барыһы ла һиҙеп алды.

Любушкин телефон трубкаһына тотонғас, төҫө үҙгәреп китте. Ҡалтыранған тауышын йәшерергә тырышып: «Яҡшы, яҡшы», — тине лә трубкаһын ҡолағына ҡуйып, көтөүен дауам итте. Оҙаҡ минуттарҙан һуң телефон трубкаһы аша тоноҡ тауыш ишетелде.

— Эйе, эйе, мин, Любушкин. Һаумыһығыҙ, Семен Денисович! Тыңлайым.

Ошо исемде ишетеү менән, үҙ-ара шыбыр-шыбыр һөйләшеп ултырған кешеләр шып туҡтаны. Партияның Өлкә Комитетының беренсе секретары Игнатьев икәнеп барыһы ла төшөнөп, һағая төштө. Любушкиндың ҡапыл тороп китеүенән һүҙ бик етди, мөһим мәсьәлә тураһында барғанлығын йыйылған халыҡ төҫмөрләп алды.

— Был, әлбиттә, ҙур ышаныс, ләкин алып барып сығара алырбыҙмы һуң? — тип икеләнде Любушкин. — Бына беҙ, партия, совет активы, райкомға йыйылып, тап ошо турала һөйләшеп ултырабыҙ әле. — Бер аҙҙан ул трубкаһын бик һаҡлыҡ менән тумбочкаға ҡуйҙы ла: — Иптәштәр! Өфөнән Өлкә Комитеттың беренсе секретары иптәш Семен Денисович Игнатьев шылтырата. Бына әле лә телефонда.— Әйтерһең дә, телефон трубкаһынан Өлкә Комитет секретарының башы күренеп тора — бөтә кеше, яуап көтөп, ятҡан трубкаға төбәлде.— Семен Денисович яҙғы сәсеү кампанияһын беренсе тамамлау тураһында инициатива менәп сығыш яһарға тәҡдим итә. Һеҙҙең бында икән-

легегеҙҙе әйткәс, фекерегеҙҙе белергә ҡуша. Һеҙ нисек ҡарайһығыҙ шул тәҡдимгә?

— Беҙ ни ҡушылабыҙ! Беҙ риза!

— Әлкә Комитет бындай ышаныс белдергәс, беҙ көнөтөнө бураҙнала булырға әҙер! — тип шаулашты халыҡ.

— Беҙҙең актив риза, — тине, телефон трубкаһын ҡалтыранған ҡулына яңынан алып, Любушкин.

— Ишеттем, ишеттем, — тигән тауыш яңғыраны телефон сымының теге осонда. — Ярай, иҫән бул! Ун көндән һеҙҙең рапортты көтәм, — тип һүҙен тамамланы Өлкә Комитет секретары. Любушкин өҫтәлдә ятҡан «Казбек» һауытынан папирос алып тоҡандырҙы ла тәнәфес иғлан итте. Бюро ағзаларын ҡалдырып, бер аҙ кәңәш ҡорҙолар ҙа колхоз-совхоздарға китәһе кешеләрҙе яңынан кабинетҡа саҡырҙылар. Любушкнндың дәрте, йәнләнеүе бөтә кешегә күсте.

— Иптәштәр! Үҙегеҙ ишетеп торҙоғоҙ, бында оҙаҡ һөйләшеп ултырыуҙың кәрәге юҡ. Быйыл сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе һөрөү, сәсеү мәсьәләләре буйынса беҙ һеҙҙең менән үткән семинарҙа бик ентекләп һөйләшкәйнек, һәр кем иртә менән, үҙ кабинетына инеп тормай, туп-тура колхоз, совхоздарға таралырға тейеш. Минең рөхсәттән тыш, бер кем дә үҙ белдеге менән, сәсеү тамамланмай тороп, районға ҡайтып йөрөргә хаҡы юҡ. 1 Май байрамын бураҙнала, эш өҫтөндә, байрам итергә тейешбеҙ. 10 майҙа барығыҙ ҙа ошо кабинетта яҙғы сәсеүҙе уңышлы тамамлау хаҡында рапорт бирергә тейешһегеҙ. Хушығыҙ!

Халыҡты таратты ла кабинетта, бер үҙе ҡалып, ул үрле-түбәнле йөрөп алды.

* * *

Һүҙен тамамларға йыйынған Ғилвановты клубҡа төкәтеп эшләнгән бәләкәй бүлмәгә телефонға саҡырҙылар.

Бер нисә минуттан киң йылмайып, ул сәхнәгә күтәрелде.

— Иптәштәр! Әле яңы ғына райондан иптәш Любушкин шылтыратты. Өфөнән иптәш Игнатьев, йәғнп беҙҙең республикабыҙҙың хужаһы, Баймаҡ районы эшсәндәре сиҙәм йылының яҙғы сәсеүен ҡыҫҡа ваҡытта, өлгөлө агротехник кимәлдә тамамлау буйынса республика колхоздарына һәм совхоздарына мөрәжәғәт менән сығыш яһарға тәҡдим индергән. Был тәҡдим райком тарафынан хуплап ҡаршы алынған. Районда сиҙәм күтәреү буйынса һеҙ инициатор булһағыҙ, республикала һеҙҙең район инициатор буласаҡ, — тип һүҙен тамамланы.

— Вот бына быныһы шәп!

— Кәнишнә, бик дөрөҫ, беҙ кемдән ком!

— Был үҙе бер ҙур мәртәбә! Белһендәр беҙҙең кем икәнде!

Үҙ сығышына тейешле яуап ала алмай, бошоноп ултырған Фазулла ҡарт та, дөйөм күңеллелеккә бирелеп:

— Бик тә мәслихәт! Кешенең оло аты үткәнсе, үҙебеҙҙең тай уҙһын! —тип ҡысҡырҙы.

Күтәренке дәрт менән йыйылышта йөкләмә ҡабул иттеләр. Йылғанан бәләкәй генә арыҡтар аша ҙур майҙанға йәйелгән һыу кеүек, «Ҡыҙыл маяҡ» халҡы, шаулашашаулаша, үҙ өйҙәренә таралды.

1954 йылдың 8 июнендә КПСС район комитетының сираттан тыш пленумы мине, Баймаҡ МТС-ы зонаһы буйынса райком секретары булып эшләп йөрөгән ерҙән, Баймаҡ район комитетының икенсе секретары итеп һайлап ҡуйҙы. Беҙ ул көндәрҙә Сәғит Ишбирҙин менән Магнптогорскиҙа институтта дәүләт имтихандары тапшырып ята инек. Райкомдың беренсе секретары Любушкиндан: «Кисекмәҫтән райкомға ҡайтып етегеҙ», — тигән телеграмма алғас, аптырауға төштөк, үҙе лә артыҡ уҡымаған, бәлки, шуғалыр ҙа уҡырға тырышҡан кешеләрҙе бигүк яратып бөтмәгән Любушкиндан телеграмма килгәс, икеләтә аптыраныҡ. Ул саҡтарҙа, эшләү менән бер рәттән, юғары уҡыу йорттарында ситтән тороп уҡыусыларға хәҙерге кеүек льготалар булһа ла, етәксе иптәштәр льготаны бик күрһәтеп бармайҙар ине. Уҡырға теләйһең икән, ана, үҙеңә бер тапҡыр бирелә торған законлы ялыңды ал да кит. Риза булмаһаң, теләһәң нишлә. Уҡырға китеү теләге белдереп үтенес менән ингән кешеләрҙән Любушкин ирония менән көлөр ине лә:

— Диплом об образовании не добавляет ума, это — занятие бездельников, — тип кенә сығарыр пне. Бар ине шундай замандар.

Районда үтә торған пленум, активтар тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы ла бер нәмәгә туҡталып китмәй әмәл юҡ. Эш шунда, был йыйылыштарға саҡырылған кешеләр ҡунаҡҡа йыйынғандай, үҙҙәренең ҡәҙергә кейә торған иң затлы кейемдәрен кейеп, йөрөк аттарын егеп, һабантуйға килгән һымаҡ, йөрөрҙәр ине. Күрәһең, егеп йөрөгән ат — ҡамыт — дуға һәм үҙен күрһәтеү сәме халыҡта борон-борондан йәшәп килгән йола булғандыр, тип әйткем килә.

Бына кырандасҡа үҙенең ҡола атын егеп, БАССР Верховный Советы депутаты, Ишмырҙа ауыл Советы председателе Йомабикә апай Әүәлбаева үтеп китте. Артынса кү-

сере Ғәбит ҡартты, кеше ишетһен өсөн, махсус рәүештә һайт-һайғ̈латтырып, ике ҡола юрға ектергән Ленин исемендәге колхоз председателе Хажи Әхмәтов туҙан туҙҙырып китеп бара.

Ерән мыйыҡ остарын өҫкә бороп, кузла өҫтөндә аршын йоткан старшина кеүек суҡайып ултырған Хәмзә күсер «һәүәнәк» итселек-һөтсөлөк совхозы директорын, былай ҙа ҡуңыр бите сем-ҡара булып ҡояшта янған, тәки «һаумыһығыҙ» тип әйтергә өйрәнә алмай, үҙ яҡтарындағы кеүек «Ҫаумыҫығыҙ» тип өндәшә торған Сафуан Усмановты пленум бинаһы ҡоймаһына килтереп терәтте. Урамда өйөлөп торған кешеләр араһынан кемдер, мәрәкәләп: «Хәмзә ағай, директорыңды юлда төшөрөп ҡалдырғанһың бит», — тигәс, Хәмзә илле биш саҡрым юл үткәндән һуң беренсе тапҡыр артына әйләнеп ҡараны ла, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып, үҙ директорына ҡулына йомарлап тотҡан сыбыртҡы һабы менән төртөп күрһәтте. Йәнәһе, бына ултыра бит.

Ә был шаяртыуҙың үҙ мәғәнәһе бар ине. Директоры менән икәүҙән-икәү йөрөгәндә лә, ул бер ҡасан хужаһы менән йәнәш ултырмаҫ, сөнки ул үткән замандарҙа уҡ түрә менән күсерҙең мөнәсәбәте нисек булырға тейешлеген үҙ елкәһендә татып, мәңгелек һабаҡ алған кеше.

Революциянан күп алда «Хәмзә күсер» алтын промышленнигы Рәмиевте йөрөткән. Бер мәл өс ат егелгән көймәле санала ҡатын-ҡыҙҙар менән кәйеф-сафа ҡороп килеүсе байҙың ҡылығын мәҙәк күреп, йәш Хәмзә артына әйләнеп ҡарарға баҙнат иткән. Быны әҙәпһеҙлек тип тапҡан бай көймәнең ишеген асҡан да тимер таяғы менән Хәмзәнең башына тондорған. Иҫәңгерәп артына йығылған күсергә: «Быныһы инсафһыҙлығың өсөн, — тин киҫәткән. — Әгәр ҙә яңынан бер тапҡыр артыңа әйләнеп ҡарайһы булһаң, эштән ҡыуып сығарасаҡмын», — тигән. Бына шул ваҡиғанан һуң «Хәмзә күсер», тәғәйенләнгән урынға хужаһын килтереп еткереп туҡтатмайынса, артына әйләнеп ҡарамаҫҡа өйрәнгән.

Ул хужаһы менән фатирға бергә төшһә лә, бер ҡасан да башлыҡ менән бер табында ултырманы. Уның урыны һәр саҡ икенсе башта, ашар аҙығы үҙ муҡсаһында булды. Түрәләр әңгәмәләшә тип, ул бер ваҡытта ла ҡыҫылмаҫ, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалмаҫ, кешегә лә һүҙ йөрөтмәҫ. Был ғәҙәтен дә ул Рәмиевтәрҙән мәңгегә үҙләштергән. Ҡайһы ваҡыт башҡа етәкселәрҙең күсерҙәре:

— Хәмзә ағай, әйт әле, һин үҙ ғүмереңдә нисә түрәне йөрөттөң? — тип һораша. Ә теге егеп йөрөгән арбаһының

йәки санаһының тәртәһенә күрһәтер пие. Унда хәҙерге «Һәүәнәк» совхозы директоры Сафуан Усманов егерме дүртенсе киртләс булып мәңгеләштерелгән.

Билдәле, уның сиктән тыш тыйнаҡ, әҙәпле кеше булыуы бер нисә мәртәбә көлкө хәлгә лә килтергәне бар. Шулай бер мәл ҡыш, ойоҡһотоп һепертмә буран сығып торған сакта, улар район үҙәгенә ашығыс юлга сығалар. Мәрхүм директор Ҡыям Кашапович Ҡадиров толобон кейгән дә санаға ултырыр алдынан:

— Хәмзә ағай, ваҡыт бик ҡыҫҡа, был юлы аттарыңды йәлләмәйерәк ҡыу, тиҙерәк барып етергә кәрәк! — тип бойорған. Аттарын, Туҡай әйтмешләй, тартҡылап та һуҡҡылап килгән Хәмзә, ыжлап өргән буранда бер ни ишетмәй, тура юлдың бер ҡыяһында һалыулап, үҙ директорын кашауай сапанан төшөрөп ҡалдыра. Ошо әле әйтелгән ҡойма ға аҡ күбеккә батҡан аттарын килтереп терәгән дә, ғәҙәтенсә, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараған да ҡойолоп та төшкән: санала берәү ҙә юҡ! Был, аттарын бороп, килгән юлынан хужаһын эҙләп кире киткән...

Килгән кешеләрҙең пленум башланырын көтөп урамда өйөм-өйөм булып тәмәке тартырға, һуңғы яңылыҡтар хаҡында гәпләшергә сыҡканын ғына аңдып торғандай, райондағы берҙән-бер «Победа» маркалы еңел машинаға ултырып, Карл Маркс исемендәге колхоз председателе «үҙе» килеп туҡтаны. Машинанан төшкәс тә, ул, башҡалар кеүек ваҡланып, һәр кешегә ҡул һуҙып күрешеп барманы. Эре-төрөһөнә генә ҡулының осон биреп: «Һаумы, һаумы», — тине лә болдорға йүгереп менде. Залға ашыҡты. Уның мөһимерәк йомошо бар.

Ғәҙәте буйынса, уға, пленум башланмаҫ элгәре, алғы рәттә ултырған бюро ағзалары, бигерәк тә «Биктер Бәсильевичтең» үҙе менән күрешеп өлгөрөргә кәрәк. Ул залға инеп йүгерә-атлай китеп барғанда артынан: «Эй, эй, товарищ, надо зарегистрироваться», — тигән ят тауышты ишетеп ҡалды. Ишек төбөндәге өҫтәлдә килгән кешеләргә теркәү алып барған йәш инструктор Павлов уны ҡысҡырып борҙо ла: «Эй, товарищ, скажите, как ваша фамилия?» — тип һораны. Бындай һорауҙы Уйылдановҡа районда ғына түгел, республикала ла байтаҡ йылдар инде бер кем дә бирмәй, сөнки уны бөтә ерҙә лә беләләр. Белмәһәләр — белһендәр, даны шул тиклем төрлө тарафтарға таралған колхоз председателенең фамилияһын белмәҫкә кемдең хаҡы бар. Бына ни өсөн ул инструкторҙың был һорауын аяҙ көндө башына йәшен һуҡҡан кеүек ҡабул итте. Нисек инде ул, райкомға башы инеп өлгөрмәгән бер ма-

лай, Уйылданов ише Уйылдановтан, бөтә залға фаш итеп, фамилияһын һорап ултыра. Был хурлыкка нисек түҙмәк кәрәк. Уның ҡаҡшамаҫ абруйының төшә барыуына бер дәлил түгелме?

Бер көн, шулай, Украинаның ҡайтанан Рәсәйгә ҡушылыуына 300 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән район байрамында уның ал бирмәгән данлыҡлы юртағын Ленин исемендәге колхоздың бөрсәләй ике юрғаһы тапап уҙып китте. Етмәһә, колхоз председателе Хажи Әхмәтов, ғәм халыҡ араһында ауыҙ күтәреп: «Мин, Уйылданов ише, атты 30 меңгә төшөрөп ипподромдан алманым. Минең юрғалар колхоздың үҙ өйөрөндә тыуып үҫкән малдар. Бына, иҫән булһағыҙ, күрерһегеҙ, уның Ҡырым—Ҡытайҙан поезд менән алдырған дөйәләй юртағын минең юрғалар йөҙ таяҡ түгел, икенсе йыл бер саҡрым артта ҡалдырып китәсәктәр», тип мыҫҡыл итеп тора, ти.

Был мәсхәрәгә нисек түҙергә? Ошо хәлдән һуң Уйылданов, аяҡтан йығылып, өс көн түшәктә ауырып ятты. Уның Әхмәтовҡа йәне көйҙө: «Шул тиклем халыҡ алдында минең абруйҙы әҙерәк уйламаҫҡа, ахмаҡ булырға кәрәк бит. Етмәһә, дуҫ хисапланып йөрөгән була, йүнһеҙ. Бер көн, бик меҫкенләнеп һорағас, бер центнер үлән орлоғо вәғәҙә иткәйнем, ана, кәртәһе артында үҫеп ултырған тилебәрән орлоғон сәсһен», — тип йоҙроғон төйөп, бынан утыҙ-ҡырҡ саҡрым ерҙә ятҡан Әхмәтовҡа кукиш күрһәтеп ҡуйҙы. Бына тағы был инструкторы ни һөрәнләп тора.

Уйылданов өҫтәл янына яҡын уҡ килгәс, Павлов үҙ һорауын яңынан ҡабатланы:

— Товарищ, скажите, как ваша фамилия?

Намыҫы ҡырылыуҙан шартларға етешкән Уйылданов, кейеменә һыйыша алмай, пинжәк төймәләрен ысҡындырып ебәрҙе. Яғаһы, иҙеүе сигелгән гуцул күлдәген быуған ишеүле ебәк бауының суҡлы осон бармағына элеп алды ла уны бер нисә тапҡыр әйләндерҙе. Бөтә залдағы кеше ишетерлек итеп, Павловтың наҙанлығынан кеткелдәп көлдө:

— Меня товарищ Вагапов сам знает, а тебе, Павлуф, дауна бора знать кто такой Уйылданов, — тине лә, үҙенең тапҡырлығына кинәнгән төҫлө, күкрәген ҡайҡайта биреп, алғы рәткә йүнәлде. Бөтә бюро ағзалары менән ул һыңар ҡулын биреп күреште, сират Любушкинға еткәс, уның ҡулын үҙенең ҡулдары араһына ҡыҫып: «Драсте, Биктер Бәсилич», — тип оҙаҡ ҡына һелкеп алды. Ошоға тиклем мине «Ырҙаман ҡустым» тип кенә йөрөткән Ибраһим, был юлы эргәгә үк килеп: «Ырҙаман Ғимранович, һаумыһығыҙ», — тип минең менән дә ике ҡуллап күреште.

Тимәк, был оҙон ҡолаҡ бөгөн минең икенсе секретарь итеп һайланырға тейешлекте ишетеп өлгөргән, тип уйлап алдым.

Уйылдановты райондың барометры тип йөрөтөргә була. Әгәр инде ул берәй етәксе работник менән иҫәпләшмәй башлаһа, тимәк, тегенең үҙ посында ултырыу көнө һанаулы ҡалған тигән һүҙ. Пленумдарҙа, йыйылыштарҙа берәй район масштабындағы етәксе кеше райком секретары тарафынан маҡталып телгә алынһа, Уйылданов уның менән тәнәфестә булһа ла ваҡыт табып, күрешеп, һаулыҡ һорашып китә. Әгәр инде тәнҡит уты эләкһә, элек уның менән һин дә мин, ҡәҙимге һаулыҡ һорашып йөрөгән Ибраһим танымай. Уйылданов председателлек иткән колхозға командировкаға барған етәкселәрҙе ашатыу-эсереү, фатирға урынлаштырыу мәсьәләһендә лә тәртип ҡаты — «рангтар табеле» билдәләнгән. Райкомдың инструкторҙары өсөн бер тәрбиә, бүлек мөдирҙәренә икенсе, ә райком секретарҙары, райсовет председателе өсөн ҡаршы алыу, ҡабул итеү протоколы бөтөнләй башҡаса. Ә «Биктер Бәсиличтең» үҙе өсөн йөҙ күрһәтеү нисегерәк икәнен һөйләп торанһы ла юҡ. Йылдың ҡайһы миҙгелендә, тәүлектең нисәнсе сәғәтендә-килеп төшһә лә, уның өсөн иң затлы һый-хөрмәт һәр ваҡыт әҙер. Быныҡ өсөн Ибраһимдың өйөнә команда биреүе генә бурыс. Ун биш-егерме минутта, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек ҡайнаған йортта, бөтә нәмә — нисә йыл әүәл ҡаҡлап ҡуйған ҡаҙы-ял, яңы ғына һуйып өлгөртөлгән һарыҡтың бауыр-йөрәгенән, эс-ҡарын, майлы бөйөрөнән әллә ни арала тығып өлгөртөлгән тултырма, һалҡын йылҡы ите, колхозда еҫе-ҡоҫо булмаған тоҙло ҡыяр, кәбеҫтә, хатта коньяк яныны йоҡа ғына итеп ҡырҡылған лимон һәм башҡа аҙыҡ-әүҡәт әҙер була.

Әгәр инде ул «иерархия» баҫҡысына ингән работниктар алмашынып торһа, Уйылдановтың тәртиптәре лә алмашынып тора. Түбән категориялы работниктарға сәй генә ҡайнатылып, икенселәре итле туҡмас ашаһа, өсөнсөләре ҡул тығып, алдынан ҡалғансы бишбармаҡ ашауға лайыҡ. Әгәр инде берәй көтөлмәгән хәл сығып, работник етәксе эшенән ике баҫҡыс түбән төшөп китһә, ул кеше бишбармаҡтан мәхрүм ителеп, ҡоро сәйгә генә тороп ҡала. Шулай итеп, үҙеңдең кем икәнлегеңде Уйылдановтың мөнәсәбәте, барометр кеүек, ап-асыҡ күрһәтеп тора.

Ул районда ғына түгел, Өфөлә лә күп учреждениеларҙа бер ҡасан да сират көтөп тормай. Теләгән ишекте аяғы менән төртөп асып инә лә, кемдең нимә менән шөғөлләнеп ултырыуына ҡарамаҫтан: «Я — Уйылданов», — ти ҙә

ниндәй йомош артынан йөрөгәнлеген һөйләй ҙә башлай. Республиканың бер-ике етәксе работнигы, ул туҡал һыйыр һымаҡ кабинетына баҫып инә башлағас, ишекте тыш яғынан яптырырға самалап ҡарағайны, ун биш-егерме минут та үтмәне, иң юғары инстанциянан иҫкәртеү алды...

Ярар. Шулай итеп, пленум үтте, мине икенсе секретарь итен һайланылар. Аҙаҡ Любушкин:

— Бына бөгөндән башлап райондың ауыл хужалығы менән етәкселек итеүҙе һиңә йөкмәтәбеҙ, сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрен күтәреүҙе лә һиңә тапшырабыҙ. Ошоға тиклем мылтыҡ тоҫҡап күп йөрөнөң, шул мылтығыңдан атыр ваҡыт та етте. Нисек атырһың, уныһын ҡарарбыҙ, — тип аҡыл өйрәтеп алды.

Мин Баймаҡ МТС-ынан бөтөнләй райкомға күсеп ҡайтыр көн еткәс, шылтыратып Ғәбидә еңгәйгә ниҙер әйтте лә, МТС директоры Ҡадыров бер аҙҙан мине үҙ өйөно алып ҡайтты. Ғәҙәттә аҙ һүҙле, әйтһә, теш араһынан эре-төрөһөн, иң мөһимен генә әйтергә өйрәнгән, килгән кешене бер ваҡытта ла «йылтыр» менән шаяртмаған Зариф Хафизович был юлы нишләптер үҙ ҡағиҙәһен боҙорға ҙйлаған. Ҡул сайып бәләкәй генә тәҙрәле ҡараңғы тәпәш өй уртаһындағы өҫтәлгә ултырғас, яртышар стакан араҡы һалды ла, хужа һүҙ башланы:

— Һинең менән бергә эшләп, һине, йәш кешене, бер аҙ эш тәртибенә өйрәтергә, тигән ниәт бар ине. Фән Шәрифуллин менән бергә йәшәрһегеҙ, тип өйөн дә эшләтеп ҡуйғайным, ләкин һиңә насип булмаған икән. (Шәрифуллин Яңауыл райкомының хәҙерге беренсе секретары, ул ваҡытта Баймаҡ МТС-ының баш зоотехнигы.) Рамазан Ғимранович, һин хәҙер ҙур кеше булдың, һиңә барыбыҙ ҙа, балалар ҙа өйрәнеп бөткәйнек. Бигерәк тә көн дә һинең менән шахмат уйнаған Батырға күңелһеҙ булыр инде, тип мөйөштә ялан аяҡ сем-ҡара күҙҙәрен төрлө яҡҡа тәгәрәтеп ҡарап торған бәләкәй улына күрһәтеп алды.

Шулай итеп, ауыл хужалығы тармағында «тешен ҡойған» Зариф ағайҙың эскерһеҙ һабағынан: Любушкиндың пленумда әйтелгән кинәйәгә тартым һүҙҙәренән һуң авторға «Сиҙәм эпопеяһы»на «башы-тоҡоғы» менән сумырға тура килде, сөнки ул замандарҙа «Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе күтәреү» партияның үткәргән мөһим иҡтисади сараһы ғына түгел, ә ҙур әһәмиәткә эйә ағымдағы сәйәсәте ине, шуға күрә был мәсьәлә һәр кемдән етди эш талап итте, ә уға илке-һалҡы ҡараш — ут менән шаярыуға бәрәбәр булды.

«Донъяла ваҡ халыҡтар юҡ... атаҡлы шәхес үҙ буйы менән үлсәнмәгән кеүек, халыҡтың бөйөклөгө лә уның һаны менән билдәләнмәй»

В. Г юго.

РУХ ҺҮНМӘҺӘ, ИЛ ҮЛМӘҪ, УЯНЫРҒА МӨҘҘӘТ ЕТТЕ

Халҡыбыҙ яҙмышы хаҡында ҡайһы бер фекерҙәр.

Ауыр, ҡатмарлы иҡтисади һәм сәйәси кризис кисерелгән шаулы заман шауҡымының башҡорт халҡын һәм уның яҙмышын да ситләтеп үтмәүен күрмәҫкә тырышыу оло бер хата булыр ине. Беренсенән, беҙ башҡорт милләтенең киләсәккә үтеү юлы, яҙмышы күптән инде көрсөккә терәлеүен һәм уның бөгөн генә башланмауын, нисек кенә ҡыйын булмаһын, тулыһынса танырға тейешбеҙ. Икенсенән, әгәр ошо процестарҙы өйрәнеп, уны туҡтатыу юлдарын эҙләмәһәк, ата-олатайҙарыбыҙ аяуһыҙ көрәштәрҙә яулап алған Башҡортостан йөмһүриәтенең йәшәү-йәшәмәү мәсьәләһе лә бик оҙаҡ көттөрмәй, барыбер көн тәртибенә ҡуйыласаҡ.

Мәғлүм булыуынса, башҡорт халҡының 1919 йылдың мартында РСФСР һәм партияның Үҙәк Комитеты ҡулынан алған йөмһүриәт рәүешендәге үҙаллылығы Үҙәк мәркәз тарафынан ихлас күңел менән бирелгән һиҙиә түгел. Уны башҡорт халҡы үҙ ҡаны менән һуғарып, яулан алды. Үҙәк хөкүмәттең был сәйәси акцияһы тик әле Советтарға ышанып етмәгән ваҡ милләттәрҙе, бигерәк тә үҙ мөстәҡиллеге өсөн ҡаты көрәш алып барған башҡорт халҡын үҙ яғына ылыҡтырыу, башҡа мосолман милләттәренә үрнәк өсөн эшләнгән ваҡытлы сара икәнен тарих ап-асыҡ күрһәтте. 1923 йылда Башҡортостанда «сәнәғәт менән етәкселек итеү өсөн кадрҙарҙың етмәүен» сәбәп итеп, Кәрпәсәүҙән башлап Миәскә тиклемге тимер юлы буйында ятҡан бөтә Урал металлургия үҙәктәрен тартып алдылар. Кантондарҙы бөтөрөп, Башҡортостанда районлашыу процесы башланғас, республика составында Арғаяш, Бүре, Губерна, Ҡара Бүләк, Ҡоншаҡ һәм Мөхәмәт Ҡолой волостарынан торған Арғаяш кантоны тулыһы менән яңы Силәбе әлкәһенә бирелде.

Был факттарҙы килтереп, автор бөгөнгө былай ҙа ҡатмарлы заманда халыҡ араһында ғүмер буйы ҡанлы бәрелештәр менән һуғарылған ер дәғүәһен яңынан ҡуҙғатырға йыйынмай, тик Үҙәк хөкүмәттең Башҡортостан йөмһүриәтенең тәүге ойошторолоу көндәренән башлай уға ҡарата ғәҙелһеҙ сәйәсәт үткәреүен тағы бер тапҡыр иҫбатлап үтергә генә теләй.

Башҡортостан республикаһының көнбайышында һәм төньяғында йәшәгән милләттәштәребеҙҙең ҡайһы административ-территориаль берәмеккә күсеп ҡалыуҙары тураһында сурытып торманым. Ул мәсьәлә бөгөнгө көндә яңынан Өфы губернаһы ойоштороу хаҡында тыҡрыҡ һайын тамаҡ ярған, демократик осоро тыуҙырған эшмәкәрҙәр выжданында.

Беҙ һүҙҙе милләттән башлағайныҡ. Ҙур ҡыйынлыҡтар аша үҙ йөмһүриәтен булдырған һәм уға үҙ исемен биргән милләтебеҙҙең бөгөнгө хәле нисек һуң? Иң башта башҡорт халҡының һан яғынан кәмеү процестарын һәм уның сәбәптәрен күҙ алдына килтерәйек. Эш шунда, бөтә рәсми документтарҙа күрһәтелеүенсә, 1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса миллион ярымдан ашыу булған башҡорт халҡы Октябрь революцияһынан һуң бер миллиондан да кәм булып ҡалған.

Миҫал өсөн алты өйәҙҙән торған Өфө губернаһы буйынса 1897 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә мөрәжәғәт итәйек. Был иҫәп буйынса губернала барлығы 2 миллион 197 мең кеше йәшәгән. Милләттәр буйынса бүленеш шулай:

Башҡорттар — 900 мең, йәғни 40,98 процент.

Славяндар — 840 мең, йәғни 38,22 процент.

Татарҙар—185 мең, йәғни 8,41 процент.

Типтәрҙәр — 40 мең, йәғни 1,82 процент.

Мишәрҙәр — 21 мең, йәғни 0,95 процент.

Ҡалғандарын сыуаштар, вотяктар, мариҙар тәшкил иткән.

Ҡасандыр үҙ территорияһында һан яғынан беренсе урында торған милләт 1989 йылғы иҫәп буйынса өсөнсө урында ҡалған. Ә 1917—1920 йылдарҙа сыҡҡан рәсми ҡағыҙҙарҙа ике миллионлы башҡорт халҡы тураһында һүҙ бара бит. Ошо турала һүҙ йөрөткән саҡта теләһә ниндәй һуғыштарҙа йәки яуҙарҙа башҡорт халҡының сағыштырмаса күберәк ҡырылыуы объектив фекер йөрөткән һәр кешегә көн кеүек асыҡ. Волга — Урал буйы халыҡтарынан граждандар һуғышы осоронда башҡорттарҙан да күберәк һәләкәткә дусар булған башҡа бер халыҡты атауы ҡыйын. Уның сәбәптәре һәр кемгә билдәле. Ә бына башҡорт халҡының һан яғынан Октябрь революцияһынан һуң ҡырҡа кәмеүено лә сәйәси һәм иҡтисади сәбәптәр бар.

Беренсенән. Октябрь революцияһына тиклем башҡорт, татар халҡын ғына түгел, Урта Азиянан ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, уйғыр, үзбәк, төрөкмән, ҡарағалпаҡ, йәғнн «фарсы телендә һөйләшкән тажиктарҙан башҡа» бөтә мосолмандарҙы тиерлек төрки теле хеҙмәтләндергән. Ошо дөйөм төрки теле

аша улар бер-береһе менән аралашҡан, аңлашҡан. Рәсми документтар ҙа ошо телдә төҙөлгән. Рәсәйҙә йәшәгән барлыҡ мосолман донъяһының мәҙәниәте һәм дә мәғрифәте төрки теле күсәре тирәһендә әйләнгәи, төрки уның кендеге булған. Төркисә һөйләшкән, ул телдә ҡәләм тирбәткән кеше, үҙе ниндәй генә милләттән булыуына ҡарамаҫтан, заманының ғилемле кешеһе хисапланған. Шул уҡ Әхмәтзәки Вәлиди рус теленә тотонорҙан бик күп алда үҙ олатаһы Хәбибназар хәҙрәт мәҙрәсәһендә төрки, фарсы телдәрен үҙләштергән. Ошо уҡ шәхескә Баку, Сәмәрҡәнд, Ташкент, Бохара, Тегеран, Дели һәм башҡа донъя цивилизацияһы ҡомартҡылары тупланған китапханаларҙа ултырып, иң бөйөк мосолман донъяһының ғилми шәхестәре «ҡояштары» һәм мәшһүр шағирҙар, бөйөк табиптар һәм астрономдар Хорезми, Навои, Низами, Олуғбәк, Әбүғалисина, Ғүмәр Хайямдың мәңге үлемһеҙ яҙмаларын өйрәнергә яҙған. Барлыҡ көнсығыш таныған һәм ихтирам иткән, шул көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдарҙың донъя конгресы президенты булып һайланған Әхмәтзәки Вәлиди был мәшһүрлеккә рус телен һәм шул халыҡтың мәҙәниәтен өйрәнеү аша түгел, ә ғәрәп, фарсы һәм төрки телдәрен үҙләштереү һәм ошо мосолман донъяһының меңәр йыл хакимлыҡ иткән цивилизацияһы аша килгән.

Мосолман донъяһының уртаҡ шағиры Мифтахетдин Аҡмулла үҙенең үлемһеҙ мираҫын тик бөгөнгө башҡорт телендә генә яҙып ҡалдырған булһа, уның шиғри ҡомартҡылары Башҡортостан сигенән ары китә алмаҫ ине. Ялсығол, Соҡорой, Риза Фәхретдинов, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кеүек арҙаҡлы ғалимдарҙың әҫәрҙәре Ҡазанда ла, Бохарала ла, Бакуҙа ла берҙәй нәшер ителгән, берҙәй яңғыраған. Әгәр Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев төркиҙе һыу һымаҡ эсмәһә, уны батша хөкүмәте мөлкәт мәсьәләләрен хәл ҡылыу өсөн Ҡырымға, шундай оло вазифалы йомошҡа ҡушмаған булыр ине. Уның да байтаҡ әҫәрҙәрен Ҡазан, Ырымбур матбуғаттары нәшер иткән бит. Тнмок, уны һәм ул яҙған әҫәрҙәрҙе бөтә ерҙә лә берҙәй аңлағандар һәм үҙ иткәндәр. Бик үк урынлы булмаһа ла, тағы бер миҫал килтерергә батырсылыҡ итәм. 1892 йылда минең олатайым Ғәзизулла Өмөтбаев, дүрт бала атаһы булған 38 йәшлек ир уртаһы кеше, үҙ Ҡолбаҡтыһың (Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылының икенсе исеме) ҡалдырып, Төркөстан һәм Фарсы иле аша йәйәүләп Мәҙинә вә Мәккәгә хаж ҡылырға юллана. Мосафир хоҡуғында ошо сәйәхәттә өс йыл йөрөп, имен-аман хажи дәрәжәһең алған килеш, үҙ ауылына кире әйләнеп ҡайта. Уның бәлә-ҡазаһыҙ тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алыуына бер генә сәбәп:

ул иң әүәл фарсы, гәрәп һәм төркиҙе үҙ теле кеүек үҙ-ләштереүгә өлгәшкән.

Октябрь революцияһынан һуң көньяҡ сиктәре Ҡытайға, ә көнбайыш сиктәре Византияға олғашып ятҡан, тарихы, теле һәм мәҙәниәте дөйөм булған Төркөстан тип аталған даръялай илде мөстәҡил автономияларға бүлеү башлана. Үзбәкстан, Төрөкмәнстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан республикалары барлыҡҡа килә. Һәр бер мөстәҡил дәүләт үҙ грамматикаһын, алфавитын, фонетикаһын төҙөргә тотона, үҙ тарихын һәм мәҙәниәтен булдырыу ниәте менән быуаттар буйына йәшәп килгән теүәл һәм дөйөм сынйырҙы өҙгөләргә керешә. Шулай итеп, берҙәм тарих бер нисә тарихҡа, берҙәм мәҙәниәт милләттәр һанына ҡарап шунса мәҙәниәткә бүленеп китә. Был — ошоға тиклем унар миллионлаған мосолман донъяһын берҙәй хеҙмәтләндергән төркиҙән баш тартыу, башта латин графикаһына күсеп, ә унан һуң ун йыл үтер-үтмәҫтән кириллицаны ҡабул итеү арҡаһында мосолман халҡын меңәр йыл һуғарған рухи һәм мәҙәни тамырҙарынан айырыу ул. Бынның империя сәйәсәте күҙлегенән сығып, маҡсат менән эшләнеүе бөгөн бер кем өсөн дә сер түгел.

Ул ғына ла түгел, революциянан алда дөйөм белем кимәле һис тә рус халҡының кимәленән ҡайтыш булмаған мосолман донъяһы тулайым наҙан булған тип иғлан ителә. Ни өсөн? Урыҫса һөйләшә, урыҫса яҙа белмәгән өсөн. Урыҫ мәҙәниәте һәм мәғрифәте тик бөрөләнеп килгән, уның айырым дәүләт үҙәге лә юҡ осорҙа Бөйөк Осман империяһына ингән төрки халыҡтарының цивилизацияһы сәскә атҡан осор булыуы, уны үҙләштереү үҙе үк ғилемдең юғарылығын иҫбатлауы бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай. Беҙ ошо көнгә тиклем теле лә, яҙмаһы ла булмаған «томана халыҡ» хисабында йөрөй бирҙек. Ә бит Башҡортостанда революцияға тиклем башҡорт, татар араһында белемлеләр урыҫтар менән сағыштырғанда байтаҡҡа күберәк булған. Төрки телен был рәүешле юҡҡа сығарыу сәйәсәте Төркөсғанда мәҙәниәт һәм боронғо тарих ҡомартҡыларын ғына түгел, о бынан дүрт-биш быуат төрки телендә ижад иткән исемдәре Урта Азия менән генә сикләнмәйенсә, донъя күләменә таралған мәшһүр ғалимдарҙы, шағирҙарҙы милләттәргә бүлеү, кем-кемдеке икәнен асыҡлау дәрәжәһенә тиклем барып етте. Уның шауҡымы Башҡортостанды ла урап үтмәне. Төрки телендә ижад иткән башҡорт ғалимдары, мәғрифәтселәренең ниндәй милләттән ҡикәнлеген «иҫбат» итергә тырышыу һуңғы ваҡытта «бер ғилми кәсепкә» әйләнә башлауын беҙ һиҙмәйбеҙме ни? Ырымбур губернаһы Туҡһанбай ауылында тыуған Мифтахетдин

Аҡмулла өсөн бер нисә милләттең, яғаға-яға килеп тартҡылашыуына гуаһ булманыҡмы ни беҙ? Сәбәбе — әлеге лә баяғы, уның төрки телендә ижад итеүендә. Әгәр ул үҙ телендә ижад итһә, уның әҫәрҙәре ул ваҡыттағы Бәләбәй өйәҙенән дә алыҫ китә алмаҫ ине. Шайтан-Күҙәй волосының башҡорто Салауат Юлаевтың төрки телендә халыҡҡа мөрәжәғәт иткән фармандарын, йәнәһе лә, татар телендә яҙылған тип, милләтен дә татар тип раҫларға маташыусылар булманымы ни?

Тимәк, үҙен милләт һанаған һәр халыҡҡа иҡтисади үҙаллылыҡ биреп, мөстәҡил йөмһүриәтлек йәки айырым дәүләт ойоштороуҙың ыңғай факторҙарынан тыш, кире һөҙөмтәләре лә бар икән. Уның иң беренсе кире ҡайтара алмаҫлыҡ зыяны — һәр халыҡты дөйөм рухи, мәҙәни һәм мәғрифәтселек тамырҙарынан айырып, милли ҡамау менән сикләүҙән ғибәрәт. Мосолман халыҡтарының аралашыу ысулы булып йөҙәр йыл хеҙмәт иткән төрки телен юҡҡа сығарыу — был халыҡтарҙы дөйөм тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡыларҙан айырыу, оло шәхестәр тыуҙырған ғилем шишмәләренән мәхрүм итеү, рухи фәҡирлеккә дусар итеү булып һанала. Бының иң фажиғәле һөҙөмтәһе — төрки телендә ижад ителгән яҙма ҡомартҡыларҙы өйрәнерлек ғилми көстәргә сиктән тыш ҙур ҡытлыҡ, был изге эшкә ҡул һелтәп ҡарау.

Башҡортостандан киткәс, һәм унан байтаҡ элгәрерәк, милләтебеҙҙең остазы Әхмәтзәки Вәлиди Урта Азияла ғәжәп әүҙем рәүештә революцион эш башҡарған. Ул һәр бер йыйылышта, митингыла төрлө милләт вәкилдәре алдында төркисә сығыш яһаған. Бына минең алда замандар шауҡымынан һарғайып, хәрефтәре тоноҡланған, беренсе империалистик һуғыштан яҙған атай ҡарттың мәктүб шәрифе, йәғни хаты ята. Уның эпиграфына күҙ һалайыҡ: «Көлһыу аллаһы бари, йыраҡ ернең хәли. Сезки гиззәтле вә хөрмәтлә күргечи әдикәмез илә әникәмегезгә безки аҡ падишах хеҙмәтендә йөргөчи уғлыңыздан кубини күп сәләмнәр күндериб, алланың рәхмәтендә улсын, сау-сәләмәт диярсезләр. Ағамыз Хәкимжан ило әнкәсе Заһита хажиға (ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан революцияға тиклем беренсе хаж ҡылған изге зат ине. *Р. Ө.)* олуғ сәләмнәр тапшырсағыз ҡилгән...» Унан инде һүҙ «ямғырлар яуа», «боғдайның бәясе 50 тин көмөш», «позицияға маладуйлар килде», «беҙнең тарафлардан әдәм юҡ» кеүегерәк информацион хәбәрҙәр китә. Мин йыл һайын тигәндәй Татарстанға ҡәрҙәштәрем янына барып йөрөнөм. Бына шул саҡта бабайҙың һарғайып бөткән архивтары араһынан үҙенең атаһы яҙған, 1914 йыл менән теркәлгән, хат килеп сыҡты.

Был элберәп бөткән ҡағыҙ киҫәге ҡарттың, беренсе донъя һуғышынан, позициянан яҙған хаты икән. Ул хаттағы һөйләм теҙелештәре лә, һаран ғына һуғыш һәм донъяуи информация ла, әйтерһең дә, атайҙыҡынан күсереп яҙылған: шул уҡ «көлһыу аллаһи бари...» шул уҡ «аҡ падишах хеҙмәтендә йөргөчи» h. б. Хаттың аҙағында яҙылған «разыйлар улыңыҙ мәктүб шәриф язғучы катибыңыз Хәмидулла Рамазанов диярсезләр» тигән һөйләменә тиклем оҡшаш, әйтерһең дә был хаттар бер кеше ҡулы аҫтынан сыҡҡан. Айырмаһы тик шунда ғына: уның береһен Урал арты башҡорто, ә икенсеһен Ҡазан өйәҙенән татар кешеһе яҙған.

Бына ошондай аралашыу, аңлашыу сараларының дөйөм булыуы арҡаһында милләт-ара мөнәсәбәттәр хәҙерге кеүек киҫкен формаға әүерелмәгән. Уларҙы иң беренсе нәүбәттә мосолман өммәтенән булыу, рухи һәм матди йәшәйешенең төп нигеҙе булып һаналған Ҡөрьән Кәрим һәм шәриғәт ҡанундары берләштергән, милләт айырымлыҡтарын, һәр төрлө телдең үҙенсәлектәрен йомшартҡан, һәр милләттә әҙ-мәҙ ғәрәпсә белем алып, үҙҙәрен ғөләмәгә һанаған кешеләр китапса йәғни төрөксә һөйләшә торған булғандар. Уларҙың үҙ-ара аралашып йәшәүенә ниндәй милләт вәкиле булыу кәртә була алмаған.

Октябрь революцияһынан һуң һәр мөстәҡил йөмһүриәт уны ойошторған төп милләт теленең үҫешен, уның норма ҡағиҙәләрен, грамматикаһын, фонетикаһын үҙенсә билдәләй һәм төҙөй. 20-се йылдар башынан башланып киткән «Башҡортостанда ерле телде дәүләтләштереү» [1] эшмәкәрлеге шул йылдарҙың аҙағына тамамлана. Башҡортостандың политсекретары Шәһит Хоҙайбирҙин был мәсьәлә буйынса түбәндәге тәкдимде кереткә: «Хәҙерге көндә башҡорт ырыуҙарының һөйләшкән телдәренең ҡайһыһы ғәмәлдә анһат үткәрелеүен иғтибарға алып, минеңсә, тормошҡа яҡын ҡыпсаҡ, юрматы, үҫәргән һәм Һамар, Пермь башҡорттары һөйләшкән телде тормошҡа үткәрергә тейешбеҙ». Ләкин башҡорт теленең төп нигеҙе итеп, дүрт бөгөлөш тип аталған «ҙар-ҙәр», «тар-тәр», «дар-дор», «лар-лор» күплек ҡушымталарын эсенә алған, юрматы-ҡыуаҡан диалекты алына. Был, билдәле, изге ниәт менән, республиканы ойошторған башҡорт милләтен башҡа халыҡтарҙан айырып, ошо грамматика нигеҙендә туплау, бер телдә һөйләшә торған милләт итеп ойошторов маҡсаты

---

[1] «Башҡортостанда ерле телде д ә ү ләт ләш т ер е ү». Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге Баш үҙәк тел комиссияһы нәшере. 1928 йыл.

менән эшләнә. Ләкин шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡорт туған-ҡәрҙәштәрҙең рухи ихтыяждары хисапҡа алынмай, һөҙөмтәлә яңы төҙөлгән башҡорт грамматикаһы орбитаһынан үҙҙәрен башҡорт иҫәпләгән кешеләр йәшәгән күп райондар төшөп ҡала. Тимәк, башҡорт тип халҡын бер милләткә ойоштороу маҡсатында төҙөлгән башҡорт теле грамматикаһы үҙ маҡсатына ирешә алмай. Ул ғына ла түгел, төрки теле менән аралашып, үҙен бер халыҡ итеп тойған милләттәр араһында тел кәртәһе барлыҡҡа килә һәм милләт икегә бүленә тип әйтһәк тә хата булмаҫтыр. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары әкренләп татар булып яҙыла һәм шул милләткә күсә башлай. Ләкин был берҙән-бер хәл иткес фактор түгел. Был процестың башҡа сәбәптәре лә юҡ түгел.

Хәҙер ошо төбәктәрҙә үткәрелгән 1926 йылдың халыҡ һанын алыу һөҙөмтәләренә күҙ һалайыҡ. Уның буйынса шул төбәк волостарып берләштергән Бөрө кантонында бөтәһе 535,6 меҢ кеше йәшәгән, шул иҫәптән урыҫтар — 148,5 меҢ, йәғни 27,3 процент, башҡорттар—177,8 меҢ, йәғни 33 процент, татарҙар — 71,5 меҢ, йәғни 13,3 процент, мишәрҙәр — 41,1 меҢ, йәғни 7,6 процент, мариҙар — 15 меҢ, йәғни 2,8 процент, вотяктар — 22,0 меҢ, йәғни 4,2 процент, типтәрҙәр [1] — 8600 кеше, йәғни 1,6 процент. Был мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, шул саҡта 22 волосты эсенә алған Бөрө кантонында һәр өсөнсө йән эйәһе башҡорт хисапланған.

Ә хәҙер инде ҡайһы бер волостарҙа йәшәгән милләттәр нисбәтенә күсәйек. Миҫалға башта Борай волосын килтерәйек. Был волосҡа ҡараған ауылдарҙа 26,9 меҢ йән эйәһе йәшәгән, шуларҙан урыҫтар — 887 кеше, йәғни 3,5 процент, башҡорттар — 15 меҢ, йәғни 59,6 процент, татарҙар— 2,4 меҢ, йәғни 9 процентҡа яҡын, мишәрҙәр — 3834 кеше, 14 процент самаһы, типтәрҙәр — 2607 кеше, 9,9 процент самаһы. Бынан тыш был волоста 666 кеше мари милләтенән булған.

Тәтешле волосы буйынса мәғлүмәттәргә күҙ һалайыҡ. Барыһы был волоста 28044 кеше йәшәгән, шуның 18 меҢе — башҡорт хисапланған, йәғни 64,9 проценты, татарҙар 5,7 процент, йәғни барыһы 1623 кеше, вотяктар — 5750 кеше, йәғни волость халҡының 20,5 процентын тәшкил иткән. 1926 йылғы перепись буйынса, Илеш волосының 70 процентҡа яҡыны башҡорт милләтен, 10,5 проценты та-

[1] 1929 йылғы перепись буйынса мишәрҙәр һәм типтәрҙәр үҙҙәрен айырым милләт итен һанаған. Ул йылғы иҫәп буйынса Башҡортостанда 137,9 меҢ кеше үҙен мишәр милләтенән, 23,3 меҢе типтәр милләтенән тип күрһәткән.

тар милләтен тәшкил иткән. Ә ҡалғандары, 15 процентҡа яҡыны — урыҫтар, 5 проценттан артығырағы — мариҙар, 6 процент самаһы—вотяктар йәғни, удмурттар булған. Яңауыл волосының 53 процентын башҡорттар, 20 процентын татарҙар, 10 проценты самаһы мариҙар, 14 процент вотяктар (удмурттар) тәшкил иткән [1]. Волость үҙәге Яңауылда йәшәүсе халыҡтың 50 проценты башҡорттар, ә 10 проценттан артығырағы татарҙар хисапланған.

Хәҙер инде иғтибарығыҙҙы көнсығышҡа, Урал артының Йылайыр, Тамъян-Ҡатай кантондарының һәм улар составына ингән волостарға йүнәлтәйек. 1926 йылдағы иҫәп буйынса, Йылайыр кантонында һәм уға ҡараған 12 волоста барыһы 199,7 мең кеше хисапланған. Был һан милләттәр буйынса түбәндәгесә бүленә: урыҫтар — 83 мең, йәғни 41,1 процент, башҡорттар — 83,7 мең, 41,8 процент, татарҙар — 4,4 мең, йәғни 4,7 процент, мишәрҙәр—1759, кеше йәки 0,8 процент, сыуаштар — 3980 кеше йәки 2 процентҡа яҡын, украиндар — 9 мең кеше, 4,5 процент, мордвалар — 8,1 мең, 4 процент[2]. Урал артының үҙәге Белорет ҡалаһында урынлашҡан Тамъян-Ҡатай кантонына күҙ һалайыҡ. Бында барыһы 8 волость була. Баштан уҡ был ике кантонға ингән хәҙерге Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр, Зианчура, Бөрйән, Учалы, Ырымбур өлкәһенән Ҡыуандыҡ, хәҙерге Курган әлкәһенә күскән Ҡатай волостарын, йәғни Урал арты зонаһына ингән административ-территориаль берәмектәрен хәтерҙә нығытып ҡуяйыҡ. Ул беҙгә түбәндә кәрәк буласаҡ. Үрҙә килтерелгән һандарҙан шундай һорау тыуа — ҡайһы төбәктә ул ваҡытта башҡорт халҡы күберәк йәшәгән булған? Ике кантонлыҡты эсенә алған Урал арты төбәгендәме, әллә Өфө губернаһының төп өлөшөн тәшкил иткән төньяҡ-көнбайыштамы? Һандарға иғтибар итегеҙ. Юғарыла күреүегеҙсә, Урал артындағы бөгөнгө ете район ингән төбәктә бөтә халыҡтың 37,7 процентын тәшкил иткән 119,5 мең башҡорт йәшәһә, Октябрь революцияһынан һуң Өфө губернаһы составына ингән Бөрө һәм Бәләбәй кантондарында йәшәгән барлыҡ 1 миллион 116 мең кешенең 305 меңе йәки 27,2 проценты башҡорт булған. Тимәк, Өфө губернаһының ике кантонында ғына ла Урал арты менән сағыштырғанда башҡорттар һаны 186 меңгә күберәк йәки 2,5 тапҡырға артығыраҡ булған. «Башҡорт халҡының йәшәгән төп урыны Урал артында ғына, башҡорттар йәшәмә-

[1] «Башҡортостанда ерле телде д ә ү л ә т л ә ш т е р е ү». Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге Баш үҙәк тел комиссияһы нәшере. 1928 йыл. 52, 54, 59, 61, 68-се биттәр.

[2] Ш у н д а ук. Күрһәтелгән хеҙмәт.

гән Өфө губернаһын Оло Башҡортостанға механик рәүештә һис бер нигеҙһеҙ ҡушыуҙы законһыҙ акция, тип хисапларға һәм шуға ярашлы рәүештә, "йәнәһе, Башҡортостанға һис бер мөнәсәбәте булмаған Өфө губернаһын унан тартып алып, яңынан Өфө өлкәһе ойошторорға һәм уны Рәсәй юрисдикцияһына бирергә», — тип донъя бутап, оран һалыусы ҡайһы бер әфәнделәргә бына ошо тарихи ысынбарлыҡты белергә, о белмәгән хосуста өйрәнергә кәрәк ине.

Икенсенән. Башҡорт милләтенең үҫеш юлындағы трансформацияһын иҫбатлау, үрҙә килтерелгән дәлилдәр нинДәйҙер дәрәжәлә сәйәси аспектҡа ҡайтып ҡалһа, был ҡатмарлы юлда уның иҡтисади аспекттары ла юҡ түгел. Мәсьәлә шунда: Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡы, атап әйткәндә, аҫаба башҡорттары, вотчинниктар категорияһына ингән башҡорттар ер биләүҙә быуын-быуындан өҫтөнлөк хоҡуғы менән файҙаланған. Ун йыл һайын тигәндәй үткәрелә торған ревизия сказкаларында (переписта) Башҡортостанда, Ырымбур губернаһында йәшәгән башҡорттарҙың ошо милләт кешеһе булыуы документаль рәүештә иҫбатлана килгән. Батша закондары менән аҫаба башҡортоноң һәр береһенә 40-ар дисәтинә ер биләргә хоҡуғы булһа, хуш күңелле башҡорт халҡының рөхсәте менән улар еренә күсеп урынлашҡан килмешәктәргә (припущенниктар) йән башына 10 дисәтинә ер биләргә рөхсәт ителгән. Был уңай менән шуны ла билдәләп үтергә кәрәктер. Башҡорт ерҙәренең урыҫ колонизаторҙары тарафынан аяуһыҙ таланыуы әленән-әле ҡалҡып торған болаларҙың, башҡорт восстаниеларының төп сәбәбе булыуын, меңәрләгән башҡорт ялпыларының (массаларының) еренән мәхрүм булып, ризаһыҙлыҡ күрһәтеүен иҫәпкә алып, хатта батша хөкүмәте, императрица Анна Иоановна идаралыҡ иткән осорҙа, 1737 йылда уҡ башҡорт ерҙәрен һатыуҙы тыйыу тураһында Указ сығара. Бындай Указ император Павел I идара иткән сатта, 1797 йылда, яңынан ҡабатлана. Ләкин был батша указдары башҡорт ерҙәренең таланыуына һис кенә лә ныҡлы кәртә була алмай. Башҡортостандың ерҙәрен төрлө юлдар менән баҫып алыу XIX быуат буйына өҙлөкһөҙ дауам итә.

Шулай ҙа башҡорт милләтенән булған кешеләрҙең ер биләүҙә булған өҫтөнлөк хоҡуғы ла көсөн юғалтмай — хәл ҡәҙәре ғәмәлгә аша бара. Шуға күрә лә башҡорт ерҙәренә ебәрелгән «припущенниктар», беренсе сиратта, теле, ғөрөф-ғәҙәттәре менән яҡын торған татарҙар араһында ниндәй саралар менән булһа ла төп милләт сафына инеп ҡалыу ынтылышы көсәйә. Тәүге сиратта был маҡсатҡа

ирешеү өсөн ҡатнаш никахтар төҙөү саралары ҡулланыла башлай. Милләттең теүәллеген, сафлығын һаҡлап ҡалыу маҡсатында түгел, ә башҡорт милләтенән булған кешеләр биләгән иң яҡшы ерҙәрҙе әрәм-шәрәм итеүгә кәртә ҡуйыу маҡсатында батша хөкүмәте башҡорт ир-егеттәренә татар ҡыҙҙарына өйләнеүҙе ҡәтғи тыя торған икенсе указ сығара. Был указды боҙған кешегә яза рәүешендә хөкүмәт файҙаһына бер драгун аты биреү сараһы ҡарала. Ә инде указды икенсе тапҡыр боҙған кешегә ҡарата Себергә һөргөнгә ебәреү язаһы ҡулланыла. Икенсе милләт кешеһе менән никахлашыу тик генерал-губернаторҙың рөхсәте менән генә эшләнә торған булған. Никахтарға ҡарата бындай вето, үрҙә әйтелгән сәбәптәрҙән тыш, былай ҙа боласыл башҡорттоң көсө артмаһын, икенсе милләттәр менән бәйләнешкә инеп, уларҙы ла батшаға ҡаршы баш күтәреүгә ылыҡтырмаһын өсөн эшләнелгән бер сара булып тора.

Ләкин Октябрь революцияһы ҡатламдарҙы бөтөрә, халыҡтың ер биләүҙәге элекке өҫтөнлөгөн дә юҡҡа сығара. Ул ғына ла түгел, ергә булған хосуси милек тураһындағы батша закондары урынына Рәсәйҙең барлыҡ ерен дәүләтләштереү хаҡында ҡарар ҡабул итә. Бөтә халыҡтарҙың ергә булған хоҡуҡтарын ғына түгел, үҙҙәрен дә тигеҙләй. Ошоноң менән башҡорт халҡын уҡмаштырып торған бөтә ҡоршауҙар өҙөлә. Төньяҡ-көнбайыш өлөштә йәшәгән, үҙ көнкүрештәрендә генә түгел, тел, ғөрөф-гәҙәттәре буйынса ла татарға яҡын торған башҡорттарға үҙе теләгән милләтте һайларға ирек бирелә. Был процесс айырым милләт булып, батша заманында ер биләүҙә башҡорттар кеүек үк өҫтөнлөк менән файҙаланған мишәрҙәр араһында иң тәүҙә башланып китә. Ә уларҙың һаны 1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Башҡортостанда 138 мең кеше иҫәпләнә. Был милләт кешеләре бөтөнләйе менән татарға күсә, сөнки улар өсөн артабан «мишәр» булып яҙылыуҙың бер мәғәнәһе лә ҡалмай. Бынан тыш Башҡортостан территорияһында еренән мәхрүм ҡалған үҙен «типтәр» тип йөрөткән 25 мең самаһы халыҡ та була. Үҙҙәренең ҡайһы тарафта булыуҙарына ҡарап, улар шул төбәктә тупланып йәшәгән ҙурыраҡ милләт сафын тулыландыралар. Ғүмер баҡый ерһеҙ интегеп, ерле общиналар алдында баш эйеп, үҙҙәрен йәлләтеп йәшәүҙән типтәр халҡы ла ҡотола, улар ҙа ер биләү мәсьәләһендә башҡа халыҡтар менән тигеҙләнә һәм теләһә ниндәй милләт булып яҙылыу хоҡуғына эйә була.

Шулай итеп, үрҙә әйтеп кителгән — башта сәйәси, ә унан һуң иҡтисади сәбәптәр башҡорт халҡының һан яғы-

нан әкренләп кәмей башлауына юл аса. Билдәле, был мөһим факторҙарҙан тыш, төп халыҡтың кәмеүенә башҡа бик күп сәбәптәр ҙә бар. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡтап китәйек. 1921 йылғы ҡот осҡос йот бигерәк тә Урал артында көн күргән башҡорт халҡының бәкәленә һуға. Малсылыҡ менән шөғөлләнгән ауылдар болондарҙа, көтөүлектәрҙә үлән үҫмәү, ҡап-ҡара ҡалыу сәбәпле, күпләп ас үлемгә дусар ителә. Йылайыр кантоны ауылдарында аслыҡ ҡырғынынан 40—50 процент халыҡ үлем тырнағына эләгә. Билдәле, был халыҡ өҫтөнә ябырылған фажиғә дөйөм демографик торошҡа тәьҫир итмәй ҡалмай.

Сталин репрессияһы осоронда ла халыҡ ҙур юғалтыуҙар кисерә. Коллективлашыу, о унан һуң ил буйлап таралған «халыҡ дошмандарын» эҙәрләү һәм меңәрләп уларҙы юҡ итеүҙе башҡорт халҡының иң ҙур юғалтыуҙарының береһе тип хисапларға кәрәк.

Борон-борондан «һайт» тигәнгә «тайт» тип торған дөргөн башҡорт халҡы коллективлаштырыуға ла дәррәү йәбешә. Башҡортостан территорияһында ярышып, бөтә өлкәләрҙе лә уҙып китергә һәм коллективлаштырыу буйынса иң алғы сафтарға сығырға, тигән ынтылыш бигерәк то көслө була. Шул сәбәпле колхоздарға крәҫтиәндәрҙе көсләп индереү, теләмәгәндәргә ҡарата репрессив ысулдар ҡулланыу бик ныҡ таралып китә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, тик 30-сы йылдың баштарында ғына 23 мең кеше Себергә, һөргөнгә оҙатыла. Уның ҡарауы, шул йылдың аҙағында колхоздар ойошторою буйынса «ярышта» Башҡортостан Союзда беренсе урынды яулай. Башҡортостанда колхоздар ойошторояуҙағы ҙур хаталарҙы, «үтә тырышлыҡты» ҡаты тәнҡит аҫтына алып, ВКП (б) Үҙәк Комитеты 1931 йылдың яҙында махсус ҡарар ҡабул итә. «Вәлидовсы», «мортазинсы», «милләтсе» тип тағылған ҡара мөһөрҙәр һәм ҡурғаштай ауыр бинахаҡ ғәйепләүҙәр меңәрләгән башҡорт интеллигенция вәкилдәренең ғүмерен ҡыйып үтә. 1937 йылдың 8 декабрҙәге сасҡау һыуыҡ таңында «Башҡортостан» территорияһында Совет власын ҡолатыуҙы маҡсат итеп ҡуйған контрреволюцион башҡорт милли хәрәкәтенең» 25 ағзаһын, элекке мортазинсыларҙы Өфө төрмәһендә язалайҙар, ике-өс минут интервал менән сығарып аталар. Улар араһында элекке мәғариф халыҡ комиссары, Мәскәүҙә ҡыҙыл профессура институтын тамамлаған Ибраһим Хафиз улы Абызбаев, Эске эштәр халыҡ комиссариатының атлы дивизион командиры, граждандар һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы егете Шәмсетдин Ғафаров, медицина

институтының хәрби етәксеһе полковник Рәүф Сәфәров, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Әбйәлил районы Ярлыҡап ауылы егете Ғәббәс Шәйхелислам улы Ырыҫҡолов, Башҡорт атлы бригадаһының эскадрон командиры атлы бригаданың элекке полк командиры Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, 8 бала атаһы, 55 йәшлек Фәттәх Әҙелмырҙа улы Ибраһимов, Башҡорт атлы бригадаһының командиры Муса Мортазиндың туғандары, Учалы районы Көсөк ауылы егеттәре Әхмәҙи, Искәндәр һәм Әбүбәкер Мортазиндар һәм башҡалар була. Был дәһшәтле документтың аҙағында: «Тройканың хөкөмөн 1937 йылдың 8 декабрендә 6 сәғәт 25 минутта урын-еренә еткереп атҡарҙым. Сержант Ковалевич», — тигән «эшлекле», асыҡтап-асыҡ оятһыҙ имза теркәлгән. Ошо партияла атылған ил ағаларының, милләт уҙамандарының мәйеттәре Өфөнөң Сергеевск зыяратында дөйөм соҡорға ауҙарылған.

Бихисап төрмә коридорҙарында, ыштан-күлдәксән генә, ялан аяҡ боҙло ҡар өҫтөндә үҙ үлемен көтөп торған ҡаһармандарҙың ғүмерен өҙгән, бөгөн иһә именлек комитетының пенсияһын ашап, беҙҙең менән бер рәттән ғоруҙ ғына атлап йөрөгән кисәге йәлләттәрҙең әле лә байтағы тере икәнлегенә минең иманым камил. Ул ваҡыттағы 20—25 йәшлек йәлләттәргә бөгөн 75—80 йәш. Кешелеккә ҡаршы ҡулдары менән ҡылған бөтә яуызлыҡты һәр кем үҙ иңе менән күтәрергә тейеш.

Был тәңгәлдә бигерәк тә башҡорт халҡының иҫәбе ҙур. 1937 йылда был халыҡтың иҫенә барыһын да төшөрәләр: 1918—1919 йылдарҙа мөстәҡиллек даулап, башҡорт ғәскәрҙәренең Колчак яғында һуғышыу осраҡтарын да, Урал аръяғында Ҡыҙыл Армия частарынан ерле халыҡты яфалап, контрибуция һалғаны, мыҫҡыллағаны өсөн түҙемлеге шартлаған Мортазин полкының аҡтар яғына сығып китеүен дә, барыһын да, барыһын да. Шуның өсөн дә атлы бригада составында һуғышҡан бер генә һуғышсы ла үҙ үлеме менән үлмәне: йә уны Петроград, Польша фронттарында, йә КГБ төрмәһендә үлтерҙеләр. Петроград фронтында һуғышҡан ун меңлек башҡорт ғәскәренән үҙ Башҡортостанына нисә кеше әйләнеп ҡайтты икән? Бик һирәк, бик бәхетле бер нисә йөҙ кеше. Башҡорт дивизияһынан ҡалған тулы булмаған ике полкты Башҡортостанға түгел, тағы ла Көньяҡ фронтҡа оҙаталар. Уларҙың тыуған иленә башҡорт яугирҙарының ҡаны һәм һүнмәҫ даны менән һуғарылған Петроград эшселәр һәм һалдаттар Советы тапшырған Ҡыҙыл Байраҡ ҡына ҡайтты.

Атлы башҡорт бригадаһынан Польша фронтында ҙур батырлыҡтар күрһәткән өсөн Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ор-

денына лайығ булған 78 һуғышсыға тултырылған реляция ҡағыҙы ғына Совет армияһы архивында һаҡлана. Шулар иҫәбендә комбриг Муса Мортазиндыц — өс. Шәмсетдин Ғафаровтыц ике Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайығ булыуы тураһындағы хәрби аттестациялар ғына үткән шанлы йылдар шаһиты булып тора. Ҡайһы ваҡ милләт үҙ мөстәҡиллеге өсөн ошондай ҡорбан һалған? Ундай башҡа милләт юҡ!

Бына ошо әйтеп кителгән сәбәптәрҙән һуң, башҡорт халҡы, билдәле, үҙ республикаһында әҙселек тәшкил итә һәм шуның өсөн дә уның үҙ иленә законлы рәүештә хужа булырға ынтылыуын инҡар итергә тырышыусылар һәр саҡ иҫтәрендә тоторға тейеш: төп халыҡ Башҡортостанда йәшәгән халыҡтың биштән бер өлөшөн тәшкил итәме, ундан бер өлөшөн тәшкил итәме, ул бер ниндәй ҙә роль уйнамаясаҡ, теләһә күпме ҡалһа ла, башҡорт халҡы үҙ иленең мөстәҡиллеге өсөн аҙағына тиклем көрәшәсәк, сөнки хаҡлыҡ уның яғында.

Заманында үҙенең киң, йомарт күңеллелеге һәм оло йөрәклелеге арҡаһында үҙ өйөнә өйҙәш индергән, әлбиттә, әммә шул өйҙәштәрҙең өй түрендәге урынды баҫып алып, үҙҙәренең урамға ҡыуылып сығыуына был халыҡ бер ҡасан да юл ҡуймаҫ. Башҡортостанда йәшәүсе бер кем дә бындай нәтижәгә иҫәп тотмаһын ине. Ниндәй милләт вәкиле булыуына ҡарамаҫтан. Башҡортостанда бөтә милләттәрҙең дә тиң хоҡуҡлы булыуҙары бөтә яҡлап тәьмин ителгән хосуста ла, һәр кем һанһыҙ ҡорбандар аша, быуын-быуын ата-олатайҙарҙың ҡаны менән һуғарылган был илдең ысын хужаһы кем икәнен иҫендә тоторға тейештер.

Заманында Көнсығыштан Османға, йәғни күк йөҙөн ҡара болот кеүек ҡаплап Башҡортостан иленә ябырылған татар-монгол урҙаларына, о көньяҡтан күп һанлы ҡыпсаҡ-ҡалмыҡ илбаҫарҙарына ҡаршы сығып, үҙ илен ҡурсалап ҡалған һәм уның бөтөнләгән быуаттар буйына ҡораллы дошмандарҙан һаҡлап тора алғаң башҡорт халҡы ассимиляцияға ғына ҡаршы тора алыр, ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген киләсәктә лә һаҡлап ҡалыу өсөн үҙенең барлығ көсөн һалыр. Башҡорт халҡының һуғыштан алдағы һәм һуңғы йылдарҙағы кәмеү процесын аңлата торған тағы бер сәбәп — ул да булһа ҡатнаш никахтарҙың бик ныҡ йышайыуы, тип иҫәпләргә кәрәк. Асылда, Башҡортостанда бындай никахтарҙың нисбәте 36—40 процентҡа барып етә. Был күрһәткес буйынса ла республиканың йәш гражданДары илдә беренсе урында тора. Быныҡ менән мин башҡа милләт вәкилдәренә өйләнмәҫкә йәки тормошҡа сығыуҙы ниндәйҙер бер ҡарар менән тыйырға тигән тәк-

дим индермәйем. Әгәр был ҡатнаш, элеккесә әйткәндә, интернациональ никахтар башҡорт халҡының демографик яҡтан хәлен яҡшыртһа, уны тик хупларға ғына кәрәк тә бит.

Миҫал өсөн ҡаҙаҡ милләтен алайыҡ. Яңы ғына, йәғни 1978 йылғы халыҡ иҫәбен алыу, 2,5 миллион тәшкил иткән ҡаҙаҡ милләте бөгөн 7 миллионға барып етте. Билдәле, быға тәбиғи артыу ҙа булышлыҡ иткәндер. Ләкин эш унда ғына түгел, һуңғы йылдарҙағы Ҡаҙағстанда киң ҡолас алған ҡатнаш никах төп халыҡтың һанын бермәбер арттырырға ярҙам итте. Был халыҡтың һаны нигеҙҙә татар, рус, украин һәм немец милләттәре иҫәбенә ҡырҡа күтәрелде. Исеме бөтә союзға билдәле элекке Үҙәк Комитет ағзаһы, Ҡаҙағстандың танылған механизаторы немец ҡыҙы Геллерт Целиноград өлкәһендә йәшәй. Уның иптәше ҡаҙаҡ егете — совхоз зоотехнигы. Геллерт үҙенең туған теленән башҡа ҡаҙаҡ телендә яҡшы һөйләшә, ул ғына ла түгел, үҙенең биш балаһын бынамын итеп ҡаҙаҡ теленә өйрәткән. Бындай ғаиләләр Ҡаҙағстанда бер генә түгел, йөҙәр, меңәр.

Беҙҙең Башҡортостан шарттарында Геллертҡа өйләнгән башҡорт егете башта үҙе немецҡа әйләнер ине һәм, тора-бара, балалары ла, үҙ тоҡомон, сығышын онотоп, немец булып китерҙәр ине. Йәки ни немец була алмай, ни башҡортса өйрәнә алмайынса, урыҫ булып яҙылырҙар ине.

Һис бер хаталанмайынса беҙҙәге ҡатнаш никахтарҙың яҙмышын алдан уҡ билдәләргә була: башҡорт ҡыҙы татарға сыҡһа йәки башҡорт егете татарға өйләнһә, ике осраҡта ла был ғаилә ағзалары татар милләтен күбәйтә торған ышаныслы резерв булып тора. Ә инде бик тә бик булмаһа, тел мәсьәләһендә бер аҙ ыҙғышып алғандан һуң, ирле-ҡатынлы икеһе лә урыҫса һөйләшергә күсер, унан һуң уларҙың балаларының кем булыуы көн кеүек асыҡ. Башҡортостандан ситкә киткән 45 проценттан артығыраҡ башҡорттоң бик һирәге генә ситтә урыҫ теле баҫымына сыҙап, аҙаҡҡа тиклем үҙ милләтен һаҡлап ҡала ала, йәки уларҙың күбеһе шулай уҡ ҡатнаш никах ҡорбанына әйләнә.

Һығымта: ҡатнаш никах — башҡорт милләтен аҫтыртын, һис бер көсләүһеҙ, шым ғына ассимиляцияға алып бара торған тура юл.

Башҡорт халҡының һан яғынан кәмеүе һәм уның ассимиляцияланыу процестары үрҙә күрһәтелгән сәбәптәр менән генә сикләнмәне, ул һуңғы йылдарҙа һаман да дауам итте. Инде хәҙер ошо процестарҙы алға этәрә һәм тиҙләтә торған ваҡиғаларҙың сираттағы сәбәбе булып, Башҡорт-

останда иҡтисады түбән кимәлдә торған колхоздар базаһында совхоздар ойоштороу кампанияһының киң ҡолас алыуын билдәләп үтергә кәрәк.

Был ваҡиға 1957 йылдарға тура килә. Эш шунда: нишләптер иҡтисады йомшаҡ булған колхоздар, нигеҙҙә, Урал аръяғы зонаһы, тау-урман йәки көньяҡ райондарына, икенсе һүҙ менән әйткәндә, башҡорт халҡының тығыҙ ойошоп йәшәгән урындарына тура килде. Әйтерһең дә. Илеш, Дүртөйлө, Кушнаренко һәм башҡа райондар, иҡтисади йәһәттән тик көслө колхоздарҙан ғына ғибәрәт булған. Быны осраҡлы ғына хәл тип ҡабул итеү һис тә дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине. Беҙ, ул ваҡыттағы ошо сараларҙы үткәреп йөрөгән йәш район етәкселәре, өҫтән ҡушылған һәр күрһәтмәне урын-еренә генә еткереп түгел, арттырып үтәргә өйрәтелгән ылдым работниктар, был сараның асылда ниндәй сәйәси-социаль нәтижәләргә килтереүен башҡа ла килтермәгәнбеҙ. Быны тик Урал аръяғы райондарында яңы ойошҡан совхоздарға Башҡортостан ғына түгел, хатта бөтә Рәсәйҙән тиерлек төрлө милләт кешеләре килеп тула башлағас ҡына аңланыҡ. Совхоздың үҙәгендә генә түгел, бүлексәләрендәге мәктәптәрҙә лә белгес булып килгән бер нисә урыҫ һәм башҡа милләт ғаиләләре өсөн параллель урыҫ кластары асыу тәртибе таралып китте. «Мөстәҡил азат Башҡортостан» илендә урта мәктәпте үҙ телендә тамамлап, юғары уҡыу йорттарына инә алмай яфаланған балаларҙың ата-әсәләре урыҫса уҡытырға сат йәбеште. Хәйер, беҙҙең конституция әле бөгөн дә ундай ата-әсәләрҙең теләген хуплап, ҡолас йәйеп ҡаршы алып тора. Күпләп совхоз ойошҡан төп башҡорт райондарында көсләп түгел, үҙ теләге менән руслаштырыу йоғонтоһона әләгеү һәм милли рухтың, телдең, мәҙәниәттең юҡҡа сығыу процесы башланды. Ҡатнашыусыларҙың 90 проценты төп халыҡ булыуға ҡарамаҫтан, үткәрелгән рәсми ултырыштарҙа, йыйылыштарҙа урыҫса һөйләшеү киң урын алды, ә инде һуңынан теленән яҙған бер быуын етәксе кешеләр барлыҡҡа килгәс, был кәңәшмәләр башҡа милләттән бер кеше ҡатнашмаған хосуста ла урыҫ телендә үткәрелә башланы. Быға беҙ әсенеү генә түгел, ғорурландыҡ, танау сөйҙөк. «Ҡара, ҡара, урыҫсаны нисегерәк ебәрә, урыҫың ары торһон, теле телгә йоҡмай һыҙыра бит»,— тип мактандыҡ. Әлеге лә баяғы ҡатнаш никахтар тағы ла йышая, сәскә ата башланы, хәйер, мәрйә кәләш эҙләп әллә ҡайҙа йөрөйһө юҡ, ҡайһыһын теләйһең, барыһы ла урынында — килтереп ҡуйылған. Бына шулай итеп, үҙебеҙҙең алдан күрә белмәүлек, бөгөнгө көн менән генә йәшәүгә күнеккәнлегебеҙ арҡаһында, үҙ милләтебеҙ тә-

ненә тиҙ гена уңала алмаҫлыҡ йәрәхәт һалдыҡ, һөҙөмтәлә, үҙенең рухи тамырҙарынан айырылған, ата-олатайҙарының традицияларын, телен, мәҙәниәтен, башҡорт халҡына ғына хас булған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе дауам итергә һәләтһеҙ булған бер быуын кеше тәрбиәләп сығарҙыҡ. Ундай кешенең тамырынан айырылған көҙгө ҡамғаҡ булыуы, ел ҡайҙа өрһә, шул яҡҡа тәгәрәп йөрөр өсөн генә һәләтле икәне һәр кемгә мәғлүм. Бындай кеше уны шул милләт вәкиле иткән, уны һәр саҡ ныҡ, эйелдермәй тоҡоп торға н умыртҡа һөйәгенән мәхрүм.

Былар барыһы ла прогрессив үҙгәреш, илдә, йәмғиәттә марксизм-ленинизм нигеҙендә интернационализм тәғлимәтенең сәскә атыуы тип баһаланды. Бына-бына бөтә милләттәр ҙә үҙ теләге менән бер телдә һөйләшә башларға тейештәр. Уларҙың рухы ла, әхләге лә берҙәй. Тик коммунистик берҙәмлек байрағы аҫтында сәскә атыу осорона килеп еттек тигәндә генә, аяҙ көндә күк күкрәне. 74 йыл буйы ҙур юғалтыуҙар аша капитализм ҡалдығына, буржуаз әхләккә ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән йәмғиәт бөгөнгө көндә ыңғыраша-ыңғыраша артҡа сигенергә мәжбүр. Көрәштә алған яраларҙы хәҙер төҙәтергә, йыртылған, арандай бүҫерелгән тишектәрҙе ямарға тура килә. Бына ошо процестарҙың алдынғы сафында ғорур атлаған башҡорт милләте лә үҙ сафтарың яңынан барлап сығырға, етди боролоштарҙа ҡалдырып киткән ҙур юғалтыуҙарын һанарға бурыслы, сөнки халҡыбыҙҙың, үкенескә ҡаршы, һуңғы 70 йылда «артҡа ҡарап шөкөр» итерлек артыҡ ҙур рухи һәм матди хазинаһы булмаһа ла, «алға ҡарап фекер йөрөтөрлөк» милләт яҙмышы тураһында етди һәм бик тә тәрән уйланырлыҡ сәбәптәре күп.

Милләткә йоҡонан уянырға, үткәненә ҡарап уйланырға, киләсәккә ҡарап бергә тупланырға мөҙҙәт етте.

Төп милләттең үҫешендә һәм камиллашыуында ошоға тиклем күҙгә ташланған көрсөк күренештәре 1970 йылдың урталарында ҡырҡыу төҫ ала башлауын республика хужалары тоя башлағайны инде. Ул саҡтағы юғары орган етәкселәрендә был сетерекле мәсьәлә, билдәле, ниндәйҙер дәрәжәлә тынысһыҙланыу тыуҙырҙы. Нисек инде ул, РСФСР-ҙа беренсе автономия яулап алған Башҡортостанда, нефть эшкәртеү буйынса беренсе урынды, уны табыу буйынса икенсе урынды биләгән, бөтә йәһәттән сәскә атҡан республикала, ошондай күңелһеҙ ваҡиға — төп милләттең эҙмә-эҙ кәмеүе менән килешергә? СССР-ҙа бөтә кальцийланған соданың 43 процентын, РСФСР күләмендә ауыл хужалығының тулайым продукцияһын етештереүҙә дүртенсе позицияны яулаған, ә инде милли продукция

биреүҙә һигеҙ союздаш республикаларҙан алда торған Башҡортостан — Гөлбостанда башҡорттарҙың кәмеүе менән килешеп йәшәргә? Бер яҡтан, республика «оло браттың» эскерһеҙ ярҙамы арҡаһында киң аҙымдар менән алға атлай, ә икенсе яҡтан, республиканы яулап алған халыҡ бөлгөнлөккә төшкән, бөтөүгә табан бара. Был бит тулыһынса диссонанс. Быға ҡаршы ҡырҡа сара күргәргә кәрәк, етмәһә халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы ла яҡынлашып килә. Әгәр ул халыҡ иҫәбен алыу тағы ла төп милләттең кәмеүен күрһәтһә, ул бөтә милләттәргә тиң хоҡуҡ һәм үҫеү өсөн мөмкинлектәр биргән Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяла ҙур резонанс тыуҙырасаҡ. Әгор ваҡиғалар ошо рәүештә барһа, республика хужаларына ла хисап бирергә тура киләсәк тә баһа. Ул йылдарҙа был мөһим мәсьәләгә баһа биреү ошо контекста барҙы. Республика әһелдәре был мәсьәләне иң башта үҙҙәренең оло, яуаплы вазифаларында һәүетемсә генә эшләп, маҡтала, хуплана, тыныс ҡына йәшәүен дауам итеү менән бәйләне. Тиҙ арала был мәсьәлә буйынса кәңәшмәләр ҡороп һөйләшеүҙәр башланды. Партия органдары үҙ функционерҙарын, совет башлыҡтары үҙ кешеләрен йыйып, был ҡырҡыу мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләне. Юл бер— 1926—1939 йылдарҙағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса республикала ҡайһы ауылдар башҡорт ауылдары тип танылған, киләһе халыҡ иҫәбен алыуҙа ла уларҙа йәшәгән барлыҡ халыҡ үҙҙәрен «башҡорт» итеп теркәргә тейеш. Райондарға, ҡулдарына алдан әҙерләнгән докладтар тотоп, вәкилдәр юлланды. Ошо мәсьәлә буйынса Борай районында үткәргән бер йыйылыш бөгөнгөләй хәтерҙә. Уларҙың тарихи башҡорттар икәнен иҫбатлаған докладты аңлатып сыҡҡандан һуң клуб залында иң алдағы рәттә ултырған кәзә һаҡаллы бер ҡарт түбәтәйен башынан тырнап усына йомдо ла: «Сез, туганнар, нигә шул кадәр хафаланасыз.— ул бабай минән алда бик ҡайнар сығыш яһап, «өлкә комитет күрһәтмәһен өлгөлө үтәргә тейешбеҙ» тип ҡабыҡ ҡаҡҡан егеткә ишара яһап, — без болай да кайчандыр бабайларыбыз Учалы якларыннан күчеп килгән башҡортларбыз. Шушылай күрсәтмә булгач, барыбыҙ да яҙылабыҙ», — тип урынына ултырҙы ла тағы бер тапҡыр теге райком вәкиленә ҡараш һирпеп ҡуйҙы. Ситтә ултырған был йәш кенә егеттең етди йөҙөндәге уҫал һыҙаттарҙы күреп, мин: «Башҡорт ҡына түгел, әллә кем булып яҙылырһың, яҙылмай ҡара, «Макар быҙау көткән урынға ла эләгеүең бар», — тип уйлап ҡуйҙым. Яңылышмаһам төньяҡ-көнбайыш зонала бындай ауылдар 91 ине буғай. Билдәле, ошо халыҡ иҫәбен алыу алдынан республика йәмә-

ғәтселегендә ундай ҙур ажиотаж тыуҙырмай, тынысыраҡ, киң аңлатыу юлы менон дә эшләргә булыр ине, тип уйлайым. Ләкин автократия, тоталитар режимдың гөрләп сәскә атҡан мәлендә ундай ысулдар менән эш итеү кәрәк түгел ине шул. Ошоға тиклем төньяҡ-көнбайыш зона мәктәптәрендә татар программаһы менән уҡытылған мәктәптәрҙе башҡортса уҡытыуҙы ғәмәлгә ашырыу ҙа бына ошо рәүештәрәк алып барылды.

Верховный Советтың ултырыштар залында йыйылған республика активына трибунанан тороп, «Илеш районында бөтә мәктәптәрҙә лә, Дүртөйлө районында фәләнсә мәктәптә, Кушнаренко районында шунса мәктәптә ошо уҡыу йылынан башлап балаларҙы башҡорт телендә уҡытыуға күсәбеҙ», — тигән күрһәтмәне уҡып сыҡтылар, һуңынан инде теләйһеңме, теләмәйһеңме ошо күрһәтмә был һәм башҡа райондарҙа ғәмәлгә аша башланы. Билдәле, халыҡ менән төплө һөйләшмәйенсә юғарынан үткәрелгән был сара үҙенең тиҫкәре һөҙөмтәләрен дә бирмәйенсә ҡалмағандыр. Ул замандарҙағы партия-бюрократнк аппарат етәкселәренән тоталитар режим системаһы хөкөм һөргән осорҙа был бик тә нескә милли мәсьәләнең башҡаса хәл ителеүен көтөүе лә ҡыйын ине. Ләкин шуныһы көн кеүек асыҡ — был юлы ике тиҫтә йылдар буйынса үҙ күрһәтмәләренең һис шикһеҙ үтәлеүено күнегеп бөткән Шакиров, Ахунзяновтар үҙ мөмкинлектәренең мыҫҡалын үтәрәк баһалап, ашараҡ һуҡтырҙылар шикелле. Был сара бөтә урында ла ҡушҡуллап ҡаршы алынманы, унда ла, бында ла халыҡ менән ныҡлап кәңәшләшмәйенсә эшләнгән был мөһим сараның ала-сола йыртыҡтары күренә башланы. Бер быуын дауамында төркиҙән латинға, ә унан һуң кириллицаға күсеү үҙ емешен бирмәй ҡалманы. Башҡортса уҡытыуға күскән күпселек мәктәптәр яңынан татарсаға әйләндерелә башланы. Дәррәү башҡорт программаларына күсеп эшләй башлаған Илеш районының күпселек мәктәптәрендә, балаларҙың башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, уҡытыу яңынан татар мәктәптәре программаһы буйынса башланды. Бөгөнгө көндә 5,5 мең ярымдан артыҡ хисапланған башҡорт балаларының тик 750-һе генә башҡортса уҡыуҙы дауам итә. Башҡа күрше райондарҙа ла шул уҡ күренеш. Был—уҡыусы балалар менән килеп сыҡҡан хәл. Инде уларҙың ололарына — ата-әсәләренә күсәйек. Һөҙөмтәлә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡорттарҙың киң күләмдә татар милләтенә күсеү процесы башланды. Быны бер нисә миҫал менән раҫлайыҡ. 1979—1988 йылдарҙа Балтач районында башҡорттар 18,3 мең кешегә кәмегән, о татарҙар 12,8 меңгә

артҡан. Борайҙа башҡорттар 16,9 меңгә кәмегән, ә татарҙар 8,7 меңгә артҡан. Шул уҡ сағыштырмала Илештә башҡорттар 10,5 меңгә кәмеһә, татарҙар 5,5 меңгә артҡан. Тәтешлелә — 6,3 һәм 3,4 мең, Туймазыла 14,4 мең һәм 7,5, Шаранда 6,2 мең һәм 4,0, Саҡмағошта 7,5 мең һәм 2,3. Яңауылда башҡорттар 6,7 меңгә кәмеһә, татарҙар 3,9 меңгә артҡан. Кушнаренкола 10,5 мең һәм 8,2. Был таблицанан күренеүенсә, ошо бер төркөм райондар буйынса ғына ла үткән ун йыл эсендә башҡорттар 96,3 мең кешегә кәмеһә, татарҙар 53,3 меңгә артҡан. Быға ошо ун йыл эсендә республиканан миграция һөҙөмтәһендә тик башҡорт милләтенән генә 114 мең кешенең йәғни башҡа милләттәр менән сағыштырғанда 2,5 мәртәбәгә күберәк кешенең сит өлкәләргә сығып китеүен иҫәпкә алһаҡ, Башҡортостан республикаһына исем биргән төп милләттең ҡатмарлы яҙмышына бәйле был кризистың һаман тәрәнәйә барыуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Тураһын әйтергә кәрәк, әгәр юғары етәксе органдар йылдан-йыл төп халыҡтың күпләп сит өлкәләргә китеү һәм, картуф баҫыуын ҡаплап алған Колорадо ҡуңыҙы кеүек, күп кенә сиктәш райондарҙы баҫып алған ассимиляция процесына ышаныслы кәртә ҡуя алмаһа, Башҡортостан йөмһүриәтенең мөстәҡиллеген һаҡлап ҡалыу ҡурҡынысы ла бик оҙаҡ көттөр-» мәҫ. Ул аяныслы яҙмыштың Башҡортостан ишеген шаҡый башлауы бөгөн дә ҡолаҡтарға салынып тора. Быуаттар буйына «ерен-һыуын һаҡлап, ҡорбан булған», ләкин үҙ Уралын, тыуған төйәген ҡурсалап алып ҡалған ата-олатайҙар иҫтәлегенә беҙ ҡуйып ҡалдырған һәйкәл шул булырмы икән ни? Беҙ йәш саҡтарҙа бер татар әһеленең: «һуңғы башҡорт ҡәбере өҫтөндә һуңғы башҡорттоң ҡурай уйнап ултырғанын күреү» хыялы ысындан да ғәмәлгә ашыр микән ни? Юҡ, быға һис кенә лә ышанып булмай. Бының өсөн беҙҙе быуаттар буйы ҡаплан килгән вайымһыҙлыҡ, яҙмышҡа битарафлыҡ хисенән арынырға, һәр беребеҙгә милләтте һаҡлап ҡалыу көрәшенә ныҡлап тотонорға кәрәк. Шуны ла асыҡтан-асыҡ әйтеп китеү урынлы булыр: төп милләт яҙмышына төшкән был көрсөктөң һуңғы ике тиҫтә йылда тәрәнәйеүе һәм ҡырҡылашыуы — Өлкә Комитеттың элекке хужалары Шакиров, Ахунзяновтарҙың эҙмә-эҙ үткәреп килгән административ-бюрократик етәкселегенең, уларҙың «шаршау ябылыр алдынан» башҡорт халҡына ҡарата «эшмәкәрлеге»нең һөҙөмтәһе, оҙаҡ йылдар эшләп, был өлкәлә ҡалдырып киткән «һәйкәлдәре». Бәлки был, бер ҡарамаҡҡа мөһим эш, изге теләктән, Айҙар Хәлим әйтмәксе башҡорт милләте тураһында ысын хәстәрлек итеүсе юлбашсылар булып тарих-

та ҡалырға тырышыу ниәтенән эшләнгәндер. Ләкин асылда был тиҫкәре һөҙөмтәләр килтереп сығарҙы. Ошо тиклем етди, нескә милләт һәм уның яҙмышы ҙураһындағы мәсьәләләә был «ҡаш төҙәтәбеҙ, тип, күҙ сығарыу» булды.

Һығымталар:

1. Башҡорт милләте яҙмышының бөгөнгө торошон иҫәпләп, милли тел һәм мәҙәниәт үҫешенең артҡа барыуын билдәләп, республикала башҡорт телен дәүләт теле тип иғлан итеүҙе мыуафиҡ «кәрәк маҡсатҡа ярашлы» табырға. Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләт кешеләре — урыҫтар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, «эрзя һәм муҡшы» һ. б. быны ысын күңелдән ҡабул итерҙәр һәм ҙур теләктәшлек белдерерҙәр, тип ышанғы килә, сөнки башҡорт милләтенең һәр кешеһе уларҙың туған республикаларында үҙ телдәренең дәүләт теле булып ҡабул ителеүен ысын йөрәктән теләй, һәм бының өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләргә әҙер тороуы көн кеүек асыҡ. Башҡорт милләтенең ауыр хәле, уның бөтә барыуы башҡа бер милләткә лә шатлыҡ килтермәҫ, мәртәбәһен арттырмаҫ, уның ҡояшы байыу менән башҡа бер милләттең дә баш осондағы ҡояш нуры сағыуыраҡ яҡтыртмаҫ, нығыраҡ йылытмаҫ, бер милләттең бәхетһеҙ булыуы башҡа бер айырым милләткә генә түгел, бөтә йәмғиәтте лә бәхетле итә алмаҫ.

2. Һуңғы бер нисә тиҫтә йыл эсендә Башҡортостандан, бигерәк тә уның урман-тау зонаһынан йөҙәр мең кешенең тыуған тупрағын ташлап, сит өлкәләргә китеүен иҫәпкә алып, Юғары Совет эргәһендә махсус демография комиссияһын ойоштороpға һәм уға Министрҙар Кабинеты менән берлектә тиҙ арала илен ташлап киткән башҡорттарҙы кире республикаға ҡайтарыу, эшкә урынлаштырыу, тейешле тормош шарттары булдырыу сараларын эшләп сығарыуҙы йөкмәтергә.

3. 1934 йылдың февраль ай̈ындағы Бөтә Союз башҡарма комитетының Силәбе өлкәһе составында «Арғаяш башҡорт милли округы» төҙөү тураһындағы ҡарарының һис шикһеҙ үтәлешен талап итергә.

4. Башҡортостан Мәғариф Министрлығы эргәһендә башҡа республика һәм әлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарҙың мәғариф һәм мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү буйынса махсус комиссия төҙөргә. Ул комиссияға башҡорттар тупланып йәшәгән өлкәләрҙән тулы хоҡуҡлы вәкилдәр һайланыуын һәм даими эшләүен тәьмин итергә.

5. 1957 йылғы Көньяҡ Уралдағы атом ядроһы һәләкәтенә дусар булған күп һанлы ҡорбандар араһында 30 процеттан артығырағы башҡорттар булыуын иҫәпкә

алып, радиация тәьсиренә эләккән ҡәрәштәрҙең артабанғы яҙмышын тикшереү һәм ярҙам итеү маҡсатында БР Министрҙар Кабинеты эргәһендә махсус комиссия төҙөргә, уның эшенә Силәбе өлкәһе йәмәғәтселегенең вәкилдәрен йәлеп итергә.

6. Дөйөм белем биреүсе мәктәптәрҙә ошоға тиклем шундай тайпылышһыҙ практика йәшәп килде: дүртенсе йәки бишенсе кластан башлап ҡағиҙә булараҡ, мәжбүри сит телдәрҙең (инглиз, француз, немец) береһен уҡытыу индерелде. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың төп халҡының телен уҡытыу мәсьәләһе ата-әсәләр ҡарамағына ҡалдырылды. Ошо арҡала былай ҙа башҡорт халҡының өстән бер өлөшө туған тел итеп татар телен таныған шарттарҙа ассимиляция процестарының киң ҡолас алыуын иҫтә тотоп, Башҡортостан Конституцияһына: үҙен башҡорт милләтенән икәнлеген таныған ғаиләлә тыуған балаларҙы балалар баҡсаһынан алып урта белем алғанға тиклем башҡортса уҡытыуҙы гражданлыҡ бурысы, тип хисапларға тигән өҫтәлмә индерергә һәм уның ғәмәлгә ашыуын тәьмин итергә.

7. Башҡортостан Республикаһына кире ҡайтырға теләүселәрҙе дәртләндереү һәм матди йәһәттән беренсе кәрәк ярҙамды күрһәтеү маҡсатында күсеп килеүселәр өсөн махсус республика фонды булдырырға һәм уның һис кисекмәҫтән эшләй башлауына ирешергә.

АУЫҘЛЫҠЛАУ

Мосолмандарҙың Диниә назараты Ырымбур мосолмандарының руханиҙарының йыйылышы исеме аҫтында, 1788 йылдың 22 сентябреңдә (иҫке стиль менән) Рәсәй императрицаһы Екатерина II указы менән Өфө ҡалаһында ойошторола. Руханиҙар йыйылышы 1796 йылда Ырымбур ҡалаһына күсә һәм, унда алты йыл йәшәгәндән һуң, кире Өфөгә (1802 йылда) ҡайтарыла.

Рәсәй батшалығының был указын нисек аңларға? Диниә назаратының Өфөлә ойошторолоуын һис ҡәҙ «әбей батша»ның Рәсәй мосолмандарының рухи ихтыяждарын иҫәпкә алыу, хәстәрлек күреү билдәһе тип аңларға ярамай. Ошо указды ҡабул итеүгә тиклем булып үткән дауыллы осор — Ҡараһаҡал ихтилалы, күп тә үтмәй хәҙерге Баймаҡ районында 1755 йылда Сапсал ямаһында* тоҡанып, Батырша ихтилалы тип тарихҡа ингән көслө халыҡ бо-

* Губерналар араһында ат алмаштырыу урыны.

лаһы — батша Рәсәйен аҙаҡтан ниндәйҙер сәйәси сара үткәреү кәрәклегенә килтереп терәне. Уны (назаратты) Рәсәй империяһының уртаһы һаналған Башҡортостанда ойоштороу ҙа һис тә осраҡлы хәл түгел, сөнки XVII—XVIII быуаттарҙа башҡа бер ниндәй халыҡ та Рәсәй империяһының нигеҙен башҡорт болалары кеүек ныҡ һелкетә алманы. Бына шуға күрә лә был халыҡҡа ҡарата үҙ мөнәсәбәтен бер «ҡамсы» ярҙамы менән генә үткәреүҙең һөҙөмтәһе яңынан-яңы болаларға килтереү мөмкинлеге батша хөкүмәтен ошондай сәйәси аҙымға баҫырға мәжбүр иткән.

Беренсенән, ошоға тиклем тоҡанып, киң ҡолас алған болалар муллаларҙың, башҡа дин әһелдәренең роле ғәйәт ҙур икәнен асыҡтан-асыҡ күрһәтте. Бигерәк тә 1755—1760 йылдарҙа Башҡортостанды солғап алған Батырша ихтилалының төп сәбәбе — уның үҙ күрһәтеүе буйынса «башҡорттар»ҙың «дини яҡтан ғына түгел, о милли йәһәттән иҙелеүе». Ҡушаматы буйынса Батыршаһ, ә ысын исеме. Абдулла Мәгзәлтдин Ғәлиев мулла йәшерен экспедиция алып барған тәфтиштә бына нәмәләр һөйләне: «Уларҙы (һүҙ ҡан-ҡәрҙәштәре, туған халҡы тураһында бара — Р. Ө.) сикәһенә һуғып, һаҡалынан һөйрәп кенә сикләнмәйҙәр, ҡылыс менән дә сабалар. Бер ниндәй яза һәм хөкөм был йәберләүселәргә табыу мөмкин түгел. Законһыҙ ылау талап иткән ришүәтсе һәм уғры урыҫтарҙан фәҡир халыҡҡа һаҡланырға бер ниндәй ҙә сара ҡалманы. Башҡорттарҙың ҡатындарын һәм ҡыҙҙарын көсләү ирҙәре һәм аталарының күҙ алдында эшләнә» [2].

Батша Рәсәйенең башҡорт халҡын аяуһыҙ иҙеүе, башҡорт ерҙәренең таланыуы, аҙаҡ мосолмандарҙы үҙ дине-нән яҙҙырып, көсләп христиан диненә суҡындырырға тырышыуы хаҡындағы уның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаты[3] башҡорттарҙы ни тиклем ҡыйырһытыуҙы асыҡтан-асыҡ фашлау документы булып тора.

Икенсенән, үрҙә әйтелгәнсә, «ҡамсы» сәйәсәтенең тик кире һөҙөмтәләргә килтергәнен аңлаған батша хөкүмәте мосолмандарҙың Диниә назаратын ҡайҙалыр ситтә түгел, тик башҡорт еренең уртаһында яткан Өфөлә төҙөргә хәл итә һәм быныҡ нигеҙендә өҙлөкһөҙ дауам иткән башҡорт ихтилалдарың артабан булдырмауҙы мосолмандарҙың Диниә назараты аша хәл ҡылыу сәйәсәте ята. Урындағы

---

[1]ЦГДА. VIII, н 1781. «Дело о возмутителе в Башкирии мулле Абдулла Магзяльдине или Батырша».

[2]Соловьев С. С. Иң боронғо Рәсәй тарихы.—Т. 13. 297-се бит.

[3]Уның хаты «Доношение императрице» тип атала.

халыкты батшаға баш һалдырыу эшен дини ҡанундар аша атҡарыу өсөн яңы дини ойошмаға тапшыра.

Был тәңгәлдә батша хөкүмәте үҙ ниәтендә һис тә яңылышмай. Батша ҡазнаһынан ҙур эш хаҡы алған һәм император указы менән тәғәйенләнгән мөфтөйҙәр, маңлай ороп, уға хеҙмәт итмәй булдыра алмай. Үҙҙәре ҡарамағына күскән бөтә мосолман ғәләмен властарға бирелгәнлек, ихтирам һәм тоғро хеҙмәт итеү тойғоһонда тәрбиәләү, ә батшаның үҙен хоҙай тарафынан ебәрелгән бөйөк шәхес итеп күрһәтеү өсөн бөтә тырышлығын һала. Мөфтөйҙөң ниндәйерәк сифаттары булырға тейешлеген «Волга буйы инородецтары мәғрифәтсеһе» ҡушаматы йөрөткән батшаның обер-прокуроры Ильменский тигән бәндә бына нисек күҙ алдына килтерә: «Беҙҙең өсөн иң уңай нимә шул: мөфтөй урыҫ телен этә-төрто белергә, губернаторҙан ғына түгел, ә теләһә ниндәй столоначальниктан да ҡурҡып торорға тейеш». Ләкин практика күрһәтеүенсә, батшаның ул юғары дини сановниктары барыһы ла тигәндәй дворян дәрәжәһен йөрөткән, урыҫ телен үҙ теленә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белгәндәре лә булған. (1865—1885 йылдарҙа мөфтөйлөк иткән Тәфкилев С. III. шундайҙар исемлегенә инә).

Өсөнсөнән. Мосолмандар Дониә назаратының мөфтөйө тик татар милләте вәкилдәренән генә тороуы шулай уҡ бер ҙә осраҡлы хәл түгел. Дониә назаратының үҙәге Өфөлә булыуға ҡарамаҫтан, Октябрь революцияһына тиклем мөфтөйҙәрҙе һайлауҙың ошо принцибы тайпылышһыҙ үтәлеп килгән, сөнки башҡорт милләтенән булған мөфтөйҙәр йыш ҡабатланып торған башҡорт сыуалыштарына теләктәшлек күрһәткән. Былай булмағанда ундай руханиҙар башлығы ошоноң кеүек теге йәки был ваҡиғаға битараф булыуҙары мөмкин. Ә мөфтөйҙәр араһында башҡорттар болаһына ҡаршы туранан-тура ҡатнашып, уларҙы баҫтырыуҙа батша алдында ҙур хеҙмәт күрһәткәндәре лә булған. 1874 йылда батша Рәсәйендә дөйөм хәрби повинность индерелә. Батшаның был указы ҡайһы бер губерналарҙа ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Өфө губернаһының ҡайһы бер төньяҡ-көнбайыш волостарында ошоға бәйле ҙур ғына сыуалыштар булып ала. 1876 йылда баш күтәргән башҡорттарҙы баҫтырыуҙа Өфө Дониә назаратының шул саҡтағы мөфтөйө отставкалағы штабс-ротмистр Тәфкилев С. Ш. үҙенең бөтә тырышлығын һала. Уның Рәсәй батшалығы алдында күрһәткән был хеҙмәте өсөн император Александр II уға батша рәхмәте белдерә һәм тышында государь-император портреты яһалған алтын табакерка бүләк итә.

Тик Октябрь революцияһынан һуң гына Дониә назаратына мөфтәй сифатында башҡорт милләте вәкиленән ике шәхес тәғәйенләнә. Улар — Ризаитдин Фәхретдинов менән Абдрахман Рәсүлев (Зәйнулла ишандың улы).

Ырымбурҙан 1802 йыл Өфөгә кире ҡайтҡан руханиҙар йыйылышының үҙ бинаһы булмай. Уның администрацияһы ваҡытлыса элекке Телеграф һәм Туҡай урамы мөйөшөндәге йорт та урынлаша. Күп тә үтмәй Вельская һәм Туҡай урамы мөйөшөндәге ул саҡтағы Ғәбделислам мөфтәй йортоноң яртыһына күсә. Был мөфтәйҙәң инициативаһы менән Дониә назараты бинаһын төҙөү маҡсатында мосолмандар араһында иғәнә йыйыу ойоштورола. Шулай ҙа тик 1865 йылда ғына мосолмандарҙың Дониә назараты Туҡай урамындағы бөгөнгө бинаһына күсеүгә өлгәшә. Шулай итеп, Өфө Дониә назаратының 76 йыл буйына үҙ бинаһы булмай.

Дониә назараты төҙөлөү менән Рәсәй батшалығының төрлө мөйөшөндә төрлөсә эшләп ятҡан мәсеттәр, мәҙрәсәләр үҙәк буйһоноуына күсә, ислам динен төрлө ерҙә төрлөсә тәпсирләүгә, шәриғәт ҡанундарын, дини байрамдарҙы, ғибәҙәт ҡылыу ҡағиҙәләренең төрлөсә атҡарылыуына сик ҡуйыла.

Батша указы тарафынан ойоштورолған Дониә назаратының эшләй башлауы Рәсәйҙә юғары мосолман руханиҙарының айырым ҡатламын барлыҡҡа килтерә. Ошоға тиклем шундай вазифалы һәм хоҡуҡ менән файҙаланмаған Ислам шәриғәте тарафынан бөтөнләй ҡаралмаған юғары орган барлыҡҡа килә. Был орган йәшәп килгән шәриғәт закондарын ғәмәлгә ашырыу менән генә сикләнеп ҡалмай, уны илдә үҙгәрен торған сәйәси хәлгә ҡулайлаштырып барырға, өҙлөкһөҙ камиллаштырырға мәжбүр була.

1831 йыл батша указы менән Таврия-Ҡырым Дониә назараты, о 1872 йылда Кавказ аръяғы мосолмандарының шиит тәғлимәтенә нигеҙләнгән Дәниә назараты барлыҡҡа килә.

Төньяҡ Кавказ һәм Урта Азияла батша хөкүмәте бер ниндәй ҙә дини үҙәктәрҙең ойоштورолоуын рөхсәт итмәй. Был төбәктәрҙә Дониә назараты эштәрен атҡарыу бурысы туранан-тура губернаторҙар һәм хәрби башлыҡтарға йөкмәтелә. Батша хөкүмәте Дәниә назараттарына ҙур ғына ышаныс йөкмәтеү менән бер рәттән уларҙың мосолмандар араһында абруйы күтәрелеп, вазифалары артып китеүҙән дә ҡурҡа, шуға күрә һәр яҡлап уларҙың хоҡуғын сикләү сәйәсәте алып бара. 1857 йылға тиклем батша указында Дониә назаратының бурыстары һәм хоҡукта-

рын аныҡлаған норматив акт та булмай. Тик назараттың өсөнсө мөфтөйө Әбделвәхит Сөләймәнов ваҡытында 1857 йылда батша законы менән Дониә назаратына үҙ уставын төҙөргә рөхсәт ителә. Был устав буйынса руханиҙарҙың дөйөм йыйылышы мосолмандарҙың коллегиаль юғары органы булып таныла. Был органға дини дәрәжә алырга теләүселәрҙән имтихан алыу, урындағы дин әһелдәренең эшен күҙәтеү, устав ҡағиҙәләрен боҙған руханиҙарҙы яуапҡа тарттырыу, мәсеттәр төҙөү, метрика китаптары алып барыу, ғибәҙәт ҡылыу ҡағиҙәләрен боҙоу хаҡында ялыуҙар тикшереү, мөлкәт, никахҡа инеү һәм сығыу мәсьәләләрен хәл итеү эштәре йөкмәтелә.

Ауылдарҙа шәриғәт судын, мәсет һәм ғибәҙәт ҡылыу ҡағиҙәләрен тайпылышһыҙ башҡарыу, ҙурыраҡ ауылдарҙағы мәҙрәсәләрҙә мөдирлек вазифаһын, метрика яҙмаларын ауыл сходтары һәм ауыл йәмәғәтселеге һайлап ҡуйған муллалар башҡарған, ләкин уның Дониә назаратына килеп, имтихан тапшырғандан һуң танытма алыуы мәжбүри хисапланған. Ҡайһы бер мәсеттәрҙә ике мулла— ҡарт һәм йәш мулла булған. Был инде дини эштәрҙе башҡарыу өсөн кадрҙар әҙерләү хәстәрлегенең бер билдәһе.

Тәүге осорҙа Дониә назаратының структураһы хаҡында бер нисә һүҙ

Башында мөфтөй торған Дониә назараты, иң юғары орган булараҡ, губерна мәҙрәсәләре эшмәкәрлеген күҙәткән. Бөтә дини мәктәптәр һәм мәҙрәсәләргә уҡыу программаһы төҙөү ҙә уның бурысы булып һаналған. Иң юғары дини мәҙрәсәләр өсөн мөғәллим-хәлфәләр әҙерләгән. Унан түбән ҙур ҡалаларҙа барлыҡҡа килгән урта уҡыу йорто — рушди иҫәпләнгән. Улар барыһы 15 булған. Унан түбән иң аҫҡы баҫҡыста торған Башҡортостан территорияһындағы ҙур ауылдарҙа урынлашҡан 500 ауыл мәктәбе-мәҙрәсәһе булған.

1890 йылдың башына Ырымбур руханиҙар йыйылышы ҡарамағында 4254, шул иҫәптән Өфө губернаһында 1390 мәсет иҫәпләнгән. Ике губернала 65 ахун, шул иҫәптән Өфө губернаһында 22 кеше хисапланған. Улар араһында үҙҙәренең йәмәғәт эшмәкәрлеге менән ярайһы уҡ танылған, ҙур абруйлы ахундар ҙа булған. Дәүләт думаһы аҙзаһы, Орск өйәҙе ахуны хәҙерге Баймаҡ районы Атанғол

---

[1]А х у н — өйәҙҙә ислам шәриғәтенең үтәлешен күҙәтә торған дин әһеле.

ауылы кешеһе Шаһишәриф Мәтинов — шундайҙарҙың берене. Руханиҙар йыйылышына буйһонған 2734 имам-хатип (мәхәллә муллаһы) эшләгән, шулар эсендә Өфө губернаһында 1390 кеше иҫәпләнгән. Диниә назаратына ҡараған территорияла 2621 имам-мөҙәрис (мәҙрәсә хәлфәләре) хисапланған. Тик Өфө губернаһында ғына ике енестән миллионға яҡын мосолман булған. Диниә назараты ҡарамағына ингәи ҡалалар һәм ауылдарҙағы мәсет имамдары мөфтәй менән ҡазыйҙарҙың төп таянысы була. Дини эштәр менән бәйле бөтә вазифаларҙы, атап әйткәндә мәсеттәрҙе хеҙмәтләндереү, мөҙҙәтендә намаҙ уҡып, вәғәз һөйләп барыу, халыҡтан иғәнә, фытыр-саҙаҡа йыйыу, тыуым-үлемде иҫәпкә алыу, зыяратты ҡарау һәм башҡа йомоштарҙы имам башҡарған, һәр ауылдың, шул ауылға ингән мәхәллә мосолмандарының эстетик әхләҡи торошторы, уларҙы шәриғәт ҡанундарына һыймаҫлыҡ хилафлыҡтарҙан ҡурсалау — барыһы ла мулла-имамдар яуаплылығында булған. Ә һирәк-мирәк ауылдан сығып, зимагурлыҡта йөрөп ҡайтҡан кешеләрҙең дөхән һурып (тәмәке), шарап ҡулланыуы ғәҙәттән тыш хәл хисапланған. Мәсет имам-хатиптары бының өсөн ҡаты шелтәгә юлыҡҡан.

Имамдың иң яҡын ярҙамсыһы-вәзире үҙ ваҡытында мәсет манараһына менеп, мосолмандарҙы саҡырып аҙан ҡысҡырыусы мөәзин булған. Ә инде уның ярҙамсыһы булып мәсет ҡарауылсыһы — фарраж торған. Ул мәсеткә яҡҡан, уны йылытҡан һәм таҙартҡан. Ул кеше руханиҙар баҫҡысының иң түбәнендә торған дәрәжә хисапланған.

Мосолмандарҙың дини эштәрен бер системаға һалыу, уларҙың мәсьәләләрен хәл ҡылыуҙы үҙәкләштерелгән Диниә назаратына тапшырыу, ә Рәсәйҙә иң ҙур Ырымбур руханиҙар йыйылышының хатта административ эштәргә лә тығыла башлауы, әлбиттә, батша властарын һағайтмай ҡалмай. Быны иҫәпкә алып, батша властары 20-се быуат башында Ырымбур руханиҙар йыйылышын (духовное собраниены) ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу өсөн проект әҙерләй башлай. Уның нигеҙе итеп Ырымбур руханиҙар йыйылышын үҙәкләштереүҙән ҡотолоу зарурлығын беренсе талап итеп ҡуялар. Губернаторҙың күрһәтмәһе буйынса Ырымбур руханиҙар йыйылышы Бөтә Рәсәй дини идараһына әүерелергә, ә уның башында торған мөфтәй хәҙрәттәре тик бер милләт вәкилдәренән — татарҙарҙан ғына торорға, юғары рухаин сановниктар батша тарафынан тәсдиҡ ителергә тейеш тип билдәләнә. Ләкин был проект — Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем ғәмәлгә ашмай, шул проект көйөнсә ята бирә. Мәгәр 1914 йылда сығарылған мосолман съезы мосолмандарҙың дини эштәре идара-

һы тураһында яңы положение ҡабул итә итеүен, ләкин ул да беренсе бөтә донъя һуғышы башланып китеү арҡаһында ҡағыҙҙа ҡала, сөнки батша хөкүмәте алдында башҡа ет-диерәк мәсьәләләр килеп баҫа. Диниә назаратын үҙгәртеп ҡороу тураһындағы был ҡарарҙа тик бер генә ҡәтғи айырма була — ул да булһа мосолмандар эшен айырым территорияға бәйләмәй алып барыу ҡарала.

Батша властарының мосолман Диниә назаратына, ғөмүмән, мосолмандарға булған мөнәсәбәтен түбәндәге бәләкәй генә тарихи ваҡиға һөйләй. Рәсәй императоры Александр III бойороғо һәм рөхсәте менән мосолмандар Диниә назаратының 100 йыллығын байрам итеү тантанаһына барлыҡ дини әһелдәр, ғөләмәләр Өфөгә йыйыла. Был тантаналы ваҡиға 1889 йылдың 4 декабренә тәғәйенләнгән була. Батша хөкүмәте был юбилей тантанаһын, ғәрәп, төрки йәки башҡа мосолмандар телендә үткәреүҙе ҡәтғи тыя. Диниә назаратының ул саҡтағы мөфтөйө Солтанов Мөхәмәтйәр ибн Мөхәмәтшәкир әфәндә был уңай менән әҙерләнгән нотоғон урыҫ телендә һөйләргә мәжбүр була. Ғүмерҙә булмаған был хәл — мосолман динен мыҫҡыл итеү ваҡиғаһы — тантанаға йыйылған зыялы мосолман дине башлыҡтарын хайран ҡалдыра. Был юбилей тантанаһында һәм уға арналған ғибәҙәттә генерал-губернатор Лев Нард һәм губерна полицмейстры Макаровский әфәнде ҡатнаша. Улар итекле аяҡтары менән иҙәнгә түшәлгән келәм буйлап мөфтөй телмәр һөйләгән мөнбәргә үтә. Диниә назаратының Собор мәсетендә мосолмандар намаҙында 100 йыл ишетелмәгән урыҫ телендәге ҡотлауҙар яңғырай. Бына ошондай мыҫҡыллау ваҡиғаһын да күрә һәм ишетә бөгөн дә иҫән Собор мәсетенең стеналары...

1917 йылдың июлендә мосолман руханиҙарының берләшкән съезы хәҙерге Ырымбур мосолмандар руханиҙары йыйылышын үҙәк Диниә назаратына әйләндерергә тигән ҡарар ҡабул итә. Уның ҡарамағына бөтә Рәсәй (эске Рәсәй) һәм Себер мосолмандары инә. 1918 йылдың 21 ғинуарында йыйылған съезда яңы Диниә назаратының мөфтөйө итеп Ҡазандағы юғары рухани «Мөхәмәдиә» мәҙрәсәһенең ректоры ишан Ғәлиев Ғәлимйән ибн Мөхәмәтхан һайлана. Назарат ҡазыйҙары булып Фәхретдинов Ризаитдин, Урманов Сәлихйән, Мөхлисә Буби, Сөләймәнов Ғабдулла, Мәхмүтов Хажәтел-Хажим, Тәржеманов Кәшәфтар үтә.

Был мәжлестә яңы һайланған Диниә назаратының вазифаларын билдәләү менән бер рәттән уның уставына яҡынайтып төҙөлгән положение ҡабул ителә. Был документ буйынса Рәсәйҙең Европа өлөшө һәм Себер мосол-

мандарының иң юғары органы булып дөйөм йыйылыш хисаплана. Ә даими эш башҡарыу органы булып мосолмандарҙың Диниә назараты билдәләнә. Ошо съезд ҡарары менән назараттың урта һәм иң түбәнге органы булдырыла. Урта етәксе органдың, йәғни мөхтәсибәттең вазифаһы һәм асылы шунда — назаратҡа ингән бөтә автономиялы республикалар һәм өлкәләрҙә етәкселекте еңеләйтеү маҡсатында, төркөмдәргә бүләләр. Мәҫәлән, 1-се мөхтәсибәткә Мәскәү, Кемерово, Горький, Ленинград өлкәләре, Мари һәм Сыуаштар инә. Мөхтәсиб итеп Мәскәү мәсетенең имам-хатибы Мөштәриев Исмәғилде һайлайҙар. Территорияла барыһы 6 мөхтәсибәт төҙөйҙәр. Мәҫәлән, 6-сы мөхтәсибәткә Украина, Белоруссия, Литва һәм Эстония республикалары инә. Уның мөхтәсибе итеп мәсет имам-хатибы Шабанович Мостафа Александрович тәғәйенләнә. Иң тәүге ойошма йәки иң түбәнге орган булып мәсет имамдары тора.

1923 йыл Диниә назаратының мөфтөйө итеп һайланған ҙур дин белгесе, күренекле мәғрифәтсе һәм танылған әҙип Ризаитдин Фәхретдинов эшмәкәрлеге осоронда (1923—1936 йылдар) диндең ролен һәм мәсеттәрҙең йоғонтоһон үҫтереү, мәҙрәсәләрҙәге уҡыу-уҡытыу системаһын камиллаштырыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла. Реформатор булараҡ, ул Башҡортостандың Европа өлөшө һәм Себер мосолмандарының Диниә назаратына буйһонмаған Башҡортостандың үҙ аллы Диниә назаратын төҙөй (1924—1934). Был осор мосолмандар араһында дини эштең сифат яғынан ғына түгел, һан яғынан да ныҡ үҫешкән сағы була. Тик шуны әйтеү ҙә етә. Өфө мосолмандары Диниә назаратына ҡараған территорияла 14825 мәсет, шул иҫәптән Башҡортостанда 1414 мәсет хисаплана. Ошо осорҙан башлап (1929—1930 йылдар) Совет органдарының бөтә фронт буйлап дингә һәм уның әһелдәренә һөжүме башлана. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Диниә назаратының юғары органдарға биргән информацияһында беҙ түбәндәге юлдарҙы уҡыйбыҙ. «Революцияға тиклем руханиҙар йыйылышы үҙ вазифаларын үтәмәне, асылда Өфө губернаторы һәм шул саҡтағы батша хакимдарының ярҙамсы органы булып торҙо». Революциянан һуң «ирекле дин тотоуҙы, хөрриәт һәм туғанлыҡты беҙгә тик Бөйөк Октябрь революцияһы ғына бирҙе, тик Советтар Союзында ғына төрлө дин тотоусылар татыу бер ғаилә ағзалары булып йәшәп, үҙҙәренең ирекле, бәхетле тормошон төҙөй алалар».

Диниә назараты мөфтөйҙәре

Екатерина II указы менән Ырымбур руханиҙар йыйылышының беренсе мөфтәйө итеп Өфө өйәҙенең Харремабад ауылында тыуған Мөхәммәтйән Хөсәйен тәғәйенләнә. Ул сауҙагәр ҡатламынан була. Был вазифаға тәғәйенләнерҙән алда ул генерал-губернатор эргәһендәге ҡырғыҙ эштәре сик буйы комиссияһында эшләй. Бынан һуң уны Санкт-Петербург ирекле иҡтисади йәмғиәтенең беренсе ахуны һәм ағзаһы итеп үрләтәләр. Батша ғали йәнәптәренең юғары бойороғо менән Ҡырғыҙ-Ҡайсаҡ урҙаһында һәм губернатор эргәһендәге Кавказ сиге эштәре менән шөғөлләнә. Шунан һуң төрлө йәшерен комиссияларҙа, ырыу судтарын асыуҙа ҡатнаша. Рәсәй әсирҙәрен башҡа дәүләттәрҙән ҡайтарыу эше һәм тау татарҙарын (Кавказ) батша хөкүмәтенә антҡа килтереү эшен башҡара.

Үҙенә тапшырылған вазифаларын өлгөлө башҡарғаны өсөн батшаның бойороғо менән сауҙагәр окладынан сығарылып (бәләкәй булған өсөн) үҙе һәм балалары өсөн башҡорт ерҙәрен «үҙләштерергә»[1] һәм уларҙы һáтырға, мираҫ итеп ҡалдырырға рөхсәт ала.

Екатерина II уны икенсе бриллиант миҙалы менән наградлай. Ҡаҙна иҫәбенән йорт, төлкө һәм ҡамсат тундар һәм аҡса менән бүләкләй. Император Александр I уға алтын миҙал тапшыра, билдәләнгән жалованиеһынан тыш һәр йылға алтынлата 1000 һум пособие тәғәйенләнә. Ул мөфтөй булып 1789 йылдың 4 декабренән 1824 йылдың 17 июненә тиклем эшләй, йәғни 35 йыл ошо вазифаны башҡара. Ул үҙенең дачаһында хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Атйетәр ауылында ерләнә.

Әбдрәхимов Абдел-Сәләм мөфтөй Ырымбур ҡала мәсетенең имам-ахуны. Сик буйҙары эштәрендә тырышлығы[2] һәм уңышлы хеҙмәте өсөн Александр I тарафынан Аненнск таҫмаһында алтын миҙал, 100 тәңкә миҡдарында алтын аҡса, бынан тыш йыл һайын 150-шәр һумдан алтын аҡса тәғәйенләнгән. Сик буйы начальствоһының, бигерәк тә Ырымбурҙағы комиссияның, Ширғәзе Айсыуаҡов хандың рәйеслеге аҫтында тырышлыҡ күрһәткәне өсөн батшаның бөйөк рөхсәте менән сәғәт һәм 500 һум менән бүләкләнгән. Бынан тыш йорт төҙөү һәм һатып алыу өсөн алтынлата 4000 һум аҡса бирелгән. 1825 йылдан 1839 йылға тиклем мөфтөйлөк иткән. Өфөлә мосолман зыяратында ерләнгән.

---

[1]Икенсе һүҙ менән әйткәндә «таларға, тартып алырға» тигән һүҙ.

[2]Сик буйы хеҙмәте батшаның Урта Азияны һәм Кавказды баҫып алыу походтарында тырышлыҡ күрһәтеүҙе аңлата.

Әбделвәхит Сөләймәнов мөфтәй Стәрлетамаҡ өйәҙе Өфө губернаһы Әбсәләм ауылында тыуған. Был вазифаға тәғәйенләнгәнгә тиклем Санкт-Петербургта хәрби уҡыу йорттарында уҡытыусы булып хеҙмәт иткән. Батша бойороҡтарын үтәүҙә тырышлыҡ һалғаны өсөн уның тарафынан үҙе һәм Шәрәфетдин, Мәхмүт исемле уландары тарханлыҡ дәрәжәһе алған. Аҡсалата 1500 һум бүләккә лайыҡ булған. Оҙаҡ йылдар уңышлы һәм тырыш хеҙмәте өсөн батша Александр Николаевич уның өсөнсө улы Һиҙиәтуллаға ла тарханлыҡ дәрәжәһе биргән. Император һуңынан Һиҙиәтулланы Өфө төрмә замогының директоры итеп тәғәйенләгән.

Әбделвәхит мөфтәй булып 22 йыл (1840 йылдың 16 июненән 1862 йылдың 4 августына тиклем) хеҙмәт иткән. Өфөлә мосолман зыяратында ерләнгән.

Тәфкилев Сәлимгәрәй Шәңгәрәевич мөфтәй Өфө дворяндарынан, отставкалағы штабс-ротмистр[1]. 1828—1829 йылдарҙа төрөк һуғышында ҡатнашҡан, бер ҡәлғәне алған саҡтағы батырлығы өсөн 4-се дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнгән. Ошо саҡта Ҡаймаҡам паша эргәһендә гражданд ар губернаторы тарафынан командировкаға ебәрелә. Был кампания өсөн икенсе дәрәжә Изге Анна ордены һәм көмөш миҙал менән бүләкләнә: 1831 йылда баш күтәргән поляктарҙы баҫтырыу походында ҡатнаша. Хәрби хеҙмәттәре өсөн орден ала. Отставкала сағында дворяндарҙың Бөгөлмә өйәҙе башлығы була. Ә уның башҡорттарға ҡарата «мәрхәмәтен» үрҙә күрһәтеп үткәйнек.

Мөфтәй вазифаһын үтәгән саҡта икенсе дәрәжә Изге Анна ордены, Александр II һүрәте төшөрөлгән вензелле бриллиант йөҙөк менән бүләкләнә. Быларҙан тыш I дәрәжә изге Станислав, Изге Анна ордендары ала. Император III тарафынан изге Равноапостол, кенәз Владимир ордендары менән наградлана. 1880 йыл Александр II батшалыҡ итеүгә 25 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән тантаналарҙа ҡатнаша. Ә 1883 йылда император III-төң Коронация тантанаһында ҡатнашлыҡ итә һәм уға ғәрәп телендә доғалар яҙылған альбом бүләк итә. Батша мөфтәйгә үҙ портретын һүрәтләгән алтын кабинет миҙалы тапшыра. 20 йыл—1865 йылдың 28 февраленән 1885 йылдың

---

[1]Сәлимгәрәй мөфтәй милли ихтилалдарҙы баҫтырыусы, милләтен һәм динен һатҡан ҡан эскес генерал Ҡотломөхәмәт Тәфкилевтең йәғни Алексей Ивановичтың бүләре була. Сәлимгәрәй — Шәңгәрәй Йосоп (Осин Алексеевич Стәрлетамаҡ әйәҙендә 1773 йылғы ихтилалда полковник Ҡасҡын Һамаров кешеләре тарафынан язалана) йәғни Осип Алексеевичтың бер туған улы.

2 ғинуарына тиклем—хеҙмәт итә. Рәсәй эске эштәр министрының рөхсәте менән ул Өфө Себер мәсете эргәһенә ерләнә. (Диниә назараты ихатаһында.) Уның ҡәберенә бөгөн рәшәткә һәм аҡ мәрмәрҙән һәйкәл ҡуйылған.

Дворяндар дәрәжәһендә, сығышы буйынса Минзәлә өйәҙе Мәстәй ауылында донъяға килгән Солтанов Мөхәмәтйәр Мөхәммәтшәкир улы 1886 йыл, Тәфкилевтән һуң, императорҙың 2 ғинуарҙа сыҡҡан указы менән мөфтөйлөккә тәғәйенләнә. Быға тиклем ул 12-се кантондың начальнигы һәм мировой судья булып хеҙмәт итә, эре ер биләүсе була. Солтанов Мөхәмәтйәр башҡорт милләтенән дворянлыҡ дәрәжәһенә өлгәшкән һирәк шәхестәрҙең береһе. Солтановтар ғаиләһе үҙ халҡына Мансур Солтанов атлы билдәле композитор ҙа бирә. Заманында уларҙың заттарынан береһе, бөйөк урыҫ яҙыусыһы Лев Толстой менән ҡатнашып, уға яҙыу менән семәрле ҡымыҙ сеүәтәһе бүләк итә. Ул экспонат Башҡортостанда крайҙы өйрәнеү музейында бөгөн дә һаҡлана.

Солтанов Мөхәмәтйәр, 29 йыл мөфтөйлөк итеп, 1915 йылдың 25 июнендә донъя ҡуя. Ул Диниә назараты ихатаһында ерләнгән.

1915 йылдың 18 июлендә император Николай II указы менән мөфтөйлөк вазифаһына Ҡаһирәлә университет тамамлап, һуңынан Санкт-Петербург собор мәсетенең имам-хатибы булып хеҙмәт иткән Баязитов Мөхәммәтсафа Ғатаулла улы тәғәйенләнә. Ләкин уның был вазифала хеҙмәт итеү мөҙҙәте бик ҡыҫҡа була—1917 йылда Ваҡытлы хөкүмәт ҡарары менән ул мөфтөйлөктән бушатыла.

1917 йылдың майында Ҡазанда йыйылған мосолмандар-съезды мосолмандар Диниә назараты мөфтөйө итеп Ғәлиев Ғәлимйән Мөхәммәт улын һайлап ҡуя. Ул быға тиклем ислам диненең ҙур эшмәкәре булараҡ, Ҡазан мәсетенең имам-хатибы һәм «Мөхәмәҙиә» рухани семинарияһының ректоры булып хеҙмәт итә. 1910 йылда Мәҙинә-Мәккәгә хаж ҡыла, быға тиклем Троицк ҡалаһындағы атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә дини ғилем ала. Ишан дәрәжәһен уға ошо мәҙрәсәнең остазы Зәйнулла ибн Хәбибулла Рәсүлев үҙе бирә. Ғәлимйән мөфтөй 1921 йыл Мәскәүҙә вафат була, Ҡазанда мосолмандар зыяратында ерләнә.

1923 йылдан 1936 йылға ҡәҙәр Диниә назаратының мөфтөйө итеп шуға тиклем ошо назараттың ҡазыйы булып хеҙмәт иткән Ризаитдин Фәхретдинов ты «һайлай»ҙар[1]

[1]Әгәр Октябрь революцияһына тиклем мөфтөйҙәрҙе император тәғәйенләһә, унан һуң был вазифаға теге йәки был шәхесте властар тәкдим итте.

Ислам диненең иң күренекле шәхестәренең береһе булған, уның фәлсәфәүи тамырҗарын тәрән өйрәнеүгә күп көс һалғаи был эшмәкәрҗе ҡыҫҡа ғына мәҡәләлә тасуирлап тороу мөмкин түгел. Уның фәнни һәм ислам диненә арналған мосолман донъяһына билдәле тәғлимәттәрен, фәнни хеҙмәттәрен өйрәнеү үҙе бер айырым иғтибарҙы талап итә. Уның хеҙмәтен баһалау өсөн шуны әйтеү ҙә етә: ул киләһе быуындарға мираҫ итеп 65 томлыҡ әҫәр нәшер иткән. Күп ғүмерен Урта Азияла һәм Ҡаҙағстанда үткәргән. Ул мөфтөйлөк иткән дәүер, замандаштарының баһаһына ҡарағанда, Диниә назараты, ғөмүмән мосолман донъяһының Рәсәйҙәге торошо иң юғары нөктәгә күтәрелгән осор булһа, шул уҡ мосолман донъяһының шәмесе байыган ваҡытҡа тура килә. Ул 1936 йылдың 11 апрелендә донъя ҡуя.

Диниә назаратының туғыҙынсы мөфтөйө булып Ризаитдин Фәхретдиновтан һуң Зәйнулла ишандың бер туған улы Ғабдрахман Рәсүлев һайлана. Ул заманында атаһының «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә белем алған. Мөфтөйлөккә тиклем Троицк ҡала мәсетенең имамы булып хеҙмәт иткән. Диниә назаратының мөфтөйө Ғабдрахман Рәсүлев 1950 йылдың 6 июлендә донъя ҡуя һәм Өфө Собор мәсете ихатаһында ерләнә.

1950 йылдың 6 июленән Диниә назараты мөфтөйө вазифаһын ваҡытлыса элекке Зәйнулла ишан шәкерте, ошо уҡ назараттың ҡазыйы (мөфтөйҙөң урынбаҫары) Баймөхәммәт Туғыҙбаев башҡара.

1951 йылдың 21 мартынан Европа өлөшө һәм Себер мосолмандары Диниә назаратының мөфтөйө булып быға тиклем Урта Азия һәм Ҡаҙағстан Дииниә назаратында ҡазый булып хеҙмәт иткән Шакир ибн Шәйхелислам Хиялетдинов һайлана. Ул 1890 йылда Ҡурған өлкәһе Зверино-головск тигән станцияла донъяға кило. Милләте — татар. Ун биш йәшенә тиклем шул ауыл мәҙрәсәһендә уҡый. 1905—1909 йылдарҙа Зәйнулла ишандың атаҡлы мәҙрәсәһе «Рәсүлиә»лә белем ала. 1909—1910 йылдарҙа Саратов губернаһындағы рухани «Бүби» мәҙрәсәһендә уҡый. 1910—1914 йылдарҙа Ҡаҙағстандыҡ Ҡустанай, Күксәтәү ҡалаларында рухани училищеһы мөғәллиме булып эшләй. 1914—1918 йылдарҙа Урал өлкәһе Джамбит ауылында шул уҡ эште башҡара, 1918—1930 йылдарҙа Атбаҫарҙа (Аҡмулла өлкәһе) имам-хатип һәм мәҙрәсә хәлфәһе була. 1930—1935 йылдарҙа үҙ һөйәрен ҡырҡа үҙгәртә һәм Ташкент ҡалаһының үҙәк клубында бухгалтер булып эшләй. 1935 йылда Петропавловск ҡалаһының тимер юл бәйләнеше бүлегенә бухгалтер булып күсә. 1943 йылда уны

Урта Азия һәм Ҡаҙағстан Диниә назаратына ревкомиссия рәйесе итеп һайлайҙар. 1947 йылдан Өфөгә килгәнгә тиклем, йәғни 1951 йылға ҡәҙәр, Джаркент, Чимкент ҡалаларында имам-хатип була. Өфө Диниә назараты мәжлесенә Шакир Хиялетдиновты ислам диненең СССР-ҙағы күренекле эшмәкәре, Урта Азия һәм Ҡаҙағстан назаратының мөфтөйө ишан Бабахан тәҡдим итә. Өфөлә үткәрелгән мосолмандар йыйылышына улы Зияутдин менән Бабахан ишан үҙе лә килә. Был ислам шәхесе Бөтә донъя тыныслыҡ советының да ағзаһы була. Диниә назаратының мөфтөйө булараҡ Шакир Хиялетдинов үҙенең дини эшмәкәрлегенән ғәйре бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе күп кенә ижтимағи ойошмаларҙа ағза булып тора, үҙенең әүҙем ҡатнашлығы менән байтаҡ ҡына файҙалы эштәр башҡара. Диниә назараты мөфтөйө Шакир Хиялетдинов 1974 йылда донъянан китә. Ул мосолман зыяратында ерләнә.

1980 йылға тиклем Диниә назаратында даими һайланған мөфтөй булмай. Башта бер нисә йыл Мәскәү мәсетенен имам-хатибы Әхмәтйән Мостафин, ә һуңынан был вазифаны Ленинград Собор мәсетенең имам-хатибы Ғәбделбарый Исаев башҡара.

1980 йылда руханиҙарҙың дөйөм йыйылышы Диниә назаратының мөфтөйө итеп Тәлғәт Сафи улы Тажетдиновты һайлап ҡуя. 1948 йылда Ҡазан ҡалаһында тыуған. Заманында һөнәрселек училищеһында уҡып, унан һуң йәмәғәт туҡланыуында ашнаҡсы булып эшләй. Совет армияһында хеҙмәт итә, шофер булып эшләй. Бөтә донъяға танылған, үҙендә 41 мосолман иленән студенттар уҡытҡан атаҡлы Ҡаһирә университетын тамамлай. Юғары белемле рухани уҡыуҙы тамамлағандан һуң Ҡазан мәсетендә имам-хатип булып хеҙмәт итә. 1990 йылда үткәрелгән Европа өлөшө һәм Себер мосолмандарының дөйөм йыйылышы Тәлғәт Тажетдинды, бөтә ҡағиҙәләрҙе һәм йәшәп килгән назарат уставын боҙоп, «мәңгелек мөфтөй» итеп раҫлап ҡуя.

Тәлғәт Тажетдин мөфтөй билдәле Ислам донъяһының танылған эшмәкәре, уны илдә генә түгел, яҡын Көнсығышта, ғәрәп илдәрендә яҡшы беләләр һәм бөйөк дәүләттең бөйөк кешеһе итеп, оло ихтирам менән ҡабул итәләр, хөрмәтләйҙәр. Күрәһең, ошо оло абруй «мәңгелек мөфтөй»зөн башын әйләндерә башлаған, мосолмандарҙың паклығы һәм сафлығы һағында торған оло дини вазифалы шәхес әҙәп, инсаф вә ғәҙеллек тәрбиәләү урынына Ҡөрьән Кәримдең ошо тайпылышһыҙ ҡанундарын боҙоуға юл ҡуйған. Төрлө тарафтарҙан йыйылған имам-хатибтарҙың раҫлауынса, ул әҙәм ышанмаҫлыҡ хилафлыҡтар ҡылған.

Мин юғарыла тасуирлап үткән Диниә назаратының төрлө мөфтәйҙәре төрлөсә эшләгәндер, холоҡтары ла берҙәй, бер ҡалыпҡа һалырлыҡ та булмағандыр, ләкин улар барыһы ла мосолмандарға биргән антын намыҫ менән үтәргә тырышҡан, Ҡөрьән Кәрим ҡанундарын боҙоуға барырға уларҙың береһенең дә выжданы етмәгән.

Бөгөнгө көндә Башҡортостанда ай'ырым Диниә назараты төҙөлдө һәм уның башына Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин һайланды. Хәйерле сәғәттә, мосолмандар!

ТУҒАН ТЕЛГӘ НИ ӨСӨН ИҒТИБАР КӘМЕЙ!

Сәхнәгә илле-алтмыш йәштәрҙәге кеше күтәрелһә, тамашасылар залы нурланып китҡәндәй була, сөнки уның күкрәгенән күңелгә ятышлы, моңло көй ағыла, табандарынан ут сәсрәтеп бейеүе залда ултырған бер кемде лә битараф ҡалдырмай, йөрәктәрҙе елкендерә. «Ни өсөн һуң оло быуын кешеләренең йөрәктәре мәңге һүнмәҫ дәрт менән һуғарылған?» — тигән тәбиғи һорау тыуа. Сөнки был кешеләр рухи мәҙәниәте үҫешкән мәлдә тыуған ауылдарында, үҙ ғаиләләре ҡосағында тәрбиәләнеп, ата-әсәләренең быуындан быуынға күсә килгән һәйбәт ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙләштергән, уларҙың мәҙәниәт хазинаһы шишмәһенең тылсымлы һәм шифалы һыуын эсеп үҫкән. Ә инде уларҙы алмаштырыусы быуын хәҙерге урбанизация, миграция мөхитендә йәшәү арҡаһында һәм хәҙерге киң информация дәүерендә халыҡтың мәҙәниәт ҡомартҡыларынан, йыр-моң һәм халыҡ йөҙөн яҡтыртыусы башҡа сағыу биҙәктәрҙән мәхрүм ҡала түгелме? Бына шуға күрә лә сығыш яһаусылар араһында халыҡ йырҙарының, бигерәк тә боронғо оҙон көйҙәр һәм яңғыҙ бейеүҙәрҙең күҙгә күренеп кәмеүен тоябыҙ, ҡуйылған концерттар, йылдан-йыл халыҡсан биҙәктәрен юғалтып, төҫһөҙләнә, ярлылана бара һымаҡ.

Быйыл йәй Баймаҡ районында Сибай баҡыр-көкөрт комбинатының «Березка» исемле пионер лагерында ял итеүсе балалар концертын ҡарарға насип булды, һүҙ юҡ, мәҙәнилек, башҡарыу оҫталығы юғары, кейемдәр затлы һәм сағыу. Концертта молдаван, украин, испан, һинд бейеүҙәрен балалар күбәләктәй осоп-төшөп оҫта бейене, халыҡ бик ихлас ҡараны йәш артистар сәнғәтен, ләкин күңелдә ниндәйҙер бер төйөн тороп ҡалды. Уйлай торғас, шул төйөндөң сәбәбен таптым: балаларыбыҙ донъя мәҙәниәте ҡаҙаныштарын белә, үҙләштерә, ә бына халҡыбыҙ сәнғәтен онота, уның йырын өйрәнмәй ҙә баһа.

Илебеҙҙә генә түгел, дандары сит тарафтарға һирпелгән, күп мәмләкәттәрҙең мәрмәр һарайҙарында моңдары янғыраған атаҡлы ҡурайсыларыбыҙ Йомабай Иҫәнбаев, Хәмит Әхмәтов, Ғиниәт Ушанов, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Ғата Сөләймәновтар, өҙә баҫып, елкендереп бейегән Мөхәммәт Иҙрисов, Фәйзрахман Рыҫҡужиндар оҫталығына ҡанат ҡуйған «йырҙары күп уның, моңдары күп» төбәктә халҡыбыҙҙың йыр-бейеү традицияларына йәш быуындың битараф ҡарашы, әлбиттә, һәйбәт түгел.

Ошо концертта көр тауыштары илебеҙҙең бөтә мөйөштәрендә яңғыраған талантлы шағирҙарыбыҙ әҫәрҙәренән бер өҙөк тә ишетелмәүе һағайта. Был инде киләсәккә йәш быуындың үҙ туған теленә ҡарата мөнәсәбәтенең ни рәүешле тороуына тағы бер асыҡ миҫал. Сибай ҡалаһы мәктәптәрендә уҡыусыларға туған тел һәм әҙәбиәтебеҙгә ихтирам һәм мөхәббәт тәрбиәләргә бурыслы уҡытыусы иптәштәрҙең эш кимәленә етди дәҒүә был.

Ошо уңай менән бәләкәй генә бер фәһемле ваҡиғаны килтереү ҙә артыҡ булмаҫ. Шулай бер көн «Березка» лагеры балаларының Талҡаҫ буйында үҫкән тәлгәш ҡайынлыҡта бергәләшеп китап уҡып ултырыуҙарын күрҙем. Семҡара бөҙрә сәсле, башын артҡараҡ ташлап, ҡыйғас ҡашлы бер һылыуҡай китап уҡый, о ҡалғандары керпектәрен дә ҡаҡмай йотлоғоп тыңлай. Баҡһаң, пионервожатыйы, үҙ отрядына Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесының русса тәржемәһен ҡысҡырып уҡып ишеттерә. Был хәлгә мин бик шатландым. Сөнки балалар рус телен бик һәйбәт белә, һыу кеүек эсә ине.

— Ә хәҙер миңә кем башҡортса йәки татарса шиғыр уҡып күрһәтә? — тип һораным мин.

Йәш ҡыҙ китабынан айырылып, әнә кеүек керпектәрен өҫкә һирпте лә: «Ҡолаҡҡа яҙмаған бындай сәйер һорауҙы биреп торған ниндәй бәндә икән?» — тигән шикелле, үҙенең сәнскеле ҡараштары менән мине ялмап алды.

— Странно, — тине пионервожатый ҡыҙыҡай минең һорауға ғәжәпләнеп, — потому что они не понимают ни по-башкирски, ни по-татарски.

— Ә һеҙ үҙегеҙ аңлайһығыҙмы һуң? — тимем, бер аҙ аптырашта ҡалып.

— Захочу беләм, ни захочу белмәйем, — тигән яуап ишеттем.

Әңгәмәне дауам итеү теләге миндә ҡапыл һүнеп ҡалды. Шулай ҙа аҙаҡтан түңәрәкләшеп ултырған балаларҙан: «Һеҙ ҡайһы лагерҙан?» — тип һораным. Барыһы ла бер ауыҙҙан: «Березка»нан,—тип яуап бирҙе. Ә туған телебеҙҙә «Березка» тигән һүҙ нисек була?» — тигән һорауға

егерменән ашыу бала араһынан яуап биргән берәү ҙә табылманы. Ғөмүмән, шаулап торған зифа буйлы ҡайынлыҡ ҡосағында ултырған балаларҙан Ирәндектә үҫкән бер генә ағастың да исемен туған телдәрендә әйттереп булманы.

Был хәлде, минеңсә, бер нисек то аңлатып та, аҡлап та булмай.

Бер нисә сәғәттән, Талҡаҫтың икенсе ярында шул уҡ «Березка» лагерында ял итеүсе ейәнсәре янына ҡунаҡҡа килгән, күләгәлә китап уҡып ултырған, башына сал төшкән оло йәштәрҙәге рус ҡатынын осраттым. Машина менән килгән ҡыҙы, кейәүе һәм ейәнсәре шаулаша-шаулаша Талҡаҫта һыу инә. Теге ҡатындың ҡулындағы китап яҙыусы Яныбай Хамматовтың руссаға тәржемә ителгән «Юрғашты» романы булып сыҡты. Артабанғы әңгәмәнән шул асыҡланды: әҙәбиәт һөйөүсе өлкән генә был кеше башҡорт яҙыусыларының руссаға тәржемә ителгән бөтә әҫәрҙәрен дә даими уҡып бара икән.

— Бигерәк тә миңә Ноғман Мусиндың, Яныбай Хамматовтың әҫәрҙәре оҡшай. Мин үҙем Ҡана заводында тыуып, шунда үҫтем. Шуның өсөн улар ижадындағы бөтә тәбиғәт күркәмлеге, улар тасуирлаған Урал тауының шыр урмандары, сылтырап аҡҡан һалҡын шишмәләре, мөһәбәт Урал буйында булып үткән тарихи ваҡиғалар минең күңелгә ифрат та яҡын, хуш килә, йөрәккә ята, — тине теге апай.

Күҙлеген китабы өҫтөнә һалып, арыған күҙҙәрен ҡулы менән ыуалап алды ла, ул үҙ ҡарашын йәшел хәтфәгә төрөнгән Ирәндек ҡаяһына текәне.

— Бына ошо китаптарҙы барыһын да яҙыусының туған телендә уҡыһаң ине. Тәржемә барыбер тәржемә инде, оригиналға етәме ни инде ул? — тип тауышына үкенеү билдәләре өҫтәй, көрһөнөп ҡуйҙы.

Һүҙ балаларҙы туған телендә уҡытыу мәсьәләләренә күскәс, уның ҡыҙы ла әңгәмәгә ҡушылды. Был йәш ҡатын Сибай ҡалаһының 8-се мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй икән.

— Беҙ үҙебеҙҙең мәктәптә башҡорт теле уҡыта башлағайныҡ, ләкин хәҙер туҡтаттыҡ, — тине уҡытыусы.

— Нишләп, әллә уҡытыусылар етешмәйме?

— Юҡ, эш унда түгел. Уҡытыусылар бар. Тик һуңғы йыйылышта ата-әсәләр ҡаршы төштө.

— Сәбәбе?

— Балаларыбыҙҙың башын ҡаңғыртып, башҡортса уҡытмағыҙ. Уларға был телдең һис хәжәте юҡ. Беҙ теләмәйбеҙ, ҡырҡа ҡаршыбыҙ, — тине ата-әсәләр.

— Уларға туған тел өйрәнеүҙең бала-сағалар өсөн киләсәккә әһәмиәте, балаларҙың рухи мәҙәниәтен үҫтереүҙә телдең мөһим сара булыуын аңлатырға кәрәк ине, — тинем мин һәм уйға ҡалдым.

Эйе, рус телен өйрәнеү, ул телдә һөйләшә белеү һәр кеше өсөн мотлаҡ, хәҙерге заман кешеһе өсөн изге бурыс. Ләкин рус телен һәйбәт үҙләштереү менән бергә туған теленде ҡыйырһытырға, кәмһетергә ярамай. Рус телен өйрәнеү әсә теле аша халҡың хазинаһын—уның тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, йыр-моңон танып белеү, яҡшы үҙләштереү аша тормошҡа ашырылырға тейеш. Туған телен яҡшы белмәгән кеше бер ваҡытта ла аңлы интернационалист була алмай Кешелектең бөйөк аҡыл эйәләре сит телдәрҙе өйрәнеүҙән алда үҙ теленән ваз кисмәгән, сит телдә һөйләшеүсе милләттең, ҙурмы, бәләкәйме икәненә ҡарамаҫтан, улар һәр телдең тиң хоҡуҡлығын таныған, уның һәр халыҡтың рухи мәҙәниәтен билдәләй торған оло хазина икәнен әйтеп үткәндәр. Ә хазинаны бөртөкләп йыялар, һаҡлайҙар, ҡәҙер итәләр. Ер ҡуйынында алтын эҙләгән старатель үҙ алтынын бөртөкләп йыя, самородок табам тип аяҡ аҫтында ятҡан алтын валсыҡтарын тапап китмәй, энә күҙәүендәй булһа ла терегөмөш ярҙамында тота бара. Үҙ теленде яҡшы белмәй тороп, үҙ мәҙәниәтеңде, рухыңды шул тел байлығы нигеҙендә камиллаштырмай тороп, икенсе телде лә ныҡлы үҙләштереп булмаясағы көн кеүек асыҡ.

Элегерәкке заман кешеләре Советтар сессияларында докладтарҙың ике телдә һөйләнеүен хәтерләй. Райондарҙа ғына түгел, республикала үтә торған активтарҙа һәм башҡа шундай мөһим йыйылыштарҙа ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәренең үҙ телендә сығыш яһауҙары тәбиғи хәл ине. Алдынғы һауынсылар, уңған игенселәр трибунаға баҫып, үҙҙәренең эше хаҡында сатнатып сығыш яһай торғайны. Ундай иптәштәрҙең сығыштарын шундуҡ руссаға тәржемә итеү өсөн белемле тәржемәселәре лә шул уҡ залда әҙер ултырыр ине. Ә хәҙер иһә йыш ҡына ҡайһы бер етәкселәрҙең теленән: «Теге йәкп был һауынсының күрһәткестәре бик юғары ла, тик трибунаға сыгып һөйләргә бер ҙә маһирлығы юҡ, сөнки рус телен насар белә», — тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килә.

Туған телде файҙаланыу өлкәһенең һаман тарая, ҡыҫыла барыуына тағы бер миҫал килтереп китеү бер ҙә артыҡ булмаҫ. Республиканың төрлө юғары ойошмаларына, министерстволарға, бигерәк тә агропром органдарына райондарҙан, ауылдарҙан көн һайын тиҫтәләгән башҡортса йәки татарса яҙылған айырым кешеләрҙең ялыуҙары, ғаризалары килеп тора. Ләкин улар менән эш итеү йыш ҡы-

на тел белмәүҙән ауырға төшә. Ул ғына ла түгел, нәшриәт органдарынан тыш, бер генә ойошмала ла башҡорт шрифтлы яҙыу машинкаһын табып булмай. Был тәңгәлдә Башгоснаб етәкселәре һис тә хәстәрлек күрмәй, сөнки улар алдында бындай бурыс ҡуйылғаны юҡ.

Почта бүлексәләрендә, һаҡлыҡ кассалары алдында русса яҙылған бланк ҡағыҙҙарын ҡулдарына тотоп, уны нисек тултырырға белмәй аптырап торған оло йәштәрҙәге кешеләрҙе лә йыш осратырға була. Әйтелгәндәр барыһы ла республикала туған телдең әһәмиәте торған һайын кәмей барыуы тураһында һөйләй. Йәш быуын кешеләренең күбеһе был ғәйәт ҙур мәсьәләгә ҡул һелтәп ҡарай. Мәктәп китапханаларында башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре берәмләп кенә күренеүҙәре йәки бөтөнләй булмауы ошо иғтибарҙың етерлек кимәлдә түгеллеген тағы бер тапҡыр иҫбатлай. Республика үҙәге Өфө тиклем Өфөлә туған телдә эшләгән бер генә балалар баҡсаһы, балалар яслеһе лә юҡ. Ә бит бала үҙ теленә, элеккесә әйткәндә, карауатта арҡыры ятҡан сағында өйрәнә башларға тейеш.

Хәҙер беҙҙә үҙ телдәрендә һөйләшә, сығыш яһай алмаған кешеләрҙең тотош бер быуыны үҫеп сыҡты. Был етәксе иптәштәргә лә ҡағыла. Ижтимағи темаларға халыҡ алдына сығып лекция һөйләүҙәр, тәрән сәйәси әңгәмәләр үткәреү тураһында әйтеп тороуҙың кәрәге лә юҡ.

Республикабыҙҙа рус теле менән бер ҡатарҙан туған телде тейешле файҙаланыу, тормоштоң бөтә тармаҡтарында ла уның хеҙмәтләндереү мөмкинлектәрен тулыһынса ҡулланмау арҡаһында тел мәҙәниәте халыҡ араһында етерлек кимәлдә үҫмәне. Ә тел, башҡа теләһә ниндәй өҙлөкһөҙ үҫә һәм камиллаша бара торған тере организм кеүек, даими иғтибарға, тәрбиәгә мохтаж, шунһыҙ ул фәкирләнә.

Халҡыбыҙҙың рухи мәҙәниәте нигеҙендә уға мәңге йәшәү көсө, күркәмлек йәме биргән, сағыу төҫтәр менән биҙәкләнгән тел ята. Телһеҙ халыҡ — тамырһыҙ ағас. Ошо ябай хәҡиҡәтте һәр кем аңлаһын ине.

ХАЛЫҠ БАЙРАМДАРЫ. ҺАБАНТУЙ

Яҙғы баҫыу эштәре тамамланыу менән үткәрелә торған һабантуй байрамы тәрән тарих төпкөлдәренә барып тоташҡан халыҡ йолаларының үҙ йөкмәткеһе йәһәтенән иң күркәме, иң баҙыҡ сағыулыһы тиергә ярай. Һабантуй булып ул халыҡ теленә сағыштырмаса яңыраҡ инде. Шуға тик-

лем, әле илле-алтмыш йыл элегерәк, ул ғәҙәттә йыйын-тип йөрөтөлдө. Тимәк, халҡыбыҙ ҡасандыр ырыу, ҡәбилә булып йәшәгән осорҙа хәҙерге һабантуйҙың тәүге төшөнсәһе «йыйын» уйын-көлкө, көс һынашыу, йыр-бейеү ярыштары үткәреүҙән тыш шул заман йәшәйешенең ижтимағи-сәйәси мәсьәләләрен дә уртаға һалып кәңәшләшә, фекер алыша торған йыйылыш урыны булған, тип фараз итергә мөмкин.

Октябрь революцияһынан алда бындай йыйындарҙың атап ҡына әйтерлек аныҡ мөҙҙәте булмаған. Ауылдағы атаҡлы байҙарҙың, юғары ҡатлам кешеләренең улдарына килен әйттереү, ҡыҙ биреү йолалары ошо туйҙар хөрмәтенә һәр саҡ тиерлек һөнәрселәр, көрәшселәр һәм ат ярыштарын эсенә алған йыйындар менән осланыр булған. «Фәләән бай малайына кәлош әйттергәндә, йомғаҡ ҫүбәлә йыйын үткәрҙе» тигән ата-бабаларҙың һүҙҙәре күңелдәрҙә әле лә һаҡлана.

Ә һуңға табан, утыҙынсы йылдар башынан алып, һәр ауылда, район үҙәгендә һабантуй үткәреү ғәҙәткә инеп китте. Был быуындан быуынға күскән халыҡ байрамы тик ауыр һуғыш осоронда ғына ваҡытлыса туҡталып торҙо. Ә инде һуғыш тамамланыу менән тормош нисек кенә китек, ауыр булмаһын, ул йола тағы ла дөрләп тоҡанып китте. Республика кимәлендәге беренсе һәм һуңғы һабантуй 1946 йылдың йәйендә Ағиҙел йылғаһының һул яҡ ярында Өфө менән Затон араһындағы йәшел урманлы уйпатлыҡта үткән, о унан һуңғы йылдарҙа ойоштороған Өфө һабан туйҙары тәүгеһенең тоноҡ, төҫһөҙ күсермәһе генә, сөнки беренсе һабантуй бөтә республика вәкилдәре ҡатнашлығында уҙғарылған.

Бөтә йәмәғәт тормошо төрлө үҙгәрештәргә дусар булған кеүек һабан туйҙар ҙа был елпеүҙән ситтә тороп ҡалмаған. Уны үткәреү тәртиптәренә, йөкмәткеһенә һәр осор үҙ мөһөрөн баҫа килгән. Баштағы уйын-көлкөгә, дуҫ-иштәр менән осрашыу, кеше күреү һәм үҙеңде күрһәтеү, көс һынашыу һәм һөнәрмәндәрҙең ярыштары үткәрелә торған был йыйындар ҙа һуңғы осорҙа үҙенең тәбиғи халыҡсан төҫөн юғалта төштө, уны бер ҡалыпҡа һалырға ынтылыуҙар, тик «өҫтән» ҡушҡан әмер буйынса ғына үткәрергә маташыу, команда-администратнв ҡыҫымына ҡулайлаштырыу күренештәре урын алды.

1960—1970 йылдарҙа быуаттар буйына үткәрелеп килгән һабан туйҙы закондан тыш ваҡиға хисабына индереп, унан ниндәйҙер «милли» генә түгел, хатта «милләтселек» еҫе аңҡығанын һиҙемләүселәр ҙә табылды. Власть йөрөтөүсе етәкселәрҙең береһенә «һабантуй» төшөнсәһе элекке-

не һағыныуҙы хәтерләткәндәй тойолдо һәм уның исемен ташлап, «спартакиада» тип тә атарға күнегә башлағайнык нндс. Әгәр быға һәр районда «спартакиада»ларҙы үткәреүҙә тәртип һаҡлау өсөн вәкилдәр ҙә ебәреүҙе хәтергә төшөрһәк, бөгөнгө һабан туйҙың яҙмышы ниндәй һикәлтәләр аша үтеүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел.

Һабантуй элек-электән ауыл халҡының урман-болондары хуш еҫле сәскәләргә күмелгән осорҙа, гүзәл тәбиғәттең иҫерткес ҡосағына сумыу, бер-берене менән осрашыу, ҡунаҡҡа саҡырышыу, кәңәш-фекер алышыу, ә инде йөрәктәрҙә сихри мөхәббәт тойғолары ялҡын булып дөрләгән ғашиҡ йәштәрҙең танышыу, наҙлы һөйөү хистәре менән һуғарылған һандуғаслы июнь кистәрен бергә үткәреү уры-ны булды. Ҡайһы бер йәштәр тик ошо һабан туйҙарында ғына үҙ мөхәббәттәренә юлығып, бергә йәшәүҙең тәүге аҙымын ошо йыйындан башларҙар ине. «Бына ошо еңгәнде теге ваҡытта һабан туйынан ултыртып алып ҡайттым». «Мынауы еҙнәң менән, хәҙер әллә кем булып ултырһа ла, теге саҡ һабан туйҙа танышҡайныҡ», тиер ине ауыл халҡы. Ә инде һабан туйындағы бер кем тарафынан да артыҡ сикләнмәгән йыр-бейеү, көрәш һәм ат сабыш ярыштары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Билдәле, һуғыштан алда ла район үҙәгендә һабан туйҙың ҡайһы урында башланыуы» һәм ҡасан, ниндәй ярыштар үткәрелеүе тураһындағы мәғлүмәттәр район гәзитендә алдан баҫылып сығыр булды, бынан уның программаһы, айырым баҫылып, ауылдарға таратыла торғайны. Һабан туйға дүрт-биш аҙна ҡалғас, һәр колхоз, совхоз үҙ ауылының көрәшселәрен, йырсыларын, ҡурайсыларын, йөрөк, дөлдөл аттарын әҙерләргә тотона. Ауылдың билдәле көрәшселәрен эштән бушатып ныҡлап ашата башларҙар ине. Көрәшкә тәғәйен бәһлеүән һабантуйға тиклем кәм һалғанда бер-ике тәкәне ашап бөтөр булды. Ләкин уның был тантаналы көнгә тиклем кемдәр менәндер көрәшеп даими күнегеү үткәреп йөрөгәне хәтерҙә ҡалмаған. Тимәк, ул кешенең эштән бушап, ял итеүе һәм үҙ ауырлығын арттырыу бурысы беренсе сиратта торған.

Әммә шуныһы хәтерҙә һаҡланған: ул көрәшсе үҙендә көс-ғәйрәте булыуҙан тыш таһыллыҡ, ташлау оҫталығына эйә булыуы ла мотлаҡ һаналған. Ташлау, тип әйтәбеҙ шуның өсөн, сөнки һуғыштан алдағы көрәшселәр үҙе менән алышыусының табандарын ерҙән айырып, тик һирпелдерә ташлаһа ғына еңеүсе тип танылды. Икенсе көрәшсене күкрәккә һалып күтәргәндән һуң уны һирпеп ташлау түгел, тик йығыу ҡағиҙәһе һуңғы бер нисә тиҫтә йылдарҙа ғына көрәшселәр араһында ҡанунлашып өлгөрҙө.

Элгәре замандарҙа береһе өҫкә сыҡҡан хосуста ла бер-береһенән айырыла алмаған батырҙарҙы яңынан көрәш-тереү тәртибе шикһеҙ һаҡлана торғайны. Хәҙер көрәш тәр-тибенә күтәрмәй-нитмәй тубыҡҡа ултыртып, баш аша таш-лауҙы ла ҡағиҙәгә һыйышлы тип иҫәпләйҙәр.

Ә элегерәк ул русса көрәшеү тип хисапланды, уны ҡул-ланыу ҡәтғи тыйылды. Уның ҡарауы, элек көрәштәрҙә ауырлыҡ категорияһы бөтөнләй иҫәпкә алынманы. Йәрәбә теләһә ниндәй ауырлыҡтағы көрәшсене бергә осраштырҙы. Быны ҙур ғәҙелһеҙлек булған тип иҫәпләргә мөмкин, шу-лай ҙа үҙ иптәшенән бер баш ҡайтыш һәм күпкә еңел, ләкин таһыллы көрәшселәрҙең үҙенән күпкә ауырҙарын да аяҡ-ҡулын ергә тейҙермәй, һирпеп ебәреүҙәрен күп тапҡырҙар күҙәтергә тура килгеләне. Тимәк, эш ауырлыҡ-та түгел, көрәшсенең таһыллығын, оҫталығын ул саҡтар-ҙа алдын ҡуйғандар.

Бына шуға күрә лә оҫта көрәшселәрҙең уңға янтайып һулға ташлау һәм киреһенсә, ерҙән ҡалҡытҡан алышыу-сыны һул беләгенә һалып, ләкин аңғармаҫтан уң яҡҡа күсереп һирпеүҙәр йыш осрай торғайны, тик ташланған кешенең билдән ҡулдары ысҡынып китеүе мотлаҡ ине. Бындай көрәш тамашасы өсөн ҡыҙыҡ та, фәһемле лә ине. Көрәш мәлендә аяҡ салыу, ике йоҙроғо менән бөйөр-ҙәрҙе ҡыҫыу ҡырҡа тыйылды.

Әйтергә кәрәк, көрәшсе даны элекке ваҡытта ауыл даны булып хисапланды. Еңеүсе батырҙарҙы үҙ ауылдаш-тары түңәрәктән ҡулдарына күтәреп, әгәр инде, тәкә ашап та еңелһә, ундайҙарҙы ғәрлектәре сигенә сыҡҡан ауылдаштары ҡаҡҡылап та, ә ҡайһы саҡ осаларына тип-келәп тә алып сығып китерҙәр ине. Тимәк, еңгән һәм еңел-гән өсөн дә әхләҡи яуаплылыҡ дөйөм булған. Ә хәҙерге ваҡытта быға артыҡ иғтибар итеүсе юҡ — кем еңһә лә барыбер. Күп һабан туйҙарҙа ауыл бәһлеүәндәрен бер ҡайҙа ла эшләмәгән спорт мастерҙары еңеп, яурынына тәкә йөкмәп ҡайтып китә.

Ат сабыштырыу хаҡында бер нисә һүҙ. Ат әҙерләү, уны һабан туйға яратыу тураһында Учалы районы «Поляков-ка» колхозынан белгес Спартак Ильясовтың бик яҡшы мәҡәләне баҫылды. Шуға күрә ул мәсьәләгә ентекләп туҡ-талып тормайбыҙ. Әммә ҡайһы бер фекерҙәрҙе әйтеп кит-мәйенсә булмай.

Элекке һабан туйҙарҙа дүнән-дүнәженгә сыҡҡан оло аттар, ҡағиҙә рәүешендә, 25 километрға сапты. Бынан да ҡыҫҡараҡ алыҫлыҡҡа сапҡан аттарҙың һәләтен тулыһын-са асыу мөмкин түгел. Оло аттарға 5—6 саҡрым — сабыу өсөн ара түгел тип хисапланды. Элекке замандарҙа ҡо-

нан-ҡонажын, йәғни өс йәшкә сыҡҡан аттар ғына 12 километр алыҫлыҡтан сапты. Бына был саҡта инде сыҙамлы аттарҙың бөтә физик сифаттары ла асыҡ күренә.

Элекке ваҡытта сапҡан ат өҫтөнә бер кем дә ҡаптал йәки үндек һалманы, сөнки ҡоштай осҡан ат өҫтөндә айыл-тартма менән нисек кенә тартһаң да — бер ни ҙә тормай, артҡа шыла. Шуға күрә атҡа менгән кешеләрҙең, ыштан төбөнә һәр саҡ йомшаҡ кейеҙ тектеләр, ә ул инде һыбайлы менән ҡуша шылып йөрөй. Шуны ла әйтергә кәрәк, сапҡан мәлдә аттың эсенә йәки бөйөрөнә һуғыу, аяҡтар менән тибенгеләү ҡәтғи тыйылды. Ә инде һинең менән йәнәш сабып барған икенсе аттың һыртына ҡамсы менән арҡыры һуғыу ҙур ғәйеп һаналды. Сөнки бындай аттың сабыу тиҙлеге шунда уҡ бермә-бер кәмей. Умыртҡа һөйәге көсөргәнешле һуҙылып, йән-фарман сабып барған ат ҡапыл аҡһай башлай, сабыуын артабан дауам итә алмай. Бик кәрәк саҡта аттың муйыны төбөнә генә һуғырға ярай, тип өйрәтте беҙҙе элек ауыл ҡарттары.

Хәҙер быға иғтибар итеүсе кеше юҡ. Ярыштыра торған атты ҡалын таҡта өҫтөнә баҫтырып үткер ҡасау менән тырнаҡтарын түңәрәклән ҡырҡып сығыу йолаһы ла бар ине, сөнки ҡаҡ юлда бар көсө менән сапҡан аттың тояғы ярылмаһын өсөн эшләнгән бер сара ине был. Ғөмүмән, йөрөк аттың тояҡтары текә, түңкәрелгән стакан кеүек булырға тейеш тигән ырым халыҡта быуындан быуынға күсеп килде.

Хатта оло кешеләрҙең элек 10 саҡрымға йүгергәнен иҫәпкә алһаҡ, хәҙерге аттарҙың 5—6 километрға сабыуы бер нисек то аңлашылмай. Ошо уңай менән күңелдә бер һабантуй ваҡиғаһы әле лә һаҡлана.

1939 йылғы Асҡарҙа үткәрелгән һабан туйҙа ошо ҡағиҙәгә ярашлы рәүештә Байым тирәһенең атаҡлы йүгерегә, фамилияһы Туйышев, исеме Ғәббәс булһа кәрәк, ун саҡрымға яҡын араны беренсе булып йүгереп килде лә һабантуй майҙанына килеп тигеҙләнгәс, ҡапыл яйлап, аҙымға күсте. Бөтә тамашасы геү килеп: «Ғәббәс, был һинең нишләүең?», «йөҙ таяҡ ара ҡалды бит, йүгер!» — тип ҡысҡырырға, дәрт бирергә тотондо. Артта килеүсе йүгеректәр уны берәм-берәм үтә башланы. Бына шул саҡ, ул, айғыр булып, әсе итеп кешнәне лә, башта торған ерендә бейеккә һикереп алды. Шунан, күҙ асып йомғансы, үҙен үтеп, алыҫлаша башлаған йүгеректәрҙе уҙып китте. Бына уның 10 саҡрым йүгергәндән һуң да ниндәй мөмкинлектәре булған, һуғышта ҡаһармандарса һәләк булған атаҡлы йүгерек Ғәббәс ағай, күрәһең, шаян да кеше булғандыр. Аҙаҡтан аҡ ыштан балаҡтарын төшөрөп, белепме-

белмәйме, үҙенә бүләк итеп бирелгән ҡара трусикты ыштан тышынан кейеп, кеше араһында йөрөп ятыуын бер ҙә оноторлоҡ түгел.

Ә беҙ хәҙер һабан туйҙарында яҡшы күнегеү үткән кешеләрҙе йөҙәр метрға йүгертәбеҙ. Быныһы, билдәле, белгестәр эше, мин тик үҙем күргән нәмәләрҙе генә яҙам. Хәҙер бөтә ярышсыларҙы ла 10 саҡрымға йүгертеп, уларҙың хәлен алырға һис тә ниәтем юҡ.

Элекке һабан туйҙарҙы матурлап, йәйғорҙоң бөтә биҙәктәрен үҙенә йыйған, затлы милли кейемдәр кейеп 20—30 йәш ҡатын-ҡыҙҙың арғымаҡтарға атланып елдереп йөрөүҙәрен дә иҫәпкә алһаҡ, һабан туйҙарҙың милли буяуҙары баҙығыраҡ та, сағыуыраҡ та булған, тип әйтергә ярайҙыр.

Хәҙерге һабан туйҙарҙың башланып китеү тәртибендә ҡайһы бер эсте бошорған нәмәләрҙе лә әйтеп китеү ярайҙыр. Уны үткәреүгә лә административ-команда ысулдары килеп инеүен юғарыла әйтҡәйнек, шикелле.

Бына иртәнге сәғәт 10 яҡынлаша... Ауылдарҙан үҙ халыҡтарын машиналарға тейәп алып килгән етәкселәр төрлө мәшәҡәттәр менән мәшғүл кешеләрҙе митингыға ҡыуалай. Шунһыҙ һабантуй башланмай. Шаулап һатыу итеп ятҡан магазиндар, күсмә ларектар ябыла. Хозурланып сәй эсеп ултырыуҙар туҡтатыла. Бөтә кеше үҙ эшен ташлап, митингыға ағыла. Ҡояш битләүенә йөҙәрләгән кешене йыйып, район хужалары митингыға тотоноп китә. Оҙоноҙаҡ телмәрҙәр, алдынғыларҙы бүләкләү башлана. Тәбиғәт ҡосағына йыйылған халыҡтың, нисек кенә әҙәпле булмаһын, ҡояш битендә янып, өгөт-нәсихәт тыңлап торғоһо килмәй. Бынан һуң инде, иң баштарына ҡыҙыл таҫмалар һалып алдынғылар, ә улар артынса спортсылар сафы үтә. Ҡыҙыл әләмдәр беркетеп, яман тауыштары менән ҡолаҡ тондороп арттарынан ҡуйы, ҡара төтөн бөркөп бер төркөм мотоциклистар уҙа. Ә унан инде өр-яңы комбайндар, урғыстар һәм тағы әллә ниҙәр ҡуҙғала.

Беренсенән, һабантуй революция байрамы түгел, унда митинг йыйып, рәсми телмәрҙәр һөйләп тороуҙың бер хәжәте лә юҡ. Икенсенән, ундай техниканы һабантуй майҙанына ҡыуып килтереүҙең зыяндан башҡа файҙаһы бармы икән? Былар барыһы ла тик «күрһәтмә» буйынса ғына үткәрелергә тейеш тигәндән сығып, халыҡҡа көсләп тағылған бойороҡ заманының ҡалдығы, һабантуй — халыҡтыҡы, ул халыҡса үтергә тейеш. Уны үткәреүсе комиссиялар ҙа, нигеҙҙә, халыҡ вәкилдәренән торорға тейеш, юғиһә йылына бер тапҡыр килә торған байрамды ла беҙ

кешегә үз яйына, уның теләгәненсә үткәрергә бирмәй, бер ҡалыпҡа һалырға тырышабыҙ.

Тәбиғәт ҡосағында үткәрелгән һабантуй — ул бөтмәҫ-төкәнмәҫ халыҡ ижадының урғылып сыҡҡан шишмәһе, нескә тойғолар бөрөләнеп сәскә атҡан хозур төйәк, рухи ихтыяжының һыуһыны ҡанғансы кеше был тылсымлы шишмә һыуын татырға тейеш, һабантуй — беҙгә ата-бабалар ҡалдырған халҡыбыҙ тарихының изге йолаһы. Ул бер ниндәй ҙә «төҙәтеүҙәр», «ямауҙар»ға, бигерәк тә күрһәтмәләргә мохтаж түгел. Уны шул бөтөн, барлыҡ биҙәктәре сағыу көйөнсә киләһе быуындарға ҡалдырайыҡ.

Яҙыусы һүҙе:

ЕР – ХАЛЫҠ ХАЗИНАҺЫ

Кешелек йәмғиәтендә ниндәй генә революция, халыҡ хәрәкәте йәки ҡырҡа боролоштар булмаһын, ул һәр саҡ үҙ алдына түбәндәге мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе бурыс итеп ҡуйған: власть кем ҡулына күсергә тейеш; төп етештереү көстәренә кем хужа һәм милли мөнәсәбәттәр мәсьәләһе нисек хәл ителергә тейеш? Бына ошо төп мәсьәләләрҙең нисек хәл ителеүенә ҡарап, кешелек йәмғиәтендә ижтимағи-сәйәси ҡороштоҡ ниндәй формала булыуы ла билдәләнгән. Был бурыстарҙы һәр төрлө ижтимағи-сәйәси ҡоролош үҙенсә хәл иткән.

Беҙ асыҡларға тырышҡан ер мәсьәләһе лә — ошо ҡоролоштоҡ йөҙөн һәм үҫеүен билдәләүсе төп факторҙың, береһе. Ер тураһында фекер йөрөткәндә, беҙҙең Башҡортостан шарттарында өс быуатҡа яҡын һуҙылған башҡорт халыҡ сыуалыштары һәм ҡанлы ихтилалдарының төбөндә иң беренсе булып башҡорт ерҙәренең таланыуы, колонизациялау ятҡанын да онотмайыҡ.

Бына ошо башҡорт ерҙәренең күпләп таланыуы арҡаһында килеп сыҡҡан ризаһыҙлыҡты иҫәпкә алып, хатта батша хөкүмәте лә, формаль булһа ла, башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙы, талауҙы тыйыу тураһында һәр төрлө указдар ҡабул иткән. Әҙме-күпме башҡорт ихтилалдарының тарихы менән ҡыҙыҡһынған кешегә мәғлүм: был указдың тәүгеләре 1735 йылдарҙа сыға башлаған булһа, һуңғылары ун һигеҙенсе быуаттың аҙағына, император Павел 1 батшалыҡ иткән осорға ҡайтып ҡала. Хатта ун туғыҙынсы быуат осоронда ла башҡорт ерҙәренең яҙмышы тураһында сыҡҡан байтаҡ ҡына документтарҙы күрәбеҙ. Ә инде төптәнерәк фекерләгәндә, башҡорт ерҙәрендә хужалыҡ итеүҙе һәм уны шул халыҡҡа беркетеүҙе үҙ указы-

грамотаһы менән нығытыу ырыу хужаларының, беренсе нәүбәттә Шағәли Шаҡман бейҙең, Иван Грозный батшаға баш һалыуынан башланып китә. Ләкин ул батша грамоталары ғәмәлгә ашмай, ерҙе төрлө алдашыу юлдары менән аяуһыҙ талайҙар. Тыуыуына ике йөҙ йыл тулыу тантанаһын билдәләп үтергә йыйынған бөйөк рус яҙыусыһы Сергей Тимофеевич Аксаков ҡына ла 400 мен дисәтинә башҡорт еренә хакимлыҡ иткән. Ә башҡа йөҙәр, меңәр дисәтинә башҡорт ерҙәренең Демидов, Твердышев, Мосолов кеүек промышленниктар йәки унарлаған башҡа алпауыттар ҡулына күсеүе тасуирлап тороуҙың кәрәге юҡ.

Октябрь революцияһынан һуң ауылдарҙа башланып киткән кооперациялар, ерҙе эшкәртеүҙә үҙ-ара ярҙам товаришестволарын ойоштороу ҙа ерҙе файҙаланыуҙа ошоға тиклем йәшәп килгән община мәнфәғәттәрен иҫәпкә алып эшләнгән. Ләкин башҡорттарҙың община менән ерҙән файҙаланыу системаһы ал да гөл булмаған һәм тарихта уны боҙорға, ватырға ынтылыусылар ҙа осраған.

Һуңғы императорҙың премьер-министры Столыпиндың ер реформаһы ошо йәшәп килгән тәртипте боҙа. Общиналар биләгән төп башҡорт ерҙәренә көнбайыш, көньяҡ-көнбайыш губерналарынан меңәрләгән крәҫтиәндәр күсереп ултыртыла башлай. Әбйәлил районындағы Гусево, Михайловка, Селивановка, Борисовка ауылдары, Смеловск утарының төп башҡорт ерҙәрендә барлыҡҡа килеүе, мәҫәлән, ошо уҡ осорға, Столыпин реформаһына ҡайтып ҡала. Бындай ауылдар вотчинниктар һәм башҡорт обществолары биләгән хәҙерге Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла, Зианчура, Күгәрсен, Бөрйән һәм башҡа райондарҙа ла үҫеп сыҡҡан. Был күренеш тик Башҡортостанда ғына булған икән, тип уйларға ярамай, ул Уралдың көнсығышында, Себер киңлектәрендә лә киң ҡолас алған. Билдәле, яңы ерҙәргә күсеп килгән яңы хужалар, сиҙәм ерҙәрҙе күтәреп, ҡалдау ятҡан бушлыҡтарҙы эшкәртеп, Рәсәйҙең орлоҡ балансына ҙур ғына өлөш индергән, быны инҡар итен булмай, ләкин ерҙе аяуһыҙ файҙаланыу арҡаһында, уның уңдырышлығы оҙаҡҡа бармаған, һуңынан ул әкренләп кәмей башлаған.

Ошондай уҡ иҡтисади хәлде йәғни яңы ерҙәрҙә иген етештереүҙең түбәнәйеүен беҙ 1954—1955 йылдарҙағы сиҙәм эпопеяһынан һуң 35 йыл үткәс тә күрәбеҙ. Быныҡ менән мин РСФСР-ҙың хөкүмәт башлығы И. С. Силаевтың ерҙе таратып биреүҙән һуң буласаҡ уңыштар тураһындағы өмөтлө хыялдарының күңелдәрҙә шик тыуҙырыуы хаҡында әйтмәксемен.

Теманан бер аҙ ситләшә төштөк, сөнки ошондай мөһим әһәмиәткә эйә, халыҡтың яҙмышын хәл итә торған мәсьәлә тураһында һүҙ барғанда, алды-артты ҡарап, байҡау яһамайынса булмайҙыр. Инде хәҙер ер общиналарына кире ҡайтайыҡ. 1929—1930 йылдарҙағы коллективлашыу осоронда ла элек ерҙе община рәүешендә файҙаланыу күп осраҡта күҙ уңында тотолдо. Бына ошонан сығып та һәр ауылда, йәғни ерҙе файҙаланыуҙың һәр общинаһында айырым бер колхоз ойошторорға тырыштылар, сөнки теге йәки был ауылдың кешеләре борон-борондан ҡайһы саҡылда көтөүлек, ниндәй тугайҙа сабынлыҡ, ҡайһы баҫыуҙа ошоға тиклем ниндәй сәсеү әйләнеше ҡулланылғаның һәйбәт белде һәм, бер хужалыҡҡа берләшкән саҡта, уны һаҡларға тырышты. Ләкин һуңынан команда-административ системаһының өҫтөнлөк алыуы, колхоздарҙың бер эреләнеүе, бер ваҡланыуы сәбәпле, кешеләрҙең үҙ ерендә хужалыҡ итеү тәжрибәһе селпәрәмә ҡилде.

Бөгөн килеп, Мәскәүҙә РСФСР Юғары Советы сессияһы «Ер реформаһы тураһында» закон ҡабул итте. Унда ерҙе һатырға рөхсәт итеү /тураһындағы пункт та бар. Беҙҙең уйыбыҙса, бөтә Рәсәйҙә был законды бер тигеҙ эшләтеү һис һүҙһеҙ ҙур хата булыр ине. Ул мәсьәләнең бигерәк тә милли республикалар, автономиялы өлкәләр һәм округтар өсөн ҡырҡыу хәлгә әйләнеп китеүе ихтимал. Был төбәктәрҙә ерҙе хосуси милеккә әйләндереү Столыпиндың империя сәйәсәтен ҡайтанан индереү буласаҡ. Әле офоҡта ғына төҫмөрләнгән һөҙөмтә күңелдәргә ҡурҡыу һала һәм бик ҡаты уйландыра.

Беҙҙең Башҡортостан шарттарында ер һатыу кире социаль һәм сәйәси һөҙөмтәләргә килтереүе мөмкин, һәм ошоға тиклем ерҙе файҙаланыуҙа ебәрелгән ҡайһы бер хаталарҙы яңынан ҡабатлау ҡурҡынысы тыуасаҡ.

Ерҙе хосуси милеккә әйләндереү түгел, уны колхоз-кооператив милкенән төплө уйламайынса, дәүләт милкенә әйләндереү ҙә ниндәй социаль сәйәси һөҙөмтәләргә, республикала йәшәгән төп халыҡтың демографик хәлен үҙгәртеүгә килтерҙе, һүҙ 1957 йылдарҙа иҡтисады йомшаҡ колхоздар нигеҙендә күпләп совхоздар ойоштороу тураһында бара. Билдәле булыуынса, был совхоздар, нигеҙҙә, республиканың төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ һәм Урал аръяғы, йәғни төп халыҡтың бергә тупланып көн күргән (төбәктәрендә барлыҡҡа килде. Ә уларҙың артталығына кем ғәйепле ине һуң? Был хужалыҡтарҙа көн иткән халыҡмы, әлеге уларға етәкселек итеүселәрме? Һуңғы сәбәпте, бил-

дәле, инҡар итеп булмай. Ләкин уның төбөндә ул саҡта ҡулланылған хөкүмәт сәйәсәте, ауыл хужалығын алып барыуҙа ебәрелгән хаталар, иҡтисади сәбәптәр ятты. Эш шунда, 1939 йылдың майында СССР хөкүмәте колхоздарға ауыл хужалығы продукты әҙерләүҙе улар биләгән ерҙең гектар миҡдарынан алырға тип ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙы тормошҡа ашырыуҙан аҙ һөрөнтө ерле һәм хеҙмәт ресурстары менән ныығыраҡ тәьмин ителгән хужалыҡтар отто, ә инде күп ер биләгән (тау-ташлы, эшкәртеүгә яраҡһыҙ ерҙәрҙе лә ҡушып) һәм хеҙмәткә яраҡлы кешеләре аҙ булған хужалыҡтар иҡтисади яҡтан отолдо, күп ер биләгән, шуның арҡаһында хөкүмәткә үҙе етештергән игендең бөртөгөнә тиклем тапшырған колхоздар бөлгөнлөккә төштө. Бындай хужалыҡтар хеҙмәт көнөнә колхозсыларға бер мыҫҡал да икмәк бирә алманы. Тап бына ошо ауылдар Башҡортостандың тау-урманлы төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ һәм Урал аръяғы төбәктәренә тура килә.

Бына шуға күрә лә колхоздарҙы совхоздарға әйләндереүҙе ошо төбәктәрҙең тамам бөлгөнлөккә төшкән халҡы берҙәм хуплап ҡаршы алды, һуңынан уның ниндәй ҡатмарлы демографик хәлгә, социаль һөҙөмтәләргә килтерәсәген бер кем дә ныҡлап уйламаған. Яңы ойоштороған совхоздарға, бигерәк тә сиҙәм ерҙәрҙә нигеҙләнгәндәренә бөтә тирә-яҡтан икенсе милләт кешеләре, ауыл хужалығы белгестәре ағылды. Улар үҙҙәренә икенсе мәҙәниәт, тел һәм милли ғөрөф-ғәҙәт алып килде. Урындағы теләһә ниндәй ҡарарҙы ла айт тигәнгә тайт тип ҡабул ҡылып өйрәтелгән халыҡ яңы ағымға ҡаршы тора алманы, һәм үҙе лә уға ҡушылып китте. Бына ошо совхоздарға ойошоу йылдарынан башланды ла инде беҙҙең милләттең бөлгөнлөккә төшөү осоро, йәғни, иҡтисади йәшәйеш шарттарының үҙгәреүе объектив рәүештә ошондай, кире һөҙөмтәләргә килтерҙе.

Берәү ота. Икенсеһе?

Ерҙә дәүләт милке менән бер рәттән хосуси милек, уны һатыу, һатып алыу, киләһе быуындарға вариҫҡа ҡалдырыу индерелде, тик уның аҙағы совхоздар ойошторою арҡаһында килеп сыҡҡан һөҙөмтәләр кеүек кенә булмаясаҡ. Ни өсөн?

Беренсенән, күп ере, болонлоҡ һәм көтөүлектәре булған колхоздар әлеге лә баяғы үрҙә әйтеп үтелгән төбәктәргә ҡайтып ҡала. Элекке республика хужалығына, беренсе нәүбәттә Шакировтың, был төбәктәргә ҡарата тотҡан сәйәсәте арҡаһында, ни йүнле юлдары, ни газы булмаған һәм социаль-көнкүреш объекттарын төҙәү мәсьәләһендә ҡыйырһытылған хужалыҡтар был яҡтарҙа һаман

да күпселекте тәшкил итә. Шулай булғас, ерҙе хосуси милеккә биреү тураһында һүҙ барғанда, нигеҙҙә, мәсьәлә, йәнә килеп, ошо төбәктәргә ҡағыла, сөнки республиканың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш райондарында айырым хужалыҡтарға колхоздарҙан ер бүлеп биреү мөмкинлеге юҡ һәм уны был яҡтарҙа көтөргә лә ярамай.

Икенсенән, иҡтисади яҡтан былай ҙа бөлгөнлөккә төшкән колхоздар айырым хужалыҡ ҡороғға теләүселәргә үҙҙәрендә тупланған төп фондтарҙан пай, йәғни өлөш, сығарырға тейештәр. Был инде колхоз иҡтисадын ныҡытыуға түгел, тарҡатыуға алып барасаҡ.

Өсөнсөнән, мин үрҙә күрһәтелеп үткән төбәктә генә түгел, ә, моғайын, бөтә республикала ерҙе хосуси милеккә алып хужалыҡ итә алырлыҡ кешеләр юҡҡа хисап. Ул быуынды беҙ үҙебеҙ үткәргән сәйәсәт һөҙөмтәһендә бөтөрҙөк. Дөйөмләшкән ергә хужаларса ҡарап, хужаларса эш итә торған кешеләрҙе беҙ тәрбиәләй алманыҡ. Эре хужалыҡтарҙа йәшәп, ауыл хужалығы техникаһына күнеккән кешеләрҙән бер кем дә трактор, комбайндан төшөп, яңынан онотола башлаған ат һабанына йәки һәнәк-көрәккә тотонорға ашҡынып тормаҫ. Айырым хужалыҡтарҙа ҡулланыла һәм уларҙы механизациялай торған бер ниндәй ваҡ техника һәм ҡорамалдар юҡ беҙҙә.

Бына шуға күрә, иң беренсе нәүбәттә ерҙе ҡулға төшөрөү, уны һатып алыу өсөн ер кешеләре — колхозсылар түгел, әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән ҡалын кеҫәле осраҡлы спекулянттар, махинаторҙар ағыласаҡ. Ә улар инде үҙҙәре түгел, һатып алған ерҙәрендә кисә биләмә алып, бөгөн батракка әйләнгән урындағы халыҡты эшләтәсәк, сөнки ауыл хужалығы продукттары етештереүҙә баҙар иҡтисады хөкөм һөргән осорҙа бер ниндәй техника менән ҡоралланмаған яңғыҙаҡ хужалыҡтарҙың дәғүәселек көрәшендә дөйөмләшкән хужалыҡтарҙы еңеп сығырға хәленән килмәйәсәк.

Ауыл хужалығында эшләгән байтаҡ кешенең хәтерендәлер — бынан күп кенә йылдар элек Урта Азия республикаларынан килгән һуған үҫтереү оҫталары тулып китте. Улар урындағы хужалыҡтар менән һуған етештереү буйынса килешеүҙәр төҙөнө. Ләкин улар һуған үҫтереү эшен башҡарыу өсөн урындағы кешеләрҙе яллап эшләтә. Ә хужалыҡтар һуңынан договорҙың субъекты булған кореецтар менән хисаплашты, о ысын һуған үҫтереүселәр үҙ хужаларынан ярым-ярты хаҡ алды. Ерҙе хосуси милеккә әйләндереү ҙә ошо уҡ һөҙөмтәләргә килтерәсәк. Бынынын тик өҫтә генә күренеп ятҡан иҡтисади һөҙөмтә. Ситтән килеп, ергә ҡул һуҙыусы осраҡлы кешеләргә ата-ба-

баларыбыҙҙың тире менән генә түгел, ҡаны менән дә hуғарылған ерҙәрҙе hатыу ниндәй социаль-сәйәси hөҙөмтәләргә килтереүен күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Быны мин үрҙә үҙ еребеҙҙә совхоздар ойошторoуҙың ниндәй социаль hәләкәткә килтереүен иҫбат итергә тырыштым. Ерҙе хосуси милеккә әйләндереү hәм уны hатыуға юл ҡуйыу— шул уҡ Столыпиндың колониаль сәйәсәте миҙалының икенсе яғы. Быға hис тә юл ҡуйырға ярамай, сөнки был үҙ республикабыҙҙың яҙмышына, уға исем биргән төп халыҡтың киләсәкке көнкүрешенә тығыҙ бәйләнгән.

Быныҡ менән автор бөгөнгө беҙҙең йәмғиәт алдында килеп тыуған ҡатмарлы мәсьәләләрҙе аңларға теләмәй, hаман шул беҙҙе hәләкәткә килтергән марксизмдың аграр тәғлимәтенә тоғро булып ҡала икән, тигән фекер тыуыуы мөмкин. Мин республиканың ауыл хужалығында кооперация, аренда ысулдарының киң таралырга тейешлегенә ышанам, hәм быны үҫтереү яғындамын. Ә ерҙе хосуси милеккә ҡайтарып ҡалдырыу, бигерәк тә уны hатыуҙы рөхсәт итеүҙе беҙҙең республика шарттарында ҡулланыу дөрөҫ булмаясаҡ, тигән ҡарашта торам. Әйткәндәй, Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияhы белгестәре РСФСР-ҙың бер нисә әлкәhендә социологик тикшереү үткәргән: халыҡтың 60—87 проценты ерҙе шәхси милеккә hатыуға ҡаршы.

Билдәле, ер тураhында hүҙ барғанда, hәр өлкәнең, республиканың үҙенсәлектәре күҙ уңында тотолорға тейеш. Мәҫәлән, Үҙәк Рәсәйгә ингән егермегә яҡын өлкәләрҙә бөтөнләй халыҡhыҙ тороп ҡалған меңәрләгән ауылдар бар. Бындай урындарҙа тик ҡарттар ғына тороп ҡалған. Шул уҡ Мәскәүҙән 40—50 километр ситкә тайпылhаң, уны уратып алған бик күп буш ауылдарҙы осратырға мөмкин. Бындай ауылдарҙа мәктәп, клуб, амбулатория ғына түгел, хатта бәләкәй генә магазиндар ҙа юҡ. Ҡасандыр эшкәртелгән ерҙәр ташландыҡ хәлгә килгән, тормош бөтөнләй hүнеп ҡалған. Билдәле, бындай райондарҙа, өлкәләрҙә ерҙе хосуси милеккә таратып биреү мотлаҡ сара. Ә күп милләтле халыҡ йәшәгән, уның төп халҡының яҙмышы ауыр хәлдә булған Башҡортостан өсөн был ер реформаhының ҡулай түгеллеге hәр кем өсөн көн кеүек асыҡ.



II бүлек

АТАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР ОСРАШЫУҘАР — ЮҒАЛТЫУҘАР

ХӘҘРӘТ ӘҘҘӘРЕНӘН

Август ҡояшы гүйә ҡыҙған таба. Зәңгәр күк йөҙөндә ҡолаҡсындай ҙа болот әҫәре юҡ. Ғәҙәттә йәшел келәм түшәлгән Ирәндектең көнсығыш итәген күктә хәрәкәтһеҙ эленеп торған ҡайнар ҡояш тапанды ырҙын табағына әйләндергән. Ҡаҡ тау биттәрендә йөрөгән меринос һарыҡтар ҡара төҫкә буялған, көтөүлектәр өҫтөндә, атом бомбаһы шартлағандай, туҙан томаны күтәрелгән. Тәбиғәтте генә түгел, барлыҡ тере йәнде утлы ҡояш нурҙары өтә, сыра ише яндыра, күләгәгә ҡыуа. Елдереп китеп барған машинаңдың бер ереноә лә тотонорлоҡ түгел, ул күләгәгә тартылғандай төҫлө.

Бына шундай көндәрҙең береһендә, үткәндәрҙе эҙләп, кирәмәтле Мөжәүир хәҙрәт төйәк иткән Маныр яҡтарына китеп барабыҙ. Минең юлдашым — был яҡтарҙы бик күптән үҙ итеп, уның ҡырыҫ тәбиғәтенә ереккән йәмәғәтем Мөхтәрәмә.

Сибай — Баймаҡ асфальтынан кинәт һулға, Фәйзулла-Шүрәле ауылына боролабыҙ. Ҡасандыр гөрләтеп донъя көткән был ауыл бөтөнләй һүнеп ҡалған тиер инем, һуңғы йылдарҙа өс-дүрт тапҡырға артҡан, сөнки бында, етмешенсе йылдар булһа кәрәк, юл оҫтаһы Исхаҡ, ошо урмантау төйәгенә бағауыл булып, яңғыҙы ғына тороп ҡалғайны. Артабанғы юлыбыҙ урыны-урыны менән бөтөнләй кипкән, беҙҙе оҙата барған Ургаҙа йылғаһы буйлап һуҙыла. Уның ике яры ла ҡасандыр һуғыш утына тотолғандай, яраланып бөткән — ҡайҙа ғына ҡарама — әллә ни заман ҡаҙылған шурфтар, алтын ҡомо эҙләгән соҡорҙар Үҙ йәрәхәттәре өсөн үпкәләгән һымаҡ, улар әле лә өңрәйеп, беҙгә нәфрәт менән ҡарап ята төҫлө. Был соҡорҙар» күпме кеше яҙмыштары һыныуына, күпме бәрелеш, фажиғәләргә геүаһ. «Күпте күргән — күпте кисергән» кеше тиреген түгел, ҡаны менән дә һуғарылған «шаҙра» ерҙәр былар. Нәҡ ошо инде «Уртазым» тип аталған элекке алтын приискаһы урыны. Уның хужаһы — әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән Горяев, ә алтын табыусылар, уның кеҫәһен ҡалынайтыусылар — урындағы башҡорттар. Килгән хужа һандығын алтын менән тултырғас, был яҡтарҙан һырт биргән, ә старатель башҡорттар, һөйәлләнгән ҡулдарына кәйлә-көрәген тотоп, тороп ҡалған.

Тик бындай хәл Урғаҙа буйында ғына булһа икән. Ераҫты байлыҡтарын, ҡара көстәрен түгеп, өҫкә сығарыусылар капиталистарҙы, ә һуңынан Совет хөкүмәтен байытҡан урындағы халыҡ ярлыланған, бөлгөнлөккә төшкән. Ул ғына ла түгел, старателгә әүерелеп, элек ауыл тормошо менән шөғөлләнгән кешеләр, кәсеп эҙләп, яңы асылған рудниктарға, приискыларға ағылған. Тиҫтәләрсә ауылдар нигеҙенән ҡороған. Тик шуны ғына әйтеү ҙә етә: әле егерменсе йылдарҙағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса ла һин дә мин гөрләп йәшәп ятҡай утыҙҙан ашыу ауыл бер Таналыҡ волосында ғына юҡҡа сыҡҡан. Ауыл юҡҡа сыҡҡан икән, тимәк, кешенең йәшәү мөхите, тормош рәүеше үҙгәргән, һәр ауыл нимәһе менәндер дан тотҡан: йә йырсылары, таҡмаҡсылары, ҡурайсы, сәсәндәре, йөрөк аттары, оҫта ҡуллы һәнәр эйәләре ошо ауылға ғына хас быуындан быуынға күсеп килгән ғөрөф-ғәҙәттәре, иң мөһиме, уларҙың уртаҡ әсә теле булған. Ә ауыл, ошо хазиналарҙы бөртөкләп йыйып, бикле тота торған тимер һандыҡ иҫәпләнгән.

Алтын-баҡыр ятҡылыҡтары халыҡ хазиналары тултырылған был һандыҡтарҙы селпәрәмә килтергән, сөнки мәгдәндең үҙенең йәшәү ҡанундары бар. Балға йыйылған себен кеүек, яңы асылған приискыға халыҡ ябырылған,

а был бөткәс, борсаҡ һымаҡ, төрлө тарафтарға һибелгән. Урал аръяғындағы алтын-баҡыр приискыларының барыһының да яҙмышы берҙәй оҡшаш. Ҡасандыр халҡы 9 меңгә барып еткән, Советтар Союзында табылған алтындың ундан бер өлөшөн биреп торған Түбә руднигының яҙмышы ошоно иҫбатламаймы ни?

Бына беҙ юлланған, халҡыбыҙға мәшһүр халыҡ табибы Мөжәүир хәҙрәтте һәм Башҡортостан Диниә назаратының мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәтте биргән данлыҡлы Манһыр ауылын да ошо яҙмыш урап үтмәгән. Быуат аҙағына 183 йорт, әле илле-алтмыш йыл ғына элгәре 50 йорт хисапланған был ауылда тик хәҙрәттең балалары, ейән-ейәнсәрҙәре генә тороп ҡалған. Тыуған ер аҫтына тамырҙары тәрәнгә киткән хәҙрәт тоҡомо ғына донъя көтә бында, сөнки дәрел баҡыға рихләт[1] иткән хәҙрәттең фатихаһы шулай. Ә бүтәндәрен ҡәһәрле һуғыш, әлеге лә баяғы сит-яттарҙы байытҡан, төп халыҡты бөлдөргән алтын-баҡыр йотҡан. Әле лә Урғаҙа йылғаһы буйында күккә күтәрелеп разведка вышкалары эшләп ултыра. Улар Свердловск өлкәһенән булып сыҡты. Тимәк, ер аҫтында ниҙер барлығын һиҙәләр. Әйтергә кәрәк, әле беҙ бала саҡтарҙа уҡ бында бай Төньяҡ һәм Көньяҡ Фәйзулла марганец ятҡылыҡтары барлығы мәғлүм ине. Шул саҡтағы «Башзолото» тресы хужалары марганецты Магнитогорск металлургия комбинатына ташыу өсөн тимер юл һуҙыу мәсьәләһен ҡуйғайны.

Элекке Манһыр ауылы һыулаған, ҡасандыр ике ярлы кеше үтә алмаҫлыҡ шыр урман менән ҡапланған сылтырап ағып ятҡан Урғаҙаны кисеп, беҙ хәҙрәттең оло улы, минең күптәнге танышым, дуҫым Варис Сиражетдинов ҡапҡаһына тәртә терәнек. Бында борон-борондан «ҡәҙерле ҡунаҡ килгән» икән тип, эш ташлап, ҙур ғауға күтәргән, ҡаршы алыу һынын күрһәтеп, «ҡабыҡ ҡағып, һайыҫҡан осороусы» кеше булмай. Ғәҙәт шулай, һәр юл һуҡҡан кеше быны яҡшы белә. Батшаға ла, уның хеҙмәтсеһенә лә бер ҡараш, тигеҙ мөнәсәбәт. Был юлы ла, эҫенән ҡасып, үҙ ояһында ятҡан эттәр генә, аҙыраҡ ларһылдаған булып, үҙ вазифаларын башҡарып, ояларына кире инеп китте. Шулай булмағанда көнө буйы бында юл һуҡҡан кеше менән гәпләшеп, һүҙҙән бутҡа бешереп тороу өсөн генә лә бер штат тотоу зарурлығы тыуыр ине. Транспортыңды ҡалдырып, артҡы яҡтан ихатаға инәһең. Уның да бер йәбешкәһе бар, сөнки ике асмалы ҡапҡаңды шар асып, килгән берәүҙе ҡаршы ала башлаһаң, ихатаң өс

[1]Рихләт—(ғәрәпсә) донъянан киткән, асылына ҡайтҡан тигән һүҙ.

көндән ырҙын табағына әйләнер ине. Быны ла бик дөрөҫ уйлаған Варис. Тағы ла күҙгә күренгән бер яңылыҡ. Был йортҡа нисә барма — ҡоймаға терәлгән егеүле ат торор, сөнки «Йылайыр» совхозының шундай бер ҙур тармағын алып барған кешенең аты һәр саҡ егеүле, таяр торорға тейеш. Ошондай эҫе бөркөп, ҡыуан сығып торған мәлдә ғәҙәттән тыш әллә ниндәй хәл килеп тыуыуы мөмкин. Варистың ҡулында «Ашығыс ярҙам» машинаһы ла, телефоны ла юҡ. Арбаға егелгән ҡола ат та эшһеҙ түгел, башына кейҙерелгән торбаға[1] һалынған һолоно, күҙен йомоп, күләгәлә ҙур ләззәт менән ашыҡмай ғына сәйнәп тора.

Беҙ хужаны тейәккә эленгән һарыҡты тунап торған килеш осраттыҡ. «Күрәһең, беҙҙең килерҙе алдан белеп, һарыҡ ите менән һыйларға уйлағандыр хужа», тигән уй килде башҡа. Ләкин мин үҙемә алдан юғарыраҡ баһа биреп ташлағанмын икән. Ни өсөн тигәндә, аш өҫтәле артында һәр саҡ ун биштән дә кәм кеше йыйылмағанын мин иҫемдән сығарғанмын. Беҙҙе күреү менән үткер ҡарашлы ҡарсыға күҙҙәренә мөләйем һыҙаттар йүгертеп, Варис:

— Йә, килеп еттегеҙме? — тип һорап ҡуйҙы. Ҡулындағы оҙон бысағын һарыҡ итенә ҡаҙаны ла көрәктәй ҡулдарын алъяпҡысына һөртөп алды. Шунан ғына «Әссәләмәғәләйкүм, вәғәләйкүмәссәләм»дәр менән алмаштыҡ. Ул һынамсыл ҡарашлы, ғәжәп хикмәтле күҙҙәре менән мине баштан аяҡ ентекле байҡап сыҡты. Мин уның эске көҙрәте, уй-кисерештәре, берсә уйсан, берсә йылы хис-тойғолары тик күҙендә икәнен күптән беләм. Ундай диңгеҙ кеүек тәрән, мәғәнәле ҡарашты мин үҙ дуҫтарым, таныштарым араһында башҡа бер кемдә лә осратҡаным юҡ. Уның йәшкелт күҙҙәре үҙе бер серле, уҡылмаған китап тип ҙур ышаныс менән әйтә алам. Был мөғжизәне улы Варисҡа уның көҙрәтле атаһы Мөжәүир хәҙрәт вариҫ иткәндер, тип фараз итәм.

Шулай беҙ, бер-беребеҙгә текләп оҙаҡ ҡына ҡарашып торҙоҡ. Мөхтәрәмә менән дә күрешкәс, хәл-әхүәл һораштыҡ та ул үҙ эшенә тотондо. «Элек тә мыҡты, дүрт һанлы кәүҙәһе тағы ла олпатлана төшкән, хәрәкәттәре лә һәлмәкләнгән, аҡыллы күҙҙәрендә ниндәйҙер моңһоулыҡ төҫмөрләнә», — тип уйлап ҡуйҙым, уға күҙ йүгертеп. Ул нишләптер минең баштағы аҡ фуражкаға иғтибар иткәндәй тойолдо. «Хужа минең картузды яратманы ахыры», — тигән уй килде башҡа. Ул эшләй, ә мин уның ҙур ихатаһына, тәртип менән төҙөлгән кәртә-ҡаралтыһына иғтибар

[1]Т о р б а — һоло һалыу өсөн эшләнгән махсус тоҡ.

итәм. «Карағайҙан ҙур ғына аҡ мунса бөтөргән икән, элекке ҡымыҙ яһау бүлмәһен дә яңыртҡандар төҫлө тойола. Унда көбөләрҙәге һаумал ҡымыҙҙың гөрһөлдәгәне ишетелә. Тимәк, ҡымыҙҙы элекке һымаҡ ҡул менән бешмәйҙәр, электр бешкәк эшләп тора. Ихатала ла үҙгәреш — аш усағы ҡаршыһында ғына оҙон өҫтәл ултыртҡандар, тимәк, ҡайһы саҡта уның ишле ғаиләһе асыҡ һауала әүкәтләнә».

Мин башҡа һүҙ таба алмағандай:

— Һарыҡ һуйып торабыҙ инде? — тинем. «Ҡунаҡ килде бит, берәр мал йыҡмай әмәл юҡ», — тип әйтәсәген көтөп. Ул бик аптырап торманы:

— Һуймай ҡалайтаһың, бынауы «ғәскәр»ҙе туйындырырға кәрәк бит, — тип ихатала ул яҡҡа, был яҡҡа сабауыллап йөрөгән ике малайға эйәк атты. (Мин ул малайҙарҙың Вариста «төп эшсе көсө» булып хисапланғанын тик һуңынан ғына белдем.) Ул, эргәһендә ятҡаи балтаны уң ҡулына алып, тиреһе һыҙырылған һарыҡты сапҡылап ботарлай башланы. Был миңә бик мәҙәк күренде, сөнки тейәктән алмайынса ит сапҡылауҙы минең тәүге күреүем ине. Ошо уңай менән мин һорай ҡуйҙым:

— Варис, ҡаҙаҡтар һуйған малға балта тейгеҙмәй, быуын-быуыны менән генә сығаралар түгелме? — Варис ирендәрен йоҡартҡанса миңә ҡарап йылмайҙы ла,

— Минең улай итеп ипләп, быуын сығарып торорға ваҡытым юҡ. Мин бит уны ике-өс көндөң береһендә тигәндәй һуйып торам, — тип ул тағы ла «ғәскәргә» һылтанды:

— Әгәр һарыҡ һуйыу ярышы ойошторған хосуста, Варис, һин бер көндә нисә һарыҡ һуя алыр инең? — тип һораным.

— Ул ни шул зарурлығыңа ҡарап инде. Анау бер йылы мал аҙығы наҡыҫланған саҡты әйтәм, көнөнә йөҙ алтмыш һарыҡ һуя инем, — тип яуапланы хужа, иҫе лә китмәйенсә.

Бына һиңә Гиннесс рекорды! Ауыр һуғыш йылдарында Мәләүез районы «Золотой колос» колхозы ағзаһы ударница Анна Чуева ун бер меҢ көлтә бәйләп, СССР чемпионы булғайны. Әллә ҡайҙа үҙ утарында ятҡан Варис Сиражетдинов бер көндә йөҙ ҙә алтмышар баш һарыҡ һуйған. Был ни яғы менән рекорд түгел? Был оҫталыҡ һәм етеҙлектән ғәйре, күпме тән көсө һәм таһыллыҡ талап итә.

Мыҡты кәүҙәле, ҡарамаҡҡа хәрәкәттәре ауырая башлаған Варис күҙ асып йомғансы бер һарыҡты һуйып, ҡаҙанға һалырлыҡ итеп сапҡыланы ла:

— Эй, кем бар унда, килеп итте алығыз! — тип ҡысҡырҙы. Тышҡы кейемен алмаштырып, ҡулын йыуҙы ла:

— Әйҙә, Рамаҙан ағай, Мөхтәрәмә еңгәй, сәй әҙер — ҡулығыҙҙы сайығыҙ ҙа, өйгә инеп, тамаҡ ялғап алайыҡ,— тип әмер бирҙе. Элек тә был йортта һүҙ бутҡаһы бешереп, оҙаҡ ләпелдәп ултырыуҙы яратмағандарын белә инем, ләкин ошо бөгөнгө йәшәү рәүешенең ҡуласаһы бында ла ҡыҙыуыраҡ әйләнә башлағанын тойҙом.

Болдорҙан аш өйөнә күтәреләбеҙ. Оҙон өҫтәл артында Варистың ҡыҙҙары Заһита, Мөнирә, Әлифә һәм тағы әллә нисә бала-саға ултыра. Улары менән аҙаҡ танышырбыҙ. Ә самауыр төбөндә, бер нисә минутҡа ихатаға сығып, беҙҙең менән күрешеп ингән, һәр саҡ тыныс, асыҡ сырайлы, әле лә элекке күркәмлеген һаҡлаған, һәр эшкә тилбер, аш-һыу яраштырыу буйынса оҫталығы менән тирәяҡҡа даны таралған Хәйрикамал ултыра. Уға һүҙ һөйләргә ваҡыт тарыраҡ, сөнки өҫтәл артына ултырыу өсөн алмашҡа икенсе әртил көтөп тора.

— Әйҙә, етешегеҙ. Юлдан талсығып килгәнһегеҙҙер, — тип Хәйрикамал беҙгә күҙ һирпеп ҡарап ҡуйҙы. Әйтерһең дә, ул беҙҙең ашамай килгәнде күреп торған. Ә өҫтәлдә ни генә юҡ. Уның ҡомалаҡҡа күпереп бешкән икмәге үҙе ни тора. Ҡоролоҡ булыуға ҡарамаҫтан, үҙенең иҫ киткес еҫен аңҡытып ултырған сәскә балы. Әбей батша хуш күреп ашай торған ҡаймаҡ, танау тишектәрен ҡытыҡлап боҫорап ятҡан ит тиһеңме — барыһы ла өҫтәлдә. Теләгән кешегә көрәгә менән яңы ғына өлгөргән ҡымыҙ ҙа бар. Бәлки, ҡайһы бер ҡатлыраҡ уҡыусылар, яҙыусы ағай беҙҙең ғәҙәткә инеп бөткән аш алдын, йәғни, мыйыҡ майын онотҡандыр тип уйлауы мөмкин. Юҡ, онотманым, сөнки был төбәккә юлланған кеше үҙенең ундай теләген Урғаҙаның теге ярында ҡалдырып китергә бурыслы. Варистың йортонда ундай эсемлек хәрәм хисаплана, уның төйәге — мәңге айныҡ йорт.

Бында бер кем дә — олоһо ла, кесеһе лә — ул зәхмәтте эсеү генә түгел, ҡулына ла тотмай. Был — борон-борондан, быуыңдан быуынға йәшәп килгән тайпылышһыҙ ҡағиҙә. Элекке замандарҙа, әле Мөжәүир хәҙрәт һау-сәләмәт саҡта, ул «иблескә атланып, айға менгән әҙәмдәр» был йортҡа дауаланырға йөрөнө. Ләх килеп, унда кешеләр айныҡ ҡайтып китә ине. Хәҙер иҫеректәрҙе хәҙрәт йәшәгән ошо мөхит дауалай, «ҡайһы бер был сырхауҙан ҡотола алмай ыҙа сиккән әҙәмдәр, Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә килеп, зыярат ҡылып ҡайта икән» тип һөйләйҙәр.

Сәй мәжлесе тамамланғас, Варис икенсе яҡҡа шылып ултырҙы ла:

— Рамаҙан ағай, бына инде беҙҙең тормош. Илдә ҡыйралыш бара тип, беҙҙең йәшәү һис кенә лә үҙгәргәне юҡ. «Эш» тип ятып китәбеҙ, «эш» тип таң һарыһынан торабыҙ, былай ҙа өлгөрөп булмай — әллә эше күбәйҙе, әллә үҙебеҙ ҡартаябыҙ, — тип ул үҙ һүҙенә яҡлау эҙләгәндән, әле сәй яһауҙан туҡтамаған Хәйрикамалга ҡарап ҡуйҙы.

— Бына мин дә һеҙгә килеп, һаулығығыҙҙы, тормошоғоҙҙо күреп ҡайтайым тип ҡыҫҡа ғына мөҙҙәткә туҡталдым әле, — тинем.

— Ниндәй хәбәр ул, «ҡыҫҡа мөҙҙәт», имеш. Һеҙгә Рамаҙан ағай, еңгәй менән бер аҙна срок. Шуны тултырмайынса ҡайтыу юҡ, — тип ҡырт киҫте Варис. — Бына хәҙер йәшлегеңде онотоп китмәһәң, киске һауынға барабыҙ. Әгәр теләгең булһа, рәхим ит, — тип өҫтәне хужа.

— Ҙур ризалыҡ менәи, — тинем мин шатлығымдан.

Варистың эшселәре бидон, биҙрәләрҙе даңғыр-доңғор килтереп, элеккесә әйткәндә, еҙелеккә, бейә һауыу урынына әҙерләнә. Кемдәр һуң ул эшселәр? Уларҙың хужаһы-бригадиры, Магнитогорск пединститутын тамамлаған, шул уҡыу йортоноң «Айгөл» халыҡ бейеү ансамблен ойоштороған Заһита Сиражетдинова, БДУ-ның башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеген бөтөргән Мөнирә, Баймаҡ халыҡ мәхкәмәһе (суды) эшмәкәре Әлифә, ә ҡалғандарын һанап тормайым. Улары — Варистың ейән-ейәнсәрҙәре. Тик хәҙергә шуны ғына әйтәм: баяғы ҡолатты теҙгененән ысҡындырып, бәләкәй генә ҡулына дилбегәне урап тотҡан, арба үрәсәһенән әҙ генә ҡалҡыу бер малай баҫып тора. Уның исеме Заһит булыр. Ул ете йәшен яңы ғына тултырған. Баймаҡта икенсе синыфта уҡып йөрөй. Ул нәҙек кенә тауыш менән:

— Нимә анда ығышаһығыҙ, тиҙерәк, — тип башҡаларҙы ашыҡтыра. Бер арба кеше, бидон, биҙрәләр тейәп, баяғы малай арбаға һикереп ултырҙы ла, сыбыртҡыһын болғап, ҡолатты ҡыуа-ҡыуа, ҡаҡ юлда арбаһын дыһырлатып, малсыларҙы бейә һауыу урынына алып китте. Мин дә уның артына ултырып, уйланып барам. Уйҙарым кире Өфөгә әйләнеп ҡайта. Күҙ алдыма бигерәк тә иртәлекисле, ҡайһы бер ҡарсыҡтарҙың үҙҙәренән аша ҡарап торған ейән-ейәнсәрҙәрен ҡулдарынан етәкләп мәктәпкә алып барыу, алып ҡайтыу күренеше килеп баҫа. Ә ҡайһы саҡ был шуҡ һәм туҡ шаян малайҙар, ҡыптырлап саҡ атлап барған әбейҙәрҙе ҡышҡы көрткә йыға төртөп, ҡасып та киткеләй, сөнки уларҙың күбеһе мәктәптә сибәр ҡыҙҙарға күҙ һалыу йәшенә еткән.

Ә бына Варистың йортонда уның икенсе синыфта уҡып

йөрөгән ейәне Заһит, бер арба кеше тейәп, эңер төшкәс, һауынға алып китеп бара. Ҡайтҡас, Варистан һорай ҡуйҙым:

— Иртә менән сәғәт алтыла был һауынсыларҙы кем йөрөтә инде? — тинем.

— Кем булһын, шул Заһит инде, — тип яуапланы хужа.

— Ә атты уға кем егеп бирә?

— Шул уҡ Заһит. Тик аттың тамаҡ бауын ғына тарта алмай ыҙалай — буйы етмәй. Уныһын әсәһе тартып бирә.

— Әллә әсәһе лә ат егәме?

— Бынағайыш. Беҙҙең өйҙә, ғөмүмән, ат егә белмәгән әҙәм юҡ, — тип көлдө Варис. Ошо урында төндәрен «матай»ға ултырып, ауыл халҡына йоҡо бирмәй, унда ла, бында ла дырылдап, көсөн, дәртен ҡайҙа сарыф итергә белмәй сабауыллап йөрөгән «ҡырҡма мыйыҡ» һәүеректәр иҫкә килде.

Шулай ҙа башлаған ҡиссабыҙға кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Ҡусыр Заһит атты бейә һауыу өсөн ҡулайлап эшләнгән таҡта һарайға килтереп терәне. Аттың теҙгенен төшөрҙө лә, оҫта ҡамтарып, баҡанаға бәйләп ҡуйҙы. Башҡа ауылдарҙа бөгөн дилбегәне йәки берәй бауҙы ҡамтарып бәйләй белгән һигеҙ йәшлек берәр баланы осратып ҡара. Ә бауҙы ҡамтарып бәйләү — ул үҙе тик беҙҙең милләткә генә хас фәһемле һәнәр. Казак ҡатламына теркәлгән беҙҙең ир-егеттәрҙең быуындан быуынға күсеп килгән һөнәре. Шул ыңғайҙа тамаҡ бауға иғтибар иттем. Ғәҙәттә, башҡа урындарҙа ат еккән саҡта, тартып, ныҡ итеп бәйләп ҡуялар. Был бик ҡурҡыныс. Берәр урында атың тайып йәки яҙа баҫып ҡолап китһә, эш харап, тамаҡ бауыңды сисеп өлгөргәнсе, ат тығылып, һулышы туҡтай башлай. Ә бында тамаҡ бауҙың осон элмәкләп кенә тығып ҡуялар, атың берәр ҡазаға юлыҡһа, бауҙың осон тарттың иһә, ҡамытың үҙенән-үҙе туғарылып китә. Ҡолаған ат һикереп тә тора. Барыһы ла уйлап эшләнгән. Минең диҡҡәт менән күҙәтеп тороуымды ҡарап торған Варис:

— Нишләй, ағай, малай ат менән эш итеүҙең яйын белгән буламы әллә? — тип һораны. Мин:

— Был малайға ат егеүҙең курсын тамамлаған тип диплом тапшырырға кәрәк, — тип мактап ҡуйҙым. — Дилбегәне лә ҡамтарып бәйләп ҡуйған бит. — тип өҫтәне. Варис, көлөмһөрәп:

— Ҡамтарып бәйләүҙе өйрәнмәйенсә тороп, мин малайҙарҙы ат тирәһенә яҡын да юллатмайым. Шуны камил үҙләштергәс кенә, ул атҡа менеп йөрөргә, уны ҡышын— санаға, йәйен арбаға егергә хоҡуҡ ала, — тине.

Ул арала туғыз-ун йәшлек ҙйәндәр Руслан, Вадик исемле ике малай һәм шул самаларҙағы Варистың ейәнсәре һыбай һайтлатып, йылҡы өйөрөн киске һауынға ҡыуып килтерҙе. Мин элекке замандарҙағы еҙелектең туҙан өҫтөнән буйынан буйына тартылған ҡыл арҡанды һәм ҡояшта янын йонсоған шалтырауыҡлы ҡолондарҙы күргем килде. «Хәҙер малайҙар ҡороҡ алырҙар ҙа, бейәләрҙе берәм-берәм ҡороҡлап, һауынсыларға килтерерҙәр. Шунан һауынды башлар алдынан ҡолондарҙы сисеп әсәләрен имеҙеп алырҙар», — тип көтөп торам. Ләкин хәҙер барыһы ла яңыса. Ҡолондар ябыҡ лапаҫ аҫтында һоло ашап тора. Ә бейәләр һарайҙың бер стенаһы буйлап эшләнгән таҡта бүлкәткә үҙҙәре инеп, һауылырға сират торалар. Бейәләргә был бүлкәткә инеп-сығып китеү өсөн һыймалы ғына бәләкәй ҡапҡа эшләнгән. Бында ингән бейәләргә үҙ-ара ыҙғышып, тибешеү өсөн урын да, мөмкинлек тә юҡ. Алда торған бейәне һауалар ҙа, ул сығып киткәс, урынына икенсе бейә килеп тора. Элекке һымаҡ, ялан яңғыратып: «Тәрҫ, тәрҫ, аяғыңды алмаштыр», — тип ҡысҡырған тауыш та юҡ. Электр лампаһы янып тора. Ә Әлифәнең иң кесе ҡыҙы Луиза олатаһы түшәмгә аҫып биргән уңайлы әүһәләктә әүһәләк өйә. Бында барыһына ла шөғөл бар. Ҡул ҡаушырып тик торған бер кем юҡ.

Әйткәндәй, бында Заһита — башлыҡ ҡына түгел, башҡа ейәндәр ҙә совхоз штатында тора: Артур — төнгө көтөүсе, Руслан, Вадик йылҡыны көндөҙ көтә, ә инде Вадикҡа килгәндә, ул түрәрәк кеше — совхоздың объездчиғы һәм полеводы. Ете йәшенән егелеп, йылҡы араһында эшләй башлаған Вадик ҡына түгел, башҡа малайҙар ҙа — барыһы ла бейә һауа. Ә инде ҡоштай осоп һыбай йөрөүҙәре хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ.

Бейәләр һауылып бөтөү менән, һөт тултырылған бидондарҙы, һауынсыларҙы үҙ арбаһына тейәп, Заһит атын өшкөтә-өшкөтә, «ҡаҡҡылап та һуҡҡылап», ҡартатайының йортона кире алып ҡайта.

Килтерелгән һаумал һөттө ҡымыҙ хужаһы «өләс» Хәйрикамал ҡарамағына тапшыралар. Көбөләргә бушатылған бейә һөтөн ҡымыҙ кимәленә еткереүҙе Хәйрикамал электр бешкәктәргә ҡуша. Һуңғы йылдарға тиклем ул көбөләрҙе ҡул бешкәге менән беште. Уның оҫта, йомарт ҡулдары етештергән был тылсымлы эсемлекте Өлкә һәм Үҙәк комитет секретарҙары, Рәсәй хөкүмәте рәйестәре генә түгел, йөҙәрләгән совхоз игенселәре, тәртәләрен был йортҡа терәгән мең ғәләм мосафирҙар ҙа эсте.

Был ваҡытта Манһыр ауылына ҡаршы көньяҡҡа армыт-армыт булып һуҙылған Ирәндек ашаһында барлыҡ ғә-

ләмде көнө буйы аяуһыҙ ҡыҙҙырған август ҡояшы, үҙенең һуңғы нурҙарын һибеп, мәғрүр тауҙар артына йәшеренә, төнгө йоҡоға тала. Урғаҙа йылғаһы ашаһында тәрән үҙәктәр, төрлө ҡалҡыулыҡ-түбәләр менән сыбарланған йәйрәп ятҡан ҡылған яланында атаҡлы «Йылайыр» совхозының алты өйөрҙән ғибәрәт йылҡыһы ла, көн буйы зарығып торған ҡолондарын эйәртеп, бейек тау битенә үрмәләй. Төн тынлығын йыртып, ара-тирә зыңғырлатып кешнәгән ҡолон, төнгө көтөүсе Артурҙың (ул хәҙер Сибай институты юрфагының I курсы студенты) «һайт-һайт» тип ҡыскырған көслө тауышы, Ирәндек ҡаяларына бәрелеп, бер нисә тапҡыр шаңдау булып яңғырай ҙа Маниһыр туғайына кире әйләнеп ҡайта. Ҡырмыҫҡа иләүенә оҡшаған был татыу, ишле ғаилә тағы ла бер мәшәкәтле хеҙмәт көнөн тәкрарлап, йәшәйеш тарихына оҙата.

Хәҙер инде «донъя мәшәкәттәрен» онотоп, бер аҙ тарихҡа, үткәндәргә күҙ һалайыҡ. Кем һуң ишле ғаиләне уҡмаштырып, сәғәт һайын мыуафиҡ (кәрәкле, зарур) ынтылышҡа йүнәлдереп торған изге кеше? Уның «Локомотив»ы, йәғни алға тартып алып барыусыһы — Варис Мөжәүир улы Сиражетдинов. Етмеш йәшлек ил ағаһы, ошо ерҙең кендеге, республиканың атҡаҙанған ауыл хужалығы эшмәкәре, райондың ғына түгел, Башҡортостандың данлыҡлы йылҡысыһы, ата-олатайҙарҙың быуын-быуындан күскән иң изге һәнәрен беҙҙең осорға килтереп еткереүсе һәм лайыҡ дауам итеүсе шәхес ул. Уның ҡарамағында дүрт йөҙ баштан артыҡ, алты өйөр тик башҡорт тоҡомонан ғына торған элита — йылҡы бар. Һаны һәм сифаты яғынан да районда ундай хужалыҡ юҡ, республикала ла бындай хужалыҡтар бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Ул Урғаҙа йылғаһында шамбы тотоп, Маниһырҙы көнсығыштан иҫкән әсе елдәрҙән ышыҡлап ятҡан Аралтау, Мәсет үҙәге һыртында диңгеҙ һымаҡ тулҡынланып ятҡан аҡ ҡылғанды гиҙеп үҫкән кеше. Ҡылған — уның стихияһы. Ҡылған сәскә атҡан саҡтарҙа ул әле лә йоҡонан яҙа. Ҡылған далалары күпләп тик Маниһыр тирәһендә генә ҡалған тип әйтһәк тә, бер ҙә хата булмаҫ. Быға ошонда тормош көткән Варис та үҙенең байтаҡ тырышлығын һалғандыр.

Уның кисергән тормош юлы ҡурғаштай ауыр, ҡаяташтай һикәлтәле. Уға май эсендәге бөйөр шикелле хәсрәтһеҙ генә йәшәргә бер ҡасан да форсат теймәгән. Сабый ғына сағында апаһы менән икәүләп әсәнән мәхрүм булып ҡалалар. Етмәһә, 1937 йылғы ил буйлап йөрөгән репрессия, янъял ҡылысын һөйрәп, тәүгеләрҙәң бүлыҡ былар йортона килеп инә.

Атаһын, Мөжәүир хәҙрәтте ҡулға алалар. Беҙгә, урта быуын кешеләренә, ул дөм-ҡараңғы төндәр, бихисап юғалтыуҙар, кеше башын ҡыйып йөрөү осорҙары бик тә билдәле, сөнки үҙебеҙ күреп үҫтек. «Райондың НКВД начальнигы ауылға килгән икән», — тигән шомло хәбәр ишетелеү менән, бөтә кешене, бигерәк тә ир-атты, тәрән борсолоу тойғоһо солғап алыр ине. Уның ауылға килеп китеүе мотлаҡ бер-ике ирҙе ҡул аҫтына алыу менән бәйләнгән була торғайны. Бына ошондай ил буйлап йөрөгән НКВД афәтенән Варистар өйө лә ситтә тороп ҡала алмаған. Ә ҡалғаны барыһы ла көн кеүек асыҡ: «халыҡ дошманы» балаһына дошмандарса ҡараш, шундай мөнәсәбәт. Сит-ят кеше түгел, үҙ яҡындарың да һинең менән аралашырға, ярҙам ҡулы һуҙырға һеркелдәп, ҡурҡып торалар. Ошондай «сират күперен» башынан кисергән кеше ул Варис, Мөжәүир хәҙрәттең оло улы.

Ирәндектең көньяк битендә урынлашҡан Ольховкала 11 йәшендә алтын йыйыуҙан башлай ул үҙенең хеҙмәт юлын. Ләкин ни хикмәт менәндер уларҙың ғаиләһен колхозға ҡабул итеп, Урғаҙаны һыулаған башҡа ауыл кешеләре менән тигеҙләйҙәр. Хәҙер инде ул «Урғаҙа» колхозында йәшәй башлай. Ни тиклем генә зирәк, отҡор булыуына ҡарамаҫтан, мин белгән ярты быуат осоронда ул бер ҡасан да: «Мин шунда уҡығайным, был мәктәпкә йөрөгәйнем», — тип өндәшкәне булманы. Ҡөрьән Кәримде һыу кеүек эсеп, уның аят-сүрәләрен маҡәменә килтереп уҡый белеүенә ҡарамаҫтан, уның мәктәптә нисә синыф бөтөүен үҙенән ғәйре бер кем дә белмәйҙер тип уйлайым. Тик шуныһы көн кеүек асыҡ: башҡа балалар һымаҡ муйынына ҡыҙыл галстук тағып, пионер сафында борғо ҡыскыртып йөрөү бәхете Варисҡа эләкмәгәндер.

Һуғыш башланғас, үҫмер Варисты «Башҡорт Колымаһы» — Инйәргә хеҙмәт армияһына мобилизациялайҙар. Уларҙың шөғөлө — Урал ағасы менән суйын иреткән Белорет заводына утын әҙерләү, һуғыш осороноң ҡәтғи законы — задание ҙур — ашау бәләкәй. Ике мең кешелек — «Золотой клоп» («Алтын ҡандала») тип йөрөтөлгән дөйөм казарма. Туҡланыу — талон менән. Ә ашханаға барыу өсөн һәр кешенең ҡулына көнөнә өс ҡалай бирка бирелә.

Урыҫтар «Фәҡир кеше — уйлап сығарыуға маһир» тигән шикелле, бында ла ундайҙар булған, ахыры. «Төндәрен биҙрә ҡалайынан ҡырҡып, ашханаға барыу өсөн жетондар эшләйбеҙ. Башта хәрефтәр баҫа торған штамп әҙерләп алдыҡ. Жетондарға өс хәреф һуғабыҙ: З — завтрак, О — обед, У — ужин. Киске аштан һуң тикшереп ҡараһалар, ҡаҙанда тамаҡ бөткән, ә жетондар һаман ки-

лә лә килә. Бер заман төндәрен тентеү яһап ыҙалата башланылар. Ләкин тәжүит юк (иҫбатлау). Шулай ҙа аслыктан үлем хәленә килеп етелде. Мине ҡайтарып ебәрергә мәжбүр булдылар.

Ҡырҡты буйында ятҡан ауылдар буйлап, хәйер һорана-һорана, шылышып тигәндәй, Манһырға йүнәлдем. «Билал ауылында ҡуш ус картуф биреп, йән өргән инәйҙең үҙенең асҡаҡ төҫ-башын ғүмерҙә лә онотмайым», — тип иҫкә ала Варис.

Тире менән һөйәккә ҡалған Варис, үлем менән йәнәш атлап, әлеге лә баяғы колхозға килеп йығыла. Ул саҡта атаһы төрмәнән ҡайтҡан була. «Тупһанан аша атлағас та, бисмиллаһир-рахманир-рахим менән көлһыуалланы уҡып ебәрҙем. Бала саҡта ат башында йөрөгәндә лә Ҡөрьән Кәрим ҡулдан төшмәне. Әлхәм һәм башҡа сүрәләрҙе-ярайһы уҡ белә инем. Шунан һуң атайҙың күҙенән йәш тәгәрәне һәм миңә шундуҡ фатиха бирҙе», — тип Варис һуңынан иҫенә алды.

Һөт-ҡатыҡ менән аяҡҡа баҫҡандан һуң ул әртил эшенә йөрөй башлай. Эштә тилбер, намыҫлы егет ул саҡтағы колхоз рәйестәре Төхфәт Сөләймәнов, Әғзәм Хисмәтуллиндар күҙенә эләгә, һуғыш ваҡытында ҡышын-йәйен колхоздарҙы ҡаҡшатҡан иң ауыр эш орлоҡ йә барлы-юҡлы тракторҙарҙы йөрөтөү өсөн ағыулыҡ ташыу һанала. Ә ул ауыр эш әллә ҡайҙарҙа ятҡан Магнитка юл йөрөү менән бәйләнгән. Яңы ғына бауыры ҡалҡып, ир ҡорона тулып килгән йәш егеттең ҡулына аҡса тоттороп, шул эшкә ҡушалар. Тора-бара ул колхоздың хужалыҡ мөдиренә әйләнә. Был инде колхозда абруйлы ғына вазифа булып иҫәпләнә. Бер аҙҙан һуң Варисҡа йылҡысылыҡ эшен йөкмәтәләр. Уның ҡарамағында ун биш баш ат хисаплана. Был 1948 йылда була. Бына шул ваҡыттан бирле яҙмыш Варисты үҙ халҡының тарихи шөғөлө менән мәңгегә бәйләп ҡуя.

Ҡыйғас ҡашлы, муйыл һымаҡ сем-ҡара күҙле, тумалаҡ ҡуңыр биттәренән нур, барлыҡ бөтмөшөнән әҙәп-инсаф бөркөп торған, һәр эшкә тилбер Хәйрикамал баҫалҡы, әҙ һүҙле, ләкин тәрән аҡыллы ошо егеттең күңелен арбай, йоҡоһонан яҙҙыра һәм был тәүге осрашыу сәсте-сәскә бәйләп, оҙон-оҙаҡ бәхетле тормошҡа әйләнеп китә. Улар төрлөһө төрлө урында вазифалы эштәр башҡарған өс ҡыҙ һәм бер малай үҫтерәләр. Уларҙың мал араһында тубырлап үҫкән алты ейәне һәм өс ейәнсәре бар. Быларҙың барыһында ла, кем булыуына ҡарамаҫтан, дөйөм бер уртаҡлыҡ бар — һәммәһе лә алты-ете йәшенән атҡа атланған, ун ике-ун өс йәшенән бейә һауа башлаған. Ә инде ир ба-

лалары ун ике йәше тулыр-тулмаҫтан ҡулына салғы тоткан. Былар барыһы ла олатай-өләсәйҙәренең һөнәрен үҙләштергән. Уларға ҡарата: «Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр», — тип әйтергә була.

Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Варис һаман машина йөрөтә, егерме биш йыл элек алған «Волга» машинаһы бер тапҡыр ҙа ремонтланмай һаман Ирәндек һуҡмаҡтарын, Сибай, Баймаҡ урамдарын тапай. Башҡа кеше шикелле, Варис, үҙ машинаһын ҡыш та консервацияға ҡуймай, һаман йөрөүен дауам итә. Быға ла баяғы ейән-ейәнсәрҙәре сәбәп — йома көн эш тамамланыу менән, Сибай, Баймаҡтан олатай йортона йыйып алып ҡайтырға кәрәк. Ә был бик еңел булмаған эште Варис ошо рәүешле башҡара: Сибайҙа йәшәгән Мөнирә, Баймаҡта торган Ғәбдерәүеф менән Әлифә үҙ балаларын тейәп, Баймаҡ — Сибай трассаһында ятҡан Хәсән ауылына килтерә. Ә бында юл сатыңда һөйләшелгән сәғәттә уларҙы машинаһы менән Варис көтөп тора. Уларҙы үҙ машинаһына нышып тултыра ла олатай Байышҡа юл тота. Маныҡырға ҡыш юл өҙөлөү сәбәпле, машинаһын шунда ҡалдырып, Варис был «тере тауар»ҙы санаға тейәп, Байыштан төп йортҡа алып ҡайта. Бында инде теге «ғәскәр»ҙе «Тормош һабағы»на өйрәтеү дауам итә. Олатай менән өләсәй башҡа урындарҙағы һымаҡ сүселдәп, балаларҙы сисендереп, ҡосағына алырға ашығып бармайҙар, сөнки улар бында ҡунаҡтан да мөһимерәк эшкә — ҡарттарға ярҙамға килгәндәр. Бында тик имсәк имгән Луизаға ғына ташлама ҡаралған.

Ә башҡаларҙың һәр ҡайһыһының вазифаһы мәғлүм. Артур атҡа атланып, кис булһа кис, төп булһа төн йылҡыға ашыға, ә туғыҙ йәшлек Руслан, ун йәшлек Вадик та ат өҫтөндә көндөҙ йылҡы ҡарау эшендә. Ҡалғандары ла буш түгел: кемдәр ҡар көрәй, мал аҙбарын таҙарта, кемдер башҡа малдарға «ем» һәм бесән тарата. Шулай уҡ ҡыҙҙар менән дә өй эше буйынса «Өләс» шөғөлләнә.

Шулай итеп, балалар өҫтәл артында күмәкләп өләсәй һыйын татып алалар ҙа, кейемдәрен алмаштырып, һәр ҡайһыһы эшкә керешә. Уны бында хужа ролен башҡарған «управляющий», әйткәндәй, Магнитогорск пединститутының башланғыс мәктәптәр факультетын тамамлаған Заһита апайҙары һәр кем өсөн алдан таярлап ҡуйған. Уның әмере — был йортта балалар өсөн закон. Көпә-көндөҙ диванда әйгәҙәп, китап уҡып йәки телевизорға өңшәйеп ултырған бер бала ла юҡ. Уның өсөн апайҙары махсус ваҡыт бүлгән.

Бында бер кем дә ашау өсөн эшләмәй, эшләү өсөн ашай. Был йорттоң төп тәрбиәүи принцибы шул. Варис

менән Хәйрикамалдың ейән-ейәнсәрҙәре үҙ мәктәптәренда «Ғилем һабағы» алһа, төп йортта «Тормош һабағы»н үҙ-ләштерәләр. Бына нисә йылдар инде Варис йортонда совет мәктәбе менән тормош мәктәбе араһында йәш быуынды тәрбиәләү буйынса иғлан ителмәгән ярыш дауам итә.

Республиканың танылған педагогы, яҙыусы Мәрйәм ханым Бураҡаева мәктәптәрҙә «Тормош һабағы» дәрес-тәрен үткәреү өсөн күп көс һала. Бәлки, ул ошо мәҡәләне уҡығас, Варис ағаһының үҙ балаларын тәрбиәләү үрнәген бизмәненә һалып ҡарар. Улар ысулында бер ниндәй ҙәҡаршылыҡ юҡтыр тип уйлайым.

Бындағы һәр бала шәхес, өлкәндәрҙең уларға ҡарата мөнәсәбәтенән тигеҙ хоҡуҡлыҡ аҙым һайын һиҙелеп тора, балаларҙың психикаһына баҫым яһап, буйһондорорға маташыу йолаһына был йортта урын юҡ, һәр кешенең үҙ талантын асыу, үҫтереү өсөн тулыһынса ирек бирелгән.

Билдәле, был мәҡәләне уҡыған һәр кешелә йорт хужаһы Вариса атаһының табиплыҡ, ҡөҙрәтле көскә эйә булыу сифаттары күскәнме тигән тәбиғи һорау тыуыуы мөмкин. Киләсәген уйлаған аҡыллы хәҙрәт үҙенең күҙ терәп торған малайына белгәнен ҡалдырып китергә, уның йәшәү рәүеше лә үҙенекенә оҡшауын теләгәндер. Бындай һорауҙы мин элек тә һәм был юлы ла Вариса биргеләгәнем булды, әлбиттә. Варис үҙенең серле күҙҙәрен миңә мөлдөрәмә тултырып ҡараны ла:

— Атай мәрхүм миңә барыһын да ҡалдырып китте, әлбиттә. Уның сырхауҙарҙы нисек дауалау серҙәре, төрлө ауырыуға яҙған доғалары ла миндә һаҡлана, ләкин мәрхүм атай шикелле үҙемдең аяҡ-ҡулдарҙы ул шөғөл менән бәйләргә теләмәнем, сөнки уға тотонһаң, икенсе йәшәү рәүешенә күсергә, үҙ ғәмәлеңдең ҡолона әүерелергә кәрәк, ә мин донъяуи йәшәүҙе хуп күрҙем, — тип яуап бирҙе. Асылда Варис ошо тормош гүзәллегенә ғашиҡ, мәғлүмәтле дини кеше. Уның дин һабағы ликбез кимәлендә генә түгел, тәрән, төплө һәм ҡаҡшамаҫлыҡ, сөнки ул Ҡөрьән Кәримде, уның сүрәләрен латинса ға йәки яңы урыҫ алфавитына күсереп өйрәнмәгән, бала сағында уҡ үҙ нөсхәһендә уҡып, башына һеңдергән. Шуға күрә лә ҡайһы бер заман муллалары унан шикләнмәй ҡүгел. Ләкин ул үҙ ғилемен урынһыҙға күрһәтеп ҡупыраймай, бик тә ныҡ зарурлыҡ тыуған саҡтарҙа ғына үҙ ғилем шишмәһенең ҡайһы бер кәрәк биттәрен асып ҡуя.

Уның иң яҡшы сифаттарының береһе булып үҙ эшенә бирелгәнлек, тырыш хеҙмәттер тип беләм. Етмеш йәште тултырыуына ҡарамаҫтан, ул әле лә энергияһы ҡайнап

торған эшмәкәр, әҙ һөйләп, даръя эш башҡарыусы кеше. Был сифатының төбөндә сиктән тыш сабырлығы, сыҙамлығы, түҙемлелеге яталыр, тип фараз ҡылам. Ул бер ваҡытта ла кешене яманламаҫ, ғәйбәт-ошаҡ йөрөтмәҫ, үҙе генә түгел, балаларының да ауыҙҙарына бер тамсы ла хәмер ҡапмауҙарына ҡарамаҫтан, күңел асыу, аралашыу мәжлестәренән дә ғафил (мәхрүм) түгел. Бындай мәжлестәрҙә әҙерәк «мыйыҡ майлап», теле асылып киткән кешеләрҙең төрлө «һөнәр»ҙәренә сәғәттәр буйына сыҙап йылмайып ултырыу өсөн Варис булырға кәрәк, уның киң күңеллелегенә, ихлас ҡунаҡсыллығына иҫ китмәле.

Хәйрикамалдың арымаҫ-талмаҫ оҫта ҡулдары тарафынан әҙерләнгән ҡымыҙҙы ғына түгел, әлүән-әлүән аҙыҡ-әүҡәтте ейгән төрлө вазифалы, төрлө милләт кешеләре бихисап, Мәскәү генә түгел, сит ил ҡунаҡтары ла уның ләззәтле аш-һыуын татып, ҙур рәхмәтле булып китәләр. Беҙ ҙә ошо эскерһеҙ, ихлас күңелле кешеләргә иҫәнлек-һаулыҡ, оҙон ғүмер, һиммәт артынан һиммәт, ниғмәт артынан ниғмәт теләйек.

Манһырҙа туҡталғас, билдәле, күҙ күреп, күрешеп йөрөгән Мөжәүир хәҙрәт хаҡында ла һорашмай булдыра алманым.

Мөжәүир Сиражетдинов 1876 йылда тыуған һәм 1967 йылдың 18 июнендә ҡәбер эйәһе булған. Йәшел ағастар араһында урынлашҡан тау битләүендәге зыяратта был изге кешенең ҡәбере. Унан бөгөн дә кеше өҙөлмәй, уның һүнмәҫ рухы бөгөн дә сырхауҙарҙы аяҡҡа баҫтыра. Ләкин был шәхестең дә тормош юлы таҡыр, төҙ булмаған, ялтырап ятмаған. Ул да үҙ тормош юлын үкһеҙ етемлектән башлаған. Ун һигеҙ йыл буйы Урал аръяғындағы атаҡлы Хәлил хәҙрәт ҡулында малайлыҡта тәрбиәләнгән. Был шәхестең үҙ заманында Ҡөрьән Кәрим тәфсирен төрки теленә нәшер итеүен дә иҫәпкә алһаҡ, йәш Мөжәүир күңелендә ниндәй зирәклек, зиһен ҡеүәһе һәм хоҙай биргән табиплыҡ һәләте ятҡанын асып, быға үҙ фатихаһын биргәндер, тип фараз итергә мөмкин. Уның табиплыҡ ҡөҙрәте бик иртә башлана.

Әле беҙ йәш саҡтарҙа уға йәйәүләп, ат һәм дөйә менән килеүсе төрлө тараф сырхауҙары бихисап була торғайны. Килгәндәрҙең байтағы сират көтөп, Урғаҙаның икенсе ярында ҡунып ҡалыр ине. Хәҙрәт үҙенең был изге вазифаһын бер ниндәй ҙә милләт айырмай башҡарҙы, кешенең кем булыуы уға барыбер булды, кеше айырманы. Әле Баймаҡта эшләгән саҡтарҙа беҙ ҙә уға инеп, унан фатиха алып сығыр инек. Шуның шулай булыуына атай мәрхүмдең уның менән яҡын танышлығы ла ярҙам иткәндер.

Варис Сиражетдинов атаһы ҡәбере янында.

Башына төлкө кәпәс, өҫтөнә елән кейгән һипкеллерәк битле, ыҫпай һаҡал-мыйыҡ ебәргән был ҡарт яҫтыҡ өҫтөндә һәйкәл кеүек туп-тура ултырыр ине. Ул тәбиғәте менән йомоҡ кеше булманы, урыны менән етди, тапҡыр, шаян һүҙле лә була белде. Ләкин нисек кенә булмаһын, уның күҙҙәренә тура ҡарап һөйләшеү мөмкин түгел ине. Ниндәй батыр әҙәмеңде лә ул үткер ҡарашы менән сүгендерә торғайны. Был серле, үҙенә һурып алырҙай һәләте булған ҡараш ингән бер кеше йөрәгенә хәүеф һала торғайны. Ҡурҡағыраҡ кешеләрҙең хәҙрәт эргәһенә инергә батырсылығы етмәне. Тупһанан ашатлап ингән берәүҙең

башында ниндәй уй-фекер барын ул алдан әйтеп ултырыр ине. Миңә, нисә кәррә (тапҡыр) уның эргәһендә булған кешегә, күҙҙәренең ниндәй төҫтә икәнен белеү насип булманы.

Бер вазифалы етәксенең һөйләгәне һаман да иҫтән сыҡмай. Эскелектән тамам эшлектән сыҡҡан был иптәште, толопҡа урап, хәҙрәткә килтергәндәр. «Толопто соланда алып ҡалдылар ҙа, этеп-төртөп тигәндәй, мине хәҙрәткә индереп ебәрҙеләр. Яҫтыҡта ултырған хәҙрәт башын ҡалҡытып, мине утлы ҡарашы менән ялмап алды. Арҡанан кинәт бәреп сыҡҡан һалҡын тир һырт буйлап ағып китте. Эскән араҡының башта осмото ла ҡалманы, осоп сығып бөттө. Хәҙрәт: «Килдеңме?» — тип һораны. «Килдем, хәҙрәт», — тинем. «Ә хәҙер пар атыңа ултыр ҙа килгән ағайың менән (уның исемен атаны) хәҙер үк ҡайтып кит, ләкин үҙ ҡапҡаңа ѐтмәйенсә, артыңа боролоп ҡарама, ҡараһаң, һәләкәтең шунда булыр. Бар, сыҡ та арбаңа ултыр», — тине.

Арбаның ҡуҙғалын китеүе булды, ҡайһыһы — балта, ҡайһыһы салғы-һәнәк тотҡан шыр яланғас йөнлө әҙәмдәр, ут уйнатып, минең арттан төштө. Ҡурҡыуҙан шыр ебәрҙем. Боролоп ҡарағы килә, ләкин хәҙрәттең ҡәтғи әмере боролорға ирек бирмәй, ҡурҡыта. Манма тиргә төшөп, ауылға килеп еттек. Теге йөнлө иблистәр дау ҡуптарып, ул һуғарҙан, был һуғарҙан ҡысҡырышып ҡапҡа төбөндә тороп ҡалды. Көс-хәл менән өйгә инеп, түшәккә ауҙым. Бер тәүлек бер нәмә белмәй йоҡлағанмын. Бына хәҙер һин дә мин. Эсеү тураһында уйларға шикләнәм», — тип һөйләгәйне был кеше.

Варис һөйләүе буйынса, уны «Сәүит бөтә, тиҙҙән немец һуғыш башлай» тигән ҡотҡо таратыуҙа ғәйепләп, ҡулға алалар. Уны башта Йылайыр төрмәһендә тоталар, һуңынан Өфө төрмәһенә күсерәләр. Ләкин уны камерала тотоу төрмә башлыҡтарына үҙе бер оло ғазапҡа әйләнә. Көн һайын кистән бикләнгән ишек иртән асыҡ була. Сығырынан сыҡҡан төрмә хужалары уны карцерға яба. Үлем хәленә еткән тотҡондо ике тапҡыр моргҡа сығарып ташлайҙар. Ләкин был яза ла хәҙрәттең ҡаҡшамаҫ рухын һындыра алмай. Ахырҙа, уның камераһына бер провокатор ултырталар, ләкин күпмелер ваҡыт үткәс, һатылған был әҙәм, төрмә болдорынан йығылып, донъя ҡуя.

«Рәсәй йөмһүриәте енәйәттәр ҡанунының 58 матдәһенә бинаэн» уға атыу язаһы ҡарала. Быларҙың ғәйепләнеү төркөмө ун ике кешенән торған була. Был төркөмдө ике тапҡыр ул саҡтағы Башглавсуд ултырышына Өфөнән йәйәү алып киләләр. Оҙаҡ дауам иткән мәхкәмә (суд) ултыр-

рышында 56 кеше геүаһ булып, сығыш яһарға тейеш була, Мөжәүир хәзрәт залда ултырыу сәбәпле, ул шаһиттарҙың күбеһе телдән яҙа, тейешле дәлил килтерә алмай. Суд органдары Мөжәүир хәзрәттең ғәйебен иҫбат итә алмай, 1942 йылда төрмәнән сығарып ебәрергә мәжбүр була. Быға, бәлки, Өфө төрмәһе начальнигының ҡыҙы ҡаты ауырып китеүе һәм уны камерала ултырған хәзрәттең дауалап, аяҡҡа баҫтырыуы ла ярҙам иткәндер.

Уның ауылына әйләнеп ҡайтыуы илдең иң ҙур ауырлыҡ кисергән осорона тура килә. Ҡанлы һуғыш бара. Ҡулына ҡорал тоторға һәләтле ирҙәр барыһы ла яу ҡырында. Ә тылда иңгә төшкән ауырлыҡтарҙы күтәрә алмай нервы, психик сиргә тарыған кешеләр күбәйә, ә кәрәкле табиптар юҡҡа хисап. Бына шундай саҡтарҙа йән тыныслығы эҙләп, сырхауҙар хәзрәткә килеп, баш һала. Ләкин үҙе көнө-төнө НКВД күҙәтеүе аҫтында йәшәгән Мөжәүир хәзрәт оло шөбһәләргә дусар булып, килгән ауырыуҙарҙы дауаларға мәжбүр була. Уның ҡарауы, һуғыш мәлендә дини ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ғәмәлгә ашырырға рөхсәт ителә, был ваҡиға шөһрәте Башҡортостандың көнсығышына, ҡаҙаҡ далаларына олғашҡан атаҡлы табиптың шәхси хәлен бер аҙ еңеләйтә төшә. Уның табиплыҡ эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ йөрөткәндә, ул мәсьәлә туранан-тура район хужаһы һәм НКВД башлығының кем булыуы менән бәйле булды. Ә шулай ҙа хәзрәт сирлеләрҙе дауалау һәм уларға барлыҡ ихласлығы менән һаулыҡ өләшеүҙе бер ҡасан да туҡтатманы, һуңғы һулышына тиклем Хоҙай биргән ошо изге эшен дауам итте.

Варис та ата биргән фатиханы онотманы, бөтә ғүмере буйы кешеләргә хеҙмәт итә. Әле бына яңыраҡ ҡына заманында үҙ атаһы ғибәҙәт ғәмәлен атҡарған ҡарағас мәсеттең башын ҡалай менән яптырып ҡуйҙы. Атаһы ҡәберенә зыярат ҡылырға килгән мосафирҙарға ул ҡулынан килгән ярҙамды күрһәтергә тырыша. Манһыр аҡһаҡалы Варис Сиражетдинов «күңел мәсете киң булһа — башҡаһы хәжәт түгел» тигән принцип менән йәшәй.

Уның гөрләп торған бынамын тигән донъяһын, йәшәйеш рәүешендә ныҡлы урын алған ғаилә традицияларына һоҡланып, күҙәтеп йөрөгәндән һуң, йылҡысылыҡ эшендәге уңыштарҙы үҙ күҙем менән күргәндән һуң арала ошондай һөйләшеү булып алды.

— Ҡартаябыҙ бит, Варис. Был тиклем бөтә ғәләмгә үрнәк булырлыҡ гүзәл донъяны һәм барлыҡ ғүмереңде бағышлаған был һөйәреңде артабан дауам итерлек лайыҡ кеше бармы һуң? Ҡасан да булһа, беҙ ҙә был фани донъянан китербеҙ бит, — тип һораным. Ул, минең һорауға яуап

эҙләгәндәй, үҙенең йәшкелт күҙҙәрен оҙаҡ ҡына «Арал» тауға теклəп ултырҙы ла:

— Минең донъяны, ғүмер буйы шөғөлләнгән һәнәремде дауам итерлек, бөтə йəһəттəн дə мине алмаштырырлыҡ кешем бар. Ул да булһа, минең Заһита ҡыҙым. Уның ҡулынан килмəгəн эш юҡ — машинаһын, мотоциклын йөрөтə, доҡъя ғəмен, йылҡысылыҡ эшен телəһə ниндəй ирҙəрҙə ҡарағанда ла яҡшыраҡ белə, бик төплə кеше, — тип ат өҫтөндə ҡоштай осоп, ҡайҙандыр ҡайтып төшкəн ҡыҙына эйəк атты.

Атаҡлы хəҙрəттең һүнмəҫ рухында тəрбиəлəнеп, ереккəн ерҙəренəн көс-ғəйрəт алған, сабый саҡтарынан ололарҙың физəҡəр тормош юлын күреп үҫкəн Варис менон Хəйрикамалдың балалары — ҙейəн-ейəнсəрҙəре легендаларға бай ошо изге ерҙə үҙ тамырҙарын йəйер, Манһырҙа ҡабынған усаҡтарҙың күгелйем төтөнө яңынан зəңгəр күккə олғашыр тип ышанғы килə.

Эйе, ата-олаталары наҙлап тəрбиəлəгəн был үҫентелəр телəһə ниндəй ғəрəсəтле ел-дауылдарҙа ла бөгөлмəҫлек мəңге йəшел мөһəбəт урманға əүерелер.

МƏҢГЕ ХƏТЕРҘƏ

(Граждандар һуғышы геройы Муса Мортазиндың тыуыуына 100 йыл тулыуға ҡарата)

1936 йылдың май аҙаҡтары булһа кəрəк. Салғыя ҡаяһы өҫтөнəн күтəрелгəн алһыу май ҡояшы Ҡырҡтының көнсығыш итəгенəн бормаланып аҡҡан Оло Ҡыҙыл йылғаһына һыйынып ултырған Ҡолбаҡты ауылын тəүге нурға мансыны. Ҡарамаҡҡа Бөрйəн иле һил һəм тыныс. Зəңгəр күк көмбəҙендə əҙəм йөрəгенə шом һалырлыҡ 1937 йылдың ҡара болоттары ҡуйырыр һымаҡ тойолмай. Бөтə ғələм, тере йəн эйəһе бындай саҡтарҙа күңелдəрҙе илəҫмилəҫ тойғолар менəн солғап алған йомшаҡ май иртəһен тəбриклəргə ашыҡҡандан ҙ хəрəкəткə килə. Иртəнге һалҡынса саф һауа йəнгə сихəт өрə, нескə хистəр уята, йəшəүгə дəрт өҫтəй, ҡылған далаһына түшəлгəн иртəнге ысыҡтың көмөш тамсылары аҡһыл юрған булып Ҡыҙыл йылғаһы өҫтөнə ята.

Бына ошондай иртələрҙең береһендə йылға кисеүенең һул яғына туҙанға батҡан, ул заманда һирəк осрай торған еңел машина килеп туҡтаны ла үҙенең кисеү үңеренə килеп етеүен белдереп, көмөштəй саф йылғаға сələм биргəндəй, алғы ишектəн юғарыраҡ ҡуйылған борғоһонан сиг-

нал биреп ҡуйҙы. Кабинанан башта мыҡты кәүҙәле хәрби кеше сыҡты. Ул ҡулдары менән бөйөрөнә таянды ла ҡырсын ташта аллы-артлы йөрөп алды. Берсә турайып, берсә эйелеп ул, күрәһең, оҙон юлда һыныҡҡан билен яҙҙы.

Муса Мортазин

Йылға ситенә баҫып, тубыктарын ҡаплап тигәндәй торған былай ҙа ҡояшта көҙгөләй ялтыраған хром итеген таҙартты. Кеҫәһенән кескәй генә бәрхәт киҫәге сығарып, итектәре йөҙлөгөнә беркетелгән көмөш шпорҙарын йышып алды. Билендәге ҡылысын, пистолетын ысҡындырып һалды ла, френчын сисеп, һыуҙы сәсрәтә-сәсрәтә ах та ух килеп битен йыуырға кереште.

— Эх, мынауы һыуҙың сафлығы, давай һин дә машинаңды ҡойондороп эсереп ал, — тип шоферға өндәште. Үҙе кеүек үк хәрби кейемле шофер, ҡулына биҙрәһен алып, машинаһына һыу һибергә тотондо. Көйәнтәләп һыу алырға килгән ҡатын-ҡыҙ, был сит кешеләргә, уларҙы таныр-ға теләгәндәй, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Алыҫтан килгән кеше үҙен тәртипкә килтереп, френчының төймәләрен электерҙе, ҡояш яҡтыһында сағылып ҡалған семәрле эфесынан тотоп, ул ҡылысын шыҡылдатып ҡынына тыҡты ла, нурҙар сәсеп ялтлап торған шпорҙарын зыңғылдатып, сәғәтенә ҡарай-ҡарай, тағы ҡырсын ташты иҙә баҫып, машинаһын бер нисә тапҡыр урап сыҡты. Мөһәбәт кәүҙәһен һәйкәл кеүек турайтып, ул төбө үтә күренеп ятҡан Ҡыҙыл һыуының талғын ғына ағышын оҙаҡ ҡына күҙәтте. Әкрен генә тағатылған фекер йомғағының осо уны бынан ун һигеҙ йыл элек ошо ауылда булып үткән ҡанлы ваҡиға менән тоташтырҙы. «Эйе, Смоленск полкының башҡорттарға ҡарата ҡылған яуызлығы арҡаһында ҡыҙылдар менән бәйләнеште бөтөнләй өҙгәс, Әлмөхәмәтте баҫып алған аҡ казактар менән мин ана теге ауыл ҡаршыһындағы сағыл битендә яғаға яға килешеп алышҡайным. Ике флангынан кинәт һөжүм башлап казактар өҫтөнә ябырылып, беҙ уларҙы ошо тау уйпатында ҡылыс менән тураҡлап һалғайныҡ. Шунан һуң беҙ икенсе көн таң һарыһында уларҙы Ҡыҙыл станицаһынан бәреп сығарҙыҡ та мин үҙ полкымды кире

Ҡырҡты яғына борорға хәл иттем. Ҡалғаны ҡыҙылдарҙың хәстәре, улар барыбер минең изгелекте белә торған кешеләр түгел, тип фараз иттем». Ул ҡапыл үҙенең ҡыйыу сырайына етди һыҙаттар йүгертте. Өлтәйеңкерәп торған ҡара ҡаштарын еҫкә сөйөп, үткер ҡарашын ҡасандыр үлемесле алыштар майҙанына әйләнгән уйпатҡа текәне. Мөҡәддәс Башҡортостан өсөн йәнен аямай ошо ҡырҙа мәңгегә ятып ҡалған үҙ яуҙаштарының яҡты шәүләһе берәмберәм уның күҙ алдынан үтте. «Әйткәндәй, минең полкта йәйәүле дивизион командиры Ибраһимов Фәттәх, туп фейерверкы[1] Өмөтбаев Ибраһим, ғәйәр кавалеристар Өмөтбаев Ғүмәр, минең менән Польша фронтын гиҙеп сыҡҡан Булатов Зәйнулла, Ғәлиәкбәров Әшрәф һәм Ильясов Нотфуллалар ҙа булырға тейештәр ҙә баһа. Уларҙың һәр береһенә һуғылып, үткән ҡанлы һуҡмаҡтар хәтирәләрен иҫкә алып ултырғанда килешер ҙә ине. Ләкин форсат юҡ, әле Башҡортостанда үтелмәгән юлдар, күрергә тейешле кешеләр байтаҡ. Ваҡыт тар. Тик Фәттәх ағайға ғына юл һуғып китергә тура килер ахыры». Ул башын кинәт теге ярҙа һыу алып торған ҡатынға бороп:

— Ҡарындаш тиемме, килен тип әйтәйемме, был заманда Фәттәх Ибраһимов ағайың өйҙәме? — тип өндәште. Икенсе биҙрәһенә һыу алған арала күҙ ҡабаҡтарын ҡалҡытып, был ят кешегә аҫтан өҫкә ҡараш һирпеү генә түгел: «Әстәғәфирулла, бер ҡалмыҡ кешеһеме тиһәм, үҙебеҙҙең йыныс кешеһе икән дә, уй алла, был тиклем дә мыҡты кәүҙәле ир булыр икән?» тип һығымта яһарға өлгөргән әберсәле, биш ялпылдаҡлы күлдәк кейгән Ҡолбаҡты килене башын ҡалҡытып, яулығының осон тешләне лә:

— Өйҙә булырға кәрәк. Ҡырындасы ихатаһында тора. Уртансы малайы бөгөн атын һуғарып алып ҡайтҡайны,— тип яуапланы.

— Яҡшы, яҡшы. Беҙгә шул ғына кәрәк. Әйҙә, тәртәңде Фәттәх ағай[2] ҡапҡаһына бор, — тип салбар балаҡтарын төрөп, машина йыуған шоферына бойороҡ бирҙе.

Һыу сәсрәтеп, йүткерә-сөскөрә был яҡҡа сыҡҡан машина Ҡыҙыл буйының уң ярына терәлеп ултырған сомтор урамға боролдо. Ә был урамдың мөйөшөн биҙәп ултырған сарлаҡлы, бейек ағас йортта ауыл Советы кәнсәһе урынлашҡан. Унда инде көнө-төнө кеше өҙөлмәй. Уның тирә-яғы ырҙын тапандыһына әйләнгән. Бигерәк тә кәнсә тирәһендә ҡырҡма мыйыҡ малайҙар күберәк урала. Уға сәбәп тә юҡ түгел, сөнки яңы ғына силсәүит башлығы

---

[1]Батша армияһында артиллерия наводчигы.

[2]Ул Муса Мортазиндан туғыҙ йәшкә оло кеше ине.

кабинетының стенаһына еҙ самауыр дәүмәлендәге телефон аппараты элеп ҡуйҙылар. Унда-бында йәшеренеп, «силсәүит Юлмых» (Юлмөхәмәтов) ҡарттың бер яҡҡа тайшанғанын көтөп кенә торған малайҙар, кәнсә бушағас та, телефон тотҡаһын дығырлатып борорға керештеләр. Ун ике саҡрымда ятҡан Хәлил почта бүлеге менән тимер сыбыҡ аша һөйләшеү ҡыҙыҡ та, серле лә. Әгәр инде телефондан бер-ике таҡмаҡ әйтергә өлгөрһәң — һин аҫау айғырға атланғандай шатһың.

Бына шул кәнсә һағалаған малайҙарҙы өркөтөп, сигнал бирә-биро баяғы машина кәнсәгә ҡаршы тигәндәй ултырған Фәттәх апа[1]лар ҡапҡаһына килеп тәрәлде.

«Яр аҫтынан яу сыҡҡандай был еңел машинаның эргәнән генә саң туҙҙырып үтеп китеүе ауыл малайҙарында бермә-бер ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Түшенә боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены беркетелгән пинжәкте яурынына һалып, болдорҙан йүгерә-атлай Ибраһимов Фәттәх сыҡты. Ул ике бүлкәтле таҡта ҡапҡаны шар асты ла машина эргәһендә баҫып торған кешегә ҡаршы атланы. Ҡосағын йәйеп торған командирына ҡул бирерҙән алда Фәттәх ҡарт былай ҙа тырпайып торған ажар мыйығын бороп алды. Шунан һуң ғына ул үҙ командиры ҡосағына ташланды. Яурынтаҡ, баһадир кәүҙәле Фәттәх Ибраһимов килгән кешенең ҡосағында юғалып ҡалды. Ҡосаҡлашып күрешкәндән һуң, улар оҙаҡ ҡына бер-береһенә ҡарашып торҙо. Ситтә күҙҙәрен уйнатып, был ғәҙәти булмаған осрашыуға тамаша ҡылып торған малайҙарҙан тартыныпмы ситтән килгән ҡунаҡ:

— Ай-һай Фәттәх ағай, әллә ҡартаяһың инде, бер аҙ ҡаужыған төҫлө күрәм үҙеңде, — тип өндәште, — сәстәрең дә һирәгәйгәндәй тойола, — тип өҫтәне.

Өҫкә табан сәстәре ҡойолоп, ялтырай башлаған маңлайын һыйпап алды ла, Фәттәх ҡарт оҙонсараҡ битенә яҡты сырай йүгертеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайҙы.

— Сәҫ[2] ул, Муҫа ҡуҫтым, пүҫтәк нәрҫә. Уныһы йомош түгел. Бына ҡартая башлау раҫ. Илле алты менән барыла бит. Беҙ бит Аҫыя беләп алты малай, бер ҡыҙ көтәбеҙ. Кәҫеп тә бик мәшәкәтле, бер урында торған юҡ — йөрөү ҙә йөрөү. Ғаилә бында ә мин Дубинда [3], — тип яуап бирҙе Фәттәх ҡарт.

Ике командир ҡосаҡлашып өйгә инеп киттеләр. Тиҙ-

---

[1]Көнсығыш башҡорттары атаһынан оло кешеме а п а тип йөрөтә.

[2]Фәттәх Ибраһимов «с» өнөн аныҡ ҡына әйтә алманы. «С» урынына «ҫ» ҡулланды.

[3]Түбә руднигы халыҡ телендә шулай аталды. Был саҡта Ибраһимов Фәттәх рудникта бигун фабрикаһының начальнигы ине.

ҙән ҡулына еҙ тас, яурынына сигелгән таҫтамал һалып, ҡунаҡтарҙың ҡулын сайҙырырға беҙҙең йәштәш, Фәттәх -ҡарттың дүртенсе улы Тәлғәт сыҡты. Был юлыһы килгән ҡунаҡ хәрби кейемен, ҡылыс, пистолеттарын һалып, күлдәксән генә ине. Ихаталағы күпереп үҫкән, бесәй үләне өҫтөндә ҡунаҡтар ҡул сайҙы. Ә беҙҙең арала килгән кешеләрҙән алған тәүге тәьҫораттар тураһында һүҙ ҡуйырҙы.

— Был кем икән?

— Нимә, күрмәйһеңме ни, командир бит!

— Беҙҙең ауылда унан да бейегерәк ағай юҡ.

— Ә Ғөбәйт ағайҙы ҡайҙа ҡуяһың?

— Вәт ҡыҙыҡ булыр ине икеһен көрәштергәндә, ә?

— Кеме еңер ине икән?

— Кәнишнә, Ғөбәйт ағай, ул бит алғы күсәренән тотоп фарзун тракторын күтәрә.

— Был командир Ғөбәйт ағайға ҡарағанда ла ажарыраҡ. Күҙҙәрен ҡара һин уның.

Бына килгән кешене тасуирлауҙың ошо мәлендә генә Тәлғәт сығып, беҙҙең уртаға баҫты ла:

— Ул минең атайымдың элекке командиры Муса Мортазин була. Ул атайыма ҡарағанда ла батырыраҡ. Уның түшендә ордены икәү. Ә атайымдыҡы берәү генә. Муса ағай беҙгә туп-тура Мәскәүҙән килгән. Штабта хеҙмәт итә, — тип аңлатырға кереште. Ләкин уның урыҡ-һурыҡ хәбәре бер кемде лә ҡәнәғәтләндермәне. Үҙ ғүмерҙәрендә беренсе тапҡыр ҙур башҡорт командирын күреү бәхетенә ирешкән Тәлғәтте һырып алған ауыл малайҙары төпсөнөргә, һорау яуҙырырға тотондолар.

— Тәлғәт, һин ҡылысын тотоп ҡараманыңмы?

— Ул ни малайҙарҙың көсө етерлек түгелдер — ҡоросмо әллә сөгөнмө?

— Алтатарыи элеп ҡуйҙымы әллә тағып ултырамы?

— Ишеттегеҙме, аяғындағы ялтыр шпорының дүңгәләге зыңғылдап өйөрөлеп тора?

— Бигерәк ҙур ағай бит малай. Уны нисек ат күтәрә икән? Аты ла беҙҙең идараның бәхмисе һымаҡтыр инде.

Бына ниндәй һорауҙар яуҙы бөгөн малайҙар араһында иң бәхетле Тәлғәт өҫтөнә. Үҙенә ҡалһа ул үҙе белгәненсә эшлекле яуап бирергә тырышты.

— Ул алтатар таҡмаған, пистолет таҡҡан. Минең атайымдың да ундай наганы бар. Мортазин ағайҙың менгән аты Мәскәүҙә ҡалған, ти. Ул бөтә Ҡыҙыл Армияның кавалерия аттарының хужаһы булып хеҙмәт итә, тине атайым.

— Ай, малай, ул ни беҙҙең йылҡысы Әбделғәни ағай шикелле ниндәй атты теләһә шуны менеп йөрөйҙөр инде.

Малайҙар араһында бына ошондай йәки ошоға оҡшаш гәпләшеү барҙы.

— Ярар, малайҙар, минең бында һеҙҙең менән һүҙҙән бутҡа бешереп торорға ваҡытым юҡ. Йә атайыма кәрәк булырмын, — тип Тәлғәт өйгә йүгерҙе.

Күрәһең, оло ҡунаҡтың үҙҙәренә һуғылып китергә теймешлеген алдан белгәнгәлер инде, өйҙөң хужабикәһе тулы алһыу битле, мыҡты кәүҙәле, күркәм Асия инәй, «Муса ҡәйнеш»енә тәғәйен аҙыҡ-әүҡәтте таярлап өлгөргәйне. Мортазин тупһаны аша атлағас та байтаҡ ҡына өй эсен байҡап торҙо. Ләкин бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Тик тапҡыр һүҙле һәр саҡ эсендәгеһен сатнатып әйтә торған хужабикә генә түҙмәне, шешмә ҡабаҡлы һоро күҙҙәренән осҡор ҡараш атып:

— Ҡәйнеш, өйҙө бик диҡкәт менән байҡап сыҡтың, әллә оҡшамай? — тип йылмайҙы. Былай ҙа «Асия уйламайыраҡ берәр нәмә ысҡындырып ҡуймағайы», тип һер келдәп торған Фәттәх ҡарт ҡарсығалай үткер ҡарашы менән бисәһен баштан аяҡ ялмап алды.

— Ошо атаңа нәләт бисәләр килгән кешенең битенән ала ла торалар. Алыҫ юлдан килгән ҡунаҡты башта ашарға саҡыр, — тип үҙенең был өйҙә төп кендек икәнен белгертергә самалап ҡарағайны ла, ләкин уның был иҫкәртеүе телдәр хужабикәне әҙәп ҡалыбына ултырта алманы, киреһенсә ҡуҙға сытыр ғына өҫтәне.

— Электр яндырып, бейек арандай йортта йәшәп өйрәнгән ҙур түрә беҙҙең ауыл тормошона хушһынамы ни,— тип аш-һыу әҙерләп йөрөгән Асия һүҙен дауам итте. Хәҙер инде көлөмһөрәп торған Муса һүҙгә ҡушылды.

— Беҙ ҙә алпауыт балдары түгел дә баһа. Ғүмер буйы Күбәләк-Тиләү волосының Көсөк ауылында сыра яндырып, сыуал яғып көн иттек. Кейгәнебеҙ иректәлгән тиренән тегелгән тиртун, башыбыҙҙа һарыҡ тиреһенән эштәлгән тупый [1] булды Һеҙ, исмаһам, урыҫ мейесе яғып, өҫтәл белән культурный йәшәп ятаһығыҙ. Бына түшәмегеҙгә утыҙҙы шәм дә аҫып ебәргәнһегеҙ, — тип еңгәһенең һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ҡуйҙы.

Ҡунаҡтың татлы һүҙенән ирәбеләнеп, үҙҙәре көткән донъянан ҡунағының риза булыуы хужабикә күңеленә йәм өҫтәгәндәй тойолдо.

— Бер ҙә донъяны етештереп көтә алған юҡ әле. Аҡайың ғүмер буйы һалдат хеҙмәтендә йөрөнө. Бала-саға күбәйеп китте. Оло улыбыҙ Әнүәр хеҙмәттә, уға етәгеһе Әхиәребеҙ ҡаралып йөрөй, ә үҙе һаман ҡырҙа хөкүмәт эше тип

[1] Күбәләктәр бүректе т у п ы й тип йөрөтә.

саба. Ыбыр-сыбыр ете ир бала бит. Етешә алмайбыҙ,— тип һөйләнде. Бер аҙ иҙән уртаһында уйланып торғас, нимәлер иҫенә төшөп ҡалған һымаҡ, хужабикә ике ҡулын сандырына сапылдатып һуҡты ла: «Мына инде бер һиңмай, һин «өҫтәл» тигәс иҫкә төштө, ашты мин ни өҫтәлгә әҙерләмәй, урындыҡҡа [1] әҙерләнем дә ҡуйҙым бит әле, ҡәйнеш», — тип өтәләнде.

— Ярар, ярар, еңгә, ашы ғына булһын, йөгәнәкләп тороп боронғоса аяҡ салып ултырып ашарбыҙ, — тип Муса төпкә ырғытылған күпереп ятҡан яҫтыҡ өҫтөнә ойоҡсан менеп тә ултырҙы. Ирҙәр араһында һүҙ тынғас:

— Мә, итте үҙең тура, — тип хужабикә семәрле батмуста боҫорап ятҡан кисә генә һуйылған бәрәс һарыҡтың һәммәһен тигәндәй ҡунаҡ ҡырында ултырған ире алдына килтереп ултыртты. Оса майы һәм бауыр һалынған тәрилкәне лә ире алдына ҡуйып:

— Бына быныһын ҡунаҡҡа аш алдынан һоғондорорһоң, — тип үҙе ирҙәргә ҡаршы һике йөҙлөгөнә ултырҙы. Мәжлестә генә түгел, үҙ өйөндә лә бер ваҡытта ла ҡорҙа ит турамаған Фәттәх ҡарт ике ҡулы менән батмусты бисәһенә этте. Уның ғәҙәттәге ҡыйыу сырайына ялбарыу һыҙаттары йүгерҙе, оҙонсараҡ ҡаҡса бите тағы ла аҫҡараҡ тартылды, бөтә йөҙөн яртылайға тигәндәй бүлеп торған оҙон мыйығының осо ҡалтырағандай тойолдо. Ул нишләргә белмәй, уйынлы-ысынлы:

— Аҫия, һин нәмә һаташып бараһыңмы әллә? Минең -ҡаҫан ит турағанды күргәнең бар? — тип мәрәкәләне. Еңенең осон итләс терһәктәренә еткәнсе төрөп, ит турап, ҡунаҡтарҙы һыйлау вазифаһын хужабикәнең үҙенә атҡарырға тура килде. Мортазиндың шоферына ашты махсус рәүештә өҫтәлгә әҙерләнеләр. Икенсе өй бүлмәһенән берике малайының ҡырылған баштары күренеп ҡалғас, хужабикә, бысаҡ тотҡан ҡулын һуҙып:

— Һеҙгә аш ана тегендә, үҙ бүлмәгеҙҙә әҙерләнем. Шунда ашағыҙ, — тип әмер бирҙе.

Ҡырҡылған оса майы өҫтөнә берәр киҫәк бауыр һалып тоҙ һибеп сыҡҡас, хужабикә:

— Эй әттәгенәһе, анауы нәмәгеҙҙе онотҡанмын бит, тип урынынан тороп китте лә тышына бойҙай башағы төшкән ярты шешә араҡыны ире алдына ҡуйҙы.

Ҡабарып ятҡан бейек яҫтыҡ өҫтөндә аяҡтарын бөгөп, нисек итеп яйлыраҡ ултырырға маташҡан ҡунаҡ, үҙ фекерен дауам иткәндәй, түңәрәгерәк ҡуңыр битенә уйсан

---

[1] Урал арты башҡорттары һикене у р ы н д ы ҡ тин атай.

һыҙаттар һирпеп, ентекләп сиртелгон ыҫпай мыйығы аҫтынан ғына йылмайҙы.

— Байрамғолда беҙ, шәкерттәр уҡыған Мөхәммәтлатиф хәҙрәт мәҙрәсәһендә [1] бер ниндәй ҙә өҫтәл тигән нәмә булмай торғайиы. Дәрес тыңлатыу иҙәндә, ашап-эсеү ҡаҡ урындыҡта. Хәҙер Мәскәүҙә йәшәп ятһаҡ та беҙ шул халҡыбыҙ тормошон үҙ елкәбеҙҙә татып үҫкән башҡорт балдарыбыҙ инде, — тип киң күкрәген тултырып һулап ҡуйҙы. Уның әле генә сырайы яҡтырып, көләс нурҙар һипкән йөҙөндә ниндәйҙер үкенеү хисе менән тулған шәүлә ятҡандай тойолдо.

— Да, Муса Лутович, ул яҡҡа китһәң, беҙҙең барыбыҙ ҙа шул бер һуҡмаҡтан киләбеҙ инде. Беҙ ҙә шул үҙебеҙҙең Ғәбделханнан хәҙрәт мәҙрәсәһендә эште «Мөғәллим әл әүүәлдән» [2] башланыҡ, — тине хужа.

Ҡапыл сырайы яҡтырып киткән (хужа: «Бына быныһы беҙҙең вазифа», — тине лә яртылыҡ шешәне ҡулына тотоп, ныҡ ҡына сайҡап алды. Быяла стенаға бәрелеп, шешә эсенә һыймай, бер-береһе менән ҡыуышҡан көмөш ынйыларға оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы ла алдында ултырған күләмле генә рюмкаларға араҡы тултырҙы.

— Йә, командир, тотайыҡ. Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа, алтмыш туғыҙ йыллыҡҡа, — тине Фәттәх. Ирҙәр күҙҙәрен сырт йомоп араҡы йота башлағас та «әстәғәфирулла, был ир тигән мәлғүндәрҙе, нисек әсәләр шул ағыуҙы;», тип хужабикә яулығының осо менән ауыҙын ҡапланы.

— Йә, ҡәйнеш, йәһәт кенә һоғоноп ебәр, ашҡаҙанын янып ҡуймаһын, — тигән булды Асия еңгәһе.

— Фәттәх ағай, һин беҙҙең Верхурал араҡыһын эсеп ятаһың икән дә баһа, — тине Муса. — Борон-борондан Верхурал беҙҙең өйәҙ бит инде. Хәҙер нисектер, — элек таш урамы, төрмәһе менән араҡы заводынан башҡа бер нәмәһе лә булмай торғайны. Хотя әллә ҡайҙан ялтырап күренеп ятҡан сиркәүе лә бар ине, — тип өҫтәне.

— Төрмәһен хәҙер нығытып яңыртты лар, киңәйтеп эшләнеләр, ә сиркәүен шул бөтә ерҙәге шикелле емерҙеләр инде. Араҡы заводы хәҙер элеккегә ҡарағанда ла шәберәк эшләй — бөтә Яйыҡ, Ҡыҙыл буйы эсә, — тине Фәттәх, икенсе ҡабат буш рюмкаларға араҡы тултырып.

— Әйҙә, Муса ҡәйнеш, тартынмай аша. Барыһы ла алдында, бына башҡорт ҡоротон да ауыҙ итеп ебәр. Танһыҡ аҙыҡ — күңеленде асып ебәрер, — тип ҡыҫтаны ҡунаҡты хужабикә ихлас күңелдән.

---

[1] Муса Мортазин тәүге белемде Ҡаҙаҡҡол волосы, билдәле Байрамғол мәҙрәсәһендә Мөхәммәтлатиф хәҙрәттән ала.

[2] Дини мәҙрәсәлә тәүге укыу китабы.

Бер-ике рюмка төшөрөп алғас, Мусаның өзөлөп ҡалған фекер осо тағы шул йәшлек һуҡмағына килеп төштө.

— Еңгә, герман һуғышында мин ана шул мәҙрәсә ғилеме менән полкауай мулла ла булып хеҙмәт иттем бит әле. Ул нишләптер үҙенең был һүҙен мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп ултырған Фәттәх ағаһына түгел, ҡунағының бик тә яҡын кеше кеүек тартынмай ашауына һоҡланып, ихлас күңел менән һыйлаған хужабикәгә төбәне.

— Китсе, китсе, ҡәйнеш. Ошо күркәм буй-һының менән һуғышта мулла булып йөрмәгә. Сырауҙы ла эшәнмәйем, булмаҫ. Мин бындай ҙур кәүҙәле муллаларҙы ғүмерҙә лә күргәнем юҡ. Улар сибек кенә, ҡәүен генә була. Улай булғас, нисек ҙур командир булып киттең һуң? — тип Асия тәү күргән кеүек яҫтыҡ өҫтөндә һәйкәл кеүек ултырған Мусаға ҡараш һирпеп ҡуйҙы.

Батша армияһының кадровый унтер-офицеры, артиллерия фейерверкы булып хеҙмәт иткәнен, үҙ командирының муллалыҡҡа бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмағанын яҡшы белгән Фәттәх Ибраһимов был юлы өндәшмәй ултырып ҡалыуҙы хуп күрҙе.

Муса Лутович үҙенә муллалыҡ санын тик 1917 йылдың мартында йыйылған Бөтә Рәсәй мосолмандар съезына ҡатнашыу[1] өсөн генә алыуын хужа электән дә белә ине. Тик дини сан һәм рухани вазифа ғына мосолмандарға был йыйылышта ҡатнашыу хоҡуғы биреүе хужаға күптән мәғлүм. Командирҙың үҙен элекке мулла итеп таныштырып ултырыуы тик еңгәһен мәрәкәләү өсөн генә әйтелгән хәбәр икәнен Фәттәх яҡшы аңлағанға күрә, һүҙгә ҡатнашмай, мыйығын һелкетеп, тауышһыҙ ғына көлөп ултырҙы. Ғөмүмән, хужа һүҙгә бик һаран кеше, ҡабыҡ ҡағып хәбәр һөйләп ултырырға әүәҫ түгел. Шулай ҙа аҙаҡтан Фәттәх түҙмәне, йоҡа ирендәре менән киң йылмайҙы ла:

— Полкауай мулла булдым тиһең инде, Муса Лутович? — тип һорап ҡуйҙы. Әләйһә ете ҡатлы итеп урыҫса һүгенергә шул мулла булып йөрөгән саҡта өйрәндең инде, ә? — тип хәйләкәр генә күҙ ҡыҫты. Бер ни ҙә аңламаған хужабикәне аптыратып, ике хеҙмәттәш рәхәтләнеп көлөштө.

— Бына шул съезда күреп таныштым бит инде мин Зәки Вәлиди етәкселегендә ойошҡан башҡорт федералис-

---

[1]Мосолмандар съезында ҡатнашыусылар исемлегендә уның хаҡында түбәндәгеләр яҙылған. № 37. Исеме, фамилияһы — Муса Мортазин, губернаһы — Ырымбур, өйәҙе — Верхнеурал, волосы — Күбәләк-Тиләү, ауылы — Көсөк, һайланмыш ере—Ғәскәри имам, фронттан, йәше - 27, тәрбиә алған ере — Байрамғол Мөхәммәтлатиф хәҙрәттә. Вазифаһы - ғәскәри имам.

тары менән, һуңынан да уларҙың программаһына ҡушылып киттем һом яҡланым. Уныһы һиңә, Фәттәх ағай, мәғлүм инде. Хужа ризалығын белдереп, һүҙһеҙ генә баш һелкте.

— Ҡазан, Һамар һәм Өфө — милли комитеттарынан йыйылған дума ағзалары, татар сауҙагәрҙәренең ҡыҫымына ҡарамаҫтан, Башҡорт иленән килгән депутаттар ер һәм уны биләү мәсьәләһендә Зәки Вәлиди әҙерләгән документҡа берҙәм ҡушылып, үҙенең особый фекерен белдереп, ҡайтып китте бит. Былар барыһы ла Зәки Вәлидиҙең тырышлығы, шуның ныҡышмалы эшмәкәрлеге арҡаһында килеп сыҡты инде. Бигерәк тә уҡымышлы, телгә шәп маһир бер зат эйәһе ине. Аҙаҡтан Ырымбурҙа саҡырылған ҡоролтайҙарҙа ла ер тураһында ул үҙенең ошо ҡарарын алға һөрҙө. Бик тә башлы, милләт хәлен үтә ныҡ белгән арҙаҡлы ир ине, ғүмере ҡыҫҡа булды. Алдына алған яҡты хыялын бойомға ашырырға юл бирмәнеләр был ил ағаһына, һуңғы һүҙҙәрен Муса тауышын ҡырҡа түбәнәйтеп, әкрен генә әйтте, нишләптер, ниндәйҙер шөбһә һиҙенгән шикелле, ян-яғына ҡаранып ҡуйҙы. Ҡунағының ҡапыл һағайыуы хужаға күстē, ул урынынан тороп, ике яҡ бүлмәгә асыла торған ҡыҫыулы ишектәрҙе ныҡлап ябып ҡуйҙы. Әңгәмәнең етди юлға ыңғайлағанын һиҙеп, барыһы ла тымып ҡалды. Күпте күргән хужабикә лә ирҙәр ауыҙынан сыҡҡан был шөбһәле хәбәр китапҡа ярамаған бөтә йөрәге менән тойоп, һурпа яраштырыу һылтауы менән урынынан уҡ тороп китте. Килеп тыуған уңайһыҙлыҡтан тиҙерәк ҡотолоу ниәте менәндер инде Фәттәх ҡарт әңгәмәне икенсе үҙәнгә бороп ебәрергә тырышты.

— Ярай, Муса Лутович, хәҙер ул турала сүбек сәйнәп тороуҙан бер ниндәй ҙә фәтүә юҡ. Булған да үткән. Байтаҡтан осрашҡан юҡ. Ана бер тапҡыр «Главзолото» начальнигы Серебровский үткәргән йыйылыштан һуң рәссамдарҙың рәсемдәрен икәүләп барып ҡараған ла ни ғүмер үтеп киткән. Ул рәссамдың мин инде хәҙер исемен дә онотҡанмын. Үткән ғүмер — ҡалған хәтер.

— Ул ниндәй рәссам икән һуң, һин, Фәттәх ағай, ниндәй рәсем тураһында һөйҙәп ултыраһың икән?

— Ай, әттәгенәһе, анау бер бөтөн стенаны алып торған һинең портретыңды эшләп ҡуйған да инде бер рәссам, һин һул ҡулың менән теге үҙеңә атап реввоенсовет бүләк иткән ҡылысты тотоп ултырғыста өҫтәлгә таянып ултыраһың. Һине унлаған башҡа командирҙар уратып алған. Улары шәм яҡтыһында өҫтәлгә йәйелгән картаны ҡарап тора. Иҫеңә төштөмө? Һин унда бик ажар ултыраһың, — тип Фәттәх үҙе күргән рәсемде тасуирларға тырышты.

— Да, да, бар ундай рәсем[1]. Унда минең артта тәс һиңә оҡшаған бер командир ҙа баҫып тора. Ул кешене мин рәссамға «Был йәйәүле дивизион командиры Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Фәттәх Ибраһимов» тип яҙҙырып та киткәйнем. Так что ул ҙур баласта мин гепә түгел, һин дә бар, тип көлдө Муса. Бындай яңылыҡты көтмәгән хужа бик оло борсолоуға төштө.

— Һин әллә шул рәссамға биреү өсөн минең карточканы һоратып алдырғайныңмы? — тип һорап ҡуйҙы хужа битенә етдилек йүгертеп.

— А как же? Шуның өсөн, кәнишнә, — тип яуапланы ҡунаҡ.

— Ҡуйсы әле. Бөтөнләй үтерек (яңылыш, ҡаҙаҡса.— Р. Ө.) хәбәрҙе һиңә һөйләп ултырыу килешә торған эшме ни? Нишләп унда мин тәшәйем ти?

— Мин Мәскәүгә ҡайтҡас дөрөҫләтермен әле. Теге рәссам менән беҙ икәү ул минең артта торған командирҙы һинең карточкаң буйынса эшләткәйнек шикелле, — тине Муса һүҙенә етдилек баҫымы өҫтәп.

— Булмаҫ, булмаҫ.

— Нишләп булмаһын, шундай ҙур рәссамдың рәсеменә эләгеп, бөтә Рәсәй мәмләкәтенә мәғлүм булып ҡалыуын насар эшме ни? Кем өлөшөнә тейә ундай бәхет, — тип Муса үҙ хәбәрен дөрөҫләргә тырышты.

— Йә, Муса Лутович, боронғоларҙан ҡалған бер мәҡәл бар: «Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәҫ». Бына һин ошо кавалерияла беҙҙең халыҡтан оло чинда йөрөгән берҙән-бер командир хисапланаһың. Бер ҙә үҙегеҙгә алмашҡа йәштәрҙе үҫтермәйһегеҙ һымаҡ тойола миңә. Бәлки мин яңылышамдыр, хаталанһам — төҙәт.

— Ҙур кавалерия начальниктары булмаһа ла яңы үҫеп килгән бик шәпле кавалеристар бар беҙҙең атлы ғәскәрҙә. Бына миҫал өсөн, алайыҡ, Учалы районы Үрген ауылынан кадровый командир подполковник Ғүмәр Йәноҙаҡов, Урта Азияла хеҙмәт иткән атлы полк командиры Мөхәмәтйәров. Ул атлы ғәскәрҙә үткәрелгән бер генә ярышты ла ҡалдырмай. Бына йәштәрҙән Ғариф Маҡаев, Ырымбурҙа атлы полкта инструктор булып хеҙмәт итә. Ул үҙ атын ике метр бейеклектә һикертеп, атлы ғәскәрҙә рекорд ҡуйҙы. Әле ундай бейеклектә беҙҙең атлылар араһында бер кем дә һикергәне юҡ. Маладис, бик йылғыр кавалерист. Бөтөнләй онотоп ултырам икән. Әле бына һеҙҙең район-

---

[1]Һүҙ художество академигы В. Яковлевтың: В. Яковлев. 1893—1953. Красные командиры 4Х3 м. полотноһы хаҡында бара. Бында ысынлап та Муса Мортазин һүрәтләнгән.

дан Күсем ауылынан бик шәп Күсимов Таһир тигән егет үсеп сыкты. Казандағы татар-башкорт командирҙар мәктәбендә эскадрон командиры булып хеҙмәт итә. Һуңғы атлы ғәскәр күләмендәге Мәскәүҙәге уларҙың червонный казачество (Кызыл.—Р. Ө.) менән политбой ярышында башкорт малайҙарының яуаптарын мин үҙем ауҙарып ултырҙым. Миңә Үҙәк ипподромға Сергей Сергеевич — беренсе рангылағы командарм үҙе саҡыртҡайны. (Оборона халыҡ комиссарының беренсе урынбаҫары. — Р. Ө.) Һанап китһәң атлы ғәскәрҙә беҙҙең егеттәр байтаҡ ҡына ул. Тик уларҙың береһе лә һуғыш уты күрмәгән, дары еҫкәмәгән. Әле ҙур практика үтәһеләре бар, — тип Муса Мортазин һүҙ бөткәнгә хисаплап, яҫтығы өҫтөндә турайып ултырҙы. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан ҡунактың хәрбиҙәр тураһындағы һүҙен йотлоғоп тыңлап ултырған Фәттәхтең ҡыҙыҡһыныуы бермә-бер арта төштө.

— Үҙеңдең хеҙмәтең нисек һуң, Муса Лутович. Штаб эше оҡшаймы?

— Әллә Мортазинға штаб хеҙмәте оҡшамай икән тигән хәбәр һеҙгә лә килеп еттеме? — тип Мортазин көлөмһөрәп хужаның һорауына һорау ырғытты ла үҙенең ҡарсыға ҡарашын үға текәне.

— Юҡ, ул-был хәбәр ишетелмәй, ләкин һинең һымаҡ атлы ғәскәрҙә бригада, дивизия менән командалыҡ иткән ысын воякка штабта ҡағыҙ менән булып ултырыу, үҙемсә, бер ҙә күңеленә оҡшамайҙыр, — тип уйлайым, — тине Фәттәх үҙенең һәр бер һүҙен ауыҙынан көскә-көскә тартып сығарып.

— Фәттәх уҙаман, ысын күрәҙә һин. Әйтерһең дә һин минең эсемдәген үтә күреп тораһың. Билдәле, аҙналар буйына аттан төшмәй ауыр һуғыш юлын үткән боевой командирға көндәр буйы штабта ултырып, ҡағыҙ яҙып, ҡағыҙ уҡып ултырыу шөғөлө — минең өсөн оло ғазап, нишләйһең бит — приказ приказ инде. Минең яҙыуға булған һәләтем һиңә көн һымаҡ асыҡ бит. Ҡағыҙ тулған шкафтарға һис тартынып тормай хәҙер үк ут төртөр инем. Әгәр минең үҙәк ипподромда аҙнаһына ике тапҡыр һыбай үткәрә торған күнекмәләре булмаһа, мин штабта һарғайып, зарығып үлгән булыр инем. Әле бына Йосопҡа [1] барып етә алмай ятам. Машинала йөрөү бик ялҡытты. Уға килеп етеп терәлгәс тә бер айғырын һыбай менеп аласаҡмын. Һуңғы һүҙҙәрен әйткән саҡта Мортазиндың сырайы

---

[1]Һүҙ Мортазин бригадаһында хеҙмәт иткән, һуңынан республикала танылған хужалыҡ етәксеһенә әйләнгән Йосоп Ҡунаҡбаев тураһында бара. 46-сы конезавод директоры, 1937 йыл атылған.

йәнләнеп китте, эске тулҡынланыуҙан күҙҙәренән дәртле осҡондар сәселгәндәй тойолдо.

— Штабта хәҙер шөғөлөң ниҙән ғибәрәт, начальниктарың, менән мөнәсәбәтең арыумы? — тип һораны Фәттәх.

— Штабта мин эштәгән бүлек Ҡыҙыл кавалерияға аттар әҙерләү эше менән шөғөлләнә. Бына йәйәүҙе ғәскәргә призывниктарҙы алырҙан алда улар сборный пункттарҙа тәүге военный подготовканы үтәләр бит әле, ошо урында уға ҡарап тешен һыҙлыҡлап ултырған хужа үҙенең аңлағанын белдереп эйәгән ҡаҡты, бына мин дә шул ҡонан-ҡонажынға[1] сыҡҡан аттарҙы ремонт бригадаларына[2] йыйып, өс-дүрт ай буйынса тәүге кавалерия малдарына өйрәтеү эше менән етәкселек итәм, — тине Муса.

— Аңлашыла, аңлашыла. Былай командир эшең әбдән ҡатмарҙы икән. Ҡатмарҙы ғына түгел, бик яуапты, тине хужа алдындағы ҡунаҡтың һүҙенә ихлас теләктәшлек белдереп, телен сартлатып ҡуйҙы.

— Бөтә Ҡыҙыл армияның кавалерияһына тиһең инде, ә? Ай-һай бигерәк ҙур вазифа йөкмәгәндәр икән үҙеңә, — тип баш сайҡаны хужа.

— Былай стратегик кавалерияла[3] хеҙмәт итеү түгел инде, ләкин эше бик мәшәкәтле. Конезаводтар, РККА фонды тотҡан колхоз, совхоздар менән ныҡ бәйҙәлгән[4]. Ҡарап, әленән-әле тикшереп тормаһаң хужалыҡтар ул аттарҙы йә егә, йә менә баштайҙар. Муйынына ҡамыт, башына йүгән кейҙерелгән ат беҙгә яраҡһыҙ хисаптала. Беҙ ундай кешеләрҙе ҡаты яуапҡа тарттырабыҙ, — тине Мортазин.

— Ундай РККА фонды беҙҙең Буденный исемендәге колхоз йылҡыһы араһында ла бар ул, — тине диҡҡәт һалып тыңлап ултырған хужа.

— Бына ул аттар барыһы ла минеке. Колхозығыҙ маршал Буденный исемен йөрөтә икән, тимәк ул хужалыҡта йылҡысылыҡ эше рәткә һалынған тигән һүҙ. Беҙ Буденный исемен йөрөткән бөтә колхоздарға айырым хисап алып барабыҙ, — тине Муса.

---

[1]Тайҙан бер йәшкә олоғайған атты шулай атайҙар.

[2]Атлы ғәскәр частарыныц түбәндәге звеноһы.

[3]Атлы ғәҫкәр ике төрҙән ғибәрәт: 1) стратегик кавалерия хәрби бурыстарҙы үҙ аллы башҡара (фронтты өҙөү, һөжүм итеү һ. б.); 2) ғәскәри кавалерия йәйәүле йәки моторизованный соединениеларға бирелгән һәм уларға буйһонған ҡушымта көс.

[4]Атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итеү өсөн бөтә промерҙары тап килгән (буйы, һыны, бейеклеге һ. б.) йәш аттарҙы РККА фондына теркәйҙәр. Кем ҡарамағында булыуға ҡарамаҫтан ундай аттарға ҡул һалыу, еккегә һәм һыбайға өйрәтеү ҡәтғи тыйыла. Был эш енәйәти яуаплылыҡ булып иҫәпләнә.

— Буденный тигәс иҫкә төштө — һинең галауный начальнигың шулдыр бит инде. Мин, например, шулайҙыр тип уйлайым, — тине Фәттәх һаҡлыҡ менән генә. — Уның менән мөнәсәбәтең нисек, былай 20-се йылда Польша фронтында беҙҙең бригадаға килеп киткән сағында Буденный иптәш бик күңелгә оҡшап ҡалғайны, үҙебеҙ һымаҡ ябай кеше күрҙем мин уны, — тип өҫтәне Фәттәх.

— Шулай, шулай. Бик строгий ҙа, ҡыҙыу ҙа, ләкин ғәҙел кеше. Уның менән бергә килешеп, хеҙмәт итергә була, ләкин унан башҡалары ла етерлек бит әле Генеральный штабта. Юҡҡа-барға бәйләнеп, ошаҡ йөрөтөүсе начальниктар ҙа байтаҡ ҡына. Был һүҙҙәрҙән һуң уның ҡарағусҡыл, мөһәбәт битенә ниндәйҙер уйсанлыҡ шәүләләре ятҡан кеүек тойолдо. Кинәт моңһоулыҡ шәүләһе һирпелгән йөҙөн ситкә бороп, ул оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙы.

— Партия ойошмаһы[1] менән бер ҙә борсаҡ бешмәй. Теләһә нигә бәйҙәнеп, һулыу һайын эшкә ҡыҫылып, теңкәгә тейәләр. Минең характерҙың ниндәй икәнен һиңә һөйҙәп тораһы юҡ, ҡырын-мырын һөйҙәү, түрә-ҡараға тәрилкә тота торған ғәҙәт миндә юҡ, ундай әҙәмде мин үҙем енем һымаҡ күрәм. Туп-тура, сәсрәтә әйтеп ташталына ҡайһы ваҡыт. Бына шуға күрә лә, ҡайһы ваҡыт, һүҙгә килеп киткән саҡтар булғылай. Башҡорт холҡон генеральный штаб ҡына төҙәтә алмай инде ул. Бына яңыраҡ ҡына фирҡә линияһы менән шелтә лә иғлан итеп ҡуйҙылар әле, — тип моңайҙы.

— Да, да. Армияла ундай ҙур вазифа башҡарыуы билдәле бик еңелдән түгелдер. Беләм, беләм, — тип һуҙҙы Фәттәх. Уның «беләм, беләм»е, килгән ҡунағының холҡона ҡарата әйтелгән йәки ни өсөн шелтә иғлан итеүҙең сәбәбенә ҡайтып ҡалған һүҙ булдымы, Муса Лутович бының мәғәнәһен төшөнә алманы.

Йыйылған бала-саға бик йәһәт кенә таралып китергә ашыҡманы. Улар этешә-төртөшә ихатала торған еңел машинаны әнәһенән-ебенә тиклем, тикшереп сыҡтылар.

— Бының туғынына беркетелгән тырнаҡтары ағастан юнып эшләнгән икән, тине кемдер.

— Ысынлап та, был ни идара кырандасыныҡы һымаҡ та баһа!

— Ә мин уны ҡорос тимер сыбыҡтан эшләнгәнме тиһәм селектән икән, мынағайыш.

---

[1]Партия ойошмаһы секретары II рангылағы командарм Тюленев И. В. Мортазин өҫтөнән персональ эш йөрөтөп, шелтә иғлан итеүгә өлгәшә.

— Ә ултырғыстарын ҡарағыз, эйәр өҫтөндәге кеүек күн яҫтыҡта һалып сығҡандар, рүленең дүңгәләге ла ағастан ҡоршап эшләнгән.

— Күрәһең, муйыл ағасын йылытып бөккәндәрҙер, тиеште еңел машинаны төрлө яғынан һырып алған ауыл малайҙары. Кемдеңдер йығылған тар ауыҙлы көршәк шикелле борғоға баҫыуы булды, машина әллә ниндәй ят тауыш сығарып тамаҡ төбө менән ҡысҡырып ҡуйҙы. Ҡыйлыҡта сүпләнеп йөрөгән тауыҡтар ҡурҡышынан ҡытҡылдашып төрлө яҡҡа таралды. Тәлғәттәрҙең малайҙарға ялағайланып тамаша ҡылып ҡарап торған йөнтәҫ алабайы арты менән сигенә-сигенә уҙ ояһына инеп китте. Машина сигналына йүгереп килеп сыҡҡан шофер, ҡабарынып малайҙарға ташланды, ләкин көнө-төнө Ҡолбаҡты ауылы аша Магнитогорскиға геүләп үтеп торған йөк машиналарына күнегеп бөткән ҡыян малайҙар ситтән килгән шофер ҡапағына ғына артыҡ ыжлап барманы.

— Ах, вы окаянные. Был һеҙгә таратайка түгел, ә ҡатмарлы техника, тип машина йөрөтөүсе бер урында өйөлөп торған малайҙарға бармаҡ янауҙан уҙҙыра алманы.

— Уның ҡатмарлы техника икәнен беҙ ҙә бик яҡшы аңлайбыҙ, — тип ебәрҙе Абдрахман. Үҙ атаһының элекке командиры булғанғамы ул үҙен барыбыҙға ҡарағанда ла иркенерок тотто. Тиҙҙән беҙҙең дүрт күҙ менән көткән Тәлғәтебеҙ сыҡты. Ул башҡаларға ҡарағанда үҙ өҫтөнлөгөн белдерергә теләгәндәй, ҡыҙара бүрткән битен һөртөп:

— Беҙ бишбармаҡ ашаныҡ. Атайым менән Муса ағай әҙерәк араҡы ла эстеләр, — тигән хәбәр һалды. Шундай ҙур командир эргәһендә ултырып, уның менән ҡуша бишбармаҡ ашаған Тәлғәт дуҫыбыҙ беҙҙең күҙебеҙгә үҙе командир ише күренде. — Сәй эстеләр ҙә кейенеп яталар, хәҙер атайым уны сәп атышырға алып бара, — тигән тағы ла бер яңылыҡ еткерҙе Тәлғәт.

Аш мәжлесе тамамланғас, өйҙә ошондай ҡыҫҡа ғына һөйләшеү булып алды.

— Муса Лутович, беҙ Аҫия еңгәң белән һине бөгөн беҙҙә ҡунып алырһың, тип уйҙайбыҙ. Әгәр рөхсәт итһәң бындағы хеҙмәттәштәреңде лә ҡаҡырып алырға ниәт итеп торабыҙ, тип урындыҡ өҫтөндә башы менән түшәм терәп торған командирына төбәлде.

— Юҡ, юҡ, Фәттәх Әҙелмурзинич һыйығыҙға рәхмәт, биғәйбә. Хуш хәйерҙе бәрәкәт бирһен, бер ҙә форсатым юҡ. Икенсе берәр ваҡыт иркенләп килеп, ашыҡмай ҡунаҡ булып, туйғансы әңгәмәләшеп ултырырбыҙ. Хеҙмәттәштәргә минән сәләм тапшыр. Ҡабаланам, бик ҡыҫҡа мөҙҙәткә сыҡҡанмын, — тип өтәләнде Мортазин, һике йөҙлөгөндә

ултырып, аяғына итектәрен кейеп, яурыны аша шығырлап торған артмаҡ-тартмаҡ ҡайыштарын тағып алғас, ул ҡапыл хужаға боролдо ла:

— Фәттәх ағай, әгәр ваҡытың булһа, давай бер ҡандарҙы яҙып, атышып алайыҡ, — тине. Уның был тәҡдиме өй хужаларын бер аҙ ғәжәпләндергәндәй тойолдо. Уның алдында тирелеп китеп торған хужаларҙың йөҙөндә икеләнеү билдәләре төҫмөрләнгәндәй тойолдо.

— Муса Лутович, нисек, ҡырға сығып атышабыҙмы?

— Әстәғәфирулла, атышабыҙ, тип берәр кеше-мешегә, эт-ҡошҡа тигеҙеп ҡуймағыҙ, бер бәләгә юлығып йөрөрһөгөҙ, алла һаҡтаһын, — тип хафаланды хужабикә.

— Юҡ, еңгә, борсолмағыҙ. Беҙ, Фәттәх ағай менән, ташҡоймаға сәп йәбештереп, шуға ғына атасаҡбыҙ. Ризамы, Фәттәх ағай, тип һораны ҡунаҡ.

— Кәнишнә, кәнишнә. Тик бына ҡайһы урында эштәйбеҙ, тип кенә уйҙап торам. Беҙҙең Ҡолбаҡтыла ни өй һайын тигәндәй таш ҡойма. Әйҙә сығып, бына минең күршеләге ҡойманы ҡарайбыҙ, оҡшатһаң — шунда атышабыҙ, тине хужа.

Баһадир кәүҙәле, киң күкрәкле ике командир сығып болдорға баҫтылар. Ауылда мыҡтыға һаналған Фәттәхтән уның элекке командиры бер башҡа бейек ине. Фотоға төшөргә йыйынған кешеләр кеүек тамаша ҡылып текләп торған малайҙар алдында улар өҫ-башын төҙәтте. Күкрәктәренә тағылған ордендары ҡояш яҡтыһына мансылып, нур сәскәндәй ялтлап китте. Ихатала малайҙар уратып алған шоферына Муса:

— Сәптәрҙе ал да, беҙҙең арттан, — тигән әмер бирҙе.

— Есть. Хәҙер үк, тип уның йөрөтөүсеһе аҡ ҡағыҙға дүңгәләктәр төшөрөлгән төргәк сығарып, командиры артынан йүнәлде.

Фәттәх ҡарт менән йәнәш эре-эре аҙымдар менән атлап китеп барған Муса Мортазин үҙ арттарынан бер төркөм малай эйәреп алғанын күреп, кинәт туҡтаны ла артына ҡараны. Тәлгәтте юл башлатып эйәреп барған малайҙар ҙа бер урында шып ҡатып ҡалды. Яртылаш боролған көйөнсә үҙенең һоро күҙҙәренән алсаҡ нурҙар сәсеп, үҙ һүҙенә ярым етдилек, ярым шаянлыҡ биҙәктәре өҫтәгәндәй, Фәттәхтән:

— Был һинең бер туп ауылдаш һәүректәрең ҡайҙа бара?— тип һораны Муса.

— Тамаша ҡарарға. Уларға ҡыҙыҡ бит. Әйҙә күрһендәр, командирҙың нисек атҡанын ҡараһындар, — тине Фәттәх тыныс ҡына. Муса Мортазин түңәрәк тулы битенә из-

гелек һыҙаттары йүгертеп, ялан аяҡлы ауыл малайҙарына баштан аяҡ күҙ ҡарашын һирпте лә:

— Тик утлы һыҙыҡҡа аслан да яҡын килеү юҡ. Мин ҡайҙа ҡушһам, шунда тик торһағыҙ ғына бараһығыҙ, ризамы,— тип көлөмһөрәне. Уның йоҡа ирендәрендә һиҙемләнгән йылмайыу билдәһе оҫта итеп сиртелгән ҡара мыйығы араһында юғалып ҡалғандай төҫмөрләнде. Бәлки ул ошо минутта ҡая-таштар, йәшел урманға һыйынған Көсөк ауылында үткәргән бик тә таныш, күңел түрендә һаҡлаған үҙенең малай сағын хәтерләгәндер. Алдан юл башлаған Фәттәх үҙҙәренән өй ашаһындағы мәктәптең таш ҡоймалар менән уратылған иркен ихатаһына инеп китте. Бер стенаһы Ҡыҙыл йылғаһы яғына ҡарап торған таш келәт янына туҡтап, нишләптер биш былтыр һалынған келәттең ныҡлығын тикшереп, уның стенаһына усы менән тапылдатып һуғып ҡуйҙы.

— Муса Лутович, ошонан да уңайлыраҡ урын булмаҫ. Мынау ата торған яғы тотош ҫтена. Кеше йөрөмәй. Бына мында сәпте ҡаҙап ҡуябыҙ ҙа, әйҙә ат та ат. Тыныҫ, аулаҡ урын, — тине Фәттәх.

— Бик яҡшы, мин риза. Давай сисенәбеҙ ҙә атырға керешәбеҙ, — тине ҡунаҡ.

— Белмәйем, белмәйем Муса Лутович, бик күптән ҡоралға тотонған юҡ, атыуҙың тәртип-ҡағиҙәләрен дә онотоп бөтөлөнгән, ҡул ҡалтырамаҡсы итә әле, — тип Фәттәх нишләптер уңайһыҙланған кеше һымаҡ ике усын ыуалап алды.

— Ярай, ярай. Ярыш түгел дә инде. Туры атыңды оттормайһың бит, — тип мәрәкәләне Муса.

— Шулай ҙа... — тине лә Фәттәх бер яҡ ситтә һөрлөгөшөп торған малайҙар яғына эйәк атты. «Әй, Фәттәх апаның тик түшенә орден тағып йөрөүе генә икән, ашъяулыҡтай сәпкә лә тигеҙә алманы», тип иртәгә үк ауылға таратасаҡтар. Быныһын хужа Мусаның ҡолағына ғына шыбырланы. «Төшөндөм» тигән ишара яһап, Муса тигеҙ тештәрен йылтыратып, шым ғына көлөп ҡуйҙы. Тышҡы кейемдәрен күршенең ситән баҡанаһына элеп, ике командир атырға әҙерләнде. Тәлғәт аша килгән командирҙың исемен белә һалып алған малайҙар башындағы: «Муса ағай ҡылысын ҡайҙа ҡуйыр икән?» — тигән һорауҙы белгән шикелле Мортазин башта партупеяһы менән ҡуша ҡылысын ялтыратып элеп ҡуйҙы. Кобураһын асып сем-ҡара пистолетын сығарҙы.

— Сәпте бына ошонда ныҡыт. Бына ошо урынға, — тип Муса таш стенаға ҡулы менән төртөп ҡуйҙы. Шофер төрөлгән ҡағыҙ киҫәген тағатып, малайҙар ярҙамында уны

таш стенаға беркетте. Ул ҡағыҙ уртаһында бер-бсреһенән ҙурыраҡ ун дүңгәләк төшөрөлгән ине. Тоноҡ һыуға таш ташлағандан һуң барлыҡҡа килгән түңәрәктәрҙе хәтерләтә ине был ташҡа баҫҡан ҡағыҙҙағы рәсем.

— Ә хәҙер инде һеҙ, Әлмөхәмәт егеттәре, барығыҙ ҙа бына ошо һыҙыҡ артына, — тип команда бирҙе Муса Мортазин үҙ аҙымы менән егерме биш аҙым атлап туҡтағас. Ҡулына тотҡан таяҡ осо менән арҡыры һыҙыҡ һыҙып ҡуйҙы. Яҫы усында юғалып ҡалған пистолеттың затворын шаҡылдатып, артҡа тартты. Пистолет тотҡан уң ҡулын өҫкә күтәреп:

— Командир пешего дивизиона Ибрагимов вызывается на огневой рубеж, — тип команда бирҙе. Уның ҡаршыһында ҡулын бөйөрөнә таянып, моңайып торған Фәттәх ҡарт:

— Һин, әйҙә, үҙең башлап атып күрһәт. Мин хәҙергә сабыр итәм, тине.

— Ярай, ярай. Мин риза, тине лә Мортазин пистолетлы ҡулын өҫкә күтәргән көйөнсә уң аяғы менән һыҙыҡҡа баҫты. Атырҙан алда үҙенә-үҙе үрҙә әйтелгән команданы ҡабатланы. Кинәт уның мөһәбәт кәүҙәһе һәйкәл кеүек турайҙы. Киң күкрәген тултырып тын алды ла ул ирендәрен түңәрәкләп һауаһын тышҡа өрҙө. Беҙ, унан дүрт-биш метр арттараҡ торған малайҙар, барыбыҙ ҙа бармаҡ менән ҡолаҡтарыбыҙҙы тыҡтыҡ. Иҙән аҫтынан ишетелгән кеүек өс тапҡыр һаңғырау ғына атыу тауышы яңғыраны. Уның алға һуҙылған ҡулында ғына түгел, етдилек солғап алған битендә лә бер ниндәй борсолоу тойолманы. Ул пистолет көбәген ергә йүнәлтеп:

— Муса Мортазин беренсе күнекмәне бөтөрҙө, — тип кемгәлер доклад биргән шикелле әйтеп ҡуйҙы. Йә, малайҙар, йүгерегеҙ әле, ағайығыҙ нисегерәк атҡан икән, тип ул беҙгә боролдо. Беҙ кем уҙарҙан сәпкә йүгерҙек. Барыбыҙ ҙа берҙәй тигәндәй:

— Муса ағай, ике пуля унлыҡ эсендә, ә өсөнсөһө ун менән туғыҙ араһындағы һыҙыҡҡа тейгән, — тип ҡысҡырҙыҡ.

— Плохо. Кучности не хватает,—тине Муса ағай. Ул арала ерҙә ялтырап ятҡан өс буш гильзаны Тәлғәт кеҫәһенә тығып та өлгөрҙө. Инде сират Фәттәх апаға етте. Уның борсолғаны, ҡулының еңелсә генә дерелдәүе бөтә йөҙөнә, кәйеф ҡиәфәтенә сыҡҡайны. Инде беҙ ҙә уның атыуын ҡолаҡтарҙы тыҡмай ғына ҡарарға булдыҡ. Кинәт, ҡоро сытыр һынған кеүек, өс тапҡыр атыу тауышы ишетелде. Байтаҡ ҡына ҡаушап өлгөргән Фәттәх ҡарт бөрсөк-бөрсөк

булып сыҡҡан маңлай ̆ тирҙәрен һөрттө. Беҙ тағы ла сәпкә йүгерҙек.

— Атай, бер пуля түңәрәк ситенә аҡ ҡағыҙға тейгән. Ә икенсеһе бергә, өсөнсөһө ике һыҙығы эсендә, — тип ҡысҡырҙы Тәлғәт атаһына.

— Ярай, ярай. Беренсе атыу өсөн насар түгел, Фәттәх Әҙелмурзиевич, — тип Муса үҙ командирын дәртләндерергә тырышты.

Хәҙер инде атыш яңынан башланды. Улар атты, ә беҙ пуля тейгән һәр тишекте ҡәләм менән уратып, һанап барҙыҡ. Илле бишкә ҡараған һигеҙ бала атаһы Фәттәх ҡарттың йөҙөнә генә түгел, бөтә ҡиәфәтенә атыу сәме йүгерҙе. Бәлки ошо минутта уның байтаҡ сыуалыштарҙы кисергән башынан «Микулай батша тәхете» өсөн япон самурайҙары менән йөҙгә-йөҙ бәрелешеп һуғышҡан, ошо үҙ ҡаршыһында торған ҡурҡыу белмәҫ командиры етәкселегендә йәш Совет республикаһын яҡлап, Польша пандары менән иңгә-иң килеп яғалашыу ваҡиғалары үтеп киткәндер. Уның барлыҡ бөтмөшөн атышыу дәрте солғап алғайны.

— Әйҙә, командир, атыша бирәйек әле. Былай результат та яман түгел шикелле, — тине хужа, — эскә дәрт бөркөп торған сырайын Мусаға бағып:

— Яҡшы, яҡшы. Әйттем бит, элек атышып өйрәнгән кешенең атыу күнекмәләре тиҙ иҫенә төшә ул. Йәш саҡта өйрәнгән шөғөл онотоламы ни? — тип Муса Мортазин үҙ командирын дәртләндерҙе.

Хәҙер инде ысынлап та ярыша-ярыша атышыу башланды. Буш гильзаларҙы инде Тәлғәт кенә түгел, барыбыҙ ҙа йыйырға тотондоҡ. Өҙлөкһөҙ атыу тауышына яҡын тирәнән сомтор урамдың олораҡ кешеләре лә йыйылды. Бер ике олораҡ кеше, күрәһең, Муса Мортазинды күҙ күреп таныусылар булһа кәрәк, «Һаумы, Мортазин ҡусты», — тип күрешеп тә өлгөрҙө. Ситәнгә һөйәлеп, атыш күҙәткән ауыл кешеләре ишәйгәндән-ишәйҙе. Улар араһынан кемдер:

— Элгәрерәк, беҙ бала саҡта Сағыл итәгендә уҡ атышҡанда ла ошо рәүешле халыҡ йыйылып, ҡеүәт биреп тора торғайныҡ, — тип ҡуйҙы.

— Ул замандар үтте инде хәҙер. Күрҙеңме, ус аяһына ғына һыйып торған леворвер ниндәй яман тауыш сығара.

— Техника заманы хәҙер, уҡ атышыу бөттө. Мәктәп балдарын да мылтыҡтан атырға өйрәтә хәҙер хөкүмәт.

— Әҙәмде бала сағынан һуғышҡа әҙерҙәй, — тиеште халыҡ.

— Анау мыҡты командир бик таһыллы ата. Атҡан һайын унлыҡҡа бәреп тик тора.

— Ай-һай бик мәргән кеше икән. Торошон ҡара һин уның.

— Әйттең хәбәр. Уның бөтә кәсебе шул. Шундай зур командир булып сәпкә лә тигезә алмаһа ундай командирҙы хөкүмәт ни өсөн ашатып, бушҡа аҡса түләп ятҡырырға тейеш.

— Беҙҙең Фәттәх ағай ҙа бик бирешеп бармай, ҡарт булһа ла ҡулы ныҡ икән.

Был олораҡ кешенең әйткән һүҙе Мортазиндың ҡолағына салынып ҡалғас ул кинәт боролдо ла:

— Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Егерме биш аҙымдай сәпкә лә тигезә алмаған командирҙы ни өсөн бушҡа аҫрап ятмаға. Уның бөтә шөғөлө шул, — тип теге кешенең һүҙен раҫлап ҡуйҙы.

Галифеһенең ике кеҫәһенә ҡулын тығып ҡараны ла Мортазин: «Фәттәх ағай, патрон бөттө. Әгәр дәртең булһа тегендә легкауай машинала етерлек припас бар. Алдырайыҡ», — тип хужаға мөрәжәғәт итте.

— Юҡ етер. Былай ҙа байтаҡ алыштыҡ. Тәндәр яҙылып, башҡа әллә ниндәй уйҙар килеп китте, — тине Фәттәх маңлай тирен һөртөп. Ҡайтайыҡ, еңгәңдең ҫәйе ҡайнағандыр, тине.

— Йә, был һинең ауылдаштар, күпме гильза йыйҙылар икән. Әйҙә, күрһәтегеҙ әле, — тип Муса малайҙарға һүҙ ҡушты. Баштан алып аҙағына тиклем атыш тамашаһында ҡатнашҡан малайҙар итәктәренә, кеҫәләренә йыйған гильзаларҙы һанап, оло командир алдында хисап бирҙеләр. «Ун һигеҙ, туғыҙ гильза»... «Ай-һай байтаҡ ҡына атышып ташлағанбыҙ икән. Ә теге мишенде төрөп бына Фәттәх ағайыңа ҡалдырып кит. Ошо осрашыуҙың бер йәдкәре булыр»,— тип Мортазин шоферына бойорҙо. Төрлө-төрлө урынынан тишелеп бөткән мишенде төрөп, ҡунаҡтың шоферы был төргәкте Тәлғәткә тотторҙо.

Өҫ-башын ҡағып, кейенеп бөткәнсә улар эргәһенән китешмәй торған малайҙар янына килеп, Муса Мортазин беҙҙең һәр беребеҙ менән ҡыҙыҡһынды.

— Был ҡуңыр битте, муйыл күҙҙе ҡара малай Әшрәф Ғәлиәкбәровтың улы. Башлы, уҡыуы бик шәпте. Атаһы бик балыуан кеше, беҙҙең бригадта булды, ә быныһы — оҙон, сибек малай Нотфулла Ильясовтыҡы, ул да беҙҙең белән бергә йөрөнө. Ә быныһы инде Ибраһим Мортазин полкында йөрөгән Зәйнулла Булатовтың малайы Рәжәп, — тип Фәттәх ҡарт тулы битле йыуантаҡ малайға төртөп күрһәтте.

Ә теге ситтәрәк торған ҡара малай — уныһы минең ҡоҙа Рамаҙан тигән егет була. Уның ағаһы, беҙҙең бригад-

та, тупта хеҙмәт иткән Өмөтбаев Ибраһимдың ҡыҙына ҡолаҡештәткәнбеҙ. Әхиәр тигән улыма шуның ҡыҙын әйттерергә ниәтләгәнбеҙ, — тип Фәттәх ҡарт йыуан һуҡ бармагы менән миңә төрттө. Минең бөтә тән эҫеле-һыуыҡлы булып китте, әйтерһең дә уның миңә төбәп әйткән һүҙәре мине ҡайнар һыуға тыҡты — ябыҡ умыртҡа һөйәктәре буйлап тирҙәр ағып китте. Хужаның һүҙен диҡҡәт менән тыңлап торған Муса Мортазин беҙгә күҙҙәренән мөләйем ҡараш һирпте лә:

— Йә, уландар, кем дә кем Ҡыҙыл Армияның командирҙары булырға теләй, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ, — тип өндәште. Бындай һүҙҙе көтмәгән малайҙар бер ғауым ҡаушап ҡалды. Арабыҙҙан иң батыры Тәлғәт Ибраһимов беренсе булып: «Мин», тип ҡулын күтәрҙе. Тора-бара батырая төшкән ауыл малайҙары берәм-берәм ҡулдарыбыҙҙы өҫкә һондоҡ.

— Бына молодцы. Ҡыҙыл Армияла кем булырға теләйһегеҙ, — тигән һорауына төрлөсә яуап бирҙек. «Летчик, танкист, кавалерист»... һуңғы яуапты ишеткәс аттан яралған атаҡлы кавалеристың сырайына кинәнес сырайы йүгерҙе.

— Ай маладис. Башҡорт егеттәренә тик кавалерияға. Буденный колхозының РККА фондына тәғәйен аҫау аттарҙы кем менеп өйрәтергә, кем аттанып һуғышырға тейеш. Барығыҙ ҙа кавалерияға. Башҡорт толпарҙарына тик башҡорт егеттәре — һөйҙәштекме, — тип мөрәжәғәт итте командир.

— Һөйҙәштек, — тип беҙ ҙә берҙәй яуап ҡайтарҙыҡ.

— «Ворошиловский всадник» түңәрәге бармы ауылығыҙҙа, — тип ҡыҙыҡһынды ҡунаҡ.

— Бар. Яңыраҡ эштәй башланы.

— Етәксеһе кем?

— Күрше Мунаш ауылынан. Яңыраҡ махсус курс бөтөрөп ҡайты. Ғүмәров Шәриф тигән егет. Ғәрсә армия бөтөрмәһә лә йәштәрҙе йәлеп итеп, бик шәп эш баштап ебәрҙе, йүгән һалмаған теләһә ниндәй атыңды өс көндә бейетеп ҡуя, — тип аңлатты Фәттәх ҡарт.

Уның һөйләгәнен кинәнеп баш сайҡап тыңлап торған Муса Мортазин үҙе яңы ғына ҡабаҡ һыртынан килеп төшкән бормалы юлға уйсан ғына бер аҙ ҡарап торҙо. Унан күҙебеҙҙе алмай текләп торған малайҙарға хушлашыу минуты килеп етеү сәбәпле ҡурҡыу белмәҫ атаҡлы ҡаһарман сырайына тыуған тупрағынан айырылыу хисе, болоҡһоу шәүләһе ятҡандай тойолдо. Ихлас күңелле, алсаҡ йөҙлө ябай халыҡ араһынан күтәрелгән утлы ғәрәсәтле юлдар үткән тиңдәшһеҙ батырға әҙ генә ваҡыт эсендә өйрәнеп тә

өлгөргән ауыл малайҙарының елкенсәк күңелдәрендә ауыр, ниндәйҙер моңһоулыҡ тойғоһо солғап алғандай булды. Беҙ ҙә өнһөҙ ҡалдыҡ, һәүетемсә генә йәшәп ятҡан ауыл тормошона, малайҙарҙың ғәмһеҙ, көндәлек шөғөлөнә күк көмбәҙенән атылған йәшен шикелле бәреп ингән яҡты йондоҙҙоң нурҙары һүнгәндәй булып күренде.

Был ауыр хисте алып ташларға теләгәндәй үҙенең уйсан йөҙөнә яһалма күңеллелек тойғолары һирпеп, Муса ағай Мортазин галифе кеҫәһенән күн аҡса һауыты сығарҙы. Шундай иҫ китерлек көслө ихтыярлы батыр кеше булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең уға тоғролоҡ хистәре тулған мөлдөрәмә күҙҙәребеҙгә ҡарарға тартынған кешеләй, ул һәр беребеҙ алдында эйелеп берәр тәңкә аҡса таратып сыҡты. Барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙең әле ыуыҙ ғына күңелебеҙ лыҡа тулыу сәбәпле илар хәлгә еттек. Беҙ бер аҙым да ҡалмай уның артынан тағы ла эйәрҙек. Улар өйгә инеп китте, беҙ ихаталағы йәшел үлән өҫтөндә тороп ҡалдыҡ. Бер аҙҙан өйҙәге бөтә кеше уны оҙатырға сыҡты. Ул барыбыҙ менән дә ҡул биреп хушлашып сыҡты.

Муса ағайҙы ҡул болғап оҙатып ҡалғас та беҙ тиҙ генә таралып китә алманыҡ. Барыбыҙ ҙа кем уҙарҙан ошо осрашыуҙан алған тәрән тәьсораттар менән уртаҡлаштыҡ, уның һәр бөртөгөн нығыраҡ күңелебеҙгә һеңдерергә тырыштыҡ. Яңынан ултырып гильзаларыбыҙҙы барлап сыҡтыҡ. Өйгә ҡайтып инеү менән был шатлыҡты атайәсәйҙәр менән уртаҡлаштыҡ. Бөгөнгөләй хәтерҙә атай ҡарт заманында ярайһы уҡ ғилем алып, күренекле генә зат булараҡ ҡиблаға ҡарап: «Был олуғ бәндәгә хоҙай оҙон ғүмер вә абруй бирһен», — тип доға ҡылды. Мин гильзаларҙы һанап, уларҙы мәктәпкә йөрөй торған фанер ҡумта төбөнә, сепрәккә төйнәп, йәшереп ҡуйҙым. Муса ағай биргән бер тәңкә аҡсаны атай мәрхүм «Уҡыу әсбаптары алырһың», тип бата ҡылып янсығына тыҡты. Бөтә малайҙар менән атыштан ҡалған буш гильзаларҙы ғүмер буйы һаҡларға, — тип вәғәҙә ҡуйыштыҡ. Бер йылдан һуң башланып киткән дәһшәтле афәт — Сталин репрессияһы төпкөл ауылдарға ла килеп етер, бөтә ил буйлай йөрөгән әжәл ҡылысы милләтебеҙ ағаларының, Мортазин ише «һыуға батмаҫ, утта янмаҫ», ҡуш йөрәкле арҙаҡлы ирҙәрҙең башын ҡыйып китер, — тип беҙ ул сакта күҙ алдына ла килтермәй инек.

Бер йыл тигәндә халҡыбыҙҙың батыр улы Муса Мортазиндың «халыҡ дошманы» мөһөрө баҫылып ҡулға алыныу хәбәре беҙҙең ауылға ла килеп етте. Бына шул ваҡытта «Мортазин гильзалары» НКВД-ның ауылға килеп ябырылыуын көнө-төнө йоҡламай көтөп ятҡан беҙҙең атай-

ҙың иҫенә килеп төштө. «Улым, ул гильзаларыңды өйҙә һаҡлап, берәр бәләгә юлығырбыҙ, башың иҫән саҡта уларҙан ҡотолоу ярауы күргән кәрәк», тине лә ҡулымдағы гильзаларҙы кеҫәһенә тығып төндә Ҡыҙыл буйына китте. Күп тә үтмәй: «Өмөтбай олатайың ултыртҡан өс тирәк төбөндәге сөмбәйгә ташланым», — тип ҡайтты атаҙ. Минең үҙемә ҡалһа, күренекле башҡорт полководецы менән күңелле осрашыуҙан ҡалған бер иҫтәлекте йөрәк түремдән йолҡоп ташлаған һымаҡ тойолдо.

Муса ағайҙың хушлашҡан саҡта ҡыҫҡан көрәктәй ҡулдарының тылсымлы йылыһын, изге күҙҙәренең мөләйем ҡарашын, күңелдәрҙә уйылып ҡалған осрашыу минуттарын ошо көнгә тиклем һүнмәҫ хәтирә итеп һаҡлайым.

Мортазин бригадаһы составында йәйәүле дивизион командиры булып үҙенең тиңдәшһеҙ батырлыҡтары өсөн Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены алып ҡайтҡан ауылдашым Ибраһимов Фәттәх — яҙмышын да ҡара һөрөмлө 1937 йыл урап үтмәне. Үҙ командирының ҡулға алыныуына 43 көн үтеүгә, йәғни 1937 йылдың 23 июлендә, ул да НКВД ҡулына эләгә. Шул йылдың 21 ноябрендә сығарылған НКВД тройкаһының ҡарары менән Ибраһимов Фәттәх атыуға хөкөм ителә. 1937 йылдың 8 декабрь таңында иртәнге 6 сәғәт 25 минутта НКВД сержанты Ковалевич тройка ҡарарын урын еренә еткерә — Фәттәх Ибраһимовтың ғүмерен өҙә. Ошо ҡот осҡос яуызлыҡты эшләгәнен дөрөҫләп протоколға үҙ имзаһын да теркәй. Ошо таңда Фәттах Ибраһимовты ғына түгел, Мортазин бригадаһы составында Польша фронтында һуғышҡан 25 ҡаһарманды сығарып аталар. Уларҙың мәйеттәрен Өфөнөң Сергеевск ҡәберлегендә дөйөм соҡорға күмәләр.

ФӘНЕБЕҘ ҠАҺАРМАНЫ

Оло талант эйәһенең ижади эшмәкәрлеге, тынғыһыҙ һәм туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәре утыҙынсы йылдарға тура килә. Был осор республикабыҙ фәненә һәм мәҙәниәтенә бик күп йәш милли таланттар килгән ялҡынлы бер яҡты дәүер ине. Халыҡ интеллигенцияһының көслө ташҡыны йөмһүриәтебеҙҙең алыҫ төбәктәренән, ауылдарҙан, атап әйткәндә, элекке Арғаяш кантонынан урғылып сыҡты.

Бөгөн уларҙың исемдәрен оло хөрмәт менән иҫкә алыуҙы үҙемдең кешелек бурысым тип һананым. Бына уларҙың бер нисәһе генә: республика юстиция министры, 1919 йылдан элекке КПСС ағзаһы Сибәғәт Әүзәнов, КПСС

Өлкә Комитеты секретары Рамазан Ҡузыев, ВЛКСМ Үҙәк Комитеты секретары Шәрифә Тимерғәлина, «Башҡортостан» гәзите мөхәррире Ғәли Зөлҡәрнәйев, медицина фәндәре докторы, профессор Зәйнулла Ихсанов, күренекле композитор Халик Заимов, киң танылған шағирҙарҙаи Ғәлимов Сәләм, Мөхәмәтйәров Хәй, Ҡадир Даян, Кәтибә Кинйәбулатова, СССР Верховный Советы депутаты Лоҡман Ғәлимов, Башҡортостан Республикаһы фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Дамир Вәлиев һәм башҡалар.

Ошо абруйлы шәхестәр араһында Ҡадир Рәхим улы айырым урын биләй, фәнебеҙ көмбәҙендә таҡ сулпаны һымаҡ балҡып тора. Ул үҙенең икһеҙ-сикһеҙ талантын, һүнмәҫ-һүрелмәҫлек илһамын Башҡортостандың ер аҫты хазинаһын байҡауға, нефть ятҡылыҡтарын эҙләүгә һәм асыуға, уларҙы үҙләштереү ысулдарын табыуға арнаны. Уның фәнни ҡаҙаныштары бөтә ил күләмендә киң танылыу яуланы. Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәренең данлы исеме бөтә донъяға билдәле атаҡлы ғалимдарҙан дәүләт премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР фәндәр академияһының Себер бүлексәһе вице-президенты Андрей Трофимук, Ленин премияһы лауреаты, СССР фәндәр академияһы геология, геофизика һәм геохимия бүлексәһенең академия сәркәтибе Борис Соколов һәм башҡа шундай ғалимдар менән йәнәш ҡуйылды.

Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин 1913 йылдың 5 февралендә элекке Әмин волосының Сабаҡлыкүл ауылында тыуа. Уның ата-әсәһе — Рәхимйән ағай менән Рәҡиә апай әллә ни мул тормошта йәшәмәй. Уларҙың бар байлыгы, балалары була. Кинйәләре Ҡадир ғаиләлә һигеҙенсе бала булып донъяға килә.

Ул заманда ундай ғаиләләрҙә бала бәләкәйҙән үк хеҙмәт тәмен татыусан була. 1921 йылғы ҡот осҡос аслыҡ был ғаиләне лә ситләп үтмәй. Туғыҙ йәшлек Ҡадирҙы көтөүселеккә, унан һуң ауыл байына ялсылыҡҡа бирергә мәжбүр булалар.

Ләкин сапсан, үтә зирәк Ҡадир көн һайын уҡырға йөрөргә лә форсат, ваҡыт таба. Ә ул башланғыс мәктәп Сабаҡлыкүлдән биш саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күрше ауылда була.

Шул осорҙо бөгөнгө менән сағыштырһаң, иҫ-аҡылдар китә: туғыҙ-ун йәшлек быуынһыҙ ҙ̈йән-ейәнсәрҙәрен «мәрхәмәтле» олатай-өләсәйҙәре мәктәпкә етәкләп алып барып ҡайталар. Ҡадир үҙ икмәген үҙе эшләп таба, хәләл көсө менән белем ала.

Ҡ. Р. Тимергазин

Башланғыс мәктәпте мактау грамотаһы менән тамамлағандан һуң, Ҡадир Тимерғазин, ата-әсәләренән йәшереп, Арғаяш мәктәп-интернатына уҡырға инә. «Лицей» тип йөрөтөлгән был мәктәптән заманында башҡорт зыялыларының күренекле вәкилдәре сыға.

1930 йылда уҡыуҙы уңышлы тамамлағас, уны Өфөгә рабфакка ебәрәләр. Белемгә сарсаған, йәмәғәт эштәрендә ихлас ҡатнашҡан комсомолец Ҡадир Тимерғазин шул йылда уҡ Ҡазан университетына инә. Әммә үл үҙе бәләкәйҙән теләгән геология бүлексәһенә түгел, ә малсылыҡ бүлексәһенә эләгә.

Ләкин ныҡыш егет үҙ һүҙен һүҙ итә: уны геология факультетына күсерәләр.

Ниһәйәт, тәүге уҡыу йылында тәүге еңеү яулана. Беренсе курсты ул уҡыу ударнигы булып тамамлай һәм В. И. Ленин әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы менән бүләкләнә.

Артабан ул минералогия һәм мәгдән ятҡылыҡтарын өйрәнеү буйынса махсуслаша. Диплом эшен дә ошо темаға яҙа. Ул иң яҡшы ғилми хеҙмәт тип табыла һәм матбуғатта баҫып сығарырға тәҡдим ителә.

Арғаяш егете Ҡадир Тимерғазин Ҡазан университетын отличие менән тамамлай, уға Почет грамотаһы, аҡсалата премия бирәләр.

Геология факультеты деканы, танылған ғалим Л. М. Миропольский үҙенең һәләтле шәкертенә бынамын тигән характеристика яҙа һәм уны, имтихан биреп тормайынса, аспирантураға тәҡдим итә. Ҡ. Тимерғазинға бирелгән баһала шундай юлдарҙы тулҡынланып уҡыйһың: «1935 йылда университет тамамлаусылар араһында Тимерғазин иптәш үҙенең һәләте, зирәклеге һәм минералогияны өйрәнеүгә ихласлығы менән башҡаларҙан айырылып тора...» Ләкин уға аспирантурала ҡалырға яҙмаған булып сыға. Башҡортостанда нефть промышленносы күкрәп үҫкән заманда был тармаҡты юғары квалификациялы, физәкәр белгестәр менән нығытыу талап ителә. Тимерғазинды Өфөлә яңы ойоштороған ғилми-тикшеренеү лаборатория-

һына эшкә сақыралар. Бында уның, арыу-талыу белмәҫ тикшеренеүсенең һәм яҡшы әҙерлекле белгестең, күп яҡлы һәләтлектәре тағы тулыраҡ, тағы тәрәнерәк асыла.

Башта ул бында эксперименталь-промысла геологияһы геологы булып эшләй, һуңынан ҡыйыу фекерле йәш белгесте петрография кабинетына күсерәләр. Унда ул Көньяҡ Уралдың Нөгөш төбәгендә төҫлө металл ятҡылыҡтарын өйрәнеү эштәре менән шөғөлләнә.

Йәш белгестең фиҙәкәр хеҙмәте, тәрән белеме, фекер ҡыйыулығы, яңы асыштары етәкселек иғтибарынан ситтә ҡалмай. Уны геология кабинеты етәксеһе итеп үрләтәләр. Яңы урында ла ул тик үҙенә генә хас ныҡышмалылыҡ, сапсанлыҡ-сослоҡ менән эшкә тотона. Үҙенең бар белемен, һәләтен Башҡортостанда таш күмер һәм девон нефте ятҡылыҡтарын өйрәнеүгә йүнәлтә. Тикшеренеү эшенә йәне-тәне менән бирелә. Туймазы промыслаларында айҙар буйы ҡайтмай «ҡаҙына». Был төбәктең тектоник схемаһын төҙөй. Был уға Туймазы тирәһенең ер аҫты ҡатламдарына дөрөҫ баһа бирергә һәм нефть ятҡылығының киләсәген аныҡ билдәләргә мөмкинлек бирә.

1939 йылда уҡ әле ул беренселәрҙән булып, Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә иҫ киткес бай девон нефте ятҡылыҡтары бар, тигән һығымта яһай.

1957 йылда Собханғол, һуңынанараҡ башҡа нефть ятҡылыҡтары асылғас, Ҡадир Тимерғазин һығымталарының дөрөҫлөгө тағы ла бер тапҡыр раҫлана.

Девон нефтен башлап асыусыларҙың береһе булараҡ, Ҡ. Тимерғазин байтаҡ мәҡәләләр, ғилми хеҙмәттәр баҫтырып сығара. Туймазы төбәгендә, кисекмәҫтән, быраулау эштәре башлау мәсьәләһен күтәрә. Уның В. В. Трофимук менән бергәләп яҙған «Башҡортостан ер аҫты ҡатламдарында нефть ятҡылыҡтарының яңы мәғлүмәттәре» тигән мәҡәләһе лә («Красная Башкирия.» 1940 йыл, 3 июнь) ошо үтә мөһим, киҫкен мәсьәләгә бағышлана. Унда ике ғалим Туймазы төбәгендәге 142-се разведкалау скважинаһын тәрәнәйтеүҙе талап итә. Был девон ятҡылыҡтарын асыу өсөн кәрәк, тиҙәр улар.

Ләкин был эш дүрт йыл үткәс, 1944 йылдың сентябрендә генә башҡарыла. Туймазы ятҡылығында юғары сифатлы девон нефтенең ҡеүәтле фонтаны урғыла.

Был асыш Башҡортостанда нефть промышленносы үҫешенең яңы осорон башлай һәм уны нефть табыу буйынса беренсе урынға сығара. Ә үҙенең сағыу талантын практикала иҫбат иткән Ҡ. Р. Тимерғазин девон нефтен башлап асыусылар сафына баҫа.

Бөйөк Ватан һуғышы уны ғилми эшмәкәрлегенән оҙаҡ-ҡа айыра. Дөрөҫ, башҡа хеҙмәттәштәре һымаҡ, Ҡадир Рәхим улы ла бронь арҡаһында һуғышҡа китмәйенсә, ғилми эшен дауам итә алыр ине. Ләкии ялҡынлы ватан-сы, коммунист Тимерғазин һуғыштың тәүге көндәренән үк Тыуған илебеҙҙе һаҡлаусылар сафына баҫа. Башта артил-леристар взводы командиры була. Һуңынан, хәрби-юридик академияның тиҙләтелгән программаһын бөтөргәс, хәрби тәфтишсе була. Беренсе Белоруссия фронтында ул Бело-руссияны, Балтик буйын, Польшаны азат итеүҙә, Берлин-ды штурмлауҙа ҡатнаша.

Бер нисә боевой орден менән бүләкләнгән ҡыйыу яугир, капитан Ҡадир Тимерғазинға юғары хәрби вазифа тәҡ-дим итәләр. Ләкин хәрби юрист «нефть зәхмәтенән» ҡо-тола алмай, күңелен тыуған төйәге Башҡортостан киңлек-тәре тарта, яратҡан геологияһы елкендерә.

СССР Нефть промышленносы министры юллауы бу-йынса, ул 1946 йылдың июнендә армиянан ҡайта. Өфөлә уны «Башнефть» берекмәһенең Үҙәк ғилми институты ла-бораторияһы директоры итеп ҡуялар.

Башҡортостандың нефть промышленносын киң һәм тә-рән фәнни нигеҙҙә артабан үҫтереү, яңы ятҡылыҡтар асыу, уларҙы дөрөҫ файҙаланыу өсөн эре ғилми үҙәк булдырыу кәрәк ине. Был эш Ҡадир Рәхим улы Тимерғазинға йөк-мәтелә.

1947 йылдың башында СССР Министрҙар Советы ҡа-рары менән Өфө ғилми-тикшеренеү институты төҙөлә. Уның тәүге директоры итеп Ҡ. Тимерғазин тәғәйенләнә.

Ләкин мәшәкәтле ойоштороу-административ эш оло ға-лимды ҡәнәғәтләндермәй, ул уны ғилми ижадтан айыра, һәм ул үҙенең үтенесе буйынса 1947 йылдың майында литология һәм геохимия лабораторияһы мөдире булып күсә. Ә 1950 йылдың апреленән 1951 йылдың июленә тик-лем Өфө ғилми-тикшеренеү институтының геология бү-леге начальнигы булып эшләй. Ул етәкселек иткән коллек-тив республикабыҙҙа нефть байлығын эҙләү һәм арттырыу буйынса ғәйәт ҙур эш башҡара.

Ошо осорҙа Ҡадир Рәхим улы һуғыш өҙөп торған диссертацияһы өҫтөндә лә ныҡышмалы эшләй, һәм Ҡазан университетын тамамлауына ун дүрт йыл үткәс, 1949 йыл-дың 23 июнендә шул уҡ университеттың геология факуль-теты ғилми советы һәм профессор М. Л. Миропольский ҡарамағына диссертацияһын тапшыра.

Бына бит донъя ҡайһылайыраҡ ҡыҙыҡ ҡоролған. За-манында бит шул уҡ ғалим, шул уҡ иң яҡшы шәкертенә аспирантураға инергә фатиха биргәйне.

«Баулы — Туймазы төбәгендә девон ятҡылыҡтары» тигән диссертацияһын, бөтәһен дә һоҡландырып, уңышлы яҡлай. Уға бер тауыштан геология-минералогия фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә бирелә. Ҡыуаныслы был ваҡиға айҡанлы танылған ғалим Л. А. Трофимук былай тип яҙа: «БыныҢ һымаҡ ғилми хеҙмәттеҢ Башҡортостанда ғына түгел, Волга — Урал биләмәһенеҢ бүтән төбәктәрендә булғаны ла, яҙылғаны ла юҡ ине».

1951 йылдың йәйендә СССР Министрҙар Советы Өфөлә СССР фәндәр академияһының Башҡортостан филиалын асыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Филиалдың тау-геология институтын булдырыу өсөн йөмһүриәтебеҙҙә Ҡадир Рәхим улынан да лайыҡлыраҡ кандидатура табыу мөмкин түгел ине. Һәм ул, бөтә көсөн һалып, ошо институтты ойошторорға тотона. УныҢ саҡырыуы буйынса институтҡа башҡа ғилми үҙәктәрҙән дә күренекле ғалимдар килә. Улар араһында профессор Г. П. Вахрушев, А. И. Олли һәм башҡалар бар ине.

Институтта ойошторов эшмәкәрлеге менән бер рәттән ул бөтә Башҡортостан биләмәләрендә девон нефте ятҡылыҡтарын, уларҙыҢ мөмкинлеген һәм киләсәген баҙҡау буйынса ҙур ғилми-практик эш йәйелдерә. Ер аҫты хазиналары белгесен һәм «күрәҙәсеһен» иҢ элек нефть запасыныҢ күләме ҡыҙыҡһындыра.

1953 йылда, институт тулы ҡеүәтендә эшләй башлағас, тәғәйен белгестәр менән тәьмин ителгәс, Ҡадир Рәхим улы СССР фәндәр академияһының нефть институты докторантураһына инә. Унда уға белемен тәрәнәйтеү, киңәйтеү, күҙәтеү эҙләнеүҙәрен дөйөмләштереү, дөрөҫ һығымталар яһау өсөн тағы ҙурыраҡ мөмкинлектәр тыуа.

1958 йылда Ҡ. Р. Тимерғазин «Көнбайыш Башҡортостанда девонға саҡлымғы ятҡылыҡтар һәм уларҙыҢ перспективалары» тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлай.

Тиҙҙән уныҢ монографияһы донъя күрә һәм бик күп белгестәргә фәһем һәм мәғлүмәт биреүсе һабаҡ китабына әүерелә.

Шулай итеп, Ҡадир Тимерғазин башҡорттар араһынан беренсе геология-минералогия фәндәре докторы була. Килер быуындарға ул ер аҫты байлыҡтарын эҙләү, табыу һәм файҙаланыу буйынса баһалап бөткөһөҙ ғилми мираҫ ҡалдырҙы. Тик уны ентекләп, берәмтекләп өйрәнергә һәм тормошта ҡуллана белергә, шулай уҡ бөтә хеҙмәттәрен бергә туплап, донъяға сығарырға кәрәк.

Оло ғалимыбыҙҙың оло хеҙмәте хөкүмәтебеҙ тарафынан юғары баһаланды. Боевой ордендары менән йәнәш

уның күкрәген ике Почет Билдәһе ордены һәм миҙалдар биҙәне. 1957 йылда «РСФСР-ҙың атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре» тигән мактаулы исем бирелде.

Ҡадир Рәхим улын ололап һәм тәрән ышаныс белдереп, йөмһүриәтебеҙ хеҙмәтсәндәре уны Башҡортостан Юғары Советы депутаты итеп һайланы. Шулай уҡ ул республикабыҙ Юғары Советы Рәйесе лә булып һайланды.

Ә 1963 йылда ул Рәсәй Федерацияһы Юғары Советы депутаты булды. Ләкин, оло үкенесебеҙгә ҡаршы, уға шундай ҙур вазифаны башҡарырға насип булманы. Ваҡытһыҙ һәм рәхимһеҙ әжәл уның гүзәл ғүмерен өҙҙө.

Ул 1963 йылдың 4 апрелендә илле генә йәшендә, ижады күкрәп сәскә атҡан мәлендә донъя ҡуйҙы.

Ҡадир Рәхим улы Тимерғазиндың һоҡланғыс гүзәл эшен уның улы менән ҡыҙы — геологтар Ая менән Камил — тау-геология институтының ғилми хеҙмәткәрҙәре дауам итә.

Ҡадир Рәхим улы кешегә бирелә торған иң гүзәл сифаттарға эйә ине. Ул мактаныуҙың, эреләнеп танау сөйөүҙең нимә икәнен дә белмәне, халҡының һөйкөмлө һәм арҙаҡлы улы булды.

ТӘҮГЕЛӘРҘЕҢ БЕРЕҺЕ

Башҡорт журналистикаһының үҫеш этаптарын, камиллашыу процесын байҡағанда үҫҙәренең физәкәр хеҙмәте менән был өлкәлә һиҙелерлек эҙ ҡалдырған исемдәр араһында дәүерендә «Совет Башҡортостаны» гәзитендә эшләп китҡән Ғәле Ишбулатовты телгә алғы килә.

Башҡорт теленең яҙылышына, һөйләшенә, уның формалашыуына нигеҙ ташы һалыусыларҙың береһе Ғ. И. Ишбулатов 1906 йылда Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Фәҡир тормош уны урман төбөндә ятҡан ауылда ниндәй һәнәр булһа, уның барыһына ла өйрәтә. Ул атаһы менән урман эшен башҡара, дегет ҡайната, күмер яндыра, транса яра. Шул әйберҙәрен Яйыҡ башындағы Верхнеуральск, Ҡыҙыл йәрминкәләренә һатырға йөрөтә.

Тимерлектә эшләгәндә утлы тимер киҫәге уның бер күҙен зәғифләүе, балта менон сабып, бер ҡулы оҙаҡ ҡына ғәрип булып йөрөүе, Өфө балалар йортонда ун өс йәшко сыҡҡан ҡустыһының һыу төбөнә батҡан шикелле ғәйеп булыуы уның күңелендә төҙәлмәҫ яра булып уйылып ҡала. Ләкин йот йылында атаһыҙ тороп ҡалған зиһенле Ғәлене Совет власы үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ул Өфөлә асылған

төрлө курстарҙа уҡығандан һуң. Тамъян-Түңгәүер волосы башҡарма комитетында — эш башҡарыусы. Буранғол ауыл Советында секретарь булып эшләй. 1926 йыл РЛКСМ-дың волость комитеты уны тыуған ауылы Ҡаҙмашҡа ауыл Советы председателе итеп ебәрә.

Ғ.И. Ишбулатов

Бөтә волость күләмендә ул комсомолецтарҙан тәүге һәм берҙән-бер председатель була.

Силсәүит» буларак, ул ауылдағы үҙ-ара ярҙам комитетына, потребкооперацияға, ярлылар группаһына, Ҡаҙмаш халҡының, ултыраҡлы тормошҡа күсеп, иген сәсә башлауына эшлекле ярҙам күрһәтә, ошо ауылда комсомол ячейкаһын ойошторосуларҙың беренсе була.

Ул беренсе тапҡыр үҙ ҡәләмен 1928—1929 йылдарҙа, өлкә партия-совет мәктәбендә уҡып йөрөгән сағында, һынап ҡарай. Уның ауылдағы синфи көрәш, коллективлашыуға арналған тәүге мәҡәләләре партияның өлкә комитеты һәм Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының органы булған «Яңа авыл» («Ҡызыл таң») гәзите биттәрендә донъя күрә.

Өфөлә уҡыуын тамамлағас, уны ошо гәзиткә бүлек мөдире итеп, ә һуңынан «Башҡортостан» өлкә гәзитенә ауыл хужалығы бүлеге мөдире итеп эшкә күсерәләр. Ул бер үк ваҡытта Башколхозсоюз органы «Трактор» журналында ла мөхәррир булып эшләй.

Ғәле Ишбулатовтың журналист ҡәләменең үткерләнеүенә ул саҡта танылған яҙыусылар Мәжит Ғафури, Төхфот Йәнәби, Дауыт Юлтый һәм башҡалар менән яҡындан аралашыу ҙур йоғонто яһай. Әйткәндәй, ул 1930 йылда Мәжит Ғафури менән бергә Новосибирскиға оҙайлы ижади командировкаға ла барып ҡайта.

1930 йылдың июль айында Ғәле Ишбулатовты, партияның өлкә комитетында матбуғат бүлеге мөдире булып эшләгән Булат Ишемгол менән бергә, Арғаяш районына гәзит сығарыуҙы ойошторорға ебәрәләр. Район гәзитенең беренсе номерын, махсус бина булмау сәбәпле, ауыл активисткаһы Мәрфуға Абдуллинаның өйөндә йыялар. «Колхозсы» исеме менән башҡорт телендә сыҡҡан был гәзитте

ярлы-ялпы ҙур энтузиазм менән ҡаршы ала. Районда типография булмау сәбәплс, Ғәле Ишбулатов набор, ҡағыҙ тейәп, Ҡыштым ҡалаһына ылау йөрөй. Тиҙҙән уны Мөхәмәтҡолой МТС-ы политбүлеге органы «Большевик» гәзитенең, һуңынан Арғаяш районы «Еңербеҙ» гәзитенең мөхәррире итеп тәғәйенләйҙәр.

1936 йылда Ишбулатовты Силәбелә башҡорт телендә сыҡҡан «Урал» гәзитенә бүлек мөдире итеп күсерәләр. Ул бер үк ваҡытта ТАСС хәбәрсеһе лә булып эшләй. Үҙенең туранан-тура ваҡытлы матбуғаттағы эшен ул, «Башҡортостан вышкаһы» гәзитенең мөхәррире булып 1938 йылда тамамлай. Ләкин ул матбуғат менән бәйләнешен бер ҡасан да өҙмәй, һуғыштан һуң да гәзит биттәрендә, атап әйткәндә, «Совет Башҡортостаны» гәзитендә публицистика һәм очерктарға, тәнҡит һом библиография, башҡорт теле орфографияһы, лексикаһына һәм тәржемә мәсьәләләренә арналған һикһәндән ашыу мәҡәләһе баҫылып сыға. Ул яҙған мәҡәләләрҙең тематикаһына, актуаллегенә күҙ һирпеп ҡарау ҙа Ғәле Ишбулатовтың төрлө яҡлап әҙерлекле, бигерәк тә башҡорт теле ғилеменең ҙур белгесе икәнен күрһәтә. «Башҡорт теленең яҙма ҡомартҡылары», «Башҡортса иң тәүге әлифба» (1946 йыл), «Орфография, лексика хаҡында фекерҙәр» (1957 йыл) һәм башҡа бик күп мәҡәләләре башҡорт теле грамматикаһын камиллаштырыу, һөйләш телен байытыуҙа ҙур өлөш булды тиһәк, бер ҙә хилаф булмаҫ.

Ғәле Ишбулатовтың 1938 йылдан һуңғы йылдарға тиклем Башҡортостан китап нәшриәтендә өлкән мөхәррир, баш мөхәррир булып эшләү осорон айырата билдәләп үтергә кәрәк. Уның тәржемәселек оҫталығы бигерәк то марксизм-ленинизм әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итеүҙә асыҡ сағылды. Әхмәт Ҡотошов, Әхтәм Йомағужин, Ғәле Ишбулатовтарҙың тырышлығы менән республиканың меңәрләгән уҡыусыһы Маркс, Энгельс, Ленин әҫәрҙәрен туған телдәрендә уҡыу, өйрәнеү мөмкинлеген алды. Миҫал өсөн түбәндәге һанды килтереү ҙә етә. 1940—1970 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтенең марксизм-ленинизм секторы, пропагандистар һәм агитаторҙар өсөн мөхәррир, Коммунистар партияһының күренекле эшмәкәрҙәренең хеҙмәттәренән, партия, дәүләт документтарынан тыш ике меңдән ашыу баҫма табаҡ Маркс, Энгельс, Ленин әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итә. Был мөһим эштә Ғәле Ишбулатов нигеҙҙә тәржемәсе, мөхәррир булып ҡатнаша. Ул 1948 йыл «Коммунистар партияһының Манифесын» башҡортсаға тәржемә итә. Коммунистар партияһының ойоштороу, идеологик һәм тактик нигеҙҙәрен тәшкил иткән

марксизм-ленинизм әҫәрҙәре барыһы ла уның тәржәмәһе һәм мөхәррирлегендә башҡортса донъя күрә. «Ғаилә, шәхси милек һәм дәүләттең барлыҡҡа килеүе» (Ф. Энгельс), «Һайланма әҫәрҙәр», I һәм II том (К. Маркс, Ф. Энгельс), «Франсияла граждандар һуғышы» (К. Маркс), «Коммунизмда «һуллыҡ», балалар ауырыуы» (В. И. Ленин), «Демократик революцияла социал-демократияның ике тактикаһы» (В. И. Ленин), «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа» (В. И. Ленин) — бына ошоларҙы теҙеп сығыу ғына ла уның ни тиклем көнүҙәк политик эш башҡарыуына дәлил булып тора.

Был сикһеҙ мөһим эште ул әле яҙма телгә инеп законлашып өлгөрмәгән ижтимағи-политик, философик терминдарҙы йыйыу, дөйөмләштереү менән бергә алып барҙы, сөнки ошо осорға тиклем марксизм-ленинизм әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржәмә итеү нәшриәт өсөн күтәрелмәгән сиҙәм ине.

СССР фәндәр академияһы член-корреспонденты профессор Н. К. Дмитриев мөхәррирлегендә 1948 йылда сыҡҡан «Русса-башҡортса һүҙлек»те төҙөүгә лә Ғ. Ишбулатов тос ҡына өлөш индерҙе. Тимәк, ул ҙур ғына тел ғалимы ла ине. Уның филология фәндәре кандидаты Таһир Баишев менән II синыф балалары өсөн төҙөгән уҡыу китабы 22 тапҡыр баҫылып сыҡты. Бынан тыш, ул Ҡадир Даян менән берлектә V класс өсөн уҡыу китабы сығарҙы.

1950—1970 йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты сығарған башҡорт әҙәби һүҙлегенең макетын рецензиялауҙан тыш, Ғ. Ишбулатов Октябрь революцияһынан элек һәм унан һуң ғәрәп алфавиты менән сыҡҡан 35 китаптан һанлап, 3700 һүҙгә карточка эшләп тапшырҙы. (Был йәмәғәт башланғысында бушлай эшләгән эш бит!) Бынан тыш әҙәбиәттә һәм һөйләштә ҡулланылған ғәрәп, фарсы телдәренән күскән 2400 һүҙгә аңлатма бирҙе. Ул башҡарған төрлө яҡлы эштәрҙең ошоноһон ғына һанап үтеү ҙә Ғәле Ишбулатовты тел ғалимы дәрәжәһенә күтәреү хоҡуғын бирә алыр ине.

Ул художестволы әҙәбиәт тәржәмәһе менән дә уңышлы ғына шөғөлләнде. Уның тәржәмәһендә Л. Толстой, М. Горький әҫәрҙәре башҡорт ерлегендә үҙ уҡыусыларын тапты. И. Поповтың тәржәмә ителгән дүрт шаршаулыҡ «Ғәлиә» пьесаһы, В. Вишневскийҙыҡ «Онотолмаҫ 1919 йыл» тигән дүрт шаршаулыҡ драмаһы академия драма театры сәхнәһендә яңғыраны.

Уның ҡулынан бөтә эш тә килде тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Өс тиҫтә йылдан ашыу аралашып йәшәү дәүерендә беҙ, Ғәле ағайҙың ҡул ҡаушырып, буш ултырғанын хә-

терләмәйбеҙ. Тормошоноң һуңғы йылында ул Башҡортостанда оялаған бөтә ҡоштар тураһында, уларҙың һәр береһен ентекләп тасуирлап, ҡош яратыусы балалар, орнитологтар өсөн бик файҙалы китап сығарып ҡалдырҙы. Шул арала ғәрәп хәрефен өйрәнеүселәр, юғары уҡыу йорто студенттары, фән эшмәкәрҙәре өсөн әлифба сығарырға ла өлгөрҙө. Беренсе китабы балалар күңелендә тере тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу, уға ихтирам тойғолары уятһа, икенсеһе инде башҡорт халҡының үткән тарихын, боронғо культураһын ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған архив документтары аша тикшеренеүсе филологтарға, ғалимдарға бермә-бер ярҙам итәсәк.

Ул бынамын тигән фотограф та, киноға төшөрөүсе лә ине. Хәҙерге заман өсөн бик кәрәкле был һәнәре уны үҙ ауылдаштары, яҡташтары менән бәйләне.

Уның инициативаһы менән, мәҫәлән, Ҡаҙмашта 1966 йыл (хәҙер Әбйәлил, Баймаҡ райондарында хуплау тапҡан) «Һаумыһығыҙ, яҡташтар!» тигән осрашыу ойоштороллдо, Ҡаҙмашта Дуҫлыҡ баҡсаһы ултыртыу, бөйөк Ленинға һәйкәл асыу, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған ауылдаштарға һәйкәл ҡуйыу, граждандар һуғышы осоронда Ҡаҙмаш ҡырында аҡ гвардеецтар тарафынан йыртҡыстарса үлтерелгән билдәһеҙ ҡызыл армеецҡа мемориаль таҡта булдырыу, ауылда тыуған яҡты өйрәнеү музейы асыу — былар барыһы ла ауыл халҡы менән берлектә, уның инициативаһы, үҙ ҡулы менән эшләнгән.

Сирле көйөнсә Әбйәлил районы комсомолының тарихын яҙыу һәм ул бай материалды, машинкала баҫып, ВЛКСМ-дың район комитетына тапшырып ҡалдырыу үҙе генә лә ни тора! Быға ауылдан сыҡҡан күп иптәштәре-беҙҙең дәрте лә, дарманы ла етмәй әле тип әйтһәк, хата булмаҫ.

1929 йылдан коммунист, СССР Журналистар союзы ағзаһы, улар араһынан республикала беренсе булып «РСФСР-ҙың атҡаҙанған культура работнигы,» исеменә лайыҡ булған орденлы Ғәле Ишбулатов ихлас күңелле, оло йөрәкле, башҡорт культураһының төрлө тармаҡтарына тос өлөш индергән һоҡланғыс кеше ине.

ЖӘЛИЛ АҒА КЕЙЕКБАЕВ ХАҠЫНДА ИҘТӘ ҠАЛҒАНДАРҘАН

1954 йылдың июнь урталары ине. Өфө урамдары йәшеллеккә күмелгән. Луначарский һәм Матросов исемендәге баҡсалар гөрләп эшләй, һуңғыһындағы «Иҙел» исем-

ле йәйге кинотеатр тамашасылар менән шығырым тулы, бигерәк тә киске сеанстарға билет табыу мөмкин түгел. Мәсет манараһы кеүек күккә олғашып, әллә ҡайҙарҙан күренеп торған парашют вышкаһын йәштәр тығыҙ ҡулса менән ураҙтып алғандар. Баҡсаның асыҡ аҡланында 6—7 метр бейеклегендә, һауала һуҙылған тимер арҡан өҫтөндә ике ҡулына ауыр ҡолғаны арҡыры тотоп, семәрле түбәтәй кейгән үзбәктәр, маймыл кеүек етеҙ, аллы-артлы йүгерәләр. Ә ресторанда аш-һыу менән ҡыҙыу сауҙа бара. Луначарский баҡсаһында ла Өфө йәштәре мәхшәр шикелле ҡайнай. Ҡасандыр Өфөгә туҡталып, Ф. И. Шаляпин киләсәкке шөһрәтенә ҡыйыуһыҙ ғына аҙым атлап, үҙенең тәүге йырҙарын башҡарған йәйге театрҙа[1] ниндәйҙер тамаша бара. Йөҙәр йыллыҡ имәндәр уртаһындағы асыҡ эстрадала хәрби тынлы оркестр гөрһөлдәтеп, йөрәктәрҙе елкендерерлек марш уйнай. Мин, Өфөгә ниндәйҙер йыйылышҡа саҡырылған йәш кеше, парктың ресторанында ултырам. Үҙем кемделер көткән һымаҡ. Әҙәпле генә рөхсәт һорап, минең янға галстукһыҙ күлдәк яғаһын ысҡындырған, һоро костюм кейгән ыҫпай ғына, минән байтаҡҡа оло кеше килеп ултырҙы. Мин иң башта был кешенең сәсен ел ҡуҙғытҡан күбәгә оҡшаттым, күпме генә һыйпаһа ла баш бирмәгән ҡуйы ҡара сәсенә, шундай уҡ ҡаштарына иғтибар иттем. Аҡыл нурҙары сәсеп торған һоро күҙҙәре менән залды байҡап сыҡты ла был ят кеше ике биттән генә торған меню ҡағыҙына текәлде. Минең алдағы тәрилкәгә һәм уның ҡырында ултырған нәҙек үңәсле тумалаҡ араҡы графинына ҡарашып һирпеп алды. Шунан башын ҡалҡытып, кинәт кенә һорап ҡуйҙы:

Ж. Ғ. Ҡейекбаев

— Әүҡәтләнеп ултыраһыңмы, мырҙа?

«Әүҡәтләнеп» тигән һүҙен аңламаһам да һүҙ ашау хаҡында барыуын төҫмөрләп, мин:

— Эйе, ошонда килеп инеп кителде әле, — тинем аҡ-

---

[1]Өфө хужалары «йәйге театр»ҙы емереп ташлаһалар ҙа, уның нәҡ шундай күсермәһе Мәскәү аҫтында Абрамцево усадьбаһында бөгөнгө көндә лә тора.

ланырға теләгән кеүек. Күп то үтмәй ҡар һымаҡ ап-аҡ таҫтамалын яурынына аша һалып, өҫтөнә кейгән сигеүле алъяпҡыс кеҫәһенән биттәре ылбырай башлаған блокноты күренеп торған нәҙек билле официантка беҙҙең өҫтәлгә килеп, мин ҡаршы ултырған иптәштән заказ алды. Башта ашарға заказ биргәс, башын ҡырын һалып, бер аҙ елкәһен ҡашыны ла минең араҡы һауытына тағы ҡараш ташланы. «Тәхел шарабына күпме заказ бирергә самалай»,— тигән осҡор уй минең башҡа ҡунды.

Заказын бирҙе лә был ят иптәш ултырғысына ятыбыраҡ эске кеҫәһенән сығарып, «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитен ҡараштырып сыҡты. «Был кешенең кем булыуы мөмкин?» тигән һорау күңелгә килде. «Берәр мин белмәгән ғалим тиһәң, ҡулдары бигерәк ҙур, берәр эшсе-фәләсән тиһәң, күркәм йөҙөнән ғилем сатҡылары бәреп тора». Был ваҡытлы уңайһыҙлыҡтан ҡотолоу ниәте менәндер инде, мин уның алдына рюмка ҡуйҙым да араҡы тәҡдим иттем. Ул баш тартманы. Рюмкаларҙы сәкәшкәс, ул миңә туптура ҡарап, эрерәк тештәрен күрһәтеп йылмайҙы ла:

— Туҡта, башта танышып алайыҡ әле, мин Жәлил Кейекбаев атлы кеше булам, — тине. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, минең ҡулдағы рюмка иҙәнгә төшөп китә яҙҙы, кинәт ҡаушап ҡалыуым йөҙөмә сыҡты. Таралып киткән зиһенде бер аҙ төйнәп алғандан һуң мин:

— Беләбеҙ, беләбеҙ, — тигән булдым.

Берҙе төшөрөп алғас, хоҙай тел асҡысын да бирҙе. Мин фамилияны әйтеү менән ул шундуҡ эләктереп тә алды.

— Һинең БИНО[1] тамамлаған Өмөтбаев Яхыя тигән ағайың юҡ инеме? — тип һораны.

— Бар ине, хәҙер ҙә бар, — тип яуапланым.

— Утыҙынсы йылдар башында Наркомпроста эшләмәнеме ағайың? — тип ул яңынан һорау бирҙе.

— Яңылышмаһам, бер нисә йыл профобразование буйынса өлкән инспектор булып эшләне шикелле, — тинем. Шуның менән һүҙ бөттө, тағы ла тынлыҡ. Алдымда кем ултырғанын белеп алғас, мин «ауыҙға һыу уртланым». Тиҙҙән уның заказын килтерҙеләр. Жәлил ағай әңгәмә дилбегәһен үҙ ҡулына алды. Тағы бер «соҡор» төшөрөп, мыйыҡ майлап алғас, өҙөлөп ҡалған һүҙҙе ул яңынан ялғап ебәрҙе.

— Ул ағайың оҙон буйлы бик күркәм, ғәрәптәргә тар-

---

[1]БИНО — Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа асылған башҡорт педагогик училище башта Башҡорт халыҡ мәғарифы институты, тип йөрөтөлгән.

тым, аҡ йөҙлө кеше ине, — тине лә ул яҙғы сәсеү мәлендә көнө-төнө сабыулап йөрөп, ҡояшҡа янып, баҡырға әйләнгән минең йәйпәгерәк йөҙгә иғтибар иткәндәй булды. Оялышымдан буҙарған битемде мин ситко борҙом. Быны уның һиҙгер күңеле лә тойҙо шикелле. «Ярай әле, Жәлил ағай: — Һин ҡалмыҡҡа тартымһың, ағайыңа бер ерең дә оҡшамаған, тип әйтмәне, йәлләне», — тигән уй килде башҡа.

— Ул Яхыя Өмөтбаев һиңә нисә бөгөлөш туған һуң?

— Атайҙың ҡустыһы, тинем.

Бер аҙ ултырғас., һүҙ атай-олатайҙарға күсеп китте. Ете быуынды һанап, ырыуҙы ла әйтеп биргәс, Жәлил ағай күңелендә үҙемә ҡарата ниндәйҙер ышаныс сатҡыһы ҡабынғанын тойҙом.

— Һуң, Өмөтбаев мырҙа, Әбйәлил районында ниткән бөрйән ырыуы булыуы мөмкин, ул бит тамъян-түңгәүерҙәр төйәге, — тип һоран ҡуйҙы ғалим.

Ҡыҙыл һыуының иң түбәнендә ятҡан Әбдрәш, Әлмөхәмәт һәм Мунаш ауылдарының Бөрйән ярсыҡтары икәнен әйткәс, Жәлил аға, күрәһең, эске ризалығын йәшерә алмай, киң йылмайҙы ла баш бирмәй әленән-әле күҙен ҡапларға теләгәндәй маңлайына төшөп барған сәсеп һыйпаны.

— Быларҙы белгәс, Өмөтбай мырҙа, һинән нисауа ғына секлатар сыҡмаҡсы. Үҙ тамырыңды танып белеү — фарыз,— тип нишләптер ферманың малдарға ашамлыҡ әҙерләүсе цехы дәүмәлендәге ҙур мискә эргәһендә һыра дауайлашҡан бер төркөм йәштәргә ҡарап ҡуйҙы. Бер аҙ ваҡыт үтеү менән ейгән ашты ғына түгел, эселә башлаган тәхеҙ шарабын да дөйөмләштерергә тура килде. Башты шауҡлата башлаған «теге иблес шауҡымы» икебеҙ араһын айырып, ҡойма булып торған тартыныу кәртәһен оҙаҡламай бөтөнләй емереп ташланы. Асыҡтан-асыҡ һөйләшеү башланды.

— «Совет Башҡортостаны»нда яңыраҡ баҫылып сыҡҡан «Сиҙәм яҙын уңышлы үткәрәйек», тигән мәҡәләнең авторы әләйһә һин булаһың икән, — тип Жәлил ағай, уҡ атҡан кеүек, миңә туп-тура һорау бирҙе. Мин бер аҙға ҡаушап ҡалдым. «Хәҙер был ғалим минең мәҡәләнең тетмәһен тетәсәк», — тигән уй мейегә ҡаҙалды.

— Эйе, мин, — тинем тулҡынланыуымды йәшерергә тырышып.

— Ниндәй шкул бөтөрҙөң?

— Урыҫса уҡыным.

— Мәҡәләңдә һинең урыҫса уҡыуың, урыҫса фекер йөрөтөүең ярылып ята. Башҡортса һөйләшергә, фекер йө-

рөтөргә өйрән. Дүнәнгә сыҡһаң да, икенсе ҡамыт-сбруйға өйрәнергә тура килер. Башҡортса уҡып-яҙып та мал була алырһың.

Бына ошо рәүешле таныштым да ошо рәүешле айырылыштым мии Жәлил аға Кейекбаев менән тәүге күрешеүҙән.

* * *

Өфөгә күсеп килгәнсе йылына кәм тигәндә бер-ике тапҡыр республика гәзиттәрендә минең мәҡәлә күренә торҙо. Бер нисә тапҡыр Башҡортостан радиоһы аша үҙ телебеҙҙә минең сығыш та ишетелеп ҡалды. Ләкин ҡәләм алып нимәгә генә тотонһам да, йәки берәр урында үҙ телебеҙҙә сығыш яһарға тура киләме, минең күҙ алдымда һәр саҡ урта буйлы, шырт сәстәрен өҙлөкһөҙ һыйпап ултырған мөләйем ҡарашлы Жәлил ағай шәүләһе пәйҙә булыр ине.

Икенсе бер осрашҡанда ул минең ҡулды ҡыҫып:

— Өмөтбай мырҙа, яҙырға шәйлә төшөнөп бараһың. Тырышһаң, әбдән яҙырға өйрәнеп алырһың әле, — тип дәртләндереп китте.

Ә инде 60-сы йылдар башында Өфөгә күсеп килгәс, уның менән йышыраҡ осраша башланыҡ. Үҙ халҡыбыҙҙың үткәне, ҡатмарлы тарихы, азатлыҡ өсөн аяуһыҙ көрәштә ҡан менән һуғарылған башҡорт еренең әсе яҙмышы, теле, мәҙәниәте менән бермә-бер ҡыҙыҡһыныуым мине, әле саҡыштырмаса йәш кешене уның фекерҙәше яһаны. Республика гәзиттәрендә һәм «Октябрь» журналында йыш ҡына донъя күргән уның ғилми, әҙәбиәткә арналған мәҡәләләре, тел ғилеме буйынса киң мәғлүмәтле, тәрән тикшеренеүҙәре менән, әлбиттә, билдәле ғалим мине үҙенә тартты. «Совет Башҡортостаны»нда баҫылып сыҡҡан уның «Губернатор килгәндә» исемле талантлы әҙәби хикәйәте, «Туғандар һәм таныштар» романынан өҙөктәр уның күренекле тел ғалимы ғына түгел, нәфис һүҙ оҫтаһы икәнен дә күрһәтте.

1959 йылдың баштарында уның менон осрашыу хәтерҙә бигерәк то ныҡ һаҡланған. Был ваҡытта мәркәздә 21 ғәҙәттән тыш партия съезы бара ние. Жәлил ағай ул мәлдә докторантурала уҡып йөрөй ине, шикелле. Февраль айының тәүге генә көндәре булыуға ҡарамаҫтан, башына эшләпә, өҫтөнә көҙгө пальто кейгән Жәлил ағай ҡулына таушала башлаған һары күн портфель тотоп, «Украина» ҡунаҡханаһындағы минең номерға килеп инде. Иҫәнлек-

һаулыҡ һорашҡандан һуң, ул дәррәү бүлмә уртаһында торған өҫтәлгә атланы. Портфелен сылтлатып асып ебәрҙе лә алын килгән күстәнәстәрен теҙә башланы — ҙур шешә менән «Абрау — Дюрсо» виноһы, колбаса, әллә нисә төрлө консерва, башҡа аҙыҡ-әүҡәт сығарҙы. Мин, көн буйы ултырыштан арып ҡайтҡан кеше, карауатта һуҙылып, ниҙер уҡып ята инем. Әлбиттә, мин бындай абруйлы хоҙай ҡунағын күргәс, тиҙ генә һикереп тороп, уны сисендерә башланым. Бер аҙ ҡаушау ҙа бар ине буғай. Ҡулдарын йыуҙы ла ҡунаҡ өҫтәл ҡырына ултырҙы. Шыраулы устарын бер-береһенә ышҡып алды. «Тимәк, ағайҙың ҡорһағы асҡан, ашығырға кәрәк», тигән фекер килде башҡа. Стакандар өҫтәлгә килеп ултырғас, күҙҙәренән мөләйем ҡараш һирпте лә:

— Бына һине, съезд депутатын, тәбрикләргә килдем, әҙерәк үҙәк ялғап алайыҡ әле, — тип йылмайҙы.

Биләгән сабыйға оҡшаған оло бутылканы ике ҡулы менән һаҡ ҡына тотоп, стакандарға шарап һалды. Эсеп ебәрҙек. Стаканын өҫтәлгә ҡуйғас, ул телеп сартлатып: «Был хәйерһеҙ емләнгән бал һымаҡ булып сыҡты ла баһа»,— тине. Әңгәмәгә юл асылғандай тойолдо. Ултырғысын яҡынлатып, ул минең ҡаршыға ултырҙы ла съезд хәлдәрен һораша башланы. Мин ҡыҫҡаса ғына үҙ тәьсораттарым менән уртаҡлаштым. Съезд асылған көндә КПСС-тың беренсе секретары Хрущев өс тәнәфес яһап, алты сәғәт буйына хисап докладын яһауын ишеткәс, башын сайҡап, бер аҙ өндәшмәй ултырҙы.

— Бер тынанан алты төҫтәге нотоҡ һөйләгәс, бик маһир юлбашсылыр инде ул, — тип ул үҙенең хайран ҡалыуын белдерҙе. Уның был кинәйә менән әйтелгән һүҙен мин бер нисек тә аңлатырға белмәнем, сөнки ул заманда рҙа юлбашсылар хаҡындағы төрлө тәпсирҙәрҙе ҡолаҡ ҡына түгел, стеналар ҙа ишетә ине.

Тиҙҙән мин дә телефон аша үҙ номерыма киске ашҡа заказ бирҙем. Күп тә үтмәне, оҙон керпекле зәңгәр күҙҙәренән осҡонло ҡараш атып торған, килешле фигураһын сибәрлеге менән тағы ла биҙәй төшкән официантка, заказды дығырлатып, килтереп тә еткерҙе. Беҙ үҙ иркебеҙҙән ғәйре килтерелгән ашҡа түгел, теге матур ҡыҙға һирпелеп ҡараныҡ. Ә ул килтерелгән аҙыҡ-әүҡәтте тиҙ генә өҫтәлгә теҙеп ултыртты ла, нисек йәшен булып килен ингән, шул рәүешле, беҙгә яланғас яурыны аша тағы бер серле ҡараш бүләк итте лә сығып та китте. Ул үҙ артынан беҙҙең бүлмәнең нурын алып сығып киткән кеүек тойолдо. Башта Жәлил аған телгә килде.

— Эх малай, анау йәтеш арбаға ниндәй һылыу бай-

тал еккәндәр. Исмаһам бер аҙ һөйләшеп ′тә булманы. Аптырашып ултырҙыҡ та ҡалдыҡ. Ҡайҙан табалар шундай һылыу ҡыҙҙарҙы, каяннайҙар. Уны, һеҙ, депутаттарға аҫаба һайлап килтергәндәр инде, — тине. Уның эскерһеҙ, ихлас һөйләнеүенәи мин рәхәтләнеп көлдөм. «Ысынлап та шулайҙыр әле», — тин дөрөҫләргә тура килде.

Әңгәмәләшә торгас, эш йырға килеп терәлде.

— Был бүлмәлә йырлашырға рөхсәт микән? —тип Жәлил ағай ян-яғын байҡап алды.

— Нишләп рөхсәт булмаһын, дәртең булғас, әйҙә. Жәлил ағай, берҙе көйләп ебәр, — тинем.

Ул бер аҙ артҡа ҡайҡая биреп, күҙҙәрен йомдо ла «Ҡолой кантон» көйөнә йырлап та ебәрҙе. Билдәле, ошоға тиклем мин, әлбиттә, башҡорттоң оҙон көйҙәрен ишеткән кеше бит инде, ләкин йырҙы уның кеүек юғары тауыш менән башҡарған кешене тәүгә осраттым, тиһәм бер ҙә хата булмаҫ. Ә бит бала саҡтарҙа бөтә оҙон көйҙәр ҙә ошо юғары тауыш, дискант менән башҡарыла ине. Жәлил ағай үҙенең йырлау манераһы менән мине балалыҡҡа кире ҡайтарҙы. Тамаҡ төбөнән урғылып сыҡҡан уның нәҙек, яңғырауыҡлы тауышы тәүҙә бәләкәй бүлмәнең стеналарына һыймай бәрелеп йөрөнө лә йәшен шары кеүек, йомғаҡтай тәгәрәп, коридорға сығып китте. Ул күҙен йомған килеш «Ҡолой кантон» көйөн ошоға тиклем билдәһеҙ булған ҡәһәрле һүҙҙәр менән башҡарҙы. Йыр тамамланғас, көй тәьҫоратынан әҫәрләнеп, мин үҙем дә һиҙмәҫтән «Вәй, көй икән», тип ҡысҡырып ебәрҙем..

— Шәп, йөрәккә үтеп инде йырың, Жәлил ағай, һуңғы йылдарҙа бындай башҡарыуҙы мин тәүгә ишетәм,— тинем.

— Беҙҙең ата-бабалар әүәл оҙон башҡорт көйҙәрен хас ошо манерала йырлай торғайны, — тине Жәлил ағай. Әҙерәк аш ашап алғас, ул миңә төбәлде лә:

— Өмөтбай, мырҙа, мәгәр башҡорт булһаң, һин дә бер тауыш сығармай булмаҫ. Әйҙә, булмаһа берҙе көйләп ебәр әле, — тип үтенде. Кикерүк ҡыҙарып, айға менергә әҙер ултырған миңә етә ҡалды — шундуҡ «Буранбай»ҙы йырлап та ебәрҙем. Ҡунағым керпеген дә ҡаҡмай, йырлап бөткәнсе миңә текләп ултырҙы. Көй бөтөүгә ныҡ ҡына тулҡынланған Жәлил ағайым шул уҡ фальцет тауыш менән кинәт:

— Үәшкә... ә... әй! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Аҙаҡтан: «Беҙҙең яҡтарҙа көйҙө ана шул фурмы күҡәрәләр», — тине.

Нәҡ шулай йырлап күңел асып ултырған мәлдә генә ишек шаҡынылар. Был тауышҡа минең ҡунағым һаҡая

төштө. Ишектә яурынына әллә ниндәй артмаҡ-шартмаҡтарын аҫып, битен һаҡал баҫҡан бер әҙәм күренде. Ул үҙ танытмаһын һуҙҙы, баҡһаң, Бөтә Союз радиоһының корреспонденты икән. Ул шундуҡ сумкаларын асып, үҙенең портатив магнитофонын көйләй ҙә башланы. Беҙҙең ғәжәпләнеүҙе күреп, ул:

— Бөтә Союз радиоһы Һиндостанға тапшырыу әҙерләү өсөн съезд секретариатына мөрәжәғәт иткәйне. Беҙгә рус булмаған, ләкин русса яҡшы һөйләшә белгән делегат кәрәк. Бына шунда һеҙҙе тәҡдим иттеләр, — тип теҙеп алын китте теге корреспондент. Сығыштың темаһы: Социализм йәмғиәтендә ваҡ милләттәрҙең сәскә атыуы, 10—12 минутҡа иҫәпләнгән, — тип өҫтәне. Ул өҫтәл өҫтөнә ҡараш ташлап ҡуйҙы.

— Бәлки, иртәгәгә ҡәҙәр кисектереп торорға мөмкиндер? — тигән минең үтенесте ул ҡырҡа кире ҡаҡты. Эштең ҡатмарлаша башлағанын һиҙеп, Кейекбаев ағай урынынан тороп, өҫтәл йыйыштырырға самалағайны, мин уны туҡтатып ҡуйҙым. Ул мөйөштә ултырған йомшаҡ креслоға сумды ла, уң яғына таянып, тәрән уйға батты. «Хозурҙы боҙоп, ҡайҙан килеп сыҡты был корреспондент булған нәмәһе? Йә хәҙер нишләр икән инде был делегат?» — тигән һымаҡ үҙенең һынаулы ҡарашын миңә төбәпе. Өҫтәл мөйөшөнә ултырып, 15—20 минутта әйтелгән темаға тезис төҙөнөм дә: «Мин әҙермен, давай катушкаңды әйләндерә башла», — тинем. Жәлил ағайҙың ғәжәпләнеү тойғоһо бер аҙ алһыуланған битенә йүгерҙе. Әйтҡәндәй, «Социализм йәмғиәтендә ваҡ милләттәрҙең сәскә атыуы», «Социализм йәмғиәттең капитализмға ҡарағанда сәйәси һәм иҡдисади өҫтөнлөктәре» темаһына нотоҡ һөйләү ул саҡтағы фирҡә работнигына Ҡөрьән ятлаған ҡарыйға дәррәү аят уҡыу менән бәрәбәр ине. Мин үҙ сығышымды һис бер икеләнеп тормай: «Күп тә ваҡыт үтмәҫ, беҙ алыҫ Һиндостан ярым утрауында ла социализмдың еңеү тантанаһын байрам итербеҙ», — тип тамамланым. Корреспондентҡа ла минең сығыш хуш килде шикелле, сөнки ул теләгәнен алды. Уны оҙатҡас, Жәлил ағай бер һүҙ өндәшмәй өҫтәл ҡырына яңынан килеп ултырҙы.

Бергилке өндәшмәй ултырғандан һуң, ул миңә ҡарап, мәкерле йылмайҙы ла:

— Һеҙ, Өмөтбай мырҙа, әллә шул алыҫ Һиндостанда ла социализм ҡормаҡсыһығыҙмы? — тип һораны.

— А как же, һис шикһеҙ капитализм йәмғиәтенең бер ниндәй үҫеш перспективаһы юҡ. Яңы ғына инглиз метрополияһы иҙелеүенән азат ителгән Һиндостан доминионы, һис

шикһеҙ, социализм юлын һайлаясаҡ, — тинем икеләнеүгә һис бер урын ҡалдырмаҫҡа тырышып. Үҙемдең күңелемдә: «Был ғалимдарҙы Совет власы, аҡса әрәм итеп, уҡыта-уҡыта, о улар Ер шарында социализмдың еңеүенә шик тыуҙырып ултыралар», — тигән нәфрәт хисе уянды.

Жәлил ағайҙы һуң ғына оҙатырға сыҡҡас, лифтта ГДР-ҙан килгән бер төркөм немецтарҙы осраттыҡ. Улар ҙа кемделер ҡунаҡта булған икән. Лифт эсендә Кейекбаев аҙаҡ улар менән бик йәнле рәүештә гәпләшергә тотондо. Улар күмәкләшеп, немецса йырлаша башлағайны, мин уларҙың һүҙҙәренең бик берегеп китеүен тойоп: «Ағай, әллә был иптәштәрҙе үҙебеҙгә алып инәйекме?» — тип һораным. Жәлил ағаҙ башҡортсалап: «Былар бик булып алғандар. Анау быштығы Бавар немецы, Берлин диалекты менән һупалап маташа, ләкин булдыра алмай. Был дуҫтарҙы хәҙер номерыңа саҡырһаң, мәгәр иртәгә ултырышҡа бара алмайһың инде», — тине. Үҙ ҡунағым һүҙенең мәғәнәһен мин бик һуңлап, немецтар менән ныҡлап аралаша башлағас ҡына белдем.

Бына ошо һөйләшеүгә утыҙ йылдан ашыу ғүмер үтте, ләкин уның аҡыллы күҙҙәрендә сағылып ҡалған икеләнеү тойғоһо әле лә мине ғазаплай.

Ата-бабаларыбыҙ, үҙебеҙ физәкәр эштәр башҡарып, оло ҡорбандар биреп төҙөгән йәмғиәттең емерелеү фажиғәһе, әле бер кем дә аныҡ ҡына әйтә алмаҫлыҡ аңлайышһыҙ йәмғиәттең үҙ граждандарын асыҡтан-асыҡ талау, бөлгөнлөккә төшөрөүҙәр аша юл ярып килеүе осоронда Жәлил ағайҙың баш сайҡап, сырайына ғәжәпләнеү ҡатыш шикле хистәр йүгертеп ултырыуы әле лә күҙ алдында, шул саҡтағы социализм фанатигына бөгөнгө көндә мәңгелек үпкә булып күренгәндәй тойола...

1967 йылдың март айында үткәрелгән һайлауҙарҙа профессор Жәлил Кейекбаевты Башҡортостан Верховный Советына депутат итеп һайлап ҡуйҙылар. Яңылышмаһам, ул мәҙәниәт һәм мәғариф комиссияһы ағзаһы булараҡ, үҙ һайлау округында ғына түгел, республика күләмендә ла был мөһим тармаҡты үҫтереү йәһәтенән байтаҡ ҡына файҙалы эштәр башҡарып өлгөрҙө.

1968 йылдың йонсоу яҙы ине. Кинәт кенә ғүмере өҙөлөрҙән бер көн алда, түшенә депутат значоғы тағып алған, нишләптер бик болоҡһоу күңелле Жәлил ағай, нинсәйҙер бер оло фажиғә алдынан хушлашҡан кешеләй Президиум һәм Министрҙар Советының етәксе работниктарында булып сыҡты. Иң аҙаҡтан Верховный Совет Президиумы секретары Барый Абдрахмановҡа һәм ошо

күңелһеҙ юлдарҙың авторына визит яһаны. Алдағы буй ултырған өҫтәл ҡырынан урын алып, ул, кабинетҡа тәүге ингән кеше һымаҡ, сабыр ғына, һүҙһеҙ бүлмәне байҡап ултырҙы. Уның күңеле бик бойоҡ, сырайына болот шәүләләре ятҡан кеүек тойолдо. Ғәҙәттә йор һүҙле профессорҙы танырлыҡ та түгел ине. Минең башҡа: «Ағайҙың сәләмәтлеге китеп тора ахыры», — тигән уй килде.

— Жәлил ағай, әллә берәр сынаяҡ сәй эсеп алаһыңмы? — тип һораным. Ул көскә генә йылмайҙы ла:

— Рамазан Ғимранович, шундай вазифалы башлыҡ булып, сәйҙән дә етдиерәк эсемлегең юҡмы ни? — тип һорап ҡуйҙы. Ә мин уның был һүҙен ғәҙәттәге мәрәкә рәүешендә ҡабул иттем.

— Уныһын да табырға булыр ине, эш ваҡыты бит әле. — тип яуап бирҙем.

Ул миңә ҡулын биреп, һаубуллашты ла әкрен генә атлап сығып китте. Уның һелкә-һелкә ҡыҫҡан ҡулдарының йылыһы, наҙлы тылсым булып, миндә мәңгегә тороп ҡалғандай тойолдо.

Шул уҡ көндә, кискә табан мин машинала Ленин урамы буйлап барғанда уның Достоевский мөйөшөндәге трамвай юлын, дәррәү атлап, ҡыя киҫеп үткән мәлен күреп ҡалдым. Был минең уны һуңғы тапҡыр осратыуым булған икән. Икенсе көн иртә менән эшкә килгәс, уның ҡайнар йөрәгенең мәңгегә һуғыуҙан туҡтағанын ишеттек...

Һуңғы юлға уны Өфө йәмәғәтселегенең күп кенә вәкилдәре оҙатты. Белеүемсә, уның донъянан китеүе шул тиклем көтөлмәгән хәл булған ки, ғаилә менән генә шөғөлләнеп, балалар тәрбиәләп көн иткән профессорҙың хәләл ефете Нәфисә ханым бөтөнләй аптырауға ҡалған. Электән дә муллыҡҡа күнекмәгән был ғаилә тиҙ ваҡыт эсендә оло ҡыйынлыҡтарға дусар булды. Килер килем юҡ, балалар береһе лә бәлиғ түгел, барыһы ла төрлө урында тик уҡып ҡына йөрөйҙәр.

Ләкин ниндәй генә ярҙам булмаһын, былар халҡының мәшһүр ғалимын ҡайтарып бирә алмай, әлбиттә. Үҙ ғүмерендә артыҡ ҡатмарлы сырхау менән интекмәгән, әле ныҡлы ғына ғалимдың күп фәнни асыштары гөрләп сәскә атҡан мәлендә, 57 генә йәш өҫтөндә, кинәт донъянан китеүе халҡыбыҙ өсөн ҡайтарып ала алмаҫлыҡ ауыр юғалтыу булды. Беҙ, уның ҡалған иптәштәре, мәшһүр ғалимдың юҡлығын бөтә йөрәгебеҙ менән әле лә тоябыҙ.

Уның ҡарауы, Жәлил аға Кейекбаевтың әле бөтәһе лә донъя күрмәгән фәнни мираҫы тулы йыйынтыҡ булып баҫылып сығыр тигән өмөттәр менән йәшәйбеҙ.

ШИҒРИ ЙӘНЛЕ КЕШЕ ИНЕ

1946 йылдың йәйге селлә айҙары ине. «Сибайзолото» руднигында мин эшләп ултырған бәләкой генә бүлмәгә инглиз буҫтауынан тегелгән гимнастерка, галифе салбар, офицерҙарҙың өр-яңы яҫы ҡайышы менән билен һыға быуған ыҫпай бер кеше килеп инде. Өҫтө-башы ҡупшы, был яҡтарҙа күренмәгән ҡуңыр битле, сибәр кеше, бик тартынып тормай: «Нәжип Иҙелбай», — тип ҡулын һондо. Мин ул саҡта был рудникта комсомол комитеты секретары булып эшләп йөрөй инем. Уны күреү менән: «Бындай ҡупшылыҡ был әҙәмгә ҡайҙан килгән икән»,—тип уйлап ҡуйҙым. Был буй-һын, ыҫпайлыҡ уның әсәһенең бер туған ағаһы, заманында зыялылар араһында ҡупшылығы менән айырылып торған элекке Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең ахуны, Батша Рәсәйе Дәүләт думаһының ағзаһы Мәтинов Шаһишәриф бабаһынан килеүен мин байтаҡ ғүмер кисергәндән һуң ғына белдем.

Нәжип Иҙелбаевтың исеме ул саҡта әҙәбиәт, көндәлек матбағаға күҙ һалып барған кешегә ярайһы ғына таныш ине. Беҙ, ул замандың йәш кешеләре, уның гәзиттәрҙә донъя күргән шиғырҙарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып бара инек.

Аяғына кейгән ялтыр итектәрен күрһәтергә теләгәндәй, ул конторанып шығырлап ятҡан иҙәнендә ишекле-түрле йөрөп алды ла минең алға килеп ултырҙы. Алдына фуражкаһын һалып, тулҡынланып торған ҡуйы сәстәрен тарап алды. Мин, был кешенең күркәмлегенә һоҡланып, оҙаҡ ҡына текләп ултырҙым. Ул, артыҡ күп уйлап тормай, һуғыштан һуңғы башҡорт әҙәбиәте кисергән ҡыйынлыҡтар, ғөмүмән республикала йәшәгән төп халыҡтың иҡтисади һәм рухи яҡтан фәкирләнә барыу хәлдәренә, милләтебеҙҙең аяныслы тарихына төшөп китте.

Билдәле, ул саҡтағы быныҡ ише хәбәр мине бер аҙ һағайтырға ла тейеш ине, ләкин минең күңелдә шунда уҡ был кешегә ҡарата ышаныс осҡондары ҡабынды. Был сетерекле мәсьәлә хаҡында хәбәр йөрөтөү ни тиклем шөбһәле икәнен дә онотоп, беҙ уның менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүгә күстек. Әңгәмәне хозурлыраҡ дауам итергә теләп. мин мейес башында шажлап ултырған балды ҡунаҡҡа эсереү ниәте менән уны үҙемдең землянкаға алын ҡайтҙым. Бына шул саҡта, хушлашыр алдынан, мин уға: «Әгәр беҙҙең халыҡтың ҡанлы-шанлы тарихын бик белгең килһә, һиңә Муса Мортазиндың «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән китабын уҡып сығырг-а кәрәк», — тип кәңәш иттем. Ул шунда

уҡ: «Ә мин ул китапты ҡайҙан таба алам», — тип һораны. Мин, бик күп уйлап тормай, ул саҡта Әлмөхәмәт ауылында йәшәүсе, МТС эргәһендә ойоштороло-ған даими комбайнерҙар курсының мөдире, ошо китаптың эйәһе Өмөтбаев Яхъя ағайыма ҡош телендәй генә хат яҙҙым да Нәжип ағай ҡулына тотторҙом.

Нәжип ПҙелбаГ»

Бер нисә аҙнанан Өфө мисәте менән Нәжип ағайҙан хат та килеп төштө. Миңә ялҡынлы сәләм күндергәндән һун, ул түбәндәгеләрҙе яҙғайны: «Рамазан туған! Һинең хатың буйынса Әлмөхәмәттәге ағайыңа инеп сыҡтым. Лә-кин ул өйөнөң аҫтын өҫкә килтереп эҙләһә лә, теге китапты таба алманы, өйөнән ғәйеп булған». Быныҡ ише китаптарҙың ул замандарҙа ни өсөн башы-тояғы менән юҡ булыуын, бындай бысраҡ эштәрҙе кемдәр башҡарыуын мин тик һуңынан ғына, үҙемдең ҡайһы бер нәмәләр өйҙән ғәйеп була башлағас ҡына төшөндөм.

Нәжип аға Иҙелбаев менән беҙ бына шулай танышып киттек. Бер нисә йылдан һуң, Өфөгә юл төшкәндә, был күңелсәк ағай менән Ленин һәм Карл Маркс урамында урынлашҡан подвалдарҙың да «хәлен» белеп сыҡҡыланыҡ.

1952 йылдың аҙағында мине, марксизм-ленинизм классиктарын башҡорт теленә тәржемә итеүселәр төркөмөндәге тыңлаусыны, өлкә комитетҡа саҡырҙылар. Был йылдарҙа матбуғат секторының мөдире булып эшләгән С. С. Ҡыуатов кабинетына килеп ингәндә, стена янындағы ултырғыста миңә таныш Нәжип аға Иҙелбаев һәм уның йәмәғәте, ул ваҡытта башҡортса тәржемә эше менән шөғөлләнеүҙән тыш машинкала ла оҫта баҫыусы Әминә Ҡыуатова ултыра ине.

Был көндәрҙә 1952 йылда республикала ойоштороло-ған партияның Стәрлетамаҡ комитеты һәм башҡарма комитеты органы «Сталин байрағы» гәзитен журналистар менән комплектлау эше бара икән. Баҡһаң, мине шул гәзиттең башҡортсаһына мөхәррир, о Иҙелбаевтарҙы әҙәби хеҙмәткәр итеп тәҡдим иткәндәр икән. Бер нисә көндән Иҙел-

баев ағай менән Стәрлетамаҡҡа юлландыҡ. Өфөнән генә түгел, башҡа тарафтарҙан да эшкә ебәрелгән төрлө тармаҡтың йөҙәрләгән эшмәкәрҙәрен, яңы учреждение һәм ойошмаларҙы ул саҡтағы ҙур булмаған ҡалала һыйҙырырлыҡ биналар ҙа, фатирҙар ҙа булмай сыҡты. Стәрлетамаҡҡа килеп төшкәс тә, беҙ үҙ гәзитебеҙҙең «Сталин байрағы» икәнен ишеттек. Гәзит сығарыу өсөн ни типографияһы, ни эш урыны әҙерләнмәгән, ә өлкә комитет бюроһы, тыумаған балаға аҙан әйтеп, исемен дә ҡушып ҡуйған. Бер һүҙ менән әйткәндә, Стәрлетамаҡ өлкәһе хеҙмәтсәндәрен «яңы еңеүҙәргә» әйҙәргә тейешле байраҡтың тыуы түгел, ағасы ла юҡ ине әле. Әммә гәзит редакцияһына ул замандың шәпле генә журналистары ебәрелгәйне, шулар араһында «Красная Башкирия» гәзитенән беҙҙең киләсәкке башлыҡ Михеев Г. Г., Крылов, Дьяконов, «Водник» гәзите мөхәррире Сафонов А. С., республиканың киләсәкке билдәле журналисы Серафим Вайсман, Йәүҙәт Хөсәйенов, яҙыусы Сулпан Иманғолов үҙ ҡәләмен башлап ошо редакцияла тибрәтте. Стәрлетамаҡ ҡалаһының элекке башҡорт хөкүмәте урынлашҡан урамында ағастан һалынған, 21 кешегә иҫәпләнгән «Восток» исемле ҡунаҡханаһы бар ине. Беҙҙең барыбыҙҙы ла шунда урынлаштырҙылар.

Ғинуар айының сасҡау һыуығында үтә йоҡа стеналары боҙланып бөткән һыуыҡ, бәҙрәфһеҙ ҡунаҡхананан кем нисек шулай яңы ғына ойоша башлаған 1-се Май посселогына эшкә йыйылабыҙ. Беҙгә бүленгән бинала ла шул уҡ хәл. Кисә генә ҡуйылған батареяларҙы электросварщиктар йәбештереп булашалар. Бөтә коридор типографияға тәғәйен рулон-рулон ҡағыҙ, кәрәкле ҡорамалдар менән тулған. Эшкә килгән кешеләрҙән редакцияла Иҙелбаев-тарҙан да уңайлыраҡ урынлашҡан иптәштәр юҡ ине буғай. Уларҙы мәҙәни-ағартыу училищеһы директоры, «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенең мөхәррире Шәйех Ғимай улы Ғимаев үҙ фатирына индерҙе. Беҙ өшөп-туңып ултырғанда, улар, иртәнге сәйҙе туйғансы эсеп, ҡыҙара бүртенеп эшкә киләләр. Ә кис эш бөткәс, һәр саҡ оптимист Нәжип ағай: «Аҙағынан сәйен мәйгә ҡушып, дәдәндәр бөгөп ит ашай», — тип ҡайтып китә. Әйтергә кәрәк, гәзиттең беренсе һанын сығарыуҙа тәжрибәле журналист Шәйех Ғимай улының ярҙамы сикһеҙ ҙур булды. Быға Нәжип ағайҙың уларҙа йәшәүе лә булышлыҡ иткәндер. Русса гәзиттә баҫылырға тейешле барлыҡ материалды ул тәржемә итә, о ҡатыны машинкала баҫа. Улар әҙерләп биргән материалды редакторларға, төҙәтергә батырсылыҡ етмәй — бында эш тәжрибәһе юҡ өҫтөнә, тәржемә өлкәһендә лә

ғилем йәдит ысулындағы мәҙрәсәләге тәүге уҡыу китабы «Мөғәллим әл-әүүәл»дән ары китмәгән. Бигерәк то Стәрлетамаҡта яңы ғына тамыр йәйеп, үҫә башлаған нефть химияһы сәнәғәтенә ҡағылышлы мәҡәләләр йонсота, уларҙың технологияһы тураһындағы терминдарҙы үҙ телебеҙгә ауҙарыу бәкәлгә һуға, сөнки редакцияла уны аҙ-маҙ һупалаған бер әҙәм юҡ. Тәржемә эшенең маһиры булыуына ҡарамаҫтан, Нәжип ағай ҙа, бармаҡтарын ҡуйы сәсенә батырып, әйтерһең дә, үҙенең сос тулҡындарында кәрәкле һүҙҙе эҙләй, уйға ҡала. «Шабаш, малай, бармай бит, бер ярты эсмәйенсә, осо-башына сығырлыҡ түгел был йомаҡтың», — ти ҙә юҡ-юҡ та үҙенең һуңғы теләген ғәмәлгә ашырып ҡайтҡылай. Миңә, әҙме-күпме партия органдарында эшләп, ҡәтғи ҡағиҙәләргә, икенсерәк әхләҡи ҡанундарға күнегеп өлгөргән йәш кешегә, журналистарҙың ҡайһы бер бәйһеҙерәк ҡылыҡтары оҡшап етмәй. Гәзит сыҡһа — байрам, әгәр инде берәй сәбәп менән гәзит сыҡмай ҡалһа — ҡайғы, тик шатлығын да, хәсрәтен дә кисереү тәртибе генә үҙгәрмәй — элекке журналистар традицияһында башҡарыла. Баштараҡ мин, был ғәҙәтте боҙорға самалап, елкә шыртын ҡабартып та ҡарағайным, ләкин «күпте күргән, күпте кисергән» журналистарҙың берҙәм фекере мине киресигенергә мәжбүр итте, һәм мин дә улар менән бер табандан атлай башланым. Был сетерекле мәсьәләләә мин Нәжип ағайҙың ярҙамына иҫәп тотҡайным, ләкин ярҙам итеү урынына ул был «йәмәғәт эшен» оло ҡәнәғәтлек менән үҙ ҡулына алды.

Шулай итеп, яңы ойошҡан өлкә комитеттан ҡағылаһуғыла, Нәжип ағайҙар менән гәзит сығарабыҙ. Эш бер аҙ яйға һалынғас, редакция хеҙмәткәрҙәрен фатир менән тәьмин итеү эше башланды. Яңы ғына төҙөлә башлаған 1-се Май поселогынан Г. Г. Михеевҡа, Нәжип Иҙелбайға һәм миңә бөтә уңайлылыҡтары менән өсәр бүлмәле фатир бүлделәр. Улар, үҙ ғаиләләрен Стәрлетамаҡҡа күсереп, бергә йәшәй ҙә башланы. Нәжип ағайҙың фатиры редакция бинаһына йәнәш кенә. Улар эшкә йәйәү йөрөй. Мин дә, булған ғына мөлкәтемде төйнәп, Стәрлетамаҡҡа күсеп килдем. Ләкин алда әллә ни төрлө һынауҙар үтәһе бар икән әле. 1953 йылдың мартында И. В. Сталин донъя ҡуйҙы. Уны барыбыҙ ҙа илап-һыҡтап һуңғы юлға оҙаттыҡ. Сталии менән хушлашҡас та, уның инициативаһы менән ҡайһы бер автономиялы республикаларҙа барлыҡҡа килгән өлкәләргә лә ясин уҡылды — улар ҙа йәшәүҙән туҡтаны.

1953 йылдың 24 апрелендә әле бер йыл да йәшәргә өлгөрмәгән, өлкә ҡорона ла етмәгән Стәрлетамаҡ менән хушлашырға тура килде. Был өлкәне һәм шуның кеүек көс-

хәл менән барлыкка килгән өлкәләрҙе Үҙәк Комитеттың карары менән ябып та куйҙылар. Апрелдең һуңғы йәкшәмбе көнө Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан йыйып килтерелгән партия-хужалык активына, совет работниктарына «Манифест» иғлан итеп, уның мәғәнәһен дә төшөндөрҙәләр: «Кайҙа теләйһең — шунда кит, бөгөндән һин азат». Ә ундай кешеләр өлкә мәркәзендә бер нисә меңләп йыйылғайны. Был «Манифест» бөтә булған эреле-ваклы турәләрҙе берҙәй тиңләне, субординация тигән нәмәнең әҫәре лә калманы. Өлкә комитетының бюро ағзалары менән косаклашып, үҙ кайғыларын бергә уртаклашып йөрөгән уларҙың шоферҙарын да осраттык беҙ ул көндәрҙә. Ә инде үҙебеҙгә калһа, ике аҙналык пособиены кеҫәгә һалып, бөтә журналистар менән Ашкаҙар буйына йүнәлдек. Бик матур сыуак көн нне. Барыбыҙ ҙа сисенеп, аяктарҙы Ашкаҙар йылғаһының текә ярына һалындырып, үҙ кайғыбыҙҙы Стәрлетамак шешәһе менон йыуҙык. Нәжип ағай, билдәле, был кампанияның кендеге булды. Кайғырырлык сәбәп тә юк түгел ине шул, эшләһәк — эшебеҙ, йәшәһәк өсәр бүлмәле казенный фатирыбыҙ бар ине. Ә минең, барлы-юклы мөлкәтте туҙҙырып, райондан күсеп килгәнгә туғыҙ ғына көн үткәйне. Шулай итеп, барыбыҙға ла үҙ төйәгебеҙгә әйләнә башлаған Стәрлене ташлап китергә тура килде. «Ә беҙгә Стәрлене ташлап китеүе чепуха ул. Был кала кәһәрле булмаһа, Зәки Вәлидиҙең Башревкомы ташлап китмәгән булыр ине», — тип беҙҙең яҙмышка Нәжип ағай нөктә төртөп куйҙы. Ләкин үҙе, бер кайҙа ла кузғалмай, ғаиләһе менән шул калала тороп калды. Беҙ уның менән бер нисә йылға аймылыш булып торҙок. Нисек кенә күңел тартмаһын, Өфөнән Стәрлегә барып күрешергә форсат етмәне.

Беҙ уның менән мин Өфөгә күсеп килгәс кенә осраштык. Ул былай булды. Мин, ниҙер уйланып, тыкрыкка окшаш Совет урамынан килә инем. Кинәт артымдан, бүре кыуған кеше һөрәнләгән шикелле, «һайт!» тигән тауыш ишетелде. Йығылып китә яҙҙым. Ул, бакһаң, Нәжип ағай икән. Әйткәндәй, шатлығынанмы әллә башка рәүешле үҙ кисерешен аңлата алмауҙанмы, ул үҙе менән кинәт осрашкан кешегә «һайт» тип кыскырыр ине. Уның был «һайт»ының ярайһы ғына күңелһеҙ тамамланғандары ла булғылаған. «Шулай бер сак Мәскәүҙе фашистарҙан азат итеүгә арналған юбилейға сакырылғанмын, йөрөй торғас, әлеге лә баяғы иҫәпле генә акса бөткән дә куйған бит хәйерсе. Ни эшләргә? Кемгә баш һалырға? Уйландыра бит малай», — тип хәтерләне аҙактан Нәжип ағай. Шунан Литфонд иҫкә төшөп калды, йүгереп барып та индем.

Секретары: «Директор кабинетында ултыра», — тигәс, уның исеменә ғариза яҙҙым да бүлмәһенең ишеген астым, ләкин директор өҫтәл артында булмай сыҡты. Көтәм, көтәм—юҡ. Бер саҡ ишек артынан уның ялбыр башы күренеп ҡалғайны, мин әлеге ғәҙәт буйынса «һайт» тип ҡысҡыр ҙа ебәр. Ул йөрәк ауырыулы түрә булған, имеш. Кинәт һиҫкәнеүҙән уның йөрәге тотҡан да ҡуйған, йөрәген баҫып, директор стенаға һөйәлде. Мин үҙем дә ҡурҡып киттем. Работниктары йыйылып, саҡ тергеҙеп алдылар тегене. Шулай ҙа йөҙ һум аҡса биреп сығарҙы. Изге кеше булды, ахыры, юғиһә ҡыуып та сығарыуы мөмкин ине», — тип көлдө аҙаҡтан Иҙелбаев ағай.

Яҙыусылар Союзы тарихында художестволы тәржемә әлкәһендә Нәжип Иҙелбайҙан да емешлерәк эшләгән әҙипте табыуы ҡыйын. Нәжип ағай туғандаш һәм рус әҙәбиәтенең генә түгел, бәлки сит ил классиктарының да күренекле әҫәрҙәрен тәржемә итеп, башҡорт уҡыусыларына еткереүсе булды. Джек Лондон, Н. Гоголь, С. Аксаков, А. Чехов, М. Горький, Н. Погодин, П. Бажов, С. Михалков һәм башҡа бик күп яҙыусыларҙың хикәйәләрен, повесть һәм романдарын республика уҡыусылары ошо әҙиптең арымай-талмай башҡарған ижади эшмәкәрлеге арҡаһында уҡыны. Сыңғыҙ Айтматовтың персонаждарын да башҡортса һөйләтеүсе Нәжип Иҙелбай булды.

Ҡаҙаҡ әҙәбиәте классигы Мохтар Аүәзовтың «Абай юлы» эпопеяһын башҡорт уҡыусыларына бөтә тәрәнлеге һәм нескә милли колориты менән еткереү өсөн ул бигерәк күп көс һалды.

Уның тәржемә өлкәһендәге баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте үҙе бер айырым тикшеренеүҙе талап итә. Ләкин күпмегенә тырышып эшләһә лә, мәрхүм шағир үҙ тормошонда мохтажлыҡты урап үтә алманы. Мохтажлыҡ уға йыш ҡына юлдаш булды. Хәйер, хәҙер әҙиптәр менән аралаша башлағас, мин дә ярайһы уҡ аңланым инде. Шуны ихлас хаталанмай әйтә алам — элекке Совет илендә (хәҙер бигерәк тә) матди яҡтан ижад кешеһенән дә ярлыраҡ, бөлгөнлөккә дусар ителгән ҡатлам булмағандыр. Ләкин «ҡалта»быҙға[1] эҙ генә бол ҡупһа, уның менән ни ҡылырға икәнен беҙ бер кемдән дә һорамайбыҙ инде. Нәжип ағай ҙа ошо ҡағиҙә буйынса йәшәне. Аҙнаһына бер тапҡыр ул үҙенә байрам яһар ине. Билдәләнгән көндә аш-һыуға бик тә маһир Биби еңгә, ҡулына оло сумка тотоп, баҙарға сы-

---

[1]Ҡалта (ҡаҙаҡса)—кеҫә. Иван Калита батшаның ҡушаматы шул «ҡалта» һүҙенән алынған.

ға. Сират тороп, һарыҡтың билдәмәһен, һум итен алып ҡайта ла бишбармаҡ бешерә. Хужабикә өҫтәл әҙерләп бөтөүгә муйынына еүеш таҫтамал ураған Нәжип ағай ах та ух килеп, тирләп-бешеп мунсанан ҡайта. Бына улар, ҡапма-ҡаршы ултырып, һөйләшә-гәпләшә ҡунаҡ була. Был яҡшы ғәҙәт Нәжип ағай донъя ҡуйғансы һаҡланып килде. «Шулай итеп, мин аҙнаһына бер тапҡыр, һимеҙ ит бешертеп, тамаҡты туйҙырып алам. Бүре лә көн һайып ит ашап тормай ҙа инде», — тип йыш ҡына көлөр ине Иҙелбаев ағай. Юҡ-юҡ та килеп тәҙрә шаҡыған шул мохтажлыҡ касафатылыр инде уны һуңғы йылдарҙа аҡсаға бағышланған шиғыр яҙырға ла мәжбүр итте.

Аҡса, аҡса, үсмен һиңә,
Булһаң да тик тәнгә аҙыҡ,—
Рәхәтеңдән михнәтең күп,
Ҡағаһың гел йәнгә ҡаҙыҡ.
Тәүҙә һине табып булмай,
Баш ватып, тир түгәһең,
Тапҡас, тыныс йоҡлай алмай
Тағы бер интегәһең.
Әммә был фани донъяла
Шунһыҙ һис көн күреп булмай, —
Ҡайҙа ғына барма, һинән
Бөтәһе лә: «Аҡса давай!»

Ләкин һәр саҡ ыҫпай ғына кейенеп йөрөгән был танылған шағир һуңғы көндәренә тиклем бер ҡасан да үҙ тормошона зарланманы. Тәкдиренә яҙған «өлөшөнә тейгән көмөшөн» үҙ иңендә сабыр ғына күтәреп, юғары рух менон йәшәүен дауам итте. Был ғына ла түгел, уның ижадында илебеҙҙең сәскә атыуы, Ватанға һәм партияға бирелгәнлек темаһы ҙур урын ала.

Беҙҙең эшебеҙ үлемһеҙ, беҙ партия менән бергә.
Иң матур тормош төҙәйбөҙ Ленин үҙе тыуған ерҙә, —

тип йырланы шағир. Бына шул үҙ позицияһына бинаэн (ярашлы рәүештә) ул үҙен иленең намыҫлы, үҙ юлында һис яңылышмаҫ ысын патриоты итеп тойҙо.

Нәжип Иҙелбаев Ватанға булған патриотик тойғоһон шиғырҙарында ҡәләм менән генә түгел, Мәскәүҙе фашистарҙан азат итеү өсөн барған ауыр алыштарҙа ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, уҡсы рота командиры сифатында үҙенең ҡайнар ҡаны менән дә яҙҙы.

Донъя ҡуйырҙан алда ун йыл буйы тиерлек беҙ уның менән һәр йәй Ирәндек ҡосағында, легендалар менән һуғарылған атаҡлы Талҡаҫ күлен һыулаған Баймаҡ ял

йортонда осраша инек. Ҡайһы саҡта ял йорто администрацияһы Нәжип ағай менән осрашыу кисәләре лә ойошторор ине. Публиканың төрлө булыуына ҡарамаҫтан, йәмәғәте Биби еңгә менән сәхнәгә сығып баҫҡан шағир, тыңлаусыларҙың йөрәген әсир итерлек, тойғоларҙың нескә ҡылдарын тибрәтерлек шығырҙар уҡып, уларҙың күнелдәрен арбар ине. Ә кистәрен ҡар кеүек аҡ костюм, ҡыҙыл галстук таҡҡан күренекле шағирыбыҙ асыҡ эстраданы бер итеп бейеп алыр ине. Бер аҙ дәртләнә төшкәс, ҡулындағы таяғын әллә ҡайҙа ырғытып, шул көйөнсә баҫа башлар ине. Беҙ уның менән көн дә иртә менән Талҡаҫ ярында осраша инек, сөнки көндөң нисек булыуына ҡарамаҫтан, икебеҙ ҙә ярыша-ярыша һыу керәбеҙ. Ял йортона ҡайтҡан саҡта һәр саҡ ҡулындағы радиоалғысты ҡолағына ҡуйып, һуңғы яңылыҡтарҙы тыңлар ине лә: «Ай-һай, беҙҙекеләр бешә бит, малай, тегеләрҙең эше хөртөрәк һиҙелә түгелме?» — тип өҫтәп ҡуйыр нне.

Ҡайһы саҡта түш кеҫәһенә сылбырлы сәғәт һалып, тройка кейгән Нәжип ағай кеше менән танышҡан саҡта, мәрәкәләп, Островскийҙың «Бирнәһеҙ ҡыҙ» персонажына эйәреп: «Беренсе гильдия сауҙагәре Паратов әфәнде»,— тип шаяртыр ине. Ошо ҡиәфәте һәм ыҫпайлығы менән ул ысынлап та сауҙагәргә тартым ине.

Ул һуңғы утыҙ йылда хәләл ефете Биби ханым менән татыу, бәхетле тормош кисерҙе, һүҙгә тапҡыр, эшкә тилбер, аш-һыу тәрбиәһен яҡшы белгән Биби ханым менән ул бала хоҡуғында йәшәне тиһәк то, хата булмаҫ. Хужабикә уға йыш ҡына: «Минең кантоным», — тип өндәшер ине. Ә был һүҙ Нәжип ағай күңеленә майҙай һеңер булды. Ғаиләлә ошондай йәшәү рәүеше ниндәй башҡорт иренә хуш килмәһен. Биби ханым Нәжип ағай ижадының күп өлөшөн үҙ башынан кисерҙе тиһәк тә, дөрөҫ булыр, тип уйлайым, сөнки ул машинкала бынамын тигән баҫыусы ғына түгел, уның шығырҙарын яттан һөйләп, пропагандалаусы ла булды.

Үҙ ғүмерендә мәрхүм шағир бер ҡасан да үҙ өлөшөн даулап, һайғау һөйрәп йөрөмәне, хоҙай биргән ризыҡты ейеп, нимә бар — шуға риза булып йәшәне. «Ҡустым, берәй әҫәр яҙһаң, барыбер сығармай әмәлдәре юҡ уларҙың. Ҡасан да булһа донъя күрә ул», — тип йыуатыр ине ул үҙен. Яҙған әҫәренә аяҡ ҡуйып, әллә нисә тупһалар аша әрһеҙләнеп йөрөргә кәрәклекте барыбер төшөнә алмай донъянан китте. Бына шуға күрә лә, ул ихлас күңелле ысын кеше, шиғри йәнле тәбиғәт балаһы ине, тип ысын күңелдән әйтә алам.

БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНЕҢ КӨҘГӨҺӨ

Ай Ирәндек, Ирәндек,
Күгәреп ятҡан Ирәндек.
Шул Ирәндек ҡуйынында,
Ҡыҙыл һыуы буйында
Барҙыр ауыл – Ҡолбаҡты.
Шул ауылда бер ил бар,
Йәйҡарстан исеме;
Мең тапҡырға аҫаулы
Исеменән есеме...

Ким Әхмәтйәнәовтың «Мәдхиә-и Йәйҡары» исемле баҫылмаған ҡобайырынан өҙәк.

Ошо юлдарға күҙ йөрөтөп сыҡҡас та, һәр кемдең башына: «Ҡолбаҡты ауылының эсендә был ниткән Йәйҡарстан тигән ил булыуы мөмкин?» «Нишләп әле Ким Әхмәтйәнов ошо Йәйҡарстан тигән илгә дан йырларға булған?» — тигән тәбиғи һорау килеүе мөмкин. Эш шунда: Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылына беренсе нигеҙ ташы һалыусыларҙың береһе Йәйҡар атлы ил ағаһы булған.

Уның 1768 йылда донъяға килгән Өмөтбай исемле улы XVIII быуаттың аҙағында Ҡазанда «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһендә белем алып, указлы мөдәррис, йәғни урта һәм юғары уҡыу йорттарында уҡытыу хоҡуғына эйә, император Павел I ҡул ҡуйған документ менән ошо иленә әйләнеп ҡайтҡан арҙаҡлы ир булған. Үҙенә хәләл ефетлеккә Ҡаҙандан Мөхиббә исемле абыстай (абыз түтәй) менән никахлашҡан. «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһенә юлланырҙан байтаҡ элгәре атаҡлы Бохара, Сәмәрҡәндтә ғилем алыу менән бер ҡатарҙан ундағы арыҡ үткәреү, һуғарыу эштәре менән ныҡлап танышҡан, тыуған яҡтарыңа ҡайтҡас, үҙ ырыуҙаштары менән кәңәш ҡороп, бөгөнгө Хәлил һәм Әлмөхәмәт ауылы араһында, Дарыулы һыуы уйһылығында арыҡ төҙөргә керешкән, шул буйҙа ятҡан болонлоҡтарға һыу сығарған, сәсеүлектәрҙе һуғарған. «Өмөтбай арығы» тип аталған ауылдың был хазина төбәге Әлмөхәмәт ауылының Йәйҡар тигән (Өмөтбайҙың атаһы) иң ҙур ырыуын иген-бесән менән тәьмин иткән, ялан яҡтарында йыш ҡабатланып килгән йот йылдарында ауыл халҡын, малың аслыҡтан һаҡлаған.

Әлмөхәмәт ауылында ун биш йорт хужаһынан торған «Ерҙе бергәләп эшкәртеү товарищество»һы 1925 йылда ошо «Өмөтбай арығы» нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Уның беренсе хужаһы булып ошо Өмөтбай ҡарттың ейәне, Ким Әхмәтйәновтың атаһы Әбүзәр Әхмәтйәнов (Өмөтбаев) булған. Атайымдың яҙмалары араһында ошондай юлдар бар: «Ун биш йорт хужаһы «Өмөтбай арығы»ның тауарище-

стуаһында эшләп, быйыл, йәғни 1925 йылда, 75 кәбән бесән алдыҡ. Үҙебеҙ ҙә, малыбыҙ ҙа ҡышты туҡ сыҡтыҡ».

Ким Әхмәтйәнов

Ошо «Өмөтбай арығы» Буденный исемендәге колхозға һуғыш башланғанға тиклем тоғро хеҙмәт итте, малына ла, халҡына ла астан үлергә бирмәне. Ләкин һуғыш ваҡытында емерелгән, туҙынған ошо беҙҙең олатайҙар ҡомартҡыһын яңынан аяҡҡа баҫтырыу эше уларҙың техника менән ҡоралланған ейәндәре-бүләләренең, йәғни беҙҙең, ҡулыбыҙҙан килмәне. Күпереп үлән үҫкән, хушбый бөркөп ултырған сәскәле туғайҙа бөгөн елгә һыҙғырып ултырған йомрандарҙы ғына күрәһең. Аяныс хәл!

Өмөтбайҙың улы, йәғни Ким Әхмәтйәнов менән беҙҙең олатай Мөхәммәтвәли ҙә, «Мөхәммәдиә» бөтөрөп, указлы мөдәррис дәрәжәһе алып ҡайта, сөнки ауылда XVIII быуат аҙағында асылған өс йөҙ шәкерт уҡыған атаҡлы мәҙрәсә бҳла. Уны ла беҙҙең олатай Өмөтбай мөдәррис асҡан һәм ғүмере буйы уның остазы булған.

Революциянан һуң Өмөтбаевтар әллә нисә фамилияға айырылды. Шул иҫәптән ошоға тиклем Өмөтбаев булып йөрөгән Кимдең атаһы һәм олатаһы ла, репрессия елпеүенән ҡурҡып, икенсе фамилияға күсте.

Ким Әхмәтйәнов тураһында яҙа башлап, ырыу тикше-, реүгә күсеп китеүем өсөн түбәнселек менән ғәфү үтенәм. Эш шунда: тапанды, саңдау ер бер ниндәй ҙә үҫенте бирмәй. Ким Әхмәтйәнов хаҡында һүҙ йөрөткәндә, «тамыры ниндәй — олоно ла шундай», «ояһы ни — осоҙо ла шул», тип халыҡ һүҙе менән әйтергә тура килә.

Килешһеҙерәк булһа ла, шундай һүҙ ысҡындырырға батырсылыҡ итәм: Ким Әхмәтйәнов, бәлки, шул Өмөтбай йондоҙоноң һуңғы сағылышылыр.

Атаһы Әбүзәр ағай, ғүмер буйы ауыл түрәһе булып, вазифалы ғына эштәр башҡарыуға ҡарамаҫтан, үҙенең берҙән-бер улын бер ҡасан да арҡаһынан ҡағып иркәләмәне. Туған булыуҙан ғәйре, күрше генә йәшәгәс, белеп-күреп йөрөлдө: Әбүзәр ағай унан үҙе кеүек яңы тормош

өсөн йәнен физа ҡылырлыҡ эшмәкәр әҙерләргә тырышты буғай, ләкин Ким атаһы юлынан китмәү генә түгел, фирҡәгә лә инмәне, икенсе һуҡмаҡты—үҙ һуҡмағын һайланы.

Ким холҡо, фиґеле менән атаһының ҡапма-ҡаршыһы булып үҫте. Әбүзәр ағай ҡыҙыу холоҡло, йәне-тәне менән яңы тормошҡа бирелгән, шуның тантанаһы өсөн көрәшеү генә түгел, теләһә ниндәй саралар ҡулланырға ла ҙәҙер торған кеше ине. Советҡа, колхозға һүҙ тейҙергән кешене үҙенең шәхси дошманы хисапланы. Ә Ким әсәһенә — Йәмилә еңгәйгә оҡшап, тыныс, холоҡло, тыйнаҡ, әҙәпле, хатта сиктән тыш оялсан булып үҫте.

Ауыл мәктәбен бөтөргәс, Ким Темәс педучилищеһына юлланды. Башҡа ауыл түрәләре бында уҡыған балаларын пар ат егеп килтерерҙәр ине. Ә Ким ҡусты, үҙе кеүек ауыл малайҙары менән, моҡсайына сөсө икмәк, ҡорот-талҡан һалған килеш, Темәскә, Ирәндек артылып, йәйәү йөрөнө. Ғөмүмән, уҡыу осоронда ғына түгел, ижади эшмәкәрлегенең бөтә дауамында ла ул үҙ һуҡмағының һәр боролошон өйрәнә-өйрәнә, туҡтай-туҡтай үтте. Уның үтәһе юлын еңеләйтеү өсөн алдан ҡул һуҙып тороусылар булманы тиерлек.

Хәҙер әсе үкенес менән иҫкә алырға тура килә. Уның осоронда ижади эш башлап, Өфөгә килгән башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренең тормош «юлы» бик тә «ябай» ине: башта подвал йәки кемдәлер өйҙәш тороу, шунан һуң ятаҡ, ә инде бала-сағалы булып, башына ҡырау төшә башлағас — фатир. Был тәңгәлдә хәҙер ҙә бер ни ҙә үҙгәрмәне, тиһәк тә хилаф булмаҫ.

Уның менән мәңге иҫтә ҡалырлыҡ ҡыҙыҡлы-ҡыҙыҡлы ғына осрашыуҙар булды.

Темәс педучилищеһын «отлично»ға тамамлағас, ул Башҡорт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә уҡырға инә. Уның уҡыу йылдарына һис кенә лә тулы баһа бирә алмайым, тик бала сағынан яҡшы өлгәшкән уҡыусы бында ла «мах» бирмәгәнен генә беләм.

Уның башҡа кешеләрҙән берҙән-бер өҫтөнлөгө бар ине: ул да булһа уның үткер теле. Ул, ҡайһы бер кешеләр һымаҡ, һүҙҙән боламыҡ бешереп ултырманы — уның теленән ысҡынған һүҙ ян керешенән атылған уҡ кеүек мәргән, тоҫҡаған урынға туп-тура тейер ине. Ул бер ҡасан да алъюҫыҡҡа үҙ уғын атманы. Ошо ҡағиҙәгә ғүмере буйы тоғро булып ҡалды. Ғөмүмән, алдан сабып сығып хәбәр һөйләмәне, тыйнаҡ, әҙәпле булды. Ҡайһы саҡта күңелле, шаулы мәжлестәрҙә сәғәттәр буйына шым ғына ултырып, кә-

рәк урында ике-өс һүҙ ыскындырыр ине. Ләкин уның был әйткән һүҙҙәре күп ағай-энене ныҡ ҡына уйландырырлыҡ була торғайны. Шуға күрә лә «айт» тигәнгә «тайт» тип торған ҡайһы бер замандаштары уны яратып та бөтөрмәне.

Ул бер ҡасан да һүҙҙән тирмән ҡуласаһы әйләндермәне, һүҙҙең ҡәҙерен белде. Уның яҙған һәр һөйләмендә, һүҙҙәргә урып тар булһа ла, фекерҙәре тәрән һәм киң булды.

Рәйфә киленгә өйләнгәс, Ким Архирейка менән Салауат урамы сатлығында, Аҡиҙел ярының иң текә ҡабағының аҫтында, бәләкәй генә йорт һалып, донъя көтә башланы. Ҡумта кеүек, йәшел ағастарға күмелеп ултырған был йыйнаҡ ҡына йортҡа беҙ йыш ҡына килә инек. Салауат баҡсаһынан алыҫ түгел тарлауыҡта йәшеренеп ултырған был йорттоң ҡыйығын күргән һайын башҡа: «Был тиклем текә яр аҫтында ултырған был йортҡа нисек утын, һыу ташыйҙар икән, ҡыш көндәре нисек төшөп-менеп йөрөйҙәр икән?» — тигән уй килә торғайны.

Эйе, Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәновтыц тормош юлы ғына түгел, ғилми юлы ла бик түбәндән, аҫҡы ҡатламдан башланды. Ул әҙәбиәт донъяһына үҙ Әлмөхәмәтенән йәйәүләп килде. Шиғриәт көмбәҙенә Аҡиҙел ярҙарынан өҫкә күтәрелгән текә һәм тар һуҡмаҡтарҙан үрмәләп күтәрелде.

Ул, был фани донъяла әҙ йәшәп, күп мираҫ ҡалдырған башҡорт әҙәби тәнҡитселәренең, әҙәбиәт белгестәренең иң күренеклеләренең береһе. Башҡорт әҙәбиәте серҙәренең көҙгөһө булған Ким Әхмәтйәнов — үҙенең эш өлкәһендә туҡһанға яҡын фәнни хеҙмәт ҡалдырған ғалим.

Үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә ул башҡорт әҙәбиәтенең поэзия жанрын тикшереү һәм уны теоретик дөйөмләштереү буйынса фәнгә тос өлөш индерҙе. Башҡорт шиғриәтенең сафлығы, паклығы һағында торған әҙәби тәнҡитсе һәм ҙур белгес Ким Әхмәтйәновты башҡорт әҙәбиәте бөгөн дә юҡһына.

Ул 1980 йылдың 9 ноябрендә, тыуған туғаһы — Әлмөхәмәткә ҡайтып, 48 йәшендә донъя ҡуйҙы.

Был мәҡәлә-хәтирәне ошо шиғыр юлдары менән тамамлағым килә:

Ниндәй аҡыл шәме һүнеп ҡалды,
Ниндәй йөрәк тибеп туҡтаны...

1946 йылдың март айҙары...

Бөтә илде ялмап үткән дәһшәтле һуғыш һөҙөмтәһе бар ерҙә ярылып ята. Халыҡтың өҫтө-башы ла, ашар тамағы ла наҡыҫ ҡына, ләкин киләсәккә яҡты өмөт һәр кемдә ниндәйҙер дәрт һәм ышаныс уята. Ул саҡтарҙа шөһрәте Урал аръяғына ғына түгел, төрлө тарафтарға киткән Сибай руднигына яҡын-тирә ауылдарҙан кеше ағыла. Уларҙың күбеһе әле яурындарынан хәрби шинелдәрен дә һалмаған кисәге һалдаттар, мылтыҡ, ҡылыс тотҡан ҡулдарына бөгөн кәйләә-көрәк алып, илгә иң кәрәкле мәҙән— алтын, баҡыр табыу өсөн шахталарға, карьерҙарға төштө. Ул ваҡытта «Сибайзолото» тип аталған рудникта төрлө яҡтан йыйылған халыҡ көндән-көн күбәйә. Торлаҡ, кешесә тормош шарттары тураһында уйлаған, уны администрациянан даулаған бер әҙәм дә юҡ. Сибайға килеп туҡталған һәр кеше үҙ көрәге менән сиҙәм ала ла кәҫтән торлаҡ һалып керә. Үҙе генә йәшәмәй, ул «ояһына» туғантыумасаһын, таныш-тоноштарын да фатирға индерә. Үҙара бер ниндәй талаш-тартыш та сыҡмай, бер кемдә лә артыҡ байлыҡ булмағас, көнләшеү ҙә, ыҙғышыу ҙа юҡ, барыбыҙ ҙа бер тигеҙ.

Ләкин тормош нисек кенә ҡыҫыҡҡы, ауыр булмаһын, рудникка йыйылған нигеҙҙә йәш халыҡтың йыр-моңға ныуһағаны күренеп тора. Шунда уҡ, һуҡыр сыҫҡан шикелле яртыһы тигәндәй ерҙән ҡаҙып, йәштәр ятағы итеп эшләнгән землянкала көн һайын тигәндәй киске уйындарға йыйылабыҙ. Йәштәрҙең ошо эске дәрте урғылып тороуын белгән шикелле, бындағы алтынсыларҙы Баймаҡ күсмә колхоз-совхоз театры йыш ҡына килеп хеҙмәтләндереп китә. Коллектив үҙ спектаклдәрен ғәҙәттә Сибай баҡыр заводының ағас клубында ҡуя, ләкин ул тамашаларҙы ҡарау бәхете бөтә кешегә лә эләкмәй. Сәхнәлә күбәләк һымаҡ осҡан театр артистарын эстән йылы боҫ бөрккән шар асыҡ ишектән күҙ ҡырыйың менән генә күреп ҡайтһаң да бик шатһың.

Шулай бер көн мин фатир хужалары менән иртәнге сәйҙе эсеп тә өлгөрмәнем, землянкаға береһенән-береһе һылыу, тал сыбығындай өс егет килеп инде. Улар хужалар һәм һалдат кейемендәге минең менән ҡулдарҙы һелкәһелкә күрештеләр ҙә шунда уҡ танышырға тотондолар. Хужабикәнең туған тейешлеһе, ҡуңыр түңәрәк битле, мәйыл кеүек сөм-ҡара күҙҙәре яныП торған Ырыҫҡужин Фәйзрахман тигәне, үҙ иптәштәрен:

— Бына быныһы әле атаҡлы түгел, ләкин киләсәктә шуға өмөтөн өҙмәгән театрыбыҙҙың мәшһүр ҡурайсыһы Ишмулла Дилмөхәмәтов була, — тип билен һыға быуған, һалдат гимнастеркаһы өҫтөнән иҫке генә һоро пинжәк, галифе салбар, бик үк яңы булмаһа ла, ниҙер менән йылтыратып майланған итекле, ҡарсыға танаулы, оҙонсараҡ күркәм битле, артҡа таралған ҡара йылтыр сәсен һыйпап, күкрәген киреберәк ситтәрәк торған һомғол буйлы егеткә төрттө.

Ишмулла Дилмөхәмәтов

Ул үҙ иптәшенең тәкдимен ысын күңелдән ҡабул итмәй һымаҡ, сәхнә алдына сығып тамашасыларға баш эйгән шикелле, һул ҡулына тотҡан ҡурай ҡынын ҡултығына ҡыҫты ла, нур сәсеп торған күҙҙәрен уйнатып, ҡарлуғас ҡанатындай ҡыйғас ҡаштарын яҙып, беҙгә баш эйҙе.

— Ә инде быныһы, — тип дауам итте Фәйзрахман, киләсәктә данлыҡлы Ғиниәт Ушановты алмаштыра торған артисыбыҙ Марат Баһауетдинов була, — тип ыҫпай кейенгән, аҡ ҡына битле, ҙур түңәрәк күҙҙәренең ҡабағын уратып тигәндәй алған ҡуйы ҡара ҡашлы егеткә күрһәтте.

— Ә инде мине белмәгән кеше бында юҡтыр, тип уйлайым. Белмәһәләр, күптән белергә ваҡыт, бына мин Хәсән ауылының бейеүсеһе Фәйзрахман Ырыҫҡужин булам,— тип ырҙын шикелле тапалған ер иҙәнгә дағалы итегенең эҙҙәрен ҡалдырып тыпырҙап алды.

Хужабикә самауырҙы яңынан шаулатып ебәрҙе. Тәпәш кенә тәҙрә төбөнә һөйәп ултыртылған өҫтәлгә һыйынышып ултырып, сәйгә яңынан тотондоҡ. Хәйер, башҡа аҙыҡ-әүҡәткә етешһеҙлек булһа ла, Сибай старателдәренә таҡта сәйҙе һәр саҡ етерлек биреп торалар ине. Хужабикә, уңайһыҙланыуынан яулығының осо менән ярты битен ҡаплап, ашъяулыҡ өҫтөнә һоло ононан көлгә күмеп бешерелгән бер өшә килтереп һалды.

— Ошо Фәйзрахман ағайымдың ғәҙәте һәр саҡ шул булыр инде — алдан әйтмәй-нитмәй, кеше оялтып, баҫып килә лә инә, — тип һүкранды хужабикә.—Ай, әттәгенәһе, был айға тейешле нурмыбыҙҙы алалмай торабыҙ ҙа баһа,

мынауындай ҡунаҡтар алдында ҡайһылай" ҙа уңайһыҙ булды, — тип хафаланды. Фәйзрахман ынйы һымаҡ апаҡ тигеҙ тештәрен күрһәтеп һикертә көлдө лә:

— Әй, беҙгә, әртис кешегә, ошо өҫтәлдәге һый ҙа таптамам, беҙ яҡшы һый-хөрмәткә ғәҙәтләнмәгән, ауыл һайын йөрөп, беҙ һәр төрлөһөнә өйрәнеп бөткәнбеҙ инде, — тине лә, әйҙә, ағай-эне, етешегеҙ, тип иптәштәрен ҡыҫтаны. Ә улар инде бик үк тартынып торманы. Хужабикә ҡулы менән һындырып һәр кемгә тотторған һыныҡҡа ҡушып, маҡтай-маҡтай шәкәрле сәй эстеләр.

Сынаяҡ аҫтына һалған сәйҙе бейәләйҙәй ҙур усына ултыртып, сәй һемереп уртала ултырған Ишмулла тигәне, һоло икмәген көйшәй-көйшәй, башын яурынына ҡырын һалды ла, һул ҡашының ҡойроғон өҫкә сөйөп, һүҙ башланы:

— Уйлап ҡараһаң, тәмле-татлыны самаһыҙ ашауҙың бер яғынан зыяны ла күп. Әртис кешегә ашау килешмәй ул. Яратылған ат шикелле, уның эсе һәр саҡ һыртына йәбешеп торорға тейеш. Шулаймы? — тип ул иптәштәренән яуап көттө. Тегеләре икеһе берҙәй баш һелккәс, һүҙен дауам итте. — Бына, пример, мин үҙем ныҡ туйһам, дәртләнеп, ҡурай уйнай алмайым, — тип хәйләкәр генә йылмайҙы. Уның был һүҙен үҙенә төбәлгән төртмә хәбәр тиеберәк ҡабул иткән хужабикә шунда уҡ эләктереп алды:

— Ҡайҙа һуң, мынауы сәйгә тәрлиңкә тултырып һары май" һалып, шуны көрпәсәткенән табала бешерелгән эҫе икмәк менән ашап ебәрһәң, беребеҙҙең дә эсен тишмәҫ ине лә ул, юҡ бит, хәйерһеҙ, — тине.

— Ҡарындаш тиемме, еңгәй тиемме, ләкин ундай аҙыҡ асҡаҡһып йөрөгән әртискә килешмәй ул, уның эсенә тейә. Ундай ризыҡты ана байҙар ашаһын, ә беҙ — ярлы. Әртис һәр саҡ фәҡир булырға тейеш, байлыҡ әртис кешегә йоҡмай ул, — тип Ишмулла, башын артҡараҡ ташлап, ҡуңыр биттәренә ризалыҡ һыҙаттары йүгертте лә яңынан киң йылмайҙы. Хужабикә уның һайын ҡыҫтай-ҡыҫтай сәй яһаны. Сәй эсеп камил туйғас, ҡунаҡтар, рәхмәт әйтеп, үҙҙәре ултырған эскәмйәне стена буйына ҡуйҙылар ҙа яңынан теҙелешеп ултырҙылар. Ишмулла ике киң усын ҡайышы аҫтына тыҡты ла бармаҡтары менән эсенә һуҡҡылап алды.

— Туҡландыҡ, егеттәр, тамаҡ туйҙы бит, әй —тине. Шунан бер аҙ ултыра биргәс:

— Әй, егеттәр, был һоло икмәге ашағандан һуң беҙ, сәхнәгә сығып, өсәүләшеп кешнәргә тотонмаһаҡ ярар ине, — тине лә үҙе башлап көлөп ебәрҙе. Барыбыҙ ҙа уға

ҡушылып, шарҡылдап көлдөк. «Ну, малай, Абызгилдина[1] апайҙы аптыратыр инек. Нишләр ине икән, әй?» — тип ул иптәштәренә хәйләкәр генә ҡарап ҡуйҙы. Фәйзрахман көлөүҙән туҡтағас, битенә етдилек йүгертеп:

— Һин, Ишмулла, давай тәләкәләнеп теләһә ни һөйләп ултырма әле, бейеү көйөн уйнап ебәр. Бер талай сәй һеңдереп алайыҡ. Хәсәндәрҙән сыҡҡан бейеүсе мин генә тип уйлама. Бына бында Биишевтарҙан йәнә бер бейеүсе ултыра әле, — тип хужабикәгә ымланы. Уға ҡаршы ағастан юнып эшләнгән карауат өстөндә ултырған хужабикәнең сибәр битендәге ике бәләкәй генә соҡоро яҙыла төштө, ағаһына үпкәләгәндәй, ул алһыуланған битен уға борҙо ла йоҡа ғына ирендәрен бүлтәйтеп ҡуйҙы.

Ишмулла мөйөшкә һөйәлгән ҡыны эсендә ҡылтырлап ятҡан ҡурайҙарынан береһен һайланы ла башта, теленең осон сығарып, уның тишектәрен еүешләне, шунан бармаҡ остарына төкөрөп алды ла, ҡурайҙың йыуан башын усы эсендә өйләндереп, саҡын һөрттө. Башын уң яҡҡа ҡырын һалып, ҡурайҙың йыуан яғын ауыҙына терәне лә, күҙен йомоп, бергә төйнәгән ҡуйы сөм-ҡара ҡаштарын һикертте. Ҡурайҙы ҡымтыған ирендәрен дерелдәтеп, бер-нисә тапҡыр һыҙғыртып, башта аккорд алды, көй самаланы. Шунан һуң ғына ҡырын һалған йөҙөнә етдилек һыҙаттары өҫтәп, һажлатып «Зарифаны» уйнап ебәрҙе. Ирекһеҙҙән беҙҙең аяҡтар тыбырсына башланы. Бәләкәй генә тәпәш землянка ҡурайсының киң күкрәгенән ағылған дәртле моң менән тулды. Ишмулланың ҡабырғаһындағы бәләкәй генә бер ҡатлы тәҙрәнең ярыҡ өлгөһө, дәртле таҡмаҡҡа ҡушылған шикелле, зыңғылдап ҡуйҙы. Балсыҡ менән һыланған кәҫ стеналарға бәрелеп, ҡурайҙың көслө моңо ярым асыҡ ишек аша урамға урғылды. Тәүҙә бер нисә, ә һуңынан байтаҡ кеше минең хужаның землянкаһын һырып алды. Дүрт йыл ситтә йөрөп, башҡорт моңона, бигерәк тә уның тылсымлы, сихри ҡурайына, сарсап ҡайтҡан минең күңелдә был моң әллә ниндәй тәрән кисерештәр уятты.

Беренсенән, һуғышта ятып ҡалған ауылдаштарҙың, төрлөһө төрлө урында баштарын һалған, бергә ауыр фронт юлдары үткән иптәштәрҙең был көйҙө ишетеүҙән мәңге мәхрүм булыуҙарын, яңынан тороп, бер ҡасан да өҙә баҫып бейей алмаясағын уйлап, йән әсене, йөрәк әрнене, икенсенән, сылтырап аҡҡан көмөш шишмә шикелле, бер

---

[1]А б ы з г и л д и и а Ғәшиә Баязит ҡыҙы — Башҡорт АССР-ыныҡ халыҡ артисткаһы, Баймаҡ колхоз-совхоз театрына нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Ул оҙаҡ йылдар ошо театрҙың директоры булды.

талпынып, берсә моңайып сыҡҡан ҡурай тауышы йәшәү мәңгелеген раҫланы, тыңлаусылар йөрәгенә дәрт өрҙө, етешһеҙ донъя мәшәҡәттәрен ваҡытлыса булһа ла онотторо п, йәндәрен елкендерҙе.

Бик артыҡ ҡыҫтатып тормай, күптән табаны ҡысып ултырған хужабикә, иҙән уртаһында ике ҡулы менән күлдәк итәктәрен тотҡолап бер аҙ торҙо ла, зыр әйләнеп, бармаҡтарын шартлатып, бейергә төшөп китте. Эске дәрт менән тулған күҙҙәренән ҡыуаныс сатҡылары һибеп, Фәйзрахман, хужабикә бейегәндә, ҡулдарын сәпәкәйләп:

— Ана шулай-шушылай, өҙә баҫа биештәр, — тип һамаҡлай, ҡарындашына ҡеүәт өҫтәне. Көсләп-көсләп барыбыҙҙы ла бейергә төшөрҙөләр. Мин иҙән уртаһына баҫҡас, Ишмулла ҡурай тартыуынан туҡтап, үҙенә генә хас, йылы мөләйем ҡарашын миңә һирпте лә:

— Йә, һалдат ағай, һиңә ниндәй көй тартайым? — тип һораны. Мин, әллә ниндәй оҫта бейеүсе кеше шикелле:

— «Ҡарт Байыҡ»ты тарт, — тип махсус заказ биреп ебәргән кеше булдым. Ҡапыл үҙ һүҙемдән үҙем оялдым. «Мыҡты кеше, әллә кем булып, оялмай заказ биреп торған була»,—тип аҙаҡтан үҙ-үҙемде әрләнем. Ошоға тиклем ҡурайҙа «Ҡарт Байыҡ»ты уның һымаҡ башҡарған кешене ишетмәгәс, мин, иҙән уртаһында торған килеш, ҡаушап ҡалдым. Әлеге лә баяғы Фәйзрахман:

— Әйҙә, әйҙә, ағай кеше, көйҙө әрәм итмә, баҫ! — тип ҡыҫтағас, бер нисә тапҡыр иҙәнде әйләнеп, бейергә тура килде. Землянка тирәһен һырып алған кешеләрҙән бер-нисәүһен Фәйзрахман, һөйрәп тигәндәй, бейетергә алып керҙе.

Бейеүҙәр туҡтағас, Ишмулла маңлайына сыҡҡан тир бөрсөктәрен усы менән һөртөп алды ла, ҙур эске әҫәрләнеү менән дәртләнеп, оҙон көй уйнарға тотондо. Ләкин уға ҡушылып йырларға баҙнат итеүсе табылманы. Оҙон башҡорт көйҙәрен йәштән әҙ-мәҙ һупалауыма, ҡурай тауышына йәшлек дәрте күкрәккә һыймай урғылын ҡайнауына ҡарамаҫтан, ауыҙ күтәреп, уға ҡушылып йыр башларға минең дә батырсылыҡ етмәне. Ул батырсылыҡ, Ишмулланы яҡындан белә башлағас, бик оҙаҡ йылдар үткәндән һуң, аҙаҡтан ғына килде.

Мин уның моңон тәүге тапҡыр ишеткәндә, ул әле ҡурайҙы «күкрәккә һалып» түгел, нескә бай тембрлы көйҙәрен таҙа тауыш менән уйнай ине, ләкин шул тәүге күреүҙә үк уның куплет аҙағында өзләүгә күсергә тырышыуы төҫмөрләнә ине. Шул ваҡытта уҡ, «ата ҡурайсы» Әхмәтов Хәмит ағайға оҡшатып, уға эйәреп тартыу манералары һиҙемләнә башлағайны.

1947 йылдың аҙағында эшкә райкомға, уның пропаганда һәм агитация бүлегенә, күскәс, Ишмулла эшләгән Баймаҡ күсмә колхоз-совхоз театры беҙҙең туған коллективҡа әйләнде. Улар әҙерләгән һәр спектаклде ҡабул итеүҙән тыш, театрҙың байтаҡ ҡына башҡа мәсьәләләре менән дә шөғөлләнергә тура килде. Шул саҡта артистар йәшәгән саман барактың бер тәҙрәле генә бүлмәһендә Ишмулланың йыш ҡына, ниңәлер зарығып-зарығып, оҙон көй уйнауҙары әле лә ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора. Ләкин, әйтергә кәрәк, Ишмулла театрға ҡурайсы сифатында түгел, ә драматик артист булып килде. Уның ҡарағайҙай бейек, һомғол буй-һынына, бөтә кешене үҙенә тартырлыҡ күркәм йөҙөнә ҡарап, уны сәхнәлә артист итеп уйнатмау мөмкин булмағандыр шул.

Уның атаһы Ишҡәле ағай, Баймаҡтағы артистар йәшәгән саман баракты табып, ҡулынан етәкләгән үҙенең ун алты йәшлек улын нисек итеп беренсе тапҡыр театрға алып килгәнен Ғәйшә ханым Абызгилдина бик ҡыҙыҡ итен һөйләп тә ишеттергәйне.

Ишмулла Дилмөхәмәтовтың «Таңсулпан», «Ғәлиәбаныу» һәм «Балҡанда» («Зимагурҙар») спектаклдәрендә төп ролдәрҙе башҡарыуы ла хәтерҙә. Уның драматик артист булараҡ, ул ролдәрҙе нисек башҡарыуы театр белгестәре выжданында, ләкин мин шуны ғына әйтә алам: һомғол буйлы, киң күкрәкле, ҡыйғас ҡара ҡашлы, ҡуңыр матур йөҙөндә һәр ҡасан нур балҡып торған, көслө тоноғораҡ тауышлы артист Ишмулла Дилмөхәмәтовтың сәхнәлә күренеүе залда ултырған бер тамашасыны ла тыныс ҡына ҡалдырманы, үҙенә тартты...

1948 йылдарҙың баштары булһа кәрәк... Мин эшләгән кабинетҡа, Ишмулла Дилмөхәмәтовты артынан эйәртеп, һул ҡулына эсенә бейәләйҙәрен һалған кәпәсен тотоп, урта йәштәрҙәге бер ағай килеп инде. Ул башта миңә көрәктәй ҡулын һоноп күреште лә:

— Мына мин ошо егеттең атаһы Ишҡәле булам, — тип таныштырҙы. Ул Ишмуллаға ҡарағанда байтаҡ бейегерәк, эре һөйәкле, киң яурынлы, дүрткелерәк битен матурлап торған танауы аҫтында ҡара мыйыҡ ебәргән, типһә тимер өҙөрлөк ир уртаһы кеше ине. Уның тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап, мин: «Был кешегә хоҙай кәүҙәһен дә, көсөн дә йәлләмәгән икән», — тип уйлап ҡуйҙым. Ысынлап та, ул беренсе ҡарамаҡҡа, һабан туйҙарында бил бирмәй көрәшә торған бәһлеүәндәргә оҡшаған ине. Мин уға ултырғыс шылдырҙым. Ул үҙенең ҡарсығалай күҙҙәре менән минең кабинетты байҡап сыҡты ла, шкаф мөйөшөндә ултырған ике ботлоҡ гергә оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы. Уның бында ни

эшләп булыуына ғәжәпләнгән кеше һымағыраҡ, тыйнаҡ ҡына һорап ҡуйҙы.

— Ҡустым, әллә мыны күтәреүселәр ҙә бармы? — тип минең кабинетта ултырған эреле-ваҡлы йәштәргә ҡарашын һирпеп алды.

— Эйе, Ишҡәле ағай, дәрт ҡалҡып китһә, күтәреп тә ташлайбыҙ уны, — тигәс, минең һүҙгә ышанмағанын һиҙелерлек итеп, ирененең ситтәренә йылмайыу һыҙаттары йүгертте. Бына, бына ул үҙенең өҫтөндәге иҫкерәк пальтоһын һыпырып ташлар ҙа ике ботлоҡ герҙе күккә сөйә башлар төҫлө тойолдо миңә. Ләкин ул урынынан да ҡуҙғалманы. Бер аҙ ултыргас, ул һалмаҡ ҡына һүҙ башланы.

— Мына ошо егет минең Ишмулла тигән малайым була,— тине лә, усы менән ауыҙын ҡаплап, әҙәпле генә йүткереп алды.

— Мин, ағай, Ишмулланы беләм. Райкомға килгәнсегә тиклем үк танышбыҙ, — тинем.

— Эйе, эйе. Ул миңә юлда һөйләп килде, — тип дөрөҫләне Ишҡәле ағай... Ул киң күкрәгем тултырып тын алды ла һүҙен дауам итте.

— Ҡустым, әйтәһе һүҙем шул: ул мында театрҙа әртис булып эшләп йөрөгән була. Сит ер. Туған-таныштар ҙа юҡ. Яҡуп ауылы мына ғына ятҡан яҡын ара ла түгел, донъя мәшәкәтенән бушап, йыш ҡына килеп йөрөп тә булмай. Йәштәрҙең аҙып-туҙып китә торғаи холҡо ла бар. Һин, ҡустым, әтдил прапаганда бит — мына ошо егеткә күҙ-ҡолаҡ булып тор инде. Боронғоса әйткәндә: «Ите һиңә, һөйәге миңә», — тимәксемен, тип шкафҡа һөйәлеп торған Ишмуллаға ата мөхәббәте менән тулған һоро күҙҙәрен төбәне. Ишмулланың ҡуңыр битемә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Кабинет эсе бер аҙға тынып ҡалды. Мин, урынымдан торып, уның ҡулдарым ҡыҫтым да:

— Ишҡәле ағай, борсолмағыҙ. Был егеткә аҙырға бирмәбеҙ, үҙең әйтмешләй, һәр саҡ күҙ-ҡолаҡ булып торорбоҙ, — тип вәғәҙә бирҙем. Ул урынынан торҙо ла:

— Ярай, рәхмәт, ҡустым, йомошом шул ғына ине, — тип, Ишмулланы эйәртеп, кабинеттан сығып китте.

Тик һуңынан ғына, Ишҡәле ағай Баймаҡҡа йышлай башлағас, артистарҙың бер мәжлесендә бергә булған саҡта, ул Ишмулланыҡына ҡарағанда ла йыуаныраҡ ҡурайҙан мәшһүр «Урал»ды, төрлө биҙәктәр менән һырлап, уйнап ебәргәс кенә, уның «атаҡлы Ишҡәле ҡурайсы» икәнеп белдем. Уның атаһы ла, йәғни Ишмулланың олатаһы ла, бөтә Урал аръяғында танылған ҡурайсы булыуын шул мәжлестә Ишҡәле ағайҙың ауыҙынан ишеттем.

Тиҙҙән мин 1946 йылдың март айында беренсе тапҡыр Сибайҙа осратҡан өс артисты ла Совет армияһына оҙаттылар. Ике-өс йыл үтеүгә был өс егет театрға яңынан әйләнеп ҡайтты. Ул мәлдә ир-егеттәргә йотлоҡ кисергән театрға быларҙың ҡайтып төшөүе оло байрам булды. Бернисә көн үткәс, билен яҫы ҡайыш менән һыға быуып, бите ҡара янған, элеккегә ҡарағанда ла мөһәбәт кәүҙәле Ишмулла Дилмөхәмәтов райкомға килеп инде, хәл-әхүәл дә һорашып тормай, изән уртаһында шаҡылдатып үксәләрен бер-береһенә һуҡты ла, кәүҙәһен турайтып, честь бирҙе.

— Һиңә йәүитсә булырға килдем, — тип йылмайҙы. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, бер-аҙ ултырғас, мин Ишмулланан һорай ҡуйҙым:

— Хеҙмәт нисегерәк үтте? Һалдат йөгө бик ауыр булманымы? — тинем. Ишмулла, башын түбәнерәк эйеп, үҙенә хас ипле йылмайыу менән генә көлдө лә:

— Әй, атаһын, беҙ ни, ағай, унда ла ансамблдә йөрөнөк ул, — тип яуап бирҙе.

— Кем һуң ул беҙ? — тип һораным.

Әлеге лә баяғы инде — Ырыҫҡужин Фәйзрахман, Марат Баһауетдинов, мин. Мин ҡурай тарттым. Фәйзрахман бейене, ә Марат мандолина уйнаны, — тип көлдө. Минең һорауымды ла көтмәй, ул:

— Фәйзрахман армиянан рус бейеүе алып ҡайтты. Хәҙер ул «Перовский»ҙы ғына бейемәй, — тип өҫтәне.

Ошо осрашыуҙан һуң беҙ уның менән бер аҙ айырылышып торҙоҡ. Яңынан беҙ уның менән Өфөлә генә күрештек. Өфөгә килгәс, ул башта Башҡорт академия драма театрында артист булып эшләне, ара-тирә төрлө концерттарҙа ҡурай ҙа уйнаштырҙы. Был саҡтарҙа ул бик тә ауыр эске кисерештәргә дусар булды. Материаль һәм мораль яҡтан да уның өсөн тормош ауырайып китте. Ләкин, әйтергә кәрәк, ул үҙенең көслө ихтыярын усына төйнәп, ситтән бер ниндәй ярҙамһыҙ, ошо хәлдән ҡотолорға үҙендә етерлек көс тапты.

Драма театры сәхнәһен ҡалдырып, филармонияға күскәс, үҙенең төп һәнәрен, ҡурай уйнауын, һаман камиллаштыра барып, алтмышынсы йылдар уртаһында республиканың тиңдәшһеҙ мәшһүр ҡурайсыһына әүерелде. Был ваҡытҡа ул, элекке быуындың атаҡлы ҡурайсылары Йомабай Иҫәнбаев, Хәмит Әхмәтовтарҙың иҫ киткес оҫта уйнау традицияларын, уларҙың уйнау ысулын үҙләштереп кенә ҡалмай, артабан үҫтерә барып, һәр көйгә үҙенә генә хас бай тембр биҙәктәре өҫтәне, бөтөнләйгә «күкрәккә һалып» уйнауға күсте. Көйҙөң икенсе строфаһы аҙағында, бигерәк тә куплет бөткәс, ҡурайын ауыҙынан алып, зал яңғы-

ратып өзләүгә күсеп китеүе тыңлаусыларҙы һәр саҡ таң ҡалдыра ине.

Бер мәл ул йөрәк сире менән интегә башланы. Шул саҡ мин унан:

— Ишмулла ҡустым, бәлки, сәхнәгә сыҡҡас, һин бигерәк йөрәкһеп китә торғанһыңдыр? Шуға күрә лә йөрәгең сыҙамайҙыр?—тип һораным. Ул, башын ҡырын һалып, сөмҡара ҡаштарын бергә төйнәп, алыҫ офоҡҡа оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы ла:

— Аҡый, ҡурайҙы ғәмһеҙ генә, йоҡомһорап, һүнгән йөрәк менән уйнап булмай ул. Йә йөрәгеңдең бөтә ялҡынын ҡушып уйнарға кәрәк, йә, ҡурай тартам тип, сәхнәгә бөтөнләй сыҡмаҫҡа кәрәк — икенең бере, — тип яуап бирҙе. Ҡайһылай ҙа тура һәм дөрөҫ яуап. Эйе, Ишмулла Дилмөхәмәтов сағыштырғыһыҙ ҡурай моңо менән меңәрләгән тамашасыларға үҙенең ҡайнар оло йөрәген дә ҡушып таратты, залда ултырған һәр кеше уның ярһыған йөрәк йылыһын тоймай ҡалманы.

Бер саҡ шулай йөрәге тағы ла насарая төшкәс, уға Министрҙар Советы аша пенсия алып биреүҙә ярҙамлаштым, уның шатлығының иге-сиге булманы, бәләкәй балалар шикелле ҡыуанды. Бер тапҡыр тағы осрашҡанда, мин унан һорай ҡуйҙым:

— Ишмулла, хәҙер нишләрбеҙ инде? Ҡурай уйнай алмаҫһың бит? — тип йәлләнем. Ул мөләйем генә йылмайҙы ла:

— Эй, аҡый, аҡый, бушҡа ҡайғырма. Мине сығарып, сәхнәгә һөйәп ҡуйһалар, шул еткән, ҡустың шул саҡта ла ҡурайын өрөп торасаҡ, — тип мәрәкәләне. Ысынлап та ошо һөйләшеүҙән һуң ул республика хеҙмәтсәндәрен генә түгел, башҡа бик күп тарафтарҙың тамашасыларын үҙ моңо менән ҡыуандырҙы. Сит илдәргә сыҡты. Швецияға, Парижға, Токиоға һәм башҡа бик күп илдәргә барып, үҙенең балҡыған ҡабатланмаҫ һәнәрен күрһәтеп ҡайтты.

Швециянан йөрөп ҡайтҡас, миңә швед телендә баҫылған бер төргәк рецензиялар, афишалар тотторҙо ла:

— Мә, аҡый, һин швед теленә бик тә маһир шикелле, ошо нәмәләрҙе форсатың барҙа уҡып сыҡ, — тип көлдө. — Ә инде бына быныһы, үҙе бәләкәй генә булһа ла, улар тарихы өсөн бик тә ҡиммәтле нәмә, — тип фарфорҙан эшләнгән кескенә статуяны өҫтәлгә ҡуйҙы. Ул ҡулына ҡурай тотоп уйнап ултырған кешегә оҡшағайны. Ҡурайсының күңеленә хуш килгәндер инде был статуэтка. Мин әле лә ошо ул бүләк иткән сувенирҙы уның һүнмәҫ образы итеп һаҡлайым, ул әле лә минең шкафым өҫтөндә иң ҡәҙерле урынды алып тора. Ҡайҙа ғына бармаһын, үҙебеҙсә әйт-

кәндә, Дилмей, үҙ яҡындарын, шул иҫәптән мине лә, бер ҡасан да иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Париждан алып ҡайтҡан күлдәк запонкаларын ут яҡтыһында ҡарап:

— Ҡара, ҡара, ағый, уның таш аҡығы төрлө яҡтан төрлөсә күренә, — тип электр лампаһы яҡтыһында әйләндереп-әйләндереп күрһәтте лә күлдәк еңемә үҙе ҡаптырып ҡайтып китте.

Эсе бошҡан саҡтарҙа ул, телефондан шылтыратып, оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшер ине йәки йыш ҡына өйгә килеп тә сығыр ине. Ҡолаҡтарын өҫкә түгел, артҡа тарттырып бәйләгән бүркен кейем элгес башына ырғытыр ине лә, пальтоһын элгәс, ойоҡ менән залға үтеп, оҙаҡ ҡына: «Бында ниҙәр үҙгәргән икән?», — тигән һымағыраҡ, бүлмәне байҡап сығыр ине. Беҙгә килгәндә мотлаҡ бер ҡыҙыҡ хәбәр алып килер ине. Йә гастролдәрҙә йөрөгәнендә берәй мәрәкәгә юлығыуын, йә үҙ баҡсаһын төҙөгән саҡта ниндәйҙер бер мәҙәк килеп сығыуын яйлап ҡына, тәмләп һөйләр ине лә, ике күҙе йомолғанса, рәхәтләнеп көлөр ине. Бер килгәнендә:

— Ағый, миңә федерацияның персональ пенсияһын бирмәнеләр әле, бөтә юллау документтары кире әйләнеп ҡайтты, — тине. Мин, ғәжәпләнеп:

— Ул нисек була һуң? Һиңә лә бирмәгәс, ул кемдәргә тейеш икән? — тип аптыраным. Ул киң усы менән битен һыйпап алды ла, йөҙөнә ниндәйҙер болоҡһоу һыҙаттары йүгертеп:

— Ордены юҡ, тип әйтәләр, ти. Ошоға тиклем булмағас, хәҙер уны ҡайҙан алмаҡ кәрәк? — тип уйға ҡалды. Ысынлап та, ул бер орденһыҙ, бер миҙалһыҙ оло талант эйәһе ине. Ҡырҡ йылға яҡын үҙенең ҡурайы менән республика халҡын ғына түгел, илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә меңәрләгән тамашасыны таң ҡалдырған, Токио, Стокгольм, Париж, Берлин, Ханой һәм башҡа дәүләт мәркәздәренең мәрмәр һарайҙарын яңғыратып ҡурайын уйнаған Ишмулла Дилмөхәмәтов түшенә бер орден тағырға ла лайыҡ булалмай донъя ҡуйҙы. Быныҡ өсөн беҙ, донъяла йәшәп ятҡан уның иптәштәре, яҡындары — барыбыҙ хәҙер ҙә күңел ғазабы кисерәбеҙ. Үкенескә ҡаршы, беҙ бөтәбеҙ ҙә үҙ иптәштәребеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың ҡәҙерен улар донъянан киткәс кенә баһалайбыҙ шул.

Ул беҙгә килгән һайын дәртләнеп ҡурай уйнамай ҡайтманы. Мин үҙ квартирамда ҡурайҙарҙың яһалғанын да, ысынын да уның өсөн махсус тоттом. Ул, өҫтәл артына ултырып, хәл-әхүәл һорашҡас, ашыҡмай ғына сәй эсеп алабыҙ ҙа ҡурайға тотонабыҙ. Мин уның алдына биш-алты ҡурай килтереп һалам да үҙем ситтән генә уға диҡҡәт ме-

нән ҡарап ултырам. Ул, иҙән ҡыйланмаһын тип, тубыҡтарына берәй сепрәк йәйә лә кеҫәһенән бәкеһен сығарып, ҡурай эшләргә тотона. Иң башта, бер күҙен ҡыҫып, өҫтәлдә ятҡан һәр ҡурайҙың эсен яҡтыға ҡуйып ҡарап ала. Шунан, йыуан башын ирененә терәп, теле менән, мулла өшкөргән шикелле, ҡурай буйлатып «тыф, тыф» тип тауыш сығара. Үҙе эш менән мәшғүл булһа ла, һорап ҡуя.

— Ағый, был ҡурайҙарҙы һиңә кем ҡырҡып ебәргән?

— Баймаҡ районы Ленин исемендәге колхоз председателе Хәсәнов Хөрмәтулла ебәргән, — тигән яуапты ишеткәс:

— О, улай булғас яҡшы, яҡшы. Үҙе ҡурайсы кеше уның ниндәйен һайларға белә инде. Председатель кешенең машинаһы ла булғас, Уралдың ҡыразынан йөрөп тороп йыйҙы инде уны. Беҙҙең ише йәйәүле Мәхмүтме ни ул? — тип мәрәкәләй ҙә:

— Пажалый, мынауһы барыр, — тип биш-алты ҡурай араһынан береһен ҡулына алып, көрәктәй ҡулдары менән тотамлап сыға. Ҡурай өҫтөнә бармаҡтарын һалып үлсәй ҙә тишек тишә башлай. Мин инде магнитофонды йәтешләп, түҙемһеҙлек менән көтә башлайым. Ғәҙәттә, ул беҙгә һәр ваҡыт тиерлек Башҡорт АССР-ының халыҡ артисы Рамазан Йәнбәков менән килә ине.

— Йә, Рамазан, нимәне тартайым? — тип ул ауыҙынан ҡурайын алмай ғына уға башын бора.

— Давай, Ишмулла ағай, «Сибай»ҙы ебәр булмаһа,— ти ҙә Рамазан да, күҙҙәрен йомоп, ҡурайға ҡушылырға әҙерләнә. Тәүҙә, бәләкәй генә залды ярырҙай итеп, Ишмулланың ҡурай тауышы яңғырай, ә унан инде Рамазандың йөрәктәргә үтеп ингән моңло йыры ағыла. Шулай бер аҙ дуэт менән концерт ҡуйып алғас, мин магнитофонды ҡайтанан ебәрәм. Инде улар икәүләп үҙ тауыштарын тыңлайҙар. Йыр аҙағында, һоҡланыуымды йәшерә алмай, мин үҙем дә һиҙмәҫтән: «Эй, афарин!», — тип көй күтәреп ебәрәм икән.

— Ну, шәп уйнаның да, оҫта йырланың да, — тип уларҙың икәүһенә ҡарайым. Ишмулла күҙҙәре менән генә көлә лә:

— Юҡ, ағый, уйнау уртаса ғына булды, ләкин магнитофоның бик тә шәп яҙа икән, — тигән була. — Ағый, һин ошо ҡурайҙы берәй ереңә әтдилнәрәк һалып тор әле, тыштан ҡарамаҡҡа әллә ни күренмәһә лә, тауышы бик яңғырап сыға, — тип уйнаған ҡурайын бер яҡҡа башҡа һалып ҡуя. Шулай итеп, улар икәүләп беҙҙең фатирға килеп, күп кенә көй, шулар араһында бик һирәк йырланған көйҙәр-

ҙе лә, яҙҙырып китәләр. Мин хәҙер уларҙы, Ишмулланың вариҫы булып, уның изге ҡомартҡыһы итеп һаҡлайым.

Ҡурайсы булыу менән бергә ул башҡорт көйҙәренең тарихын да яҡшы белде. Ҡайһы саҡтарҙа ул беҙгә килеп, башҡорт эпостарынан, легендаларынан өҙөктәр һөйләп, яҙҙырып китер ине.

«Емельян Пугачев» фильмы төшөрөлә башлағас, уны Юлай ролен башҡарырға Минскиға саҡырҙылар. Шунан йөрөп ҡайтҡас, күп тә тормай, беҙ уның менән яңынан осраштыҡ. Өйгә килеп инеп, бер аҙ ултырғас, ул иҙән уртаһына баҫып, Салауат Юлаевҡа бағышлап сығарған үҙ шиғырын уҡыны. Шул саҡ ҙур эске әҫәрләнеүҙән күҙҙәре-беҙгә әсе йәш эркелде, беҙ, Салауат Юлаев образын кәүҙәләндереп, иҙәндә хәрәкәтһеҙ тынып ҡалған Ишмулланы ысын күңелдән тәбрикләп, ҡосаҡлап алдыҡ. Ысынлап та, бындай кеше йәнен ялмап алырлыҡ ҡайнар хисле шиғырҙы ғәмһеҙ, һалҡын йөрәкле әҙәм яҙа алмайҙыр, әлбиттә.

Мин йыш ҡына Ишмулла үҙенең алтын уҡалы еләнен, нағышлы, яҫы ялтыр билбау менән быуған еләнен кейеп, сәхнә артынан елдерәтә баҫып, уң ҡулына ҡурайын тотҡан килеш килеп сығыуын залда ҡарап ултырып, уны кемдәргәлер оҡшата торғайным. Ул сәхнә уртаһына сығып, аяҡтарын йәйеберәк баҫыр ҙа, башын ташлап, ҡулы менән салғыйҙарын һирпеп ебәрер ине. «Туҡта, кем һуң һөйләшкәндә, йә берәй кеше йыйылған урында күкрәген киреңкерәп, салғыйҙарын ҡайыра ла башын артҡа ташлап ебәрә?» Оҙаҡ уйландым, уның тышҡы ҡиәфәтен кемгәлер оҡшаттым.

Беҙҙең ауылдан өс кенә саҡрым ерҙә, Ҡыҙыл йылғаһы буйлап юғарыла, Мунаш тигән бик тә боронғо ауыл ултыра. Ул ауылда бик тырыш, эштә лә, ашта ла намыҫсан, ал бирмәҫ кешеләр, минең яҡташтар йәшәй. Беҙ бала саҡта шул ауылдың ҡайһы бер яғаһынан кеше алдырмаҫ ирҙәре, башын артҡа ташлап, салғыйҙарын һирпеп ебәрә торғайны. Сираттағы Ишмулланың бер концертында уның сәхнәгә килеп сығыуын яңынан күҙәтеп ултырҙым да икенсе бер осрашҡанда уға һорау бирҙем.

— Һин, Ишмулла, мин әйтәм, сәхнәгә тас беҙҙең күрше Мунаш ауылының ҡайһы бер кешеләре кеүек килеп сығаһың, — тим. Ишмулла: «Ул Мунаш тигәнең ниндәй ауыл һуң? Ул ҡайһы тирәләрҙә ята?», — тип һорашып та торманы. Шунда уҡ, һис бер уйлап тормаҫтан:

— Һуң, Рамазан ағый, мин Мунаштың ейәне булғас нишләтәйем? — тип яуап бирмәһенме. Мин торған уры-

нымда йығылып уҡ китә яҙҙым, ғәжәпләнеүем шул тиклем булды.

— Ишмулла, китһәнә, һин нишләп Мунаш ауылының ейәне була ти? — тип һорарға ашыҡтым. Ул, һис тә аптырамай ғына:

— Һин әллә боронғо ҡурайсылар өйөндә генә ятҡан тип уйлайһыңмы ни? Улар ҙа беҙҙең ише ил ҡыҙырып, ауылдан ауылға, йыйындан йыйынға йөрөп ятҡандар, — тип яуап бирҙе лә, мәкерле генә йылмайып, алсаҡ күҙҙәрен уйнатты. — Бына шулайтып ауыл һайын ҡурай тартып йөрөй торғас, минең олатай һеҙҙең Мунаш ауылында бер сибәрҙе күҙләгән дә, шундуҡ әйттереп, Яҡупҡа (Ишмулланың тыуған ауылы. Хәҙер Йылайыр районына ҡарай) алып ҡайтып та киткән. Шулай булғас, хәҙер минең ҡыланыштарҙа үҙ ауылдаштарыңдың ғәҙәттәрен табыуың ғәжәп түгел, — тип өҫтәне лә, — төптәнерәк тикшерә башлаһаң, һин миңә, моғайын, бер сыбыҡ осолор әле, — тип көлдө. Ҡырҡ йылға яҡын Ишмулла менән күрешеп-һөйләшеп йөрөгән минең өсөн был ысынлап та көтөлмәгән асыш ине. Ләкин, Мунаш ауылындағы өләсәһе яғынан туған-тыумасаларын тикшереп, тағы ла ентекләберәк һорашырға нисектер форсат табылманы. Был серҙе ул үҙе менән алып китте.

Икенсе тағы бер шылтыратҡанында, ул һүҙ араһында минән һорап ҡуйҙы:

— Ағый, теге мин эшләп ҡалдырып киткән ҡурай иҫәнме әле? Шуны һағындым әле, нишләптер төшөмә керә шул ҡурай? — тине. Үкенескә ҡаршы, мин уны шатландыра алманым. Мин өйҙә юҡта ниндәйҙер бер ҡурайсы йораты килеп ингән дә ҡурайҙарҙы аҡтарырға керешкән. Беҙҙең өйҙәгеләр:

— Был Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ҡурайы, зинһар, тейә генә күрмәгеҙ, — тип киҫәткән. Ә теге кеше, киреһенсә, уның ҡурайы менән уйнап ҡарарға уйлаған. Килешһеҙ бармаҡтарын ҡаты баҫып, уның ҡурайын тас уртаһынан һындырып сығарған. Был хәлде күргәс, мин үҙ-үҙемде ҡәһәрләп, оло ҡайғыға юлыҡтым. Ҡыйын булһа ла, бына шул турала уға телефон аша әйтергә тура килде. Бындай хәбәрҙе ишеткәс, ул, ҡаты уфтанып, телефондың теге башында бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы.

— Әй, әттәгенәһе, ауыҙыңа май биргән, ҡурайсының яратҡан ҡурайы һыныуы йә тик торған көйөнсә кибеп ярылыуы борон-борондан бик шәп нәмә түгел инде. Уны элек-электән насарға юрайҙар. Ярай, хәйерлегә булһын, — тип ул бойоҡ ҡына трубкаһын һалды. Мин үҙем дә: «Бе-

рәй ҡазаға юлыҡмаһаҡ ярар ине», — тип оҙаҡ ҡына бошоноп йөрөнөм.

Беҙ уның менән һуңғы тапҡыр Опера һәм балет театрында осраштыҡ. Ул көндәрҙә Заһир Исмәғилевтең Ишмулла Дилмөхәмәтов либреттоһы буйынса яҙылған «Урал илселәре» тигән тарихи операһы бара ине. Ул телефон аша беҙҙе операға саҡырҙы ла, театр фойеһына ингәс, уның бейек болдоронда тороп, ҡаршы алды. Билдәле, уның либретто яҙа башлауын мин бик күп алдан белә инем инде. Бер тапҡыр, фатирға килеп, унан өҙөктәр ҙә уҡып китҡәйне.

Тамаша залына инеп, үҙ урындарыбыҙға ултырған саҡта, байрамса кейенгән Ишмулла, төҫөнә ниндәйҙер эске йыйнаҡлыҡ, тантаналылыҡ, шул уҡ ваҡытта сырайына ет-дилек һыҙаттары йүгертеп, оло ҡайғыға дусар булған кеше шикелле, залға боролоп, ингән тамашасыларҙы бойоҡ ҡына күҙәтеп тора ине. Беҙҙең урындар арттараҡ икәнен күреп ҡалды ла, креслолар ҡырынан йүгереп тигәндәй килеп, беҙҙе үҙенә һәм ҡатыны Әнисә ханыма тәғәйен урындарға ултыртып китте. Эйе, Ишмулла ғүмере буйы бөтә кешегә сиктән тыш иғтибарлы һәм кеселекле булды. Уның сиктән тыш әҙәпле, инсафлы кеше булыуы хаҡында тағы ла ҙур бер иҫтәлек яҙырға булыр ине.

Ошо осрашыу беҙҙең һуңғы күрешеүебеҙ булған икән. Мин, сирләп, больницала ятҡан саҡта уның үлем хәбәре минең генә түгел, уны белгән бөтә кешенең йөрәген тетрәтте.

Шул фажиғәле минутында ла ул, ил һағында торған һалдат шикелле, ҡурай ҡынын ҡулынан ысҡындырманы.

Ишмулла Дилмөхәмәтов башҡорт мәҙәниәте, атап әйткәндә, ҡурай сәнғәте күгендә ҡабынған мәңге һүнмәҫ яҡты йондоҙ булды, һулышының һуңғы минутына тиклем үҙ халҡына бөтә йөрәгенән тоғро хеҙмәт иткән Ишмулланың баҙымаҫ тылсымлы ҡурайының моңо, ҡайнар йөрәгенең ялҡынын ҡушып, талпынып-талпынып йырлаған ҡабатланмаҫ йырҙары уның оло талантын ихтирам иткән меңәрләгән тамашасылар күңелендә мәңге һаҡланыр.

ДУҘЫМ ХАҠЫНДА

Бына минең алда 45 миллиметрлы пушка снарядының ялтыр гильзаһына тултырылған һарғылт тупраҡ һәм 46-сы армияның ялан госпиталендә һуғышта алған ҡаты яралар-рынан төҙәлә алмай үлгән һуғышсылар күмелгән туғандар ҡәберлегенең фотоһүрәте ята.

Кемдең исеме, фамилияһы яҙылған һуң был әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән фотоһүрәттә? Кемдәр ҡәберенән килгән был совет һалдаты һәм офицерҙарының ҡанына мансылған тупраҡ?

Был гильзаларға тултырылған тупраҡ һәм һәйкәл фотоһы алыҫ Венгриянан килгән. Уны миңә, 1944 йылдың 23 ноябрендә беҙҙең ғәскәрҙәр һөжүме ваҡытында алған яраларынан 212-се хәрәкәт итеүсе ҡыр госпиталендә (ППГ) үлеп ҡалған 46-сы армияның хәрби фельдшеры Ғәлиәкбәров Абдрахман Әшрәф улының һуңғы минуттарының иҫтәлеге итеп, улар азат иткән Кечкемец ҡалаһынан ебәргәндәр.

Венгрияны немец фашистарынан азат итеүҙә, башҡа меңәрләгән совет йәштәре һымаҡ, башын һалған Ғәлиәкбәров Абдрахманға үлгәндә ни бары егерме беренсе генә йәш ине.

Беҙ, Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан ҡышын-йәйен Баҡырүҙәк руднигы урта мәктәбенә йәйәү йөрөп уҡыған ике егет — ошо юлдарҙың авторы һәм Абдрахман шомло 1941 йылдың 13 июнендә һуңғы имтихандарҙы тапшырҙыҡ та йома көнө һуңғы тапҡыр Баҡырүҙәккә аттестаттар тапшырыу кисәһенә киттек. Беҙҙең өй рудникка китә торған юл башындараҡ булғас, Абдрахман һәр ваҡыт мине өйгә инеп алып китә. Был юлы ла шулай булды.

1940 йыл йәйге каникул мәлендә, Хәлил ауылы эргәһендә асылған торфта эшләп, Абдрахман өҫтө-башын ярайһы ғына төҙәтеп алғайны. Мине, үкенескә ҡаршы: «Буйға бик бәләкәй, уның әле йәше лә етмәгән», — тип торф эшенә алманылар.

Клубҡа барғанда, мәктәп комсомол ойошмаһының йыйылыштарына йөрөгәндә, ҡ́ул нәҙек кенә буй-буй аҡ юлаҡ төшкән сөм-ҡара шевиот костюмын кейеп ебәрә. Ә башҡа ваҡыттарҙа ике ҡабырға кеҫәһе тыштан йәбештереп эшләнгән, спортсмендар кейә торған беше күкһел материалдан тегелгән эсһеҙ, туп-тура төшкән пинжәк-салбар кейә. Минең кейем дә, үҙем дә уға ҡарағанда байтаҡҡа мөсһөҙөрәк. Аяҡта ҡалын күн эшсе ботинкаһы, тубығына, ултырышына хром тегелгән, атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән ҡыҙыл армеецтар кейә торған күк галифе салбар. Өҫтә әсәй аҡ митҡалдан тегеп биргән, салбар эсенә тыға торған күтәрмә яғалы күлдәк. Уның ҡарауы, минең билдә — комсоставтар быуа торған яҫы һары ҡайыш.

Абдрахман өйгә килеп инде лә мин шылдырып биргән ултырғыстан баш тартты.

— Әйҙә, улым, нишләп улай, атлы ҡаҙаҡ һымаҡ, иҙән-

дә баҫып тораһың? Сәйгә ултыр, — тип атай ҡыҫтап ҡараһа ла, ул, тәҙрә яҡтауына таянып, аяҡ үрә тороуын дауам итте. Уның сәбәбен, билдәле, минән башҡа, өйҙәгеләрҙән бер кем дә белмәй. Ул кистән һике таҡтаһына еүеш салбарын һалып, шуның өҫтөндә йоҡлаған да, ултырһа, салбар балағының ҡыҙығы боҙолоуынан ҡурҡа.

Бына икәү юлға сыҡтыҡ. Бараһы ара байтаҡ ҡына — биш километр тиерлек. Беҙҙе күргән ауылдаштарҙың Ишәй менән Ҡушай шикелле һәр ваҡыт бергә йөрөүебеҙгә бер ҙә иҫе китмәй, сөнки бына нисә йылдар инде беҙ ауыл менән мәктәп араһындағы ошо юлды бергә тапайбыҙ.

Баҡырҙҙәк руднигында башта тулы булмаған урта, ә унан һуң районда һуғыштан алда икенсе булып, урта мәктәп асылғас, Әлмөхәмәттең бөтә балалары ла шунда ағылды. Уҡыуҙы беҙ егерме бер бала башлағайныҡ, унынсы класты бөтөрөү бәхетенә тик икәү, Абдрахман менән мин генә, ирештек.

Ауылды сыҡҡас та, үҙенең ғәйрәтле ҡулын минең яурынға һалды ла Абдрахман оҙон керпекле ыҫмала һымаҡ сөм-ҡара күҙҙәре менән миңә тултырып ҡараны.

— Йә, дуҫ, бөгөн беҙгә директор ағайыбыҙ аттестаттарҙы таратып бирә инде. Шунан нишләйбеҙ һуң? Һин ҡайҙа йыйынаһың? — тип минән һорап ҡуйҙы. Минән яуап алалмағас, дәртләнеп, ул үҙе һөйләргә кереште.

— Мин, беләһеңме, нишләйем? Аттестатты ҡулға алып, бына ошонда һалам да, — тип пинжәгенең эске кеҫәһен күрһәтте, — бер аҙнанан Магнитогорск тау-металлургия институтына тапшырам. Мин тау инженеры булам. Урал, Ирәндек тауы буйҙарында ер аҫтынан мәғдән эҙләйем. Ә һин нишләйһең? — Ул һаман төпсөндө.

Мин үҙемдең эстән уйлап йөрөгән хыялымды уға асып һалырға булдым. Уның киң яурындарына, матур кәүҙәһенә һалып ҡуйған шикелле килешеп торған шевиот костюмына ҡараным да:

— Мин быйыл Баймаҡ торфына вербоваться иттем, — тинем. Үткән йыл йәйге каникул мәлендә улар менән бергә Хәлил торфына бара алмағаным өсөн минең үкенеүем, ғәрлегем һаман бөтөп етмәгәйне әле. Ул үҙенең ҡулын минең яурындан ҡапыл алды ла юлға арҡыры төштө. Ҡуңыр күркәм битенә үпкәләү тойғолары сығарып, яҫы маңлайын йыйырып, ҡара ҡалын ҡаштарын бергә төйнәне лә:

— Оят түгелме һиңә? Үҙе дуҫ булып йөрөгән була бит әле, миңә әйтмәй генә әллә ҡайҙа яҙылып та өлгөргән, — тип йоҡа ирендәрен ҡымтыны. Мин, беренсе клас-

тан башлап бергә уҡыған иптәшемдең эске тойғоларын аңлап, уны, үҙ хәлемсә, өгөтләргә тотондом.

— Абдрахман, һин юҡҡа ғына миңә асыуланаһың. Өҫ-башымды бер аҙ йүнәтеп алмайынса тороп, мин бер ҡайҙа ла баралмайым. Ярай, һинең матур костюмдарың бар, ә минең... — тип мин үҙемдең сиктән тыш сыбар өҫ-төмә ҡараным. Ул да, ҡапыл туҡтап, минең өҫ-башҡа күҙ йүгертеп сыҡты ла, тауышына йәлләү тойғоһо өҫтәп:

— Шулайҙыр шул инде, нишләйһең? — тине.

Бер аҙ бара биргәс, ул, үҙенең элекке ғәҙәтенсә, тәмле хыялдарға бирелеп, В. Маяковскийҙың «Совет паспорты тураһындағы шиғыр»ын яттан һөйләп алды.

— Ә мин барыбер инженер булам. Ул минең күптәнге яҡты хыялым. — Шунан ул үҙенең ҡарарын нигеҙләргә кереште.

— Бына, Рамаҙан, үҙеңдең башың менән уйлап ҡара, беҙ уҡып йөрөгән Баҡырҡҙәктә нисә инженер бар, тип уйлайһың? — Күрәһең, ундай ҡатмарлы һорау минең башҡа бер ваҡытта ла килмәгәнгә, мин аптырап ҡалдым.

— Әллә, белмәйем, әммә күптер тип беләм, — тинем. Сөнки миңә, ғүмерҙә лә ундай хыял эсендә янмаған кешегә, петлицаһына әллә нисә йондоҙ таҡҡан пожарник та, ул ваҡыттарҙа башына каска кейеп шахтаға төшкән, билдәрендәге яҫы брезент биллеккә әллә ни төрлө инструменттар тағып, шахтала аварияға эләккән кешеләрҙе ҡотҡара торған взвод боецтары ла инженер булып күренә ине. Ул һүҙен дауам итте.

— Һин, дуҫ кеше, шахта эшендә бөтөнләй наҙан икәнһең. Шул горноспасательный командала начальник булып йөрөгән Сәйфетдинов Хажиәхмәт һинең ағайың да инде. Уның Ханнан хәҙрәттең мәҙрәсәһендә ике ҡыш ятып әфтиәк уҡыуынан башҡа ниндәй белеме бар? — тип көлдө.

— Белә белһәң — был рудникта бер инженер ҙа юҡ. Тәүҙә шахтаны асып, баҡыр колчеданы сығара башлағанда, бында Американан ваҡытлыса килгән ике инженер бар ине, хәҙер улар ҙа ҡайтып киткәндәр. Хәҙерге шахта начальнигы, баш инженер булып йөрөгән кешеләр барыһы ла техниктар.

Ысынлап та, Баҡырҡҙәктә юғары сифатлы баҡыр рудаһы табылғас та, бында ябыҡ шахта төҙөү өсөн сит илдән ике инженер саҡырттылар. Башта уларға һәм уларҙың ғаиләләренә ул замандарҙа булмаған өсәр-дүртәр бүлмәле ике йорт эшләттеләр. Ихатаһын бейек ҡойма менән уратып, уның эсенә, әллә ҡайҙарҙан килтереп, ҡарағайҙан мунса һалдылар. Эш урындары ике аҙымда булыуға ҡарамаҫтан, алмашлап рессорлы фаэтонға егеп, эшкә йөрө-

төү өсөн икешәр ат, берәр күсер беркеттеләр. Ул ваҡытта бөтә илдә «карточка» заманы ине. «Сит тарафтарҙан килгән ынйыныҙар ғаилә эҫлиндәренә генә түгел, хатта өйөндәге йәшәгән эт, бесәйҙәренә лә заборный книжка алалар икән», — тигән һүҙ таралғайны ул саҡтарҙа.

Бына ошо хәл, бөтә кеше аслы-туҡлы интегеп йәшәгәндә, ике инженер-америкалының хатта этенә, бесәйенә лә карточка алып ятыуы, ошо сиктән тыш ғәҙелһеҙлек, баҡһаң, йәш кенә бала, ләкин патриот Абдрахмандың күңеленда нәфрәт, асыу тойғоһо ҡабындырған. Ул шул ваҡыттарҙа уҡ «инженер сире» менән ауырый башлаған. Ә бөгөн инде ул үҙенең эсендә сер булып һаҡланған хыялын миңә асып һалды.

Тау-металлургия институтына инеп уҡырға уның бөтә мөмкинлектәре бар ине. Беҙҙең мәктәп уҡыусылары арабында ул иң яҡшы математик, төплө физик ине. Математика буйынса Киселев дәреслегенә индерелеп, Абдрахман сисә алмаған бер генә мәсьәлә лә ҡалмай торғайны. Физика дәресендә программа буйынса беҙ үтә торған материалдарҙы өйрәнеүҙә ул бөтә кластан бер сиреккә алда бара ине. Ләкин үҙенең башҡа уҡыусыларҙан күберәк, төплөрәк белгәнлеген ул бер ваҡытта ла асыҡтан-асыҡ күрһәтеп барманы. Математика уҡытыусыһы, бик тә сабыр кеше Ғәйфулла Ғарифулла улы ҡайһы саҡтарҙа таҡтаға яҙған күнекмәне сығара алмай аҙапланған класҡа ҡарар ине лә иң алғы партала минең менән йәнәш ултырған Абдрахманға өмөт сатҡылары тулған аҡыллы күҙҙәрен төбәр ине.

— Ғәлиәкбәров, таҡтаға сыҡ! Сират һиңә килеп терәлде, — тиер ине.

13-сө июндәге урта мәктәп тамамлау кисәһен уны ойоштороусылар ни тиклем генә күңелле итеп үткәрергә тырышмаһындар, уҡытыусылар, уҡыусылар йөҙөндә элекке вайымһыҙлыҡ, рух күтәренкелеге һиҙелмәне. Унда ҡатнашҡан кешеләрҙе айырылышыу тойғоһонан тыш ниндәйҙер олораҡ, шомло билдәһеҙлек, йән әрнеткес сиктән тыш мөһим ваҡиғаны көтөү тойғоһо борсой ине. Шуға күрәлер ҙә ул көндә бөтәбеҙҙә лә эске йыйнаҡлыҡ, етдилек һиҙелде, ул кисәнән барыбыҙ ҙа, ниндәйҙер көслө дауыл ҡубыуын көткән шикелле, ҡапыл олоғайып, донъя ғәме баҫҡан кешеләрҙәй, моңһоу ғына таралыштыҡ.

Ул кисәлә Абдрахманға мактау грамоталы аттестат менән ҡуша ҡиммәтле бүләк тә бирҙеләр. Бүләктәре, хәтеремдә ҡалыуынса, һыҙыу дәресенә кәрәкле рейсфедер, техник йөкмәткеле бер-нисә китап ине шикелле. Минең өҫбаштың мөсһөҙлөгөн иҫәпкә алыптыр инде, дирекция миңә

90 һумлыҡ ебәк күлдәк бүләк итте. Ул оло кешеләр күлдәге булыу сәбәпле, минең сибек, асҡаҡ кәүҙәгә ҙур булып сыҡты, атай мәрхүм, һуғыш башланып, ашау яғы бик наҡыҫланғас, уны үҙебеҙҙең ауыл кешеһенә өс бот бойҙайға алмаштырған.

Мин аттестатты өйгә алып ҡайтып, китап араһына тыҡтым да, икенсе көнөнә үк, Баймаҡ яғына бара торған «Башзолото» машинаһына ултырып, башҡа ауылдаш иптәштәрем менән, металлургия комбинатының торф предприятиеһына торф ҡырҡырға киттем.

Беҙ аттестат алғандан һуң фашистик Германия башлаған ҡот осҡос һуғыш Абдрахмандың ғына түгел, улар ише меңәрләгән йәштәрҙең киләсәккә яҡты хыялын селпәрәмә килтерҙе.

Ләкин ул, уҡыу бөткәс тә, үҙенең һис шикһеҙ техник вузда уҡыясағын миңә бер-нисә тапҡыр әйткәйне. Армияға алынырҙан алда эшкә урынлашҡанда ла ул геология, геодезия тирәһенә яҡыныраҡ булырға тырышты. Магнитогорск— Сара станцияһы араһында төҙөләсәк тимер юл трассаһын тикшереү өсөн килгән геодезия экспедицияһына эшкә инде. Башта ул, рейка йөкмәп, ҡулына тимер сыбыҡ катушкаһы тотоп, был трассаны йәйәүләп үтте. Аҙаҡтан теодолит менән яҡшы ғына эшләргә өйрәнде.

Икебеҙ ҙә бер нисә ай ситтә эшләп, яңынан күрешкәндә, ул ҡара янған, ҡоростай мускулдары уйнап торған, киң яурынлы, боронғо заман мифындағы баһадирҙарға оҡшаған егет ине. Ул кеҫәһенән военкомат повесткаһы сығарып, ынйы һымаҡ ап-аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайҙы ла:

— Бына, дуҫ, ҡулда повестка. Иртәгә иртәнге сәғәт унда военкоматта булырға. Гитлерҙың «Тоден копф»[1] башкиҫәрҙәрен теге донъяға олаҡтырырға беҙгә лә көн килеп етте. — Минең әҙерәк моңһоуланып, күңел төшкәнен һиҙеп алды ла:

— Ничево, ҡайғырма! Һеҙгә лә сират килеп етер. Һин бер йәшкә булһа ла миңә ҡусты бит әле. Бына башта дәдәңдәр барып уларҙың тетмәһен тетһен әле, — тип көлөп ҡуйҙы.

Өйҙөң түрбашында, улына ҡарап, эркелгән күҙ йәштәрен яулыҡ осо менән һөртөп торған әсәһе эргәһенә килде лә:

— Әсәй, илама! Беҙ ул Гитлер эттәренең көлөн күккә осороп, иҫән-һау илгә кире әйләнеп ҡайтырбыҙ, — тип йыуатты.

---

[1]Гитлерҙың «үлек баштар» дивизияһы.

Уны оҙатканда атаһы — ауылдың атаклы көрәшсеһе Әшрәф ағай, кырҙа, колхоз эшендә, булыу сәбәпле, үҙенең күҙ терәп торған оло улын күреп тә кала алманы. Был көн ата менән улдың бер-береһенән мәңгегә айырылышыу көнө булды, сөнки, күп тә үтмәй, башына сал ингән Әшрәф ағай ҙа һуғышка алынып, Харьков янында барған канлы һуғышта башын һалды.

Кызыл йылғаһының күперен яҙғы ташкын алып киткән сак ине. Икебеҙ ҙә йылғаның түбәнге кисеүенә килдек. Абдрахман шул ерҙән өҫтәрәк үҫеп ултырған карт тирәктәр төбөнә бәләкәй моксайын куйҙы ла һикереп ботакка йәбеште.

— Хисаплап тор! Бына мин нисә тапкыр тартылһам, шунса немецте үлтерәм, — тине лә, турниктағы шикелле, тартылырға кереште. Ул утыҙ тапкыр тартылғас, мин уны аяғынан һөйрәп ергә тартып төшөрҙөм.

Уға, беҙҙең мәктәптең иң яҡшы спортсыһына, утыҙ тапкыр тартылыу бер ни тормай ине. Ул мәктәптә уҡыған сағында беренсе булып турникта «Кояш әйләндереү» тигән күнекмәне эшләне, саңғыла ғөмүмән үҙ алдына бер кешене лә сығарманы, һуғыштан алда бер-нисә тапкыр районда уҡыусылар араһында үткәрелгән саңғы ярышында катнашып, ул беренселекте яуланы.

— Әгәр һин тартып төшөрмәһәң мин тағы тартылыр инем әле, — тине лә, ергә ултырып итектәрен сисә-сисә, миңә карап йылмайҙы.

Балактарын төрөп, итектәрен, куңыс элмәгенән бәйләп, яурыны аша һалды ла:

— Ярай, Рамаҙан дуҫ! Тиҙерәк килеп етергә тырыш, — тип минең кулды кыҫты.

Шаршы кисеүҙең уртаһына еткәс, ул үҙенең бөтә кәүҙәһе менән минең яҡка әйләнде лә, немецсә:

— Геноссе Рамазан! Ауф видер зеен![1] — тип кыскырҙы. Ул теге яр башына сығып, ергә ултырып итеген кейҙе лә һуңғы тапкыр миңә кулын болғаны. Капыл аяк үрә баҫты ла билдәһеҙ мәңгелеккә тәүге аҙымын атланы.

Абдрахман Өфөлә хәрби фельдшерҙар училищеһында уҡып, уны тик биш билдәләренә генә тамамланы.

46-сы армияның дивизия фельдшеры булараҡ, ул 1943 йылдың июлендә тәүге тапкыр һуғышка инде. Үҙенең класташы Валяға ул түбәндәгеләрҙе яҙҙы.

«Валя! Һинең хатың мине сикһеҙ шатландырҙы. Мин уны алғас та штаб офицерҙары алдында, бәләкәй балалар шикелле, шатлығымдан нишләргә белмәй кыскырып

[1]«Һау бул!»— тигән һүҙ,

ебәрҙем. Рәхмәт һиңә! Мин һинән бик үтенеп һорайым: киләсәктә лә миңә хат яҙыуыңды дауам ит. Беҙҙең егеттәр ҡайҙа, кемдәр өйгә ҡайтып килде? Хәҙерге көндә Табакова Саня, Зәйнәғәбдинова Нурания ҡайҙа? (Улар ҙа Ҡыҙыл Армияға алынып, һуғышалар ине. — Р. Ө.)

Совет армияһының еңеүле һөжүмдәре беҙҙең йөрәктәрҙе елкендерә. Беҙ еңеү менән Төньяҡ Донецтан Днепрға тиклем, Днепрҙан ҡамышлы Бугка ҡәҙәр Көньяҡ Буг ярҙарынан сал Днепрҙың һаҙлы ярҙарына тиклем юл үттек. Был аралыҡ баш әйләнгес марштар, дошман тылына төнгө рейдтар, дошман һалдаты һәм офицерҙарының меңәрләгән мәйеттәре аша, яндырылған ауылдар аша үтте.

Дошман менән хисаплашыу сәғәтенә күп ваҡыт ҡалманы, ләкин ул тамам дөмөкмәгән, уны йәһәннәм соҡорона этеп төшөрөргә кәрәк».

Фронтта, билдәле булыуынса, сәғәт һайын хәлдәр үҙгәреп тора. Түбәндәге хат уны бик яҡшы раҫлай ала. Ике айҙан һуң ул фронттан бына ниҙәр яҙҙы?

«Валя! Әгәр һин минең тормош менән ҡыҙыҡһынһаң, мин һиңә билдәле булмаған бына ниҙәр яҙа алам? Һуңғы хатымдан һуң мин ауыр контузия алып, госпиталгә оҙатылдым. Ә быға тиклем мин ике тапҡыр яраланғайным инде. — Беренсе тапҡыр баштан (авиабомба ярсығы тейҙе), икенсеһендә аяҡтан (мина ярсығы менән).

Ә был юлы инде Одессала дауаландым. Ул бик тә күркәм ҡала икән, миңә оҡшаны. Ләкин румын-фашист илбаҫарҙары промышленность һәм культура үҙәге Одессаны емерек хәлгә килтергәндәр, спекуляция үҙәгенә әйләндергәндәр. Ләкин Одессаның ғорурлығы һәм күркәмлеге — опера театры һаҡланған».

Күрәһең, Валя хаттарының береһендә Абдрахмандан һағыраҡ булыуын үтенгән.

«Үҙеңде һаҡла, имеш! Был турала хатта һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Мин ҡанлы, аяуһыҙ һуғыш алып барған Ҡыҙыл армияның офицеры бит. Әйткәндәй, һеҙ мине Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм «һуғышсан хеҙмәттәре өсөн» миҙалы менән ҡотлай алаһығыҙ».

Уның ҡайһы бер хаттарында үҙенең иптәштәрен, туғандарын һәм күңеле түрендә яҡын итеп һаҡлаған тыуған яҡтарын һағыныу тойғолары яңғырай.

«Бына бөгөн минең бер нисә сәғәт кенә буш ваҡытым бар. Үҙемдең ыҡсым ғына, бөхтә окопчигымда бында бер кемгә лә таныш булмаған башҡорт көйҙәрен әкрен генә көйләйем. Шунан руссаға күсәм: «Нынче у нас передышка, а завтра уходим к боям», һине, иптәштәрҙе күреү теләге ни эшләптер бөгөн миндә бигерәк тә көслө. Өс йыл

тиерлек ваҡыт осоронда мин үҙебеҙҙең яҡташтарҙан бер кемде лә осратҡаным юҡ. Валя! Киләһе, ғөмүмән бүтән хаттарыңды ла башҡортса яҙ. Мин һине үҙебеҙҙең туған тел аша ишеткем килә. Әгәр мөмкин булһа, Салауат Хәйбуллинға[1] сәләм тапшыр. Мин уны бик ныҡ һағындым, Салауатты мин бер туған ағайым шикелле күрәм бит».

Икенсе хатында Абдрахман:

«Валя! Һуғыш — ул өҙлөкһөҙ хәрәкәт, йән ыҙалатҡыс марштар. Беҙ хәҙер ҡуйы йәшел бәрхәт япраҡ менән ҡапланған бейек, текә Карпат (Трансильвания) тауҙарына килеп еттек. Уның бейек һырты һәм тәрән тарлауыҡтары миңә беҙҙең ғүмергә лә онотолмаҫлыҡ сал Уралды хәтерләтә. Бындағы ерле халыҡтар өсөн рустар, ғөмүмән беҙҙең Ҡыҙыл армия көтөп алған ҡунаҡтар кеүек. Беҙҙең халыҡ менән уларҙың мөнәсәбәте бик яҡшы».

Бына уның 1944 йылдың 24 октябрендә яҙған һуңғы хаты.

«Мин иҫән-һаумын. Яҡшы йәшәйем. Беҙ күптән инде Венгрия территорияһына килеп индек. Беҙҙең һөжүм үҙенең кульминацияһына килеп етте шикелле, мин шулай уйлайым. Беҙ Сегед ҡалаһын алдыҡ. Үҙебеҙҙең халыҡты бөтә бөйөклөгөндә, ғәйрәтле һәм мөҡәддәс итеп күрге килә. Трансильвания урмандарында беҙ үҙ халҡыбыҙҙың намыҫы өсөн һуғышабыҙ бит. Беҙ Венгрияны һәм башҡа илдәрҙе үтербеҙ, ләкин һеҙҙе мәңге онотмабыҙ. Үбәм. Абдрахман».

Сегедтан Будапештҡа барғанда урталыҡта ятҡан, баҡсасылыҡ, виноградсылыҡ һәм йәшелсәселек үҙәге, хәҙерге Бач-Кишкун медьеһының[2] баш ҡалаһы Кечкемец өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа 46-сы армияның артдивизион фельдшеры офицер Ғәлиәкбәров Абдрахманға, үҙенең медицина сумкаһын ташлап, ҡулына автомат алырға тура килә. Сираттағы атака ваҡытында уның күкрәге, эсе ҡаты яралана. Иҫтән яҙған фельдшерҙың яраларын алғы линияла, медсанбатта, эшкәртәләр ҙә тылға, 46-сы армияның 212-се хәрәкәт итеүсе ялан госпиталенә оҙаталар. Ләкин ул ҡаты яраларынан төҙәлә алмай, 1944 йылдың 23 ноябрендә ошо госпиталдә үлеп ҡала.

Үҙе тыуып үҫкән, Ҡыҙыл һыуын һыулаған Әлмөхәмәт ауылына уның Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, иң аҙаҡҡы һулышына тиклем күрһәткән батырлыҡтары өсөн бирелгән,

---

[1]Салауат Хәйбуллин — беҙҙең һабаҡташ. РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды.

[2] Административ бүленеш.

ләкин үҙе алырға өлгөрмәгән «I дәрәжә Ватан һуғышы» ордены, бер нисә боевой миҙалы менән бергә мәңге һүнмәҫ даны ғына ҡайтты.

Әлмөхәмәт ауылында Бөйөк Ватан һуғышында үлгән ауылдаштарыма ҡуйылған һәйкәлгә: «Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарға лайыҡ булығыҙ!» — тигән тәрән мәғәнәле һүҙҙәр яҙылған.

Беҙҙең ошо яҡты киләсәгебеҙ өсөн, Европа халыҡтарының азатлығы хаҡына көрәшеп баштарын һалған исемле һәм исемһеҙ ҡаһармандарҙың яҡты иҫтәлеге алдында, баш кейемдәребеҙҙе һалып, түбәнселек менән теҙ сүгәйек!

БАЙМАҠ ШАХТЕРЫ

Ауыр һуғыш, йылдарында алтын, баҡыр эҙләп, забой төшкән Баймаҡ ҡатын-ҡыҙҙарына арнайым.

Күптәнге фотонан ап-аҡ, күркәм тумалаҡ битле ҡатындың моңһоу ҡарашы төбәлгән. Ниңә уның асыҡ зәңгәр күҙҙәренә ҡайғы-хәсрәт шәүләһе ятҡан? Донъя йөгөн ун биш йәшенән үҙ иңендә күтәреп, ғүмере буйы тормош ғазабына дусар булған был ниндәй ҡаты ихтыярлы ҡатын? Ул 1940 йылда, ун бише тулыр-тулмаҫтан, иңбашына ауыр кәйлә һалып, үҙенең унарлаған тиҫтер ҡатын-ҡыҙҙары кеүек, беренсе тапҡыр ер аҫтында — шахтала киләсәк билдәһеҙлеккә тәүге аҙым атлаған Байназарова Миңлеәсмә Нурмөхәммәт ҡыҙы була.

Баймаҡ һәм Байҡара, Түбә һәм Күлйорттау приискылары тирәһендә урынлашҡан барлыҡ башҡорт ауылдарында үткән быуаттың өсөнсө яртыһында ул ерҙәрҙә табыла башлаған «һары шайтан» һәр кемде үҙенә тартҡан һәм үҙ ҡуласаһы тирәһендә әйләндергән. Күк Ирәндек ҡушымтаһының көньяҡ битләүендә ҡасандыр гөрләп торған, ләкин һуңынан «алтын-баҡыр» йоҡҡан Аҫыл ауылы кешеһе Нурмөхәммәт ағай ҙа ошо һуҡмаҡтан ситкә тайпыла алмаған, алтын табыусы-шахтер булып киткән.

Ысын старателдең элек тә, хәҙер ҙә даими йәшәр урыны булмаған. Алтын ҡайҙа — ул шунда. Уны алтын теҙгенләп йөрөткән.

Герман һуғышына алынып, йәмғеһе 12 йыл йөрөп ҡайтҡан Нурмөхәммәт ағай ҙа, алтын юллап, бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөгән. Ғаиләһе ишәйгән, ләкин ул алтынға йәлсемәгән. Билдәле, ҡайһы саҡтарҙа уның да бәхет йондоҙо ҡабынған — старателдәр «сумыртҡы»ға (самородокка) ла һуғылғылаған. Ләкин кеҫәгә, әсе тир

түгеп, ауырлыҡ менән килеп ингән «һары шайтан» күҙ асып йомғансы «ай күрҙе — ҡояш алды» булған.

Ирәндек буйында һибелгән приискыларҙы ҡыҙырып йөрөй торғас, биш бала атаһы булып өлгөргән Нурмөхәммәт «балдарҙы уҡытыу ниәте» менән шул уҡ «алтын ене ҡағылған» Шура, йәғни Совет, ауылына килеп, тәртә терәгән һәм ошонда төпләнергә хәл ҡылған. Ләкин әле йәпйәш ата-әсәнең был ваҡытҡа йәшәйһе ғүмерҙәре бик аҙ ҡалған була. Улар икеһе лә гөрләтеп тормош көтөр мәлдә генә бер-бер артлы донъя ҡуя. Ғаиләлә иң оло ҡыҙ — Миңлеәсмә итәк тулы бала менән бер үҙе тороп ҡала. Хәйер, «фән нигеҙҙәрен» артыҡ алдыра алмаһалар ҙа, иң оло ҡыҙ ғына түгел, уға етәһе ҡустыһы Нуриман да, бала саҡтан «ер ҡыртышын ашап», алтын табыу һәнәрен атаһынан өйрәнеп ҡала. Әйткәндәй, Нурмөхәммәт ағай алтын эшенә балаларын ғына түгел, үҙенән мираҫ ҡалған туры атын да өйрәтә.

Кәлешкәгә егелгән туры ат, үҙенең килгән юлына төшөп, туп-тура алтын ҡомо сығарылып ятҡан шурфҡа үҙе килеп туҡтай. Ә инде йөк тейәлеп бөткәс, тамам «старател»гә әйләнеп бөткән аҡыллы хайуан кәм тигәндә бер нисә саҡрымда, Таналыҡ буйында, «машерт»[1] менән алтын йыуыусы Миңлеәсмә ҡаршыһына килеп туҡтай. Алтын ҡомо бушаған кәлешкәне үҙ артынан дағыр-доғор һөйрәп, туры ат дилбегәһеҙ-ниһеҙ яңынан тау үренә шурфҡа йүнәлә. Ә «машерт» өҫтөндәге алтын ҡомо ауҙарылған иләккә ағас улаҡ буйлап Таналыҡ һыуы йүгерә. Хәҙер инде бәләкәй Миңлеәсмә, еүешләнеп, ауырайған ҡомдо ҡулындағы көрәк менән бутарға тотона. Был ҡом бутҡаһы һыу ярҙамында шыйыҡсаға әйләнә, эре фракция өҫкө иләктә ҡала бара, ә вағырағы аҫҡа аға, шул ыңғайҙа ваҡ бөртөклө алтындар түбәндәрәк эшләнгән «кеҫәләр»гә төшә. Эш көнө тамамланғас, Миңлеәсмә терегөмөш ярҙамында тупраҡ-ҡом ҡатнаш алтын бөртөктәрен йыйып ала. Бөтә был йыйылманы «сәсүк»тә спирт менән яндырғандан һуң, алтын ҡом батҡаҡтан бөтөнләй айырыла, үҙенең тәбиғи рәүешенә инә.

Ҡөҙрәтле көскә эйә булған был илаһи алтын бөртөктәрен ҡулъяулығына төрөп бәйләй ҙә Миңлеәсмә «Золотоскупка»ға йүгерә. Унда инде тапшырылған алтын тәҡәбеленә уның ҡулына «алтын аҡса» — бон тотторалар. Ә инде бон бөгөнгө «ағас аҡса» түгел, ун грамм һары алтын тапшырған Миңлеәсмә, ҡулына ун ике тәңкәлек бонды

---

[1]Немецсә «вашгерд» — урындағы халыҡ телендә «машерт» тип аталған алтын йыуыу станогы.

тотоп, ҡоштай осоп, алтын магазинына килеп тә етә. Лә-кин бындай бәхет көн дә эләгеп тормай. Күп ваҡыт ҡара тиргә батҡан туры аттың ылдым ғына ауҙарып киткән алтын ҡомо «ҡыҫыр» булып сыға.

Бына шуға күрә лә алтын йыуыуҙа тәжрибәһе бай булған Миңлеәсмәне осраҡлы табыш ҡәнәғәтләндермәй, тал сыбығы кеүек кенә «ғаилә башлығы»н нужа сыбырт-ҡыһы эш хаҡы вәғәҙә иткән шахтаға ҡыуа.

Ун бише лә тулмаған, һары бөҙрә сәс толомдары биле-нә төшөп торған Миңлеәсмә 1940 йылда Күлйорттау руд-нигында асылған «Хозяйский» шахтаһына эшкә яллана. Уны еүеш шахтаның 45 метрлыҡ ҡатламына өҫтән төшкән креп[1] ағастарын ҡабул итеп, оҙатып тороу эшенә тәғәйен-ләйҙәр.

Ҡабығы әрселеп, ҡояшта ныҡ ҡына кибеүенә ҡара-маҫтан, суйындан ауыр берәр сажин[2] ҡайын ағастарҙы һигеҙ сәғәт буйы клеттарҙан бушатып, арманһыҙ булған Миңлеәсмә тәүге көндәрҙә хәлдән тайып йығыла. Ҡырҡ биш метр ер аҫтынан тайғаҡ баҫҡыстар буйлап үҙ аяғы менән күтәрелергә уның ҡарыуы ҡалмай. Иптәштәре уны ҡулдарында тигәндәй ер өҫтөнә сығаралар, шулай ҙа әҙәм балаһы теләһә ниндәй яфалар кисереүгә лә күнегә. Миң-леәсмәнең дә тора-бара быуындары нығый, көндән-көн көс-ҡарыуы арта, эш таһылы өҫтәлә. Аҫҡы каталда эш-ләгән ҡырҡма мыйыҡ егеттәр ҙә хәрәкәттәре тилбер, ап-аҡ йөҙөнән нур бөркөп торған был һары сәсле һылыуҡай эргәһендә оҙағыраҡ маташырға, осҡор һүҙҙәр ысҡынды-рырға, ҡаш һикертергә, үҙҙәренең барлығын белдереп, ғишыҡ уттары төҫмөрләнә башлаған күҙҙәренән мөләйем ҡараш атырға тырышалар. Миңлеәсмә күңеленең нескә ҡылдары ла бындай саҡтарҙа наҙлы ғына сиртеп ҡуя, бын-дай минуттарҙа карбид[3] менән яҡтыртылған ярым ҡараң-ғы еүеш шахтаның тәпәш, шөкәтһеҙ көмбәҙе лә нур бал-ҡытып, киңәйеп, бейегәйеп киткәндәй була...

Ләкин йөрәк түрендә моронлап килгән мөхәббәт бө-рөләренә гөрләп сәскә атырға һәм, яңы ғына уяна башла-ған һөйөүҙең сихри хистәренә бирелеп, оҙаҡ наҙланырға Миңлеәсмәгә яҙмаған булып сыҡты. Көнбайышты ҡаплап алған һуғыш уты Ирәндек ҡуйынындағы тәрән шахтала алтын ҡаҙыусыларҙы ла ялмап алды. Кисә генә шахта үңерендә таң һарыһына ҡәҙәре «Тырҙаратайым»ды тапа-ған, үҫеп килгән йәш елкенсәктең ҡайнар йөрәгенә иләҫ-

---

[1]К р е п — шахта емерелмәһен өсөн ағастан эшләнгән нығытма.

[2]С а ж и н — боронғо үлсәм, 2,13 м-ға тигеҙ.

[3]К а р б и д — ҡулда йөрөтөлә торған шахтерҙар шәме.

миләҫ шом өргән ҡырҡма мыйыҡ егеттәргә, үҙ көрәк-кәйләләрен ҡыҙҙарға тапшырып, ҡулдарына ҡорал алырға тура килә.

Егеттәр, ирҙәрҙе һуғыш уты һурып алһа, бында ҡалған ҡатын-ҡыҙҙы шахталар ер аҫтына һөйрәне. Миңлеәсмә лә, ҡулына кәйлә тотоп, забойға баҫты, һуғыштың икенсе көнөндә үк һәр сменала ирҙәрҙән өсәр забойщик, бер катальщик ҡына тороп ҡалды. Киткәндәр урынына шахтаға ҡатын-ҡыҙ төштө.

Бил яҙмай унар сәғәт руда сүкегәндә унда-бында янаҡҡа сәсрәгән ут сатҡылары — фронт һыҙығын, забойҙағы зәғиф яҡтылыҡта күренеп ҡалған ҡатындар шәүләһе төнгө ракета яҡтыһында дошман өҫтөнә ташланған ҡыҙыл армеецтарҙы хәтерләтте. Гранит шикелле ҡаты тау тоҡомона бәрелеп, буш шахта ҡыуышлығында кәйлә шаңдауы снаряд шартлауы булып ишетелде.

Ете ҡат ер аҫтында ла еңеү өсөн дошман менән аяуһыҙ көрәш барҙы. Унар сәғәт эшләп сыҡҡандан һуң, ер өҫтөндә тағы ла ике сәғәт алтын ҡомон иләргә кәрәк. «Прәме ғәжәп, үҙебеҙ асбыҙ, арманһыҙ булып арыйбыҙ, шулай ҙа күңел тигән нәмә көр, нисек кенә ауыр булһа ла, беҙ үҙ еңеүебеҙгә ышанып йәшәнек. Ишу «Тырҙаратайым»ды һуҡтырабыҙ бит әле», — тип иҫкә алыр ине аҙаҡ Миңлеәсмә.

1945 йылда һуғыш бөткән көндө шатлығын да, ҡайғыһын да йәшерә алмай илашып торған шахтерҙарға дүрт йылда тәүге тапҡыр хеҙмәт ялы тураһында приказ уҡыйҙар, сөнки һуғыш осоронда ул нәмәләр барыһы ла онотолған була.

9 май, тәүге тыныс көндә, шахтер ҡатын-ҡыҙҙар, шаулап-гөрләп, ер аҫтына төшөп китәләр. Күңеле төрлө хистәр, тәьҫораттар менән лыҡа тулған Миңлеәсмә лә үҙ посына баҫа. Һәр сәғәте генә түгел, һәр секунды уның киләсәкке яҡты өмөтөнә һөрөмлө шәүләһе булып ятҡан, уның йөрәгенә мәңге уңалмаҫ яра һалған шатлыҡлы ла, ҡайғылы ла ошо көндә Байназарованы «Восстающий» тип йөрөтөлгән шахтаны әлеге лә баяғы ҡайын сажиндар менән ныҡытыу эшенә ҡуялар. Штректан туп-тура тигәндәй күтәрелгән шахтала ул ирҙәр ҙә көс-хәл менән башҡарырлыҡ ауыр эшкә тотона, үҙен күккә олғашҡан завод мөрйәһенең эске стенаһында үрмәләгән кешеләй хис |итә. Ләкин кәйеф күтәренке, бөтә күңелде үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр иртәгә үк ялға китеү хыялы солғап алған. Уның башында әллә ни төрлө шатлыҡлы өмөт сатҡылары ҡабынған.

Нәк ошо секундта баҫып торған еүеш таштан кинәт уның аяғы тайып китә лә, ҡосаҡлаған ауыр ҡайын ағасы менән ҡуша ул түбәнгә, упҡынға оса. Уны ҡотҡарырға тип, йүгерешеп килеп еткән шахтерҙар ағас аҫтында ҡалып тәне иҙелгән, иҫен юғалтҡан Миңлеәсмәне ер өҫтөнә күтәреп сығаралар. Уның аяҡ-ҡулы имгәнеүҙән тыш, умыртҡа һөйәге лә һынған була.

Бына шул көндән башлана инде Миңлеәсмәнең йылдарға һуҙылған йәшәү өсөн аяныслы көрәше, йөрәк өҙгөс һыҙланыуҙар кисереп, кеше түҙә алмаҫлыҡ яфа сигеү көндәре, айҙары, йылдары...

Гипс менән ҡоршалған көйөнсә Миңлеәсмә бер йыл буйы больницаның ҡаҡ таҡтаһында ята. Егерме йәшкә сығып, әле һөйөлөп тә, һөйөп тә өлгөрмәгән шахтер башына ниҙәр генә килмәй йыл буйы йоҡоһоҙ үткән оҙон төндәрҙә. Береһенән-береһе ауырыраҡ ҡайғы-хәсрәт, киләсәккә өмөтһөҙлөк хисе уның йөрәген өҙгөләй, барлыҡ бөтмөшөн солғап ала. «Был интегеүҙәрҙе кисергәнсе шул саҡта үлеп кенә ҡотолһамсы», — тигән етди уйҙар ҙа уның мейеһен айҡай. Ләкин шундай бөтәһенән төңөлгән минуттарҙа ла уның яралы күңелендә өмөт сатҡылары һүнмәй. Теүәл бер йыл тигәндә ул яңынан аяҡҡа баҫа.

Башта, таяҡҡа таянып, өйөнә ҡайтып төшә. Бер аҙ баш-күҙ алып, төҙәлә башлағас, элекке шахтаһына яңынан килә. «Наҙан булғанбыҙ, акт төҙөлмәгән, күп кенә пинсе ашап ятаһы урында», — тип көрһөндө аҙаҡ Миңлеәсмә.

«Еңел эшкә» тип яҙылған больница ҡағыҙын шахта начальнигы ситкә этеп ҡуйҙы, мине тағы элекке эшемә тәғәйенләне. Шахтаға яңынан төштөм. Иң түбәнге ер ҡатламында ауыр вагонетка этеп, 1950 йылда яңынан билемде ҡуҙғаттым», — тип хәтерләне ул аҙаҡ.

Тағы ла больница, тағы ла гипс ҡоршауы, шул уҡ ҡаҡ таҡта — гипс карауат. Был юлы йәшәү менән үлем арахындағы аяуһыҙ көрәш теп-теүәл биш йылға һуҙыла, ләкин, ап-аҡ мәрмәргә әйләнеп, оҙаҡ йылдар хәрәкәтһеҙ ятыуҙан һулып бөткән кәүҙәһен үҙ аяғында алып ҡайтырлыҡ Миңлеәсмәлә көс булмай. Уны уртансы һеңлеһе Өфөнән килеп ала.

1960 йылдың август айҙарында ошо очерктың авторы Миңлеәсмә тигән элекке шахтерҙан, әсе күҙ йәше түгеп, йөрәк ҡаны менән яҙылған хат ала. Билдәле, йылдар буйы инрәгән был ауыр яҙмыш барыбыҙҙы ла тетрәтмәй ҡалманы, һуңлап булһа ла, белешеүҙәр, һөйләшеүҙәр, талаптар башлана. Эш Украина һаулыҡ һаҡлау министрлығына килеп терәлә. Киевта ул саҡтағы Бөтә Союзға мәғ-

лүм 23-се һанлы атаҡлы туберкулез больницаһы бар икән. Шуның менән оҙаҡ ҡына һөйләшеү уңышлы тамамлана — 1960 йылдың сентябрендә Миңлеәсмә Байназарова Киев ҡалаһына оҙатыла. Инде һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.

«Биш тәүлек тигәндә Киевҡа барып еттем. Носилка менән ике санитар ҡаршы алды. Сентябрь айының шул тиклем матур, ҡояшлы көнө. Килтереп палатаға һалдылар. Гипсауай карауат. Дүрт кеше индереп, сығарып йөрөйҙәр. Дүшәмбе көнө — «профессорский обход». Аяҡтар эшкинерлек түгел — һулып бөткән. Ете көндән Бабич Борис Карлович тигән профессор «подсадка» тигән операция тәғәйенләне. Операция уңышлы үтте. Сыҙаным инде. Түҙгән баш бит. Врачтар шул тиклем яҡшы, иғтибарлы — бигерәк тә Мария Андрияновна, доцент Михаил Карпович үҙ балалары кеүек ҡараны».

Ошо шәфҡәтле, оло йөрәкле белгестәр Миңлеәсмәне, ҡаҡ һөйәккә ҡалып ҡатып ҡалған аяҡтарын төрлөсә дауалап, ике ай тигәндә беренсе тапҡыр үҙ аяғында стенаға һөйәп ҡуялар. Ул ике кеше ярҙамында тәүге тапҡыр биш минут ҡына булһа ла баҫып тороу бәхетенә ирешә. Нисәмә йылдар буйы аяҡҡа баҫыу өмөтөнән мәңге төңөлгән Миңлеәсмәнең күптән ҡатҡан күңеле кинәт килеп тыуған шатлыҡтан ireп китә, ҙур зәңгәр күҙҙәренән мөлдөрәгән йәш бәреп сыға. Бындай ҙур ҡыуанысты уны дауалаған врач, шәфҡәт туташтары ла тыныс ҡына кисерә алмай, үҙ пациентының бәхетле минуттарын уның менән ҡуша илашып уртаҡлаша.

Инде хәҙер уның тәүге аҙымын үҙ аллы яһатыу өсөн ныҡышмалы көрәш башлана. Профессор Бабич был «красивая башкирка»ны аяҡҡа баҫтырыу өсөн дауалауҙың махсус ҡатмарлы схемаһын төҙөй, быға төрлө электр массажы, физкультура күнекмәләре инә. Башта ике аҙым, бер нисә көндән — ун, бер аҙнанан — егерме — бына шулай итеп, Эверест тауына менгән саҡта хәүефле аҙымдарын һанаған альпинистар шикелле, ул да һаман «юғарыға үрмәләй». «Минең тырышлыҡ менән ирешкән был уңышҡа мннән яман профессор үҙе ҡыуанды», — тип иҫкә алды был тулҡынландырғыс минуттарҙы Миңлеәсмә.

Бер йыл тигәндә тамам аяҡҡа баҫып, үҙ аллы йөрөй башлағас, был мәрхәмәтле табиптар шахтер ҡыҙҙы Одессага, «Приморск» санаторийына, дауаланыуға ебәрә. Профессор Бабич юлға биргән оҙатыусы шәфҡәт туташынан Миңлеәсмә ҡәтғи баш тарта, курортҡа үҙ аяғы менән барып төшә. Был уның уҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр курортҡа юлланыуы була. Ошондай ауырыуҙарҙы ғына хеҙмәтләндергән махсус курортта уның һаулығы шәйлә яҡ-

шыра, аяҡтары ла нығый, ышаныслы атларға күнегә, тар ғына аҙымдары киңәйә төшә. Күңеле бөтөнләй һүрелеп, тормоштан ваз кисеү дәрәжәһенә килеп терәлгән Миңлеәсмә, йәшәү дәрте менән рухланып, ҡанатлы ҡош кеүек,

1961 йылдың декабрендә йыл ярым тигәндә үҙ төйәге — Баймаҡҡа ҡайтып төшә.

Ләкин һаулығы нисек кенә яҡшырмаһын, ул ҡайҙалыр даими эш эшләрлек хәлдә булмай, ғүмерлеккә инвалид булып ҡала. Оло интегеүҙәр һынауы аша үткән элекке шахтер үҙенең был хәленә лә ҡыуанып бөтә алмай, — ауыр эшкә күнегеп, ҡатҡан ҡулдарын ул әйбер бәйләү һәнәрене̇нә өйрәтә башлай. Бөтә шөғөлө китап уҡыу, ирҙәргә свитер, пуловер, ә ҡатын-ҡыҙға кофта, йөн күлдәк, селтәр бәйләүгә күсә.

«Ася, милая, йылда беҙҙең больницаға килеп, үҙ һаулығыңды тикшертеп тор», — тип үҙ профессоры Бабичтың ҡат-ҡат туҡыуҙарын да онота, һаулығы бер аҙ яҡшырған Миңлеәсмә: «Барырға мөмкинселек булманы шул», — тип аҡланды аҙаҡтан. Ләкин һуңғы йылдарҙа дүрт-биш тапҡыр оҙайлы ғына Өфө больницаларында ятып сыҡҡыланы. Бына ошо һуңғы мәртәбә дауаланған мәлендә ул үҙенең бәхетенә лә, бәхетһеҙлегенә лә юлыҡты — олоғайып, ғүмеренең көҙө етеп килгән осорҙа тормош юлдашын тапты.

Ләкин күктән төшкән тиерлек ул бәхетте шул уҡ күге алып китте. Шәфәҡ юғалғас, ҡалҡҡан яҡты йондоҙо таң һыҙылғас ғәйеп булды — уның һөйөклө Әхмәте күп тә үтмәй яҡты донъя менән мәңгегә хушлашты. Миңлеәсмә был юғалтыуҙы бик ауыр, ысын йөрәгенән кисерҙе.

Үкенескә ҡаршы, Миңлеәсмәгә яҙмыш әҙерләп ҡуйған ауыр һынауҙар әле бөтмәгән булған икән. Ҡаза яңғыҙы ғына түгел, ишле-ҡушлы йөрөй икән, тип белмәй генә әйтмәйҙәр, күрәһең. Күп тә үтмәй уның менән бергә ауыр тормош юлы үткән элекке старатель, ә һуңынан районда ғына түгел, республикала ла танылған сауҙа эшмәкәре, Ленин ордены кавалеры, Ленин орденлы «Йылайыр» совхозының рабкооп председателе, уның берҙән-бер ҡустыһы ир уртаһы Нуримандың йөрәге туҡтап, ғүмере өҙөлә.

Был сираттағы бик тә ауыр һынауҙы Миңлеәсмәнең ҡаҡшаған һаулығы, туҙған йөрәге күтәрә алмай, тиҙҙән ул яҡты донъя менән хушлаша.

Баймаҡ ял йортонда (быға ла байтаҡ ваҡыт үтен китте инде) уның менән осрашып:

— Әсмә, әйҙә, ултыр әле. Бер аҙ үткән ғүмер тураһында һөйләшеп алайыҡ, бәлки, үҙеңде гәзиткә лә баҫтырып сығарырмын әле, — тип өндәшкәс, ул ҡулдарын болғап сәбәләнде.

— Китсе, китсе, Ырамаҙан Ғимранович, буш менән булма, гәзит бысратып, мине кем баҫып торһон, — тип ап-аҡ ынйылай тештәрен күрһәтеп көлдө лә ҡырҡа баш тартты. Ә мин: «Баҫтырып сығарырға тырышырмын»,— тип вәғәҙә бирҙем. Ләкин биргән вәғәҙәмде үҙ мөҙҙәтендә үтәй алманым. Үҙе иҫән саҡта күрә алманы был иҫтәлекте, шуныһы бигерәк тә йөрәкте һыҙлата, үтә үкенесле. Ләкин, Миңлеәсмә, һинең ирҙәр ҡулынан килмәҫлек эштәр башҡарыуың хаҡында легенда, һүнмәҫ даның ҡалды.

Байтаҡ ҡына Баймаҡ кешеләре кейеп йөрөгән һин бәйләгән затлы кейемдәрҙә ҡасандыр кәйләә-көрәк тотҡан етеҙ ҡулдарыңдың наҙлы йылыһы ҡалды. Улар ҙа, моғайын, свитер, кофталарын тотҡан һайын, һинең күркәм сырайыңды иҫкә алып, рәхмәт әйтәләрҙер. Ә хәҙер инде, ошо очеркты уҡығас, улар үҙҙәренең йылы хәтирәләрендә Миңлеәсмә Байназарованың Баймаҡ ҡатын-ҡыҙ шахтерҙары араһында һуңғыларының береһе икәнен дә, ғүмере буйы тауҙай ҡайғы-хәсрәтте үҙ иңендә күтәреп, шуны еңеп сығырлыҡ ихтыяр көсө йөрөткән оло шәхес булыуын да онотмаһындар ине.

КОМИССАР

Сәғит Әлибаев Башҡортостан мәғрифәтенә нигеҙ ташы һалыусыларҙың береһе булды.

Ул элекке Ырымбур губернаһы Яманһары ауылында 1903 йылдың аҙағында ишле ғаиләлә донъяға килә. Помещик Шотт тирмәнендә ялланып эшләгән Рәхмәт Әлибаевтың ғаиләһендә бала-сағаһы ун бер йәнгә еткән, ләкин кәртә-ҡурала мал-тыуар яңғыҙ һыйыр һәм бер баш аттан артмаған. Уның ҡарауы, һәр ҡасан яҡтылыҡҡа ынтылған отҡор һәм зирәк аҡыллы ғаилә башлығы прогимназияла уҡыған алпауыт малайынан төндәрен рус грамотаһы буйынса һабаҡ алған һәм ауылда ул замандарҙа күҙе таныған берҙән-бер кешегә әйләнгән. Ҡыштарын был тырыш зат ауыл хәҙрәтенән байтаҡ дини ғилем алыуға ла өлгәшкән.

Бына шуға күрә Рәхмәт Әлибаев помещиктың ауыл общинаһы ерҙәрен талауға ҡаршы дәғүәләрҙә, суд ултырыштарында халыҡ мәнфәғәтен яҡлап сығыштар яһаған. Ләкин ер өсөн өҙлөкһөҙ талаш-тартышта алпауыт һәр ваҡыт еңеүсе булып сыҡҡан, ә ауыл халҡы һәр саҡ отолған.

Үҙ ғүмере буйы ғәҙеллек өсөн көрәшкән Сәғит ағай Әлибаевтың бөтмөшөндә атаһы ҡаны ағыуын фараз итергә була.

Сәғит Әлибаев

Әлибаевтар ғаиләһе Октябрь революцияһын йәне-тәне менән ҡабул итә. Ауылды баҫып алған аҡ гвардеецтар Рәхмәтте ҡулға ала, ә уның ике ҡустыһын йыртҡыстарса язалап үлтерәләр. Уларҙың, береһе ауыл Советы рәйесе булып һайланған була. Шулай иҙеп, әле бәлиғ тә булмаған ун биш йәшлек Сәғит, үҙ туғандары араһында ир енесенән иң оло кеше булараҡ, ғаилә башлығына әүерелә.

Ләкин белемгә булған ынтылыш уны 1920 йылдың яҙында Бәләкәй Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып асылған өс йыллыҡ Сәйетҡол педагогия курстарына алып килә. Уға бында оҙаҡ уҡырға тура килмәй, сөнки илде солғап алған 1921 йылғы аяуһыҙ йотлоҡ был курстарға ла килеп етә. Уларҙың бөтә курсын аслыҡтан интеккән етем баласағаны башҡа губерналарға оҙатыу эшенә ҡушалар.

Сәғит Әлибаев 1922 йылдың баштарында ғына Ырымбурҙа асылған Халыҡ мәғарифы институтына әйләнеп ҡайта. «Беҙ Каруанһарайға килгәндә, граждандар һуғышынан ҡайтҡан, өҫтәренә атлы ғәскәр шинелдәре кейеп, билдәге ҡайыштарына ҡылыс, наган таҡҡан башҡорт егеттәре лә байтаҡ ине. Башҡорт халҡының үткәненә бысраҡ яҡҡан тарих китабынан һабаҡ биргән элекке мәғәллимдәр, ҡораллы студенттар күренеү менән, шунда уҡ дәресте икенсе, ыңғай яҡҡа, башҡортто маҡтау яғына, бороп ебәрерҙәр ине», — тип иҫкә алыр ине был осорҙо Сәғит Әлибаев.

Яңы ғына диплом алған йәш мәғәллимдә Таналыҡ-Баймаҡ волосының I Этҡол терәк мәктәбенә эшкә тәғәйенләйҙәр. Тиҙҙән был башланғыс мәктәпте икенсе баҫҡыҫҡа күтәреп, волость үҙәге Баймаҡҡа күсерәләр. Мәктәп менән Баймаҡҡа директор булып Сәғит Әлибаев та килә.

1929 йылда Үҫәргән кантоны Мөхәмәтйәр[1] икенсе баҫҡыс мәктәбенең директоры булып эшләп йөрөгән Сәғит

[1]Элек волость үҙәге булып һаналған Мөхәмәтйәр кантон системаһы ваҡытында һәм унан һуң да ҙур һәм мәғрифәтле ауылдарҙан һаналған.

ағайҙы Мәскәүгә Н. К. Крупская исемендәге Коммунистик академияға уҡырға ебәрәләр. Академия тамамлағандан һуң, уны Башҡортостан өлкә комитеты «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенең мәҙәниәт бүлеге мөдире итеп раҫлай, шул уҡ ваҡытта ул әҙ белемле кешеләр өсөн сығарыла торған «Ударсы» гәзитенең мөхәррире итеп тә тәғәйенләнә. Ошоларҙан тыш, ул күптән түгел генә асылған Ауыл хужалығы институтында марксизм-ленинизм фәнен дә уҡытып йөрөй. Ул саҡтарҙа кадрҙар етешмәү сәбәпле, бер кешенең ике-өс урында эшләп йөрөүе тәбиғи хәл һанала.

1932 йылдың декабрь аҙағында уны Каруанһарайҙағы башҡорт педагогия техникумы директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Был уҡыу йортоноң абруйын күтәреү, башҡорт мәктәптәре өсөн педагогия кадрҙары әҙерләү эшендә генә түгел, ә Каруанһарайҙы халыҡ милке итеп ҡалдырыу мәсьәләһендә лә Сәғит Әлибаев ныҡышмалы эш алып бара.

Педтехникумдың ул саҡтағы комсомол секретары Әхмәт Әхмәтйәнов: «Ырымбур ҡала комитеты ағзаһы булараҡ, Сәғит ағай көн һайын тигәндәй, Каруанһарайҙы дәғүәләшеп, властарға китер ине», — тип һәр саҡ иҫкә ала ине.

Үҙ эше менән бер рәттән Сәғит Әлибаев Ырымбур комвузында ла марксизм-ленинизм буйынса дәрестәр алып бара.

1937 йылдың октябрь айында өлкә комитеттың мәктәптәр һәм фән бүлегендә инструктор булып эшләп йөрөгән Сәғит Әлибаевты мәғариф халыҡ комиссары итеп үрләтәләр һәм шул уҡ йылдың декабрендә. СССР-ҙың беренсе саҡырылыш Верховный Советына депутат итеп һайлайҙар. Ләкин уға был юғары урында оҙаҡ эшләргә насип булмай, 1938 йылдың аҙағында «халыҡ дошмандары» — элекке мәғариф халыҡ комиссары Р. В. Әбүбәкиров һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан»дың мөхәррире Ҡ. Ҡ. Аҙнабаев менән бәйләнештә булғаны өсөн уны эштән бушаталар һәм партия сафынан сығаралар.

Йыл ярым үткәндән һуң, уны киренән партия сафына алып, кинофикация начальнигы итеп күсерәләр. Берәй яуаплы вазифалағы кешегә ҡара мөһөр баҫып, кинофикацияға күсереү ғәҙәте шул саҡта уҡ булған икән.

Ошо посынан Сәғит Әлибаев 1941 йылдың ноябрендә Башҡорт дивизияһының 1-се полкына комиссар итеп тәғәйенләнә һәм, ике тапҡыр яраланыуына ҡарамаҫтан, ошо данлы Күсимов полкы менән Эльбаға тиклем ауыр һуғыш юлы үтә. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн гвардия подпол-

Сәғит Әлибаев менән Таһир Күсимов

ковнигы Сәғит Әлибаев ике боевой Ҡыҙыл Байраҡ, ике Ватан һуғышы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары менән наградлана.

«Һәр саҡ айыҡ аҡыллы, матур ҡиәфәтле, төплө комиссар булды. Иң беренсе нәүбәттә ул яугирҙар тураһында хәстәрлек күрҙе, һуғышсыларҙың күтәренке рухлы булыуҙары, ваҡытында ашап-эсеүҙәре һәм ял итеүҙәре хаҡында даими ҡайғыртыр ине. Аҡыллы батырлыҡ һәм ҙур тормош тәжрибәһенә нигеҙләнгән тәүәккәллек һәр саҡ уның менән йәнәш йөрөнө», — тип хәтерләй элекке полк штабы начальнигы, күп һуғышсан ордендар кавалеры гвардия полков* нигы Әхнәф Йосопов.

Һуғыштан һуң, дивизия политбүлеге начальнигы итеп аттестация үтеүенә ҡарамаҫтан, үҙ халҡының тоғро улы Сәғит Әлибаев тыуған республикаһына ашҡына. 1946 йылдың башында ул яңынан Башҡортостан мәғариф комиссары булып китә. Был юғары вазифала ул 1954 йылдың авгусына тиклем эшләй.

Һуғыштан һуңғы халыҡ мәғарифының ни хәлдә булыуы һәр кемгә лә мәғлүм. Мәктәптәр туҙған, күбеһе емерек хәлдә, уҡыу әсбәптәре етешмәй, уҡытыусыларға ҡытлыҡ, уларҙың байтағы һуғыш ҡырҙарында ятып ҡалғайны. 1945—1946 уҡыу йылында республика мәктәптәрендә 70 мең бала кластарында ултырып ҡалған, 8—10 кластарҙа эшләгән юғары белемле уҡытыусылар һаны 25 процентҡа ла тулмай. Мәғариф әлкәһендә эшләгән кешеләрҙе, иң башта уҡытыусыларҙы, матди яҡтан, торлаҡ, яғылыҡ менән тәьмин итеү кеүек мәсьәләләр кисәге хәрби комиссар елкәһенә төшә.

«Барыбер шул уҡ вазифа, хатта ауырыраҡ та, сөнки һуғыш ваҡытында бөтә нәмә әмер менән эшләнә. Шул уҡ эш, шул уҡ хәстәр, тик бында атмайҙар ғына», — тип мәрәкәләр ине үҙ эше хаҡында тыныс осорҙоң яңы комиссары.

1954 йылдың көҙөндә уны үҙ үтенесе буйынса Педа-

гогия фәндәре академияһына белемен күтәреү маҡсатында бер йыллыҡ уҡыуға ебәрәләр.

Диссертация яҡлағандан һуң, Сәғит Рәхмәт улын Стәрлетамаҡ педагогия институтына ректóр итеп тәғәйенләйҙәр. Бында бер нисә йыл уңышлы эшләгәндән һуң, 1959 йылда Өфөгә ҡайтып, Рәсәй Педагогия академияһының Милли мәктәптәр институтының филиалында мөдирлек вазифаһын башҡара. Бында ете йылдан артығыраҡ эшләп, һуңынан ошо уҡ филиалда өлкән ғилми хеҙмәткәр булып ҡала һәм ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем ошонда эшләй.

Мәғариф өлкәһенең ҡайһы ғына тармағында эшләмәһен, Сәғит Рәхмәт улы педагогия кадрҙарын үҫтереү бурысын һәр саҡ беренсе планға ҡуйҙы, һуңғы үҙе етәкселек иткән филиалда ла үҙ тирәһенә фәнни-педагогик эшкә һәләтле кадрҙар туплап, уларҙың байтағының фәнни дәрәжә алыуына өлгәште. Ә үҙе «Башҡорт АССР-ы мәктәптәре (үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәкке үҫеү юлдары)»-тигән бик тә мөһим һәм кәрәкле китап нәшер итте. Сәғит Рәхмәт улы журналдарҙа һәм төрлө йыйынтыҡтарҙа ҡырҡтан артыҡ хеҙмәт баҫтырып сығарҙы. Бынан тыш, ауыр һуғыш юлдарын һәм йылдарын эсенә алған «Комиссар яҙмалары» исемле документаль китап та яҙҙы. Уның портфелендә педагогия темаһына арналған байтаҡ мәҡәләләре, күп милләтле республика шарттарында дөйөм урта белемде планлаштырыу принциптары һәм ысулдары хаҡында ҙур, ләкин донъя күрмәгән хеҙмәте ҡалды.

III бүлек

БАЙМАҠ СӘХИФӘЛӘРЕ

АВТОРҘАН

Һәр кешенең тормош һуҡмағында оло ваҡиға булып, күңелендә ғүмерлеккә уйылып ҡалырлыҡ һынылыш була. Минең өсөн киләсәккә өмөтлө аҙымдар һыҙған был ҡырҡа боролош тиҫтә ярым йылға яҡын ваҡыт партияның Баймаҡ район комитетында эшләү осорона тап килә. Ошо райондың уғата баҫалҡы холоҡло, тәүфиҡ, әҙәп ҡанундарында тәрбиәләнгән, эскерһеҙ эшсән халҡы менән йәшләй генә аралашып йәшәү мине күп нәмәгә өйрәтте.

Һуғыштан һуңғы ифрат та ауыр йылдарҙа, сасҡау һыуыҡтарға ҡарамайынса, һалҡын фермаларҙа көндө төнгә ялғап эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар, Түбә, Күлйорттау, Баҡыртау рудниктарының еүеш шахталарында, Баймаҡ баҡыр заводында, ялҡын йотоп, арымай-талмай эшләгән кешеләрҙең физәҡәр хеҙмәте алдында баш эйәм.

Колхоз, совхоз, предприятие етәкселәренән алып ябай эшсе, игенсегә тиклем бөтәһе лә яҡшы киләсәк өсөн көсөн генә түгел, йәнен дә, тәнен дә аяманы. Уларҙың ихлас һалған көсөн, түккән тирен, йәш быуынға ҡалдырған

хеҙмәт емешен бөгөн, нисек кенә тырышһаң да, һис кенә лә инҡар итеп булмай.

Үткән быуын «феодаль социализм» йә булмаһа «казарма социализмы» төҙөнө, тип бөгөнгө раҫлауҙар был физәҡәр кешеләргә бер нисек тә ҡағылмай, бында уларҙың бер ниндәй ғәйебе юҡ. Изге уйлы, көслө ихтыярлы ундай кешеләрҙең яҡты иҫтәлегенә тырнаҡ ҡараһындай ҙа тап төшөргә тейеш түгел. Түбәндә тәҡдим ителгән ҡайһы бер сәхифәләр, ошо осорҙоң шәхестәре хаҡында бер иҫтәлек булһын, тигән изге ниәт менән яҙылды. Уларҙың һәр ҡайһыһының тормош юлы ижад кешеһенең ҡәләменә лайыҡ. Әгәр насип булһа, иңгә-иң тороп, ҡулға-ҡул тотошоп, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн ҡасандыр бергә татыған иптәштәрем хаҡында ҡулъяҙмалар ҡалдырыу минең өсөн үҙе бер изге бурысты атҡарыу булыр ине.

ЗАВОДТА — ЭШТӘ

X класс өсөн һуңғы имтихандарҙы тапшырабыҙ. Игесиге күренмәгән зәңгәр күктә болот әҫәре юҡ. Ысыҡ тамсыларын нурға мансып, июнь ҡояшы бөтә ғәләмде наҙлы иркәләй. Бындай саҡтарҙа, алда нисек кенә яуаплы имтихандар тормаһын, йәш күңел гүзәл тәбиғәт ҡосағына ашҡына, ниндәйҙер моңһоулы өмөт, яҡты хыял бөтә булмышыңды солғап ала, бөрөләнеп килгән мөхәббәттең татлы хистәре, тылсымлы нескә тойғолары, ҡанатлы ҡоштай, һине күккә сөйә, алға, ҡайҙалыр билдәһеҙ упҡынға әйҙәй.

Күккә туптай атылып, өҙлөкһөҙ сырылдаған буҙ турғай, таң һарыһынан күңелдең нескә ҡылдарын тибрәтеп, өҙөлөп-өҙөлөп сут-сут һайраған һандуғас тауыштары ҡышҡы йоҡонан уянған тәбиғәт хозурлығынан иләҫ-миләҫ килгән күңелдәрҙә хәтер һандығында һаҡланырлыҡ Ньютон биномы, Фарадей закондарына бер осмот та урын ҡалдырмай — барыһын да ҡыҫырыҡлап сығара.

Бына ошондай көндәрҙең береһендә (был 1941 йылдың май аҙаҡтары ине): «Баймаҡ заводына эшкә кешеләр гербауать итергә ауылға бер гербаущик килгән икән», — тигән хәбәр бер генә урам булып һуҙылған Әлмөхәмәткә шул минутында уҡ таралып өлгөрҙө. Ул саҡтарҙа, ауыл кешеһенең үҙ колхозына сылбырланған ат кеүек мәңге беркетелеп, уны ташлап бер аҙым да ситкә китергә хаҡы булмаған мәлдәрҙә, силсәүит кәнсәһендә колхозсыларҙы ҡырға эшкә өндәп ултырыуы хәүефһеҙ мәсьәлә түгел ине.

1940 йыл, йәйге каникул мәлендә, башҡа иптәштәр менән ситкә китеп эшләй алмайынса, өҫ-баштың мөсһөҙ-

лөгөнә оҙаҡ ҡына күңел кителеп йөрөү сәбәпле, ул «гербауҙщик» тигән әҙәм алдына мин беренсе булып барып баҫтым.

Ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙырыуға ҡарамаҫтан, өҫтөнә аҡ брезент плащ кейгән, киң яңаҡлы битенә әҙерәк һипкел төшкәй мыҡты кәүҙәле Самиғуллин фамилиялы был кеше (ул Баймаҡ районында оҙаҡ йылдар «Октябрь байрағы» гәзите редакцияһында эшләгән Борһан Сәмиғуллиндың ағаһы булып сыҡты) минең ҡорама юрғандай өҫ кейемемә шаян күҙҙәренән бер ҡараш атты ла:

— Эшсе булам, тиһең инде, ә? — тип һорап ҡуйҙы.

— Эйе, эшсе булырға йыйынам, — тигән минең етди яуабымды ишеткәс, иҙән уртаһында, уның алдында, баҫып торған бәләкәй генә кәүҙәле асҡаҡ ҡара малайға яңынан баштан-аяҡ һөҙөп ҡарап алды.

Ул замандарҙа силсәүит йәки колхоз кәнсәһенә сақырылған кешеләрҙең бер ниндәй осраҡта ла ауыл түрәләре менән йәнәш ултырып, күҙмә-күҙ һүҙ көрәштереп йәки кәңәшләшеп ултырыу ғәҙәте юҡ ине. Түрә өҫтәл артында, ә кәнсәгә килгән кеше иҙән уртаһында аяҡ үрә тороп яуап биреү күптән ғәҙәткә ингәйне. Хужа тәфтиш ала, ә сақырылған кеше яуап бирә — бына ошондай булыр ине ул сақтағы ҡаты тәртип.

— Заводта урында ултырып, ҡәләм осо менән аҡса таба торған кәсеп юҡ, унда, туған, һеҙҙе ҡара эш көтә. Бәлки, торф ҡырҡыу эше булыр. Эшләй алырһыңмы һуң?— тип тағы ла икеләнеберәк ҡарап алды.

Минең ыңғай яуапты ишеткәс, ул ултырғысына һөйәп ҡуйған, ала-сола булып таушалып бөткән портфелен асты ла договор бланкыһын тултыра башланы.

Шулай итеп, мин Баймаҡ заводына ярты йылға эшкә ялланырға ҡул ҡуйып сығып киттем.

— Майҙың 20-һендә районға паспорт алырға барырға тейешбеҙ. Әҙер булығыҙ! — тип иҫкәртте вәкил.

Был инде ул замандар өсөн бөтөнләй көтөлмәгән яңылыҡ ине, сөнки колхоз ағзаларына паспорт биреү һуғыштан алдағы осорҙа ҡәтғи тыйылғайны.

Баймаҡ заводына эшкә яҙылған бер төркөм ауыл егеттәре менән Асҡарға барып, алты айға ваҡытлыса паспорт алдыҡ. Хәҙерге ваҡыттағы метрика документына тартым, әллә нисә урында мисәтле, икегә бөкләнгән ҡыштырлап торған йылтыр ҡағыҙҙы ҡулдан ҡулға йөрөтөп ҡараныҡ. Етмәһә, унда ялан баш төшкән, яртыһын мисәт тамғаһы ҡаплаған үҙ фотоң да йәбештерелгән. «Әллә ошо паспортты янға һалып, берәй яҡҡа һыпыртып сығып китергәме?» — тигән хәтәр уй ҙа килеп ҡуйҙы башҡа. Ошоно һиҙгән ши-

келле, байтаҡты башынан үткәргән Сәмиғуллин Әлмөхәмәт ауыл Советынан барған кешеләр өҫтөнән ҡарап тормаға яңы ғына һалдаттан ҡайтҡан Йыһаншин Әнүәр тигән ағайҙы беҙгә башлыҡ итеп тәғәйенләп тә ҡуйҙы.

12 июнь көнө, унынсы класс өсөн аҙаҡҡы имтиханды тапшырғандан һуң, Сәмиғуллин мине ул саҡтағы «Баш-золото» машинаһына ултыртып Баймаҡҡа оҙатты.

Өйҙә ҡалған атай-әсәй минең был эшкә артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәне, сөнки Баймаҡ заводына килешеү менән эшкә ялланған кешенең шәхси хужалығы хөкүмәткә натуралата налог түләүҙән яртылаш азат ителә ине. Бер һыйыр ағына ҡарап торған ишле ғаилә өсөн хөкүмәттең был льготаһы ул заманда ваҡ мәсьәлә булмағандыр, әлбиттә.

Баймаҡ ҡалаһына төндә килеп төштөк.

— Бына ошо заводуправление була, — тип беҙҙе алып килгән шофер ике ҡатлы бер йорт алдына төшөрҙө лә Магнитогорскиҙа тейәгән күмерен бушатыу өсөн завод ҡапҡаһына инеп юғалды.

Беҙ, Йыһаншин Әнүәр менән икәүләп, төнгө урамда һерәйеп тороп ҡалдыҡ. Унда-бында электр уты балҡытып ҡысҡырған машиналар тауышы, руда тейәгән вагонеткаларҙың завод эсенә бер-бер артлы инеп юғалыуы, һауаға ҡара төтөн баганаһы сығарып торған бейек завод торбаһы, өҙлөкһөҙ пар бөркөп, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла йөрөп торған паровоздың әсе төнгө тауышы беҙҙе, бер ни күрмәгән ауыл малайҙарын, нык ғәжәпкә ҡалдырҙы, төнгө Баймаҡты бер ҙур ҡала итеп күҙ алдына баҫтырҙы. Уның яртыһы саман барактарҙан, кәҫтән эшләнгән землянкаларҙан тороуын беҙ иртәнсәк, көн яҡтырғас ҡына күрҙек.

Төҙөлөп бөтмәгән бер йорт иҙәнендә, юнысҡылар араһында төн сыҡтыҡ та иртә менән баяғы конторағa йүнәлдек.

Беҙҙе заводтың электр станцияһын торф менән тәьмин итеп тороусы предприятиеһына эшкә тәғәйенләнеләр. Ат менән йөрөтөлә торған торф вагондарына тейәлеп, күк Ирәндек буйынан Түбә руднигы яғына һалынған тимер юлдан, ике тау араһындағы үҙән аша торфтың 1-се участкаһына йүнәлдек. Ағастан эшләнгән күтәрмәле, өҫтө тәгәрмәс ҡоршауы шикелле тимер менән ҡапланған юл беҙҙе Талҡаҫ күле яғына алып китте. Ауылдан 70—80 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Баймаҡ беҙгә, ситкә сығып өйрәнмәгән малайҙарға, ер ҡырыйы һымаҡ тойолдо. Торф саҙы борҡотоп, арыҡ аттар артынан йүгергән вагонетка юлы беҙҙең киләсәкке боролмалы-боролмалы ауыр һәм ҡатмар-

лы тормош юлыбыҙҙың тәүге аҙымы ғына икәнен беҙ ул саҡтарҙа, күрәһең, аңлап еткермәгәнбеҙ.

Был көн һуғыштан алдағы иң һуңғы тыныс йәкшәмбе ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, төрлө тарафтарҙан килгән кешеләрҙең күпләп йыйылыуы сәбәплелер инде, торф контораһында эш ҡайнай. Кадрҙар бүлегендә беҙҙе торфтың 2-се участкаһына тәғәйенләнеләр, хеҙмәт кенәгәһе тултырып, һәр торф ҡырҡыусыға берәр пар бахил (һаҙлыҡта аяҡҡа һыу үтмәһен өсөн тегелгән оҙон ҡуңыслы махсус ойоҡ), берәр пар сабата һәм торф ҡырҡыу өсөн һабының осона арҡыры тотҡа беркетелгән үткер кәрәк тараттылар. Яурындарға һалынған көрәк башына бахил, сабаталарҙы элеп, беҙ эш урынына, 2-се участкаға, йәйәү атланыҡ. Был инде асылда төрлө яҡтан килгән алты йөҙ кешегә яҡын, нигеҙҙә, гел генә йәштәр йәшәй торған ҙур ғына поселок булып сыҡты. Беҙҙе изәнендә тимер койкалар теҙелгән йәйге баракка урынлаштырҙылар. Таратып биргән матрацтарға, яҫтыҡ кәпрәндәренә һаҙлыҡта күпереп үҫкән бесән тултырҙыҡ та йоҡларға яттыҡ. Администрацияның матрац өҫтөнә простыня, өҫкә ябыныу өсөн одеял менән тәьмин итергә тейешлеген беҙ ул заманда белмәй ҙә инек.

Бер яғы клуб, ә инде икенсе төкәтмәһе мунса ролен башҡарған ағас йорт мөйөшөнә эленгән рельстың сыңлау тауышы беҙҙе иртәнге сәғәт биштә йоҡонан уятты.

Эҫе һыуға ҡушып, тоҡсайыбыҙҙа ҡалған сөсө икмәкте кимерҙек тә, ғүмеребеҙҙә күрмәгән сабаталарҙы кейеп, торф һаҙлығына эшкә төшөп киттек.

Яңы ғына килгән бер төркөм йәштәрҙе йыйып, башына ҡояшҡа янып көңгөртләнеп бөткән фуражка, ә өҫтөнә зәңгәр буҫтау гимнастеркаһын ҡайыш менән һыға быуып алған, өҫ-башы менән дә ғәрәп кешеләренә оҡшап торған муйыл күҙле, күркәм, сөм-ҡара булып ҡояшҡа янған Дашкин Әбделхаҡ тигән ағай, йылмайған һайын ынйы кеүекештәрен күрһәтеп, беҙҙе торф ҡырҡырға өйрәтеп алды.

— Ҡырҡылған торф кирбесенең стандарты түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: оҙонлоғо — 22, бейеклеге һәм арҡырыһы 12-шәр сантиметр булырға тейеш. Ҡырҡҡан торф кирбесегеҙ ошоларҙан кәм булһа, смена аҙағында эшегеҙ ҡабул ителмәйәсәк. Аңлашыламы?

Ләкин, көрәктәренә таянып, уны ҡулсаға уратып торған кешеләрҙән бер кем дә яуап бирмәне. Аранан кемдер, күрәһең, донъя күргәнерәк кешелер инде: «Иптәш десятник, беҙҙе һеҙҙең көндәлек нормағыҙ ҡыҙыҡһындыра», — тип һораны.

— Көнөнә һеҙҙең эш нормағыҙ — 3600 кирбес, — тигән һүҙҙе ишеткәс, халыҡ бер аҙ ҡуҙғышып алды.

— Ул ҡалай була инде?

— Һәр береһенең буйын-иңен үлсәүгә һалып, ул тиклем кирбесте нисек ҡырҡмаҡ кәрәк? — тип шаулашты йыйылған халыҡ.

Десятниктың күҙ ҡырыйы менән генә ымлауы булды, уның эргәһендә торған киң яурынлы, ҡырлас танаулы тәбәнәк кенә һары кеше, торф забойы эргәһенә килде лә, устарына төкөрөп, торф ҡырҡырға кереште. Башта көрәген батырып, аяғы менән баҫа-баҫа забой буйлап тәрән һыҙыҡ һыҙып сыҡты. Шунан һуң ике ҡулы менән көрәктең арҡыры тотҡаһынан тотоп, өҫтөн бүлкәт-бүлкәт иґеп кирбестәргә бүлде. Ә һуңынан инде забойҙың башынан башлап тип-тигеҙ итеп бүленгән кирбестәрҙе аҫтан киҫеп, эйелеп алға атлаған һайын уңға ырғытырға тотондо. Бер һелтәгәндә биш-алты кирбестең уң яҡҡа осоп ҡала барыуын күреп, аранан берәү:

— Эй, был торф ҡырҡыуы бер пүстәк икән дә! — тип ебәргән булды.

Көләс күҙҙәрен уйнатты ла десятник, йоҡа көрән ирендәрен йырып, әҙәпле генә йылмайҙы. Забой аҙағына барып сығып, һуңғы кирбесте ырғытҡас, теге кеше турайҙы ла ҡулының һырты менән алһыуланған бите буйлап аҡҡан тирен һөртөп алды.

Бер нисә минут эсендә уның артынан хасил булған кирбес өйөмө ҡарап торған кешеләрҙә был эшкә дәрт өҫтәне. Баяғы тәләкәс кеше тағы десятникка мөрәжәғәт итте:

— Был абзый сменаһына күпме кирбес ҡырҡа инде?

Дашкин ап-аҡ тигеҙ тештәрен күрһәтеп көлөмһөрәне лә:

— Ул көнөнә 10—11 мең кирбес ҡырҡа, — тип яуап бирҙе.

— Үәт әй, машина һымаҡ эшләй икән, — тиештеләр.

Ул ошо предприятиеның иң алдынғы торф ҡырҡыусыһы, күренекле стахановсыһы Таһир Рамазанов булып сыҡты. Кис эштән ҡайтҡас, беҙ ул кешенең фамилияһын контора алдына ҡуйылған ҡыҙыл таҡтала кабинаһына кеше ултыртып осоп барған самолет эсендә күрҙек. Яңынан биш йыл үтеүгә ул торф ҡырҡыу оҫтаһы минең ҡайным булып китерен ул саҡта башыма ла килтермәй инем.

Үтә еңел күренгән торф эше ғәйрәтле, эшкә күнеккән кешеләр ҡулында ғына ап-анһат икәнлегенә беҙ, һәр беребеҙ забой алып, берәмләп үҙебеҙ ҡырҡа башлағас ҡына төшөндөк. Асылда, лырҡылдап, эсенә һыу һеңеп ятҡан

торф кирбесенең һәр берене ғәҙәттәге кирбестән бер ҙә еңел түгел икән.

Икенсе көнөнә тәҡәт бирмәй ауыртҡан билде саҡ яҙып эшләп йөрөгән мәлдә минең янға Әбделхаҡ ағай килде лә, икегә бөкләгән ҡуйын дәфтәрен сығарып:

— Ҡустым, һинең фамилияң Өмөтбаев бит әле, кисә заданиеңды 25 процентҡа үтәгәнһең, — тине лә папирос тоҡандырҙы. Минең биттә оялыу һыҙаттары, күңел төшөнкөлөгө күреп, ул мине дәртләндерергә ашыҡты.

— Ничауа, ҡустым, башта шулайыраҡ була инде. Берәй аҙнанан кеше күнегеп китә ул. Күршеләрең һиңә лә еткерә алмағандар әле, — тип тынысландырҙы десятник.

Бер нисә көн үтеүгә, шәйләә эшкә өйрәнә башланыҡ.

21 июндә, шәмбе көнөнә, вербовка менән килгән күптәрҙең фамилияһы ташбаҡа аҫтынан юйылғайны инде.

Икенсе көнгә, эшселәрҙең ялы булыуға ҡарамаҫтан, төшкө аштан һуң мунса мөйөшөнә эленгән рельс тимере, йәндәрҙе һулҡылдатып илаған шикелле, сыңларға тотондо. Йөҙләгән кеше бер нисә минут эсендә йыйылып та өлгөрҙө. Ярым хәрби кейемдәге, оҙон буйлы, ҡарағусҡыл йөҙлө бер кеше ҡулындағы планшеттан ҡағыҙ һурып сығарҙы ла уртаға атланы.

— Иптәштәр! Бөгөн иртәнге сәғәт дүрттә фашистик Германия СССР-ға һуғыш башланы һәм илдең Көнбайыш сигенә бәреп инде, — тине.

Ҡапыл бөтә кешенең борсоулы йөрәгенән «уһ» тигән берҙәм ауаз ишетелеп ҡалғандай булды. Бөтә йыйылған халыҡтың яңы ғына алсаҡ сырайына һөрөмлө, моңһоу сырай ятты. Ҡыҙ-ҡырҡын илашырға кереште. Ҡайһы бер донъя күргәнерәк ағайҙарҙың күҙҙәре лә ҡояшта ялтырап ҡалды. Ошо минутта һәр кемдең тормошо, киләсәккә бағлаған яҡты өмөтө урталай өҙөлгәндәй булды, һәр кем, үҙ донъяһына бикләнеп, байтаҡ ҡына өнһөҙ-телһеҙ ҡалды. Митингыла сығып һөйләүсе кеше шул уҡ торф эшсене, беҙҙең десятниктың бер туған ағаһы Дашкин Әбделәхәт ағай ине. Уның артынса уҡ бер нисә кеше, шул иҫәптән минең яҡташ, әле һалдат гимнастеркаһын һәм кирза итеген дә һалырға өлгөрмәгән Йыһаншин Әнүәр, уртаға сығып, ҡайнар телмәр тотто. Барыһы ла, алдан һөйләшеп ҡуйған шикелле, фашист илбаҫарҙарын тар-мар итергә, көлөн күккә осорорға әҙер икәндәрен белдерҙе.

Бер нисә көндән 1905—1915 йылдарҙа тыуған торф ҡырҡыусы күп кенә кешеләр, еңелсә генә тоҡсайҙарын ҡултыҡ аҫтарына ҡыҫтырып, хәрби комиссариатҡа, ә күбене ҡабат үҙ тыуған төйәктәренә әйләнеп ҡайтмаҫ өсөн хәтәр юлға сыҡты.

Тиҙҙән 17 йәштән юғары ирҙәр, эш тамамлағас та взводтарға бүленеп, хәрби уйындар өйрәнергә кереште. Көн һайын тигәндәй Совинформбюроның мунса алдында гәзиттә баҫылған ҡурғаштай ауыр хәбәрҙәрен ҡысҡырып уҡыуҙар арҡаһында бәләкәй генә майҙансыҡ тапандыға әйләнде. Ҡыҫҡа, ләкин сикһеҙ ҡайғылы хәбәрҙәр һәр совет кешеһенең йөрәген өйкәне, күңеленә шом һалды, бындай һүҙҙе ишеткән һәр кеше: «Нишләп һуң былай килеп сыҡты, ҡайҙа беҙҙең данлы Ҡыҙыл Армия?» — тип үҙүҙенән ҡат-ҡат тәфтиш алды.

Йәшлек йәшлеген итә инде. Әҙәм иңенә һуғыш ҡайғыһы ниндәй генә ауыр йөк һалмаһын, тормош барыбер үҙенекен итте. Ошо хәлдә лә мөхәббәт утында янған ҡайһы бер йәш йөрәктәр бергә ҡушылыуҙы хуп күрҙе — бер нисә пар өйләнешеп тә өлгөрҙө. Оҙонса йәйге баракты ҡ бер башын бушаттыҡ та, беҙ, йәштәр, сәхнә ҡороп, концерт ҡуйып ташланыҡ. Хорҙа Е. Долматовскийҙың «Мәскәүем минең, минең иҫ ратҡаным» тигән йырын йырланыҡ. Мин Владимир Маяковскийҙың «Совет паспорты тураһында шиғыр»ын һөйләнем. Барак эсен тултырып, шәмдәй ултырған халыҡ алдына сығып, ул шиғырҙы русса һөйләп тороуы ни булғандыр инде? (Йәнәһе, күрһендәр, руссаны нисегерәк һыҙырып һала!)

Бер нисә көндән Темәс башҡорт педагогия училищеһының икенсе курсын тамамлап, торфҡа йәйге каникулға бер төркөм ҡыҙҙар ҡайтты. Шулар араһында атаһы беҙҙе торф ҡырҡырға өйрәткән Таһир ағайҙың ҡыҙы Мөхтәрәмә лә бар ине.

Йәп-йәшел күҙҙәренән нур сәсеп, үрелгән тығыҙ сәс толомдарын көнбағыш табағылай башына уратып ҡуйған аҡ йөҙлө сибәр ҡыҙ киске уйындарҙа килеп күренеү менән ҡырҡма мыйыҡ йәштәрҙең генә түгел, беҙҙән олораҡ ҡайһы бер ағай-эненең дә күңел тыныслығына ҡырау төштө, һәр кем, булған ғына затлы кейемен өҫтөнә кейеп, уның күҙенә йышыраҡ салынырға тырышты, ә ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ егеттәр, барлыҡ ҡына аң-белемен эшкә егеп, мөхәббәт хаты ла бирергә өлгөрҙө. Ни тиклем генә эс янмаһын, беҙҙең ише ярлы-ябағаға, мирға сығарып күрһәтерлек һәм әҙәм хайран ҡалырлыҡ өҫ-баш булмағас, башҡа сара эҙләргә тура килде.

Бер көн киске уйын мәлендә башы ағарып ашала башлаған алаптай ботинкаһы йылтыратып, түңәрәк кенә һипкел битле, төймәләй танауы өҫкәрәк кәксәйеңкерәп торған ниндәйҙер ҡыҙ менән ҡыҙыу әңгәмә алып барған теге сибәр янына килеп ултырҙым. Уның ваҡ ҡына ҡыҙыл сәскә төшкән еңһеҙ ситса күлдәге аша минең ҡабырғаға ниндәй-



Рамазан Өмөтбаев тормош юлдашы Мөхтәрәмә ханым менән

ҙер тылсымлы эҫе бәргән төҫлө тойолдо, мин улар алдында, ҡорғаҡһыған мискәләй, таралып төшкәндәй булдым. Нисек кенә йөрәк өҙгөләнмәһен, тәүге мөхәббәттең сихри утында мин ҡалай ғына дөрләп янһам да, ауыҙҙы сарсатып, тел осонда өҙлөкһөҙ уралған тылсымлы «мин һине һөйәм, бәғерем» һүҙен әйтергә үҙемдә көс тапманым.

Нисек кенә булмаһын, мин ете ҡат ҡарын аҫтына йәшерелгән был сихри һүҙҙе кәрәк йән эйәһенә әйтә алмай, бөтә генә «байлығым» һалынған мендәр кәпрәнен тотоп, догдвор срогы тулғас, ҡара көҙ еткәс, үҙ ауылыма ҡайтып киттем.

Ләкин: «Был төбәккә тағы ла килеп урармын, юғалған мөхәббәтем эҙҙәрен яңынан юллармын әле», — тигән уй миңә һуңынан да оҙаҡ йылдар тынғылыҡ бирмәне...

Һуғыш тамамланды. Тәүге тыныс көҙ ҙә етте. Демобилизация башланды. Мөхтәрәмәнең дүрт йыл буйы миңә яҙған хаттарын «мишауай мишок»ка тултырып, ҡанатлы ҡоштай осоп, яңынан Баймаҡ яҡтарына килеп төштөм. Тәүге туҡтаған урын «Сибайзолото» руднигы булды. 1946 йылдың йәйендә таушалып йылтырай башлаған инглиз буҫтауынан тегелгән кителдән, иңгә һалынған шинелдән ғәйре мөлкәт булмауына ҡарамаҫтан, туй үткәреп ташланыҡ. Хәҙерге мыҫҡалға һалып самалаһаң, ул саҡтағы был етди аҙым үҙе үк ниндәйҙер бер еңел-елпе холоҡҡа оҡшап тора. Йәштәрҙең ятып-торор урыны юҡ, буласаҡ

хужа үҙе кеше өҫтөндә землянкала йәшәп ята, бөгөн ашаһа, иртәгә юҡ хәлендә булыуына ҡарамаҫтан, өйлән, имеш!

Һуғыштан алда эшләп киткән Баймаҡ менән миңә яңынан осрашырға тура килде.

«ВИТЯЗЬ» ҺӘМ ҠОЛА ЮРҒА

1950 йылдар башында: «Ибраһим Ҡаһарманович (И. Ҡ. Уйылданов районда ғына түгел, республика күләмендә лә алдынғы К. Маркс исемендәге колхоз председателе ине) ипподромдан «Витязь» исемле сөм-ҡара Орел юртағы — бер бәхмис айғыр һатып алып ҡайтҡан икән»,— тигән хәбәр бөтә районға йәшен тиҙлеге менән таралды. Билдәле, был яңылыҡ ул саҡта ат йәнле колхоз председателдәренең эсен көтөрләтмәй ҡалманы. Ҙур аҡсалар түләп, ипподромдан юртаҡ айғыр һатып алырлыҡ форсат бер кемдә лә юҡ ине ул замандарҙа.

— Ул алмай, кем алһын, аҡса барыһын да эшләтә инде, — тине ҡайһы бер яҡындары.

— Эй, уға ни, бөтә район хужалары ярҙам итә лә инде, шулар алып биргәндер күп булһа, — тине ҡайһы бер көнсөлөрәктәре.

Күп тә үтмәй, район йыйылышына килгән колхоз, совхоз етәкселәре «Витязь» егелгән кашауай санала, Горький урамынан буран туҙҙырып, бүре толобоноң яғаһын текә күтәреп, һайт-һайтлап үтеп киткән Уйылдановтың үҙен күрәләр. Бындай тамашаны Ибраһим Ҡаһарманович урамда йыйылыш башланырҙан алда тәмәке борҡолдатып өйкөм-өйкөм булып һөйләшеп торған етәкселәр өсөн махсус рәүештә ойоштора. Йәнәһе лә: «Күрһендәр Уйылданов ағаларының кем икәнлеген».

Кемдең башланғысы булғандыр — уны хәҙер аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын: «Һабантуйҙар алдынан юртаҡ аттар сабышы ойоштороло», — тигән иғлан һәр кемдең тәҙрә ҡапҡасын шаҡып үтте.

Аяғына баҫҡан бөтә ғәләм, бала-саға больница ҡаршыһындағы ҡалҡыулыҡҡа был тамашаны күрергә ашыҡты. Бына тиҙҙән еңел кырандаҫка егелгән, йәйге ҡояшҡа йылтырап торған ҡара ҡарға төҫлө оҙонтороҡ «Витязь» да күренде.

Уның өҫтөндә нағышлап эшләнгән суҡлы ышлыя, ә һырлы дуға аҫтындағы еҙ ҡыңғырау ҡайыш менән бәйләп нығытылған. Йәнәһе лә, ҡыңғырау сыңлатыу өсөн әле мөҙҙәте етмәгән. Кырандаста күсер бер үҙе генә булыуға ҡара-

маҫтан, Ибраһим Ҡаһарман улы бөтә районға үҙенең йөрөклөгө менән мәғлүм Ермак тигән ҡара-күк атында һыбай килә. Уның йылғыр ҡуңыр күҙҙәре, бөтә яҡты байҡап, нур сәсә, эске тулҡынланыу тулы алһыу йөҙөнә сыҡҡан, «Атыңды тот, тот, тим бит», — тип ул үҙ әмерен бирә-бирә янлап бара. Быныҡ менән ул «Витязь»дың егелгән тәртәләренән һурылып сыға яҙып барыуын мәхшәр булып йыйылған халыҡҡа тағы бер тапҡыр аңлатырға тырыша, йәнәһе лә, уның юртағы баш бирмәй.

Ат ярыштарының данын һәм намыҫ эше икәнен һөйләп тороуҙың бер кемгә лә хәжәте юҡ. Бигерәк тә өс йыл атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итеп ҡайтҡан Ибраһим ағай өсөн был ваҡиға үлем менән йәшәүгә тиң.

Замандаштарының, моғайын, әле лә хәтерендәлер, әгәр берәй кеше ул егеп килгән аттарҙы уҙып китергә батырсылыҡ итһә, Ибраһим Ҡаһарманович ундай әҙәмде атыуты менән юҡ итергә лә тартынмаҫ ине. Уның намыҫ тойғоһо бигерәк тә көслө булды. Эштә лә, ярышта ла, донъя көтөүҙә лә унан бер кем дә алға сығырға тейеш түгел. Был уның йәшәү ҡануны һаналды. Хәҙерге ҡайһы бер бошонмаҫ, ғәмһеҙ әҙәмдәрҙе күреп, Ибраһим ағай, бәлки, хаҡ та булғандыр, тип уйлап ҡуяһың.

Былар артынан «Комсомол» колхозының (хәҙерге Ленин исемендәге колхоз) күрепһеҙ кырандасҡа егелгән йомро ғына, тәбәнәк тилбер аяҡлы, сысҡан һыртлы мисәүле ике ҡола аты бара. Уның төпкә егелгәне, аяҡтарын йыбырлатып баҫып килгәне, колхоз идараһы рәйесе Әхмәтов Хажиҙың аты. Ләкин ул үҙе, атынан алдан уҡ төңөлгән кеше кеүек, бик һерәйеп алға сығып бармай.

Шулай итеп, дүрт-биш кырандасҡа егелгән ат бер-бер артлы I Этҡол юлы буйлап билдәләнгән старт урынына йүнәлде. Улар артынан, еңел машинаға ултырып, райкомдың ул саҡтағы икенсе секретары Яхин Рәхимйән булды буғай, старт урынына барып туҡтаны. Ҡапыл кире боролоп, бер аҙ тигеҙләнгән аттарға уҙ ҡулындағы ҡыҙыл флагты һелтәүе булды, юртаҡтар кем уҙарҙан халыҡ йыйылған яҡҡа юлға сыҡты. Нәҡ быны ошо ваҡытта «Витязь»дың ҡайышынан ысҡындырылған еҙ ҡыңғырауҙың сыңы ишетелде.

Быны тиҙҙән, һауа йыртып, алғы аяҡтарын юғары ташлай-ташлай, егелгән кырандасты уйынсыҡтай осортоп килгән «Витязь»дың үҙе лә күренде. «Давай, давай! Ура!» — тигән көслө ауаз яңғыраны. Юртағын янлап, «һайт та һайт» тип сапҡан, үҙ юртағынан да былайыраҡ ярһыған Ибраһим ағайҙың бөтмөшөн тамам еңеү хисе солғап алғайны. Ләкин «Комсомол» колхозының, уның уң

яғынан йомғаҡтай тәгәрәп, ер бауырлап юрғалаған ике юртағы алда барған «Витязь»ды күҙ асып йомғансы уҙып та китте.

Бындай хәлде көтмәгән Уйылдановтың мейеһенә ҡапыл ни менәндер сүкегәндәй итте, уның күҙ алдары томаланды, үҙенең атын үтеп барған мисәүле ҡола юрға уға шарҙай тәгәрләп барған йәшен булып күренде. Бер нисә секундҡа ул үҙен сапҡан аты менән ҡуша текә ҡабаҡтан осоп төшөп киткәндәй хис итте. Ләкин ул, ҡапыл ғына аңына килеп, юрға юлына арҡыры төшөргә самаланы, әммә уларҙы ҡыуып етерлек түгел ине. Ахырҙа, бер ни ҙә ҡыла алмай, тамам көсһеҙләнгән Ибраһим ағай, ғәрлегенән атылып сыҡҡан күҙ йәштәрен йота-йота:

— Ғәбит ағай, был һинең нишләүең? — тип ҡысҡырҙы.

Ләкин уның ялбарыу тауышын сәскә гөлләмәһенә күмелгән Әселе туғайынан башҡа бер кем дә ишетмәне. Аптырауҙың сигенә сыҡҡан, оло юлға төшөп алған юрға артынан сапҡан Ибраһим ағай, илау ҡатыш: «Ғәбит ағай, үлтерәһең бит», — тип ялбарҙы.

Әммә кырандаста уң ҡабырғаһынараҡ ятып, башына таушалып бөткән кәләпүшен ҡырын кейеп, дүрт аяғы ергә теймәй осоп барған ҡола юрғаға дәрт биргәндәй, тамаҡ төбө менән «һай» ҙа «һай» тип һөрән һалып барған, «күп идаралар»ҙы (колхоз рәйестәрен) йөрөткән Ғәбит ағай үлем менән йәшәү араһында йәне өҙгөләнгән Ибраһим ҡустыһының был ялбарыуына ла ҡолаҡ һалманы. Тик йыйын урынына килеп етмәҫтән, бөтә ғәләм алдында Уйылдановтың һүнмәҫ абруйын тояҡтары аҫтына һалып тапаған «Витязь»ды ташлап, кеше күҙенә күренмәҫ өсөн, бөтөнләй кире яҡҡа сабып барған яңғыҙ һыбайлының ауыр хәлен аңлағандай, сысҡан тибеү өсөн күк йөҙөн айҡаған ыласын ғына уны байтаҡ оҙатып барҙы. Эйе, ыласын хәлен ыласын белмәй — кем белһен!

ҮӘРӘШ ПОСЕЛОГЫ

Оло йәштәрҙәге бөгөнгө Баймаҡ кешеһенән: «Үәрәш поселогы ҡайҙа?» — тип һораһағыҙ, ул, һис шикһеҙ, Ишмырҙаға бараһы юл буйындағы элекке алтын эҙләүселәр ҡаҙып сыбарлаған тау үңерен күрһәтер. Эйе, был хаҡ. Ҡасандыр был урында Үәрәш руднигының поселогы булған, унда Баймаҡ баҡыр заводында иретеү өсөн заманында руда ла сығарғандар. Руда ташыу өсөн эшләнгән тар колеялы тимер юлдың табансаһы бынан бер нисә тиҫтә

йыл элек ап-асыҡ күренеп ята торғайны. Ул йылдарҙа һирәк-һаяҡ булһа ла шул тимер юл буйлап сәфәр йөрөүселәр ҙә осрай ине.

Әле һүҙ ул турала бармай. Бына хәҙер Баймаҡ ҡалаһында йәшәгән берәй кешегә: «Үәрәш поселогы — ҡала эсендә», — тип әйтһәң, ул ҙур асылған күҙҙәрен һиңә тәгәрәтеп, икеле ҡараш атыр ҙа: «Был әҙәм, ахыры, яңылыша башлаған», — тиеп ҡулын һелтәп, ары китер. Ысынлап та, «Үәрәш поселогы» Баймаҡта икәнлеген мин ошо яҙмала асыҡлап китергә уйлайым.

Илленсе йылдар аҙағында Баймаҡ геология-разведка партияһы ныҡлап үҫә башлағас, райкомға торлаҡ һорап килеүсе эшселәр, инженер-техник хеҙмәткәрҙәр һаны бермә-бер күбәйҙе. Сөнки был мәғдән эҙләүсе ойошмаға Баймаҡ ҡалаһынан тыш сит яҡтан килгән кешеләр ҙә эшкә урынлаша башланы. Ул ваҡыттағы Баймаҡ ҡала Советы председателе Лидия Осиповна Лаврикованы кәңәшмәгә саҡырҙым. Оҙонороҡ туры юртағына ултырып, ул шунда уҡ килеп етте. Хәйер, уның райком ҡоймаһына килеп туҡтауын белеү өсөн тәҙрәнән барып ҡарауҙың хәжәте юҡ, сөнки ул еккән кырандастың тауышы ла, йөрөшә лә үҙенә башҡа, ҡаланың ташлы урамынан ул еккән арба үҙ артынан ут сәсеп килә. Бына ул, ҡулына йомарланған сыбыртҡыһын тотоп, кабинетҡа килеп тә инде. «Сыбыртҡыһы үҙ ҡулында булғас, тимәк, уның күсере Митька юҡ, ул ат менән үҙе генә килгән», — тигән уй килде башҡа. Уның ҡара янған тумалаҡ йөҙөндә һәр саҡ эшлекле ет-дилек. «Бына, килдем», — тигәнде белдергәндәй, ул аяғына кейгән ыҡсым күн итегенең ҡуңысына сыбыртҡыһын шапылдатып һуғып алды. Үтекләнгән ҡара салбарының балаҡтарын ялтыратып майланған итек ҡуңыстарына тыҡҡан, өҫтөнә тулы кәүҙәһенә һылап тегелгән фуфайка, подпольку алдырған сөм-ҡара сәсле башына ҡолаҡтарын артҡа ҡайырып бәйләгән бүрек кейгән Лидия Осиповнаны, әгәр уның ҡара кофтаһын иҫәпкә алмаһаң, Леонид Осипович тип тә уйларға мөмкин. Ул өҫтәл янындағы ултырғысҡа килеп ултырҙы ла, ғәҙәттәгесә, кабинетты байҡап сыҡты.

Уның ғәмгә сумған эске донъя тыныслығын боҙорға теләмәгәндәй, мин, бер һүҙ өндәшмәй, Лидия Осиповнаның алдына фатир һорап яҙылған ғаризалар килтереп һалдым. Ундай үтенестәрҙән көн дә башы ҡаңғырған ҡала хужаһы өҫтә ятҡан ҡағыҙға күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Ну и что же? — тип ҡарашын миңә ташланы. Бүлмәне тынлыҡ баҫты. Ул да, мин дә, бер-беребеҙҙең түҙемлекте һынағандай, өндәшмәйбеҙ. Уның ҡылдай тартылған

сабырлығы тиҙерәк шартланы. Уға ғына хас ҡыйылыҡ, тура һүҙлелек менән ул шунда уҡ һөжүмгә күсте.

— Һеҙ Баймаҡта йылына нисә фатир төҙөлгәнен бик яҡшы беләһегеҙ. Мин үҙ эшемде көн һайын шул мәсьәләнән башлайым. Ул ғына фатирҙы мин инвалидтарға бирәйемме, ауыҙын аса, үпкәһе күренеп торған коммуналь-торлаҡ кешеләрен индерәйемме? Бына һеҙ, район хужаһы, кемгә бойораһығыҙ, шуға бирермен, — тине лә, эш бөткәнгә һанап, рәйес миңә ҡабырғаһы менән боролоп ултырҙы. Уның ҡыҙыу холҡон, сатнатып әйтә торған ғәҙәтен белгәнгә күрә, мин бер ни ҙә өндәшмәнем. Әммә уның эсендә дөрләп ялҡынлы ут яныуы сырайына бәреп сыҡҡайны.

— Нишләйбеҙ, Лидия Осиповна? — тип һораным, тынысланыҡты боҙоп.

— Нишләйбеҙме? — тип ул ҡайтанан һорап, миңә төбәлде. — Бына ул партияның начальнигы миңә ҡараҡанда 4—5 тапҡыр күберәк эш хаҡы ала. Үҙ эшселәренә фатирҙы үҙе төҙөһөн. Былай ҙа фәҡир ҡала Советы бөтә ярлыны үҙ ҡосағында йылыта алмай, — тип Лидия Осиповна урынында ҡуҙғалып ҡуйҙы. — Бына шул, партия начальнигы Владимир Захаровичты үҙ эшселәренә торлаҡ төҙөүгә мәжбүр итергә кәрәк. Башҡа бер ниндәй ҙә сара юҡ.

Сыбыртҡыһын һул ҡулына алып, һырты ҡара янған йомро, бәләкәй генә, ләкин ҡарыулы уң ҡулын һоноп хушлашты ла Лидия Осиповна сығып та юғалды.

Мин нужаларым менән ҙур кабинетта яңғыҙым тороп ҡалдым. Тиҙҙән шул бер үк мәсьәлә менән экспедиция начальнигы Овчаровты саҡырттым. Был начальник ул саҡта яңы ғына утыҙҙы аша атлаған, йәм-йәшел күҙҙәре янып торған, ыҫпай өҫ-башлы теремек кенә егет ине. Ләкин дәһшәтле һуғыш утын үҙ елкәһендә татыған Совет Армияһының элекке офицеры Владимир Захаровичты күкрәгенә бер нисә боевой орден таҡҡан элекке батыр һуғышсы булған, тип күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, сөнки бигерәк тә йәш, оялсан кеше ине ул.

Саҡырыуҙың сәбәбен аңлатып, алдына баяғы ғаризаларҙы һалғас, ул бер аҙ уйланып ултырҙы ла, биш бармағы менән яуап эҙләгәндәй, һары тулҡынлы сәстәрен тарап алды. Төпкәрәк төшкән мөләйем күҙҙәренән йылы ҡараш һирпте лә үҙ хәлдәрен һөйләп китте:

— Беҙгә, Рамаҙан Ғимранович, торлаҡ ҡына түгел, хатта поселок төҙөргә лә рөхсәт итәләр, ләкин уның бер ауыр ғына шарты бар. Уның ҡыйынлығы шундай йәшәп килгән закон буйынса, геология партияларының ҡаланан

ун биш саҡрым ситтә генә үҙ поселоктарын төҙөргә хаҡтары бар. Бына шул, — тине лә тынып ҡалды.

— Ә һинең бынан ун биш саҡрым ситтә төҙөгән поселогыңа, үҙ торған ерен ташлап, кем барһын? Һинең ойошмаңдың яртыһы тигәндәй Баймаҡ кешеләре лә баһа? — тип һораным.

— Ҙйе, бөтә ҡыйынлыҡ та шунда шул, — тигән яуап ишеттем.

Бына ошо һөйләшеү ваҡытында килеп сыҡты ла инде «Үәрәш гюселогы» варианты.

— Ә ҡайһы тирә була һуң ул бынан ун биш саҡрым арала ятҡан урын? — тип һораным Овчаровтан.

— Көнсығышҡа китһәң, ул Фәйзулла, Ғәле ауылдары тирәһе, о инде көньяҡҡа китһәң, Ишмырҙаға етмәҫерәк, элекке Үәрәш руднигы эргәһендәрәк булырға тейеш,— тине әле бер ни ҙә уйламаған Владимир Захарович.

— Давай, мин әйтәм, — поселоктың үҙәге итеп Үәрәште һайлайыҡ. Әйткәндәй, һеҙ унда скважиналар ҙа тишеп ятаһыгыҙ, шикелле, — тинем.

— Шунан?

— Шунан ни шул: бөтә талап ителгән документтарҙы «Үәрәш поселогы» тип төҙөйбөҙ ҙә Баймаҡ аэропортына барған юл сатында геологтар поселогына нигеҙ һалабыҙ,— тинем алһыуыраҡ йөҙөнөң төҫө ҡапыл ағара башлаған Владимир Захаровичҡа.

Ғүмер баҡый партия органдары стенаһында тик изге, мөкәддәс ысынбарлыҡты ғына тыңлап күнеккән Овчаровҡа беренсе секретарь ауыҙынан бындай хилаф һүҙҙе ишетеү кәмендә бер провокация рәүешендәрәк сәйер тойолдо. Уның төҫө ҡасты, ыҡсым ғына эйәге аҫҡа тартылды.

— Ҡуйығыҙ әле, иптәш секретарь, шаярмай ғына һөйләшегеҙ, — тине лә етдилектән ҡапыл ҡымтылған ирененең сите менән генә йылмайырға тырышты.

— Бер ниндәй ҙә шаярыу юҡ бында, юғарыға китә торған ҡағыҙҙарға бүленгән ер участкаһын «Үәрәш посслогы» тип ҡул ҡуябыҙ ҙа йорттарҙы Баймаҡҡа ҡаршы тауҙың үҙәгендә төҙөй башлайбыҙ, — тинем, икеләнергә һис тә урын ҡалдырмайынса.

— Ай-һай, бик хәүефле бит. Аҙаҡтан ҡойроҡҡа баҫып ҡуймаҫтармы? Мин ни тип яуап бирермен ул саҡта? — тип Овчаров һораулы ҡарашын миңә төбәне.

— Бында һинең эш ҡулды козырек аҫтына алып «есть» тип әйтергә генә ҡала. Әгәр инде ҡабыҡ ҡағып, һайыҫҡан осора башлаһалар, тотаһың да: «Мине, райком мәжбүр итте. Мин уның күрһәтмәһенә ҡаршы тора алманым», — тиһең.

— Ярай ҙа ул әгәр һеҙ һәр саҡ ошо урынығыҙҙа ултырһағыҙ йәки, башты ишек яҡтауына ҡыҫа башлап, үҙ һүҙегеҙҙән баш тартмаһағыҙ? — Овчаровтыц икеләнеүе мине тамам сығырҙан сығарҙы, был инде минең нузырый нөктәһенә килеп тейҙе.

— Һин нимә? Мине кемгә хисаплайһың? Бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләп ултырырға мин баҙар һатыусыһы түгел бит. Бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алам. Мин — ҡушыусы, ә һин — үтәүсе, һөйләштекме?

— Һөйләштек. Ғәфү итегеҙ, секретарь иптәш, — Овчаров башын бер яҡҡа ҡырын һалыбыраҡ, нурлы сырайын миңә төбәп: «Риза», — тип ҡулын һуҙҙы.

Уның алдында уҡ был мәсьәлә буйынса район Советы башҡарма комитеты председателе Күсәбаев Һиҙиәт Садиҡ улы менон һөйләшеп килештек. Шул көнө үк ул бөтә кәрәкле документтарға ҡул ҡуйып, ер участкаһы бүлеү тураһында башҡарма комитет ҡарарын Овчаровтың ҡулына тотторҙо.

Бер нисә көн үтеүгә, документтарҙы ҡулына тотоп, геология партияһы начальнигы В. З. Овчаров командировкаға юлланды. «Үәрәш поселогы»н төҙөү тураһындағы юлламаға башта Башҡортостан геология идаралығы ҡултамға һалғандан һуң документтар Мәскәүгә, Геология министерствоһына, китте. Бер аҙҙан район башҡарма комитетына имза ҡуйылған яуап килде.

Шулай итеп, Баймаҡ ситендәге төп-төҙ урам булып тау үренә ҡарай теҙелеп киткән бер тигеҙ өйҙәрҙән торған геологтар поселогын төҙөү башланды. Ул хәҙер Баймаҡ ҡалаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө хисаплана. Мәгәр ул бөтә рәсми документтарҙа, шул иҫәптән финанс-банк ҡағыҙҙарында ла «Үәрәш поселогы» тип тарихҡа инеп китте.

Нигеҙҙә геологтар йәшәгән был урам хәҙер нисек кенә аталмаһын, Баймаҡ ҡалаһы тарихында ул «Үәрәш поселогы» тигән исем ҡалдырҙы. Билдәле, алды-артты уйлап тормай, бындай ҡарар ҡабул итеүгә беҙҙең йәшлек тә ярҙам иткәндер, сөнки йәшлеккә һәр эштә аша һуғыуҙан тыш, тәүәккәллек тә хас, һәр аҙымыңды һанап йөрөү, һәр хәрәкәтеңде бизмәнгә һалып мыҫҡаллау — ҡарттар шөгөлө. Артҡа әйләнеп фараз иткән саҡта, бындай яуаплылыҡты хәҙер, бәлки, үҙ өҫтөңә алмаҫ та инең. Барыһы ла ғәрәсәтле, күкрәүле йәшлек ғәләмәте.

УС-УС АЛТЫН...

Башсовнархоз ойошторолоу менән уның хужалары, республикала урынлашҡан предприятиеларҙа йөрөп, ҡарап

сығыуҙы кәрәк тапты. Баймаҡ — Сибай промышленносы төбәген ҡарап сығыу Совнархоз председателе В. С. Федоровтың иң тәүге планында ине тиһәк тә, хата булмаҫ. Сөнки 1958 йылда Баҡыр заводы ябылғандан һуң, Баймаҡта яңы предприятие асыу буйынса килеп тыуған хәл-әхүәл менән Федоров яҡшы таныш ине. Быға йөҙәрләгән завод эшселәренең кинәт, һис бер сәбәпһеҙ, кемдеңдер аҡылһыҙ бойороғо менән урамда тороп ҡалыуы Башсовнархоз етәкселәрен нык ҡына борсоғанын ҡушһаҡ, республика етәкселәренең үҙ командировкаһын Баймаҡтан башлап китеүе бер ҙә ғәжәп түгел.

Беҙ, уларҙы ҡаршы алыусылар, байтаҡ ҡына йыйылып киттек. Сибайҙан В. В. Любушкин, Ғ. Й. Йәнтилин, И. И. Коркин, В. И. Бобров (улар барыһы ла мәрхүмдәр инде), Баймаҡтан Һ. С. Күсәбаев, А. С. Аносовтар һәм башҡа байтаҡ кешеләр ҡушылды. Улар хәҙерге Баймаҡ элемтә бүлексәһе урынлашҡан тыҡрыҡҡа килеп тулды, сөнки элекке Союз министры В. С. Федоров, үҙе нефтехимик булараҡ, төҫлө металлургия предприятиелары, алтын, баҡыр табыу эше менән бермә-бер ҡыҙыҡһынды.

Таналыҡ бөгөлөшөндә эшләп ултырған гидромониторҙың гөрһөлдәп ауған алтын ҡомон, көслө һыу баҫымы менән буръяҡланған көл төҫлө шыйыҡсаға әйләндереп, төрлө фракциялы иләктәрҙән торған бейек ҡоролмаға ҡыуыуын етәкселәр яр башынан байтаҡ ҡына күҙәтте. Түбә руда идаралығының ул саҡтағы начальнигы М. П. Аносов килгән кешеләргә эшлекле аңлатма биреп торҙо. Ғүмерендә күп кенә ҡатмарлы предприятиеларҙы үҙ күҙе менән күреү генә түгел, уларҙы төҙөүҙә ҡатнашҡан Федоровты Кәкре ауылы менән Баймаҡ араһында элекке инглиз капиталисы Урквартты акционер йәмғиәте, алтынын алып, беҙгә ҡалдырып киткән ташландыҡ ҡомдо берҙән-бер гидромониторҙың йыуып ултырыуы ғәжәпләндермәне шикелле. Шулай ҙа, уның алдына баҫып, урындағы рудник начальнигы М. П. Аносовтың, ҡулдарын болғай-болғай, ҙур энтузиазм менән алтын табыуҙың үҫеү мөмкинлектәрен сағыу биҙәктәр өҫтәп һүрәтләүе уның күңеленә хуш килгәндәй күренде.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, республика етәкселәре, миие эргәләренә саҡырып:

— Беҙгә күрһәтерлек тағы ниндәй предприятиеларығыҙ бар? — тип һораны. Инде сират арттараҡ, күмәк кеше араһында юғалыңҡырап ҡалған А. С. Маныловҡа килеп етте. Мин уны алға этеп сығарҙым. Хужалар алдында мәрәкәләп:

— Баймаҡ ҡалаһының икенсе күренекле промышлен-

ность магнаты Александр Степанович Манылов,— тип таныштырҙым мин уны. Үҙенең, Баймаҡта байтаҡ ҡына эшләп, партия-совет активы араһында ярайһы ғына абруй ҡаҙанып өлгөрөүенә ҡарамаҫтан, ҡаҡса кәүҙәле был инженерға әле утыҙ йәш тә тулмаған ине. Ул, ғәрәптәргә тартым ябыҡ битенә алһыу һыҙаттар йүгертеп:

— Инде, ҡәҙерле ҡунаҡтар, беҙҙең яңы ойошторолоп ятҡай машиналар заводына рәхим итегеҙ, — тип саҡырҙы.

— Ә теге завод торбаһы һинекеме ни?—тип һораны Башсовнархоз председателе, түбә башында, маһайып, күккә күтәрелгән торбаға ҡулы менән ишаралап. Юғары начальниктар алдында тырым-тырағай тарҡалган фекер ебенең осон эҙләп маташҡан йәш инженер тейешле яуап ҡайтарғансы, хужалар алдына Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинатының директоры И. И. Коркин килеп тә баҫты.

— Ул торба минеке, — тине Иван Иванович. Уның тулы битендә кинәнес билдәләре төҫмөрләнгәндәй тойолдо.

— Нисек инде ул? Завод—Баймаҡтыҡы, ә уның территорияһында күккә олғашып торған кирбес торба Сибайҙыҡы? Бик ғәжәп, — тип Виктор Степанович теремек ҡуңыр күҙҙәре менән генә йылмайып алды. Иван Иванович, тигеҙ ерҙә һөрлөккән кеше кеүек, ғәҙәтенсә, тотлоғоңҡорап торба ҡиссаһын аңлатып бирҙе.

Виктор Степанович ҡара ҡаштарын төйнәп, ауыҙ эсенән генә: «Странно, странно», — тине лә был теманы оҙаҡҡа сурытып торманы. Ҡунаҡтар ҡайһы бер цехтары яңыртып ҡороу өсөн һүтелеп ташланған Баймаҡ заводына йүнәлде.

Республика хужалары нигеҙ ташы һалынып ятҡан заводтың бөгөнгө мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһынды. Манылов, түш кеҫәһенән блокнотын сығарып, заводҡа бәйле мәсьәләләрҙе берәм-берәм һанап сыҡты, уның хәл иткес мөһимдәрен айырата әйтте. Манылов һүҙҙәрен председатель референты — ҡалын күҙлек кейгән олпат кеше ашыға-ашыға үҙ ҡуйын дәфтәренә төшөрҙө.

Эштең былай сурытыла башлауына эстәре көтөрләп торған Сибай түрәләренең береһе сәғәтенә ҡарап алды ла:

— Һеҙҙең, хужалар, әҙерәк выжданығыҙ бармы, юҡмы? Ҡунаҡтарҙың тамағы ас икәнен дә онотоп ебәрмәгеҙ— төшкө аш мәле килеп етте бит, — тип иҫкәртте. Уның был мөһим иғланын ике-өс тауыш шунда уҡ эләктереп алды.

Завод ашханаһының махсус бүлмәһендә килгән етәкселәр өсөн бынамын тигән аш мәжлесе ойошторолғайны. Бер аҙ ашап-эсеп, мыйыҡ майлап алғас, ағай-энене тотоп

торған дәрәжәлек баҫҡыстары, әҙәп-тәүфиҡ, баҙнатты ҡоршап торған тотҡарлыҡтар селпәрәмә килде. Барыбыҙҙың да тел асылды. Ҡунаҡтарҙың иң телсән саялары һәр мәжлестә урыны һиммәтле булған анекдоттарға юл асты. Ә ҡайһы бер үҙ тормоздары бер генә тешкә эләгеп тороп ҡалған салтыраҡ ағай-эне Баймаҡ яҡтарының хозурлығы Талҡаҫ күлендә мыжғып торған балыҡты нисек ҡул менән тотоуҙары хаҡында һүҙ башланы. Нисек кенә булмаһын, байтаҡ ҡына ҡунаҡтарҙың кикреге ҡыҙарып өлгөргәйне.

Совнархоз председателенең алтын, баҡыр мәғдәне менән ныҡ ҡыҙыҡһыныуым баштан һиҙенеп алған Аносов хәҙер инде уның эргәһенә ултырып уҡ алды һәм алтын табыуҙың серҙәрен яһап-көйләп һөйләргә кереште. «Тартай теленән таба», — тигәндәй, уның шул алтын хикәйәтенән килеп сыҡты ла инде бәләнең башы. Виктор Степанович эргәһендә ултырған өлкә комитеттың беренсе секретарының ҡолағына ниҙер шыбырланы ла:

— Михаил Петрович, һин баянан бирле миңә алтын тураһында ҡисса һөйләйһең. Бына минең нефть һәм газдан сыҡҡан продукттарҙан башҡа үҙ ғүмеремдә бер ни күргәнем юҡ. Әллә һин шул тере алтын тигән нәмәне беҙгә күрһәтәһеңме? — тип хәбәр һалды, һәр саҡ яуапты бик оҙаҡ эҙләргә яратмаған Аносов бер генә секундҡа ҡаушап ҡалды. Ләкин ул үҙ теҙгененә бушарға ирек бирмәне, шунда уҡ уны йомарлап ҡулына тотоп, ауа башлаған ихтыярын теп-текә ултыртып ҡуйҙы.

— Була ул. Бындай ҡәҙерле һәм оло етәкселәргә алтын түгел, алмаз-яҡутын да күрһәтәбеҙ уның! — тип ебәрҙе һәм, ҡашын өҫкә сөйөп, бер күҙен адресһыҙ ғына ҡыҫты.

Һәүетемсә генә барған мәжлестә шау-шыу ҡупты, «Алтын күрергә барабыҙ. Уны ни тешлек, балдаҡлыҡ таратырға ла булалыр», — тигән ысын ҡатыш мәрәкә тауыштар ишетелде. Күп тә үтмәй, аш мәжлесенә йыйылған бөтә ҡунаҡтарҙы эйәртеп, ашхана ҡырында ғына урынлашҡан идараға Аносов юл башланы. Бер өйөр булып уның кабинетына тулдыҡ. Ни эшләптер, минең ҡараш һарыға буялған яҫы иҙән таҡталары араһында буйынан-буйына һуҙылған киң генә ектәргә төштө. Ни эшләп шулай булғандыр, мин быға бөгөн дә аныҡ ҡына хисап бирә алмайым.

Үҙ урынына үтеп ултырған директор коридорҙа торған ҡораллы вахтерҙы саҡыртты.

— Бер аяғың — бында, икенсеһе — тегендә, хәҙер үк, теләһә ниндәй машинаға ултырып, сейф асҡысы менән кассирҙы алып кил, — тип бойорҙо. Шөрләүенән йәне үксәһенә төшкән вахтер ҡалтыранған бармаҡтарын сикәһенә те-

рәне лә, сылбырлы кобураһын бер ҡулы менән тотоп, коридорға йүгереп сығып китте. Бер аҙҙан ҡурҡыуынан йөҙөнә үлек төҫө кергән кассирҙы килтерҙеләр. Ул сумкаһынан һуҡһаң кеше үлтерерлек тимер асҡыстарҙы директор өҫтәленә һалды.

Директор, урынынан тороп, сейфтың ике ҡатлы суйын ишеген зыңғылдатып асты ла ауыҙы сургучланған, аҡ полотнонан тегелгән алтын һалынған моҡсайҙы үҙ өҫтәленә ултыртты. Хәҙер инде тығыҙ ҡулса булын торған кешеләрҙең күҙҙәре ошо тылсымлы моҡсайға төбәлде. Михаил Петрович, ҡара һауыты өҫтөндә ятҡан ҙур ҡайсыны алып, сургучты ватырға тотондо. Был сәйер тамашаға ғәжәпләнеп ҡатып ҡалған кассир, ҡапыл йығылыуҙан ҡурҡҡан кешеләй, суйын сейфтың ҡырлы мөйөшөнә һөйәлде. Асылған тоҡ ауыҙын ҡайтарып һалды ла рудник начальнигы, үҙ әйләнәһенә күҙ йүгертеп, ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ашҡа саҡырғандай:

— Рәхим итегеҙ, — тип өндәште. Бөтә ҡунаҡтар этешә-төртөшә моҡсайҙағы алтынға ябырылды. Алтын эргәһенә ҡуйылған ултырғыстарға иң хөрмәтле ҡунаҡтар ултырҙы. Күҙҙәрендә иблес шәүләләре уйнаған Аносов өҫтәл шәмен тоҡандырып ебәрҙе. Тоноҡ ҡына электр лампаһында тоҡ эсендә кипсәлеп ятҡан алтын бөртөктәре тәпәш кенә кабинетҡа үҙ нурын һипте. Ҡунаҡтар менән шығырым тулы директор бүлмәһе кинәт яҡтырып китҡәндәй булды.

Моҡсайҙы уратып алған кешеләр, барыһы ла тигәндәй, бөтә ҡырҙарынан нур сатҡылар бөркөп ятҡан алтынға тартылды. Ә эргәһендәрәк ултырған оло хужалар, күп уйлап тормай, тирле ҡулдарын моҡсай эсенә тығып, устарын тултырып алтын сығарҙылар ҙа шәм яҡтыһында йымылдап ятҡан мәгдәнде күҙәтергә тотондолар. Сейфҡа терәлеп торған кассирҙың:

— Ой, батюшки! — тигән күкрәк тауышы ишетелде.

— Шәп-шәп, күҙҙең яуын алып тора бит, хәйерсе, — тине береһе.

— Алтын бит ул, һуғыштыра ла, яраштыра ла, — тине икенсеһе.

Устарына алтын алған хужалар уны кире моҡсайға һаҡһыҙ ғына ырғыттылар ҙа еүеш устарына йәбешеп ҡалған алтын бөртөктәрен, һис бер ни уйлап тормай, ҡулдарын шапылдатып иҙәнгә ҡағып та ҡуйҙылар. Быяла өҫтөнә тамған эре ямғыр бөртөгөләй, буялған иҙәнгә төшкән алтын бөртөктәренең сылтыраған тауышы ишетелгәндәй булды.

Оҙонса бите эзбиз кеүек ағарған директор, башҡаларҙың да алтынға тығылырға ынтылғанын күреп, дошман

амбразураһын ҡаплаған һалдат шикелле, күкрәге менән моҡсай өҫтөнә ятты.

— Не дам, не дам, не смейте, — тигән уның үҙәк өҙгөс тауышы мөгәрәптән сыҡҡан кеүек ишетелде.

Алтын күрергә килгән кешеләр, йүнләп бер ни аңламай, аптырашта ҡалды. Алтын ятҡан өҫтәл янына ҡунаҡтарҙы терһәктәре менән йыра-йыра кассир килеп етте. Ул, директор кеүек, дәүләт байлығын ҡурғау ниәте менән үҙ хужаһы эргәһенә баҫты ла әсе тауыш менән:

— Ишь, уларға алтын кәрәк булған! Һеҙгә анһат! Уны ҡул ҡабартып, кәйлә-көрәк менән эшләп табалар, — тип өгөт-нәсихәт уҡып алды. Ҡапыл аптыраўҙан ҡойолоп төшкән туҡ кәүҙәле түрәләргә артыҡ сөсө һүҙҙәр һайлап маташмаған кассир:

— Марш, марш! — тип уларҙы ҡыуа ла башланы.

Бында йыйылған олпатлы түрәләргә берәм-берәм сығып тайыуҙан башҡа сара ҡалманы. Бейек болдорҙан һөрлөгөшөп төшөп килгән кешеләрҙең кемелер:

— Ҡайҙа бараһығыҙ, директор алмазын күрһәтмәне бит әле, — тип мәрәкәләне.

— Эх, ниндәй татлы тултырылған тауыҡты ташлап, беҙ ҙә йөрөйбөҙ шунда, — тигән кемдеңдер үкенесле тауышы ишетелде.

— Ә башҡа закускалары насар инеме һуң?! — тип, өсөнсөһө лә үҙ хәсрәте менән уртаҡлашты.

Ләкин, нисек кенә ҡыҫтауыбыҙға ҡарамаҫтан, оло ҡунаҡтар завод ашханаһына башҡаса инеп торманы, машиналарына ултырып, оҙон юлға сыҡты.

Был ҡыҙыҡлы ғына ваҡиғанан бер кемдең дә йөрәгендә үпкәләү хисе, күңел кителеү тойғоһо ҡалманы. Киреһенсә, оло ҡунаҡтар менән йылы һәм ихлас хушлаштылар.

Өлкә комитеттың сираттағы бер ултырышына килгән мәлдә Совнархоз председателе В. С. Федоров, тәнәфестә беҙҙең делегация янына килеп:

— Йә, теге алтын ваҡиғаһы ни менән тамамланды? Кассир өҫтөнә алтын сыҡманымы? — тип көлдө. Барыһы өсөн дә уйын-көлкөгә маһир Ғөзәйер Йыһанурович Йәнтилин мәрхүм яуап ҡайтарҙы:

— Юҡ, юҡ, борсолмағыҙ, Виктор Степанович. Алтын имен. Икенсе көнөнә кабинет иҙәнен аҡтарып, рудник конторaһы алдына директор иптәш алтын йыуа торған машерт ултыртты (һүҙ вашгерд хаҡында бара. — *Р. Ө.)*. Иҙән аҫтындағы тупраҡты ҡайтанан йыуып сыҡтылар. Элеккегә ҡарағанда ла күберәк алтын сыҡҡан, тип һөйләнеләр, — тине лә, сырайына етдилек һыҙаттары йүгертеп: «Ҡайғырмағыҙ, Виктор Степанович», — тип өҫтәне.

ЗАВОД ТОРБАҺЫ

1958 йылдар. Йәй мәле — июнь айы булып хәтерҙә уйылып ҡалған. Был саҡ Баймаҡ хеҙмәтсәндәре өсөн бик тә ҡайғылы көндәр ине, тип әйтһәк тә бер ниндәй ҙә хата булмаҫ. Төҫлө металлургия министрлығы, бер кем менән кәңәшләшеп тормайынса, Баймаҡ баҡыр заводын үҙ белдеге менән ябып ҡуйҙы. Уның урынына бер ниндәй ҙә предприятие тәҡдим ителмәү бигерәк тә күңелдәрҙе ҡырҙы. Быуын-быуын ошо заводта эшләп, төрлө һәнәргә эйә булған кешеләрҙең сит яҡтарға күпләп китеп ятҡан сағы. Предприятие ябылғас, шуға өмөт менән ҡарап торған кешеләрҙе алып ҡалыу өсөн бер ниндәй сара юҡ. Хатта завод директоры, бер нисә йыл ғына алда килеп, Баймаҡ еренә ерегеп өлгөрмәгән Манылов та, китеү мәсьәләһен ҡат-ҡат күтәреп, райкомды тапай.

Баймаҡта яңы предприятие төҙөү хаҡында төрлө варианттар бар. Ләкин төҫлө металлургия предприятиеларына запас частар сығарыу өсөн машиналар заводы төҙөү ул саҡта хәл ителеп өлгөргәйне.

Бына шул көндәрҙә ҡалҡып сыҡты ла инде ул торба мәсьәләһе. Берҙән-бер көн Баймаҡта Башсовнархоз председателенең химия, нефтехимия, металлургия буйынса урынбаҫары Иван Феофанович Лозбенде ҡаршы алдыҡ. Уны ҡаршы алырға Сибай, Баймаҡ хужалары барыһы ла тигәндәй йыйылғайны. Баҡыр-көкөрт комбинатының директоры үҙ предприятиеһының хәл ителәһе мәсьәләләрен Совнархоздан килеүсе вәкил алдында теҙгән мәлдә бына ошо элекке Баймаҡ заводының бөтә яҡтан асыҡ түбә өҫтөндәге етемһерәп күренеп торған бейек кирбес торбаһын килтереп сығарҙы. Баҡыр заводы ябылғас та, уның яңы ойоштороп ятҡан предприятиеға артыҡ кәрәге булмаҡанлыҡтандыр инде, был яңғыҙ торбаны баҡыр-көкөрт комбинаты балансына тапшырҙылар. Завод ашханаһының махсус бүлмәһендә комбинат директоры ошо торбаны шартлатып емертеү мәсьәләһен күтәрҙе. Тешһеҙ ауыҙы менән ниндәйҙер аҙыҡ-әүҡәт көйшәп ултырған Иван Феофанович сал керә башлаған биш-алты бөртөк өлпәйгән ҡаштарын төйнәне лә, ҡалын аҫҡы иренеп ҡыймылдатып:

— Ә сәбәбе? — тип һорап ҡуйҙы.

Комбинат директоры бармаҡтарын бөгә-бөгә һанап китте.

Беренсенән, мин буштан-бушҡа уның аммортизация хаҡын түләп киләм, икенсенән, уның юғары өлөшө иҫкереп,

емерелә башлауы мөмкин. Ә был инде кеше, мал өсөн бик хәүефле.

Директорҙың был төплө иҫбатлауы ҡарамаҡҡа дөрөҫ тә кеүек тойолдо беҙгә. Беҙ, был әңгәмәлә иң йәш кешеләр — мин һәм А. С. Манылов, был нигеҙләү менән ризалашҡан һымаҡ та булғайныҡ.

Таҡырая башлаған итләс башын ҡырын һалып, мөйөштәрәк папирос һурып ултырған Иван Феофанович, еүеш күҙҙәрен ныҡыраҡ асып, миңә йылы ҡараш һипте лә:

— Ә урындағы власть ни уйлай? — тип өндәште.

Хәҙер инде мин бармаҡтарымды бөгөргә тотондом.

— Беренсенән, ул элекке Баймаҡ баҡыр заводының символы. Нисә тиҫтә йылдар төтөн бөркөп, ул торба Баймаҡ эшселәренә йәшәү рухы биреп торҙо. Икенсенән, алыҫтарҙан күренеп торған был торба, Баймаҡҡа осоп килеүсе самолеттарға ел йүнәлешен күрһәтеп, маяҡ ролен башҡара. Ул ҡышҡы бурандар осоронда яңғыҙ-ярым юлда аҙашҡан кешеләр өсөн дә алыҫтан юл күрһәтеп тора, — тинем мин.

Минең яуапты ишеткәс, Иван Феофанович йәтешләп ултырҙы ла, тулы битенә етдилек һыҙаттары йүгертеп:

— Нимә, һиңә ул торба тыныс йоҡларға бирмәйме ни? Ошо район территорияһындағы бөтә байлыҡҡа урындағы Совет власы хужа, әйтерһең дә, яңынан утыҙ йылдан йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу бөтә тармаҡтарға үтеп инәсәген алдан белеп-күреп торған, әгәр шуны эшләмәһәк, беҙ киләсәктә бөләсәкбеҙ, — тине. Бер аҙ йоҡоға талған кешеләй күҙҙәрен йомоп ултырғандан һуң ул ауыҙ эсенән генә: «созидание — разрушение» тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлап алды ла, ул саҡтағы марксизм-ленинизм философик концепцияларынан сығып, ошо «төҙөү һәм төҙөгәнде емереү» темаһына ярты сәғәткә яҡын оҙон трактат уҡый башланы. Беҙ уның һөйләгәндәрен ауыҙ асып тыңлап ултырҙыҡ. Завод торбаһын емереү тигән мәсьәләне барыбыҙ ҙа онотторҡ. Уны башҡаса күтәреүсе булманы. Үкенескә ҡаршы, ул әңгәмәлә ҡатнашҡан кешеләрҙән хәҙер А. С. Манылов менән минән башҡа бер кем дә юҡ инде, ҡалғандары донъя ҡуйҙы.

Уның, химия фәндәре кандидаты булыуынан тыш, ҡасандыр Киев университетының философия факультетын тамамлап, философия фәндәре кандидатлығын да яҡлауын беҙ һуңынан ғына белдек. Беҙ ҙә инде байтаҡ йәшкә еттек, күп кенә ил ағалары менән ултырҙаш булырға тура килде. Ләкин Иван Феофанович ише тәрән, киң белемле ғалимды, төплө фекер йөрөткән ҙур хужалыҡ етәксеһен

осратҡан булманы. Ә уның өҫ-башына, үтекләнмәгән костюмына, противогаздың гофрированный көпшәһе кеүек салбарына, аҫылынып төшкән ҡорһағына ҡараһаң, уның хәҙерге һыра барының мөдире итеп күҙ алдына килтерергә мөмкин ине. Эйе, алтынды ниндәй генә алама сепрәккә ураһаң да, алтын булып ҡала, теләһә ниндәй затлы сепрәк тә ялтырап торған баҡырҙы алтын итә алмай.

* * *

Баймаҡ заводының торбаһы ошо йөкмәткеле кисәнең тере шаһиты кеүек Баймаҡ кешеләрен ҡыуандырып байтаҡ ҡына күккә олғашып торҙо.

Совнархоздар бөтөрөлөп, Иван Феофанович яңынан СССР химия промышленносы министрының урынбаҫары булып Мәскәүгә эшкә күскәс, тарихи торбаның да көнө бөттө... Уны емерҙеләр, әммә уны һаман күңел юҡһына, Баймаҡҡа ниҙер етмәгәндәй тойола...

БАЙМАҠТЫҢ ҮҘӘГЕ ҠАЙҘА!

Илленсе йылдарҙың урталары булһа кәрәк. Мәктәптәрҙә әле уҡыуҙар башланмауы бөгөнгөләй хәтерҙә. Көҙгө салт сыуаҡ көндәр башланды. «Әбей сыуағы» мәле ине шикелле. Мәскәүҙән төҫлө металлургия министрлығының кадрҙар баш идараһынан: «Баймаҡ тау-металлургия техникумына директор итеп Скворцов тәғәйенләнә. Уға йәшәү өсөн тормош шарттары тыуҙырығыҙ, бер нисә көндән урында булыр. Самусенко», — тигәи телеграмма Баймаҡҡа килеп төштө.

Телеграммала күрһәтелеүенсә, бер аҙ ваҡыт үткәс, Баймаҡ райкомына өҫтөнә һоро костюм кейгән, һул яҡ лацканына Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены таҡҡан, маңлай сәстәре һирәгәйә башлаған ҡуңыр битле, ҡыр танаулы бер ыҫпай кеше килеп инде. Уны, Мәскәү кешеһен, бик ихлас ҡаршы алдыҡ. Ата-бабаларҙан ҡалған ғөрөф-ғәҙәт буйынса алыҫтан килгән ҡунаҡҡа яҡты сырай күрһәтергә тырыштыҡ.

Күрешеп, маңлай тирен һөрткәндән һуң, ул үҙ мандатын һәм телеграмма күсермәһен сығарҙы. Райком алдында үҙе эшләргә килгән техникум буйынса бер ниндәй ҙә һорау йәки тәҡдим ҡуйып торманы.

Уны уҡытыусылар коллективы алдында күрһәтеү өсөн барасағыбыҙҙы әйтеп, йылы хушлаштыҡ. Ләкин кабинетҡа аяҡ баҫҡанда ла, хушлашып сыгып киткәндә лә уның ҡуңыр күркәм йөҙөндә ниндәйҙер һөрөм шәүләһе ятыуын һиҙемләүе, уның күңелен ниҙер өйкәүен төҫмөрләүе ҡыйын түгел ине. «Яңы ғына эшкә тәғәйенләнгән кешенең сырайын нишләп ҡара болот ҡаплаған, ул ни менән риза түгел?» — тигән һорау беҙҙең күңелгә лә шөбһә һалды.

Был йомаҡтың йәбешкеһен беҙ һуңынан ғына белдек.

Төҫлө металлургия министрлығында уға, Мәскәүҙә тыуып, шунда юғары белем алған кешегә, Баймаҡты тәҡдим иткәндәр һәм уның бараһы ҡалаһын үлтереп маҡтағандар. «Ул Башҡортостанда иң күркәм, ҙур ҡалаларҙың береһе. Уның тирә-йүне ҡая таш, шыр урман, хиләүәт болондар һәм сылтырап аҡҡан шишмәләрҙән ғибәрәт, балыҡлы ҙур йылға буйында урынлашҡан. Бигерәк тә уның заводын хуплап телгә алғандар. Бына бит, бәләкәй генә ҡала булһа, уны бөтә донъя карталарына төшөрәләрме ни?» — тип тә өҫтәгәндәр.

Әйтер:ә кәрәк, уны был эшкә өгөтләүселәр үҙҙәре лә Баймаҡты үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа күрмәгән иптәштәр булған. Скворцов та бындай ҙур, матур ҡалала эшләп ятҡан техникумға ризалыҡ бирмәйенсә булдыра алмаған.

Ул Баймаҡ ситенә яҡынлашҡас та, уны бер урам булып теҙелеп киткән землянкалар, саман йорттар ҡаршы алған. «Ничауа, был ҡаланың сите генә бит, һәр ҙур ҡаланың «нахаловка»һы, «шанхай»ы була инде ул», — тип Скворцов АТК конторaһы эргәһендә машинанан төшөп ҡалған да ҡаланың үҙәген эҙләргә киткән. Ул, ике сумаҙанын ҡулына тотҡан килеш, көс-хәл менән баҙар ҡалҡыулығында ослайып өҫкә күтәрелгән пожар каланчаһына килеп сыҡҡан. Бер аҙ тороп хәл алғандан һуң, ул Баймаҡтыц үҙәге ҡайҙалығын һорау ниәте менән эргәһенән үтеп барыусы бер әбейҙе туҡтатҡан.

— Ғәфү итегеҙ, әбекәй, һеҙ миңә Баймаҡтың үҙәге ҡайҙа икәнлеген әйтә алмаҫһығыҙмы? — тип һораған.

Теге ҡарсыҡ аптыраштан ике ҡулын йәйгән дә, битенә етдилек билдәләре йүгертеп:

— Әй, улым, улым, һеҙ Баймаҡтың нәҡ үҙәгендә тораһығыҙ, — тип калушлы үксәһе менән аяҡ баҫҡан ерҙе тызып алған да ары киткән.

Был тапҡыр яуаптан ҡойолоп төшкән техникумдың буласаҡ директорына, сумаҙандарын күтәреп, үҙе эшләйһе урынға йәйәү атлауҙан башҡа сара ҡалмаған.

Бына ни өсөн тәүге күрешеүҙә уның кәйефе насар, сырайы һөрөмлө булған икән. Баймаҡҡа күнегеп, бер аҙ эште яйға һалып алғас, Скворцов иптәш был ҡиссаны көлә-көлә үҙе һөйләне. Бер нисә йыл бик уңышлы эшләгәндән һуң уны баш кадрҙар идаралығы икенсе урынға, юғарыраҡ эшкә күсерҙе.

Й Ө К М Ә Т К Е Һ Е

I б ү л е к

И л яҙмышы — ер яҙмышы

Башҡорт аты. (Экономист яҙмалары) 3
Сиҙәмдең тәүге яҙы.....25
Рух һүнмәһә, ил үлмәҫ, уянырға мөҫҫәт етте 65
Ауыҙлыҡлау 85
Туған телгә ни өсөн иғтибар кәмей?..... 98
Халыҡ байрамдары, һабантуй.....102
Ер — халыҡ хазинаһы.....108
Ете ҡат үлсә.....110
Берәү ота. Икенсеһе?.....111

110

II б ү л е к

Атаҡлы шәхестәр
Осрашыуҙар — юғалтыуҙар

Хәҙрәт эҫҫәренән.....114
Мәңге хәтерҙә.....132
Фәнебеҙ ҡаһарманы.....154
Тәүгеләрҙең беренсе 160
Жәлил аға Кейекбаев хаҡында иҫтә ҡалғандарҙан 164
Шиғри йәнле кеше ине.....174
Башҡорт шиғриәтенең көҙгөһө.....182
Моңо ҡалды халыҡ күңелендә.....186
Дуҫым хаҡында.....199
Баймаҡ шахтеры.....208
Комиссар.....215

III б ү л е к

Баймаҡ сәхифәләре

Авторҙан 220
Заводта -- эштә.....221
«Витязь» һәм ҡола юрға.....229
Үәрәш поселогы.....231
Ус-ус алтын.....235
Завод торбаһы.....241
Баймаҡтың үҙәге ҡайҙа?.....243

Художественно-публицистическое издание

УМЕТБАЕВ Рамазан Гимранович

ВСТРЕЧИ И РАССТАВАНИЯ

(на башкирском языке)

Мөхәррирҙәре *Фирүзә Камалова,*
Сәүиә Сәйетбатталова
Рәссамы *Ринат Закиров*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Гөлсирә Янғужина*
Корректорҙары *Әлфиә Кәримова,*
Венера Сафина

И Б № 5486

Йыйырға бирелде 24.07.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.01 97. Ҡағыҙ форматы 84 х 108 1/32. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 13,02. Шартлы буяу отт. 13,39. Иҫәп-баҫма таб. 14,65. Тиражы 4000 дана. Заказ № 286. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Өмөтбаев Рамазан Ғимран улы башҡорт әҙәбиәтенә һуңғы тиҫтә йыл ғына элгәре килгән яҙыусы-публицист. Шулай ҙа ул әҙәби ижадта актив эшләүселәрҙең береһе, ошо осорҙа төрлө жанрҙа алты китап сығарырға өлгөрҙө. Ул — милли рух, башҡорт телен тергеҙеү һәм халыҡ хазинаһы — ер мәсьәләләре хаҡында байтаҡ фәнни-иҡтисади мәҡәләләр яҙған автор. Бынан тыш, яңы роман, повесть, айырым китап булып сығырға өлгөрмәгән хикәйәләр йыйынтығы нәшриәт портфелендә ята.

Рамазан Ғимран улы — орден, миҙалдар кавалеры, республиканың танылған ижтимағи-сәйәси эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты. Ул — Рәсәй халыҡ мәғарифы отличнигы һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Башҡорт АССР-ының рәттән алты саҡырылыш Юғары Советы депутаты булды.